# Ағиҙел

Өфө,
июль
2011

7(1059)

ӘҘӘБИ-НӘФИС ҺӘМ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ЖУРНАЛ
ЛИТЕРАТУРНО-ХУДОЖЕСТВЕННЫЙ
И ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКИЙ ЖУРНАЛ

Ойоштороусылары:

Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте,
Башҡортостан Яҙыусылар берлеге,
Редакция коллективы.

Учредители:

Правительство Республики Башкортостан,
Союз писателей Республики Башкортостан,
Коллектив редакции.

1923 йылдың март айынан башлап сыға.
Башҡорт телендә айына бер тапҡыр баҫыла.
Издается с марта 1923 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.

АҒИҘЕЛ ● АГИДЕЛЬ

***Баш мөхәррир***

Әмир ӘМИНЕВ

***Мөхәрририәт:***

Мөхәмәт БАҒЫШАЕВ,
Рауил БИКБАЕВ,
Наил ҒӘЙЕТБАЕВ,
Ҡамилә ДӘҮЛӘТОВА
Рәмил ЙӘНБӘК *(баш мөхәррир урынбаҫары)*,
Марат КӘРИМОВ,
Фәнил КҮЗБӘКОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Ноғман МУСИН,
Артур СУРИН,
Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
Рәшит ШӘКҮР,
Сабир ШӘРИПОВ *(бүлек мөхәррире)*,
Азамат ЮЛДАШБАЕВ.

***Редакция хеҙмәткәрҙәре:***

Гөлназ Ҡотоева *(яуаплы сәркәтип)*,
Мәхмүт Хужин *(бүлек мөхәррире)*,
Ләйсән Мараҡанова *(өлкән мөхәррир)*,
Харис Сәғитов (баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары),
Гүзәлиә Тутаева, Рүзилә Саптарова *(корректорҙар)*,
Рәйсә Ҡамалетдинова, Ләйсән Ишембәтова *(компьютерҙа йыйыусылар)*,
Роза Шәйнурова *(компьютерҙа нәшергә әҙерләүсе)*,
Рима Нәзифуллина, Зөлфиә Биктимерова *(бухгалтерҙар)*.

Журнал Элемтә, мәғлүмәт технологиялары һәм масса коммуникациялары өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттә 2009 йылдың 14 августа теркәлде.
Таныҡлыҡ ПИ № ФС-37206.

Журнал редакцияла компьютерҙа йыйылды һәм биттәргә һалынды.
Баҫырға ҡул ҡуйылды 01.07. 2011. Офсет ҡағыҙы. Форматы 70x100 1/16.
“Times” гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 15,6. Иҫәп нәш. табаҡ 18,1.
Тиражы 3 263 экз. Һатыуҙа хаҡы ирекле. Заказ № 2.0122.11

**Беҙҙең адрес:** 450001, Башҡортостан Республикаһы,
Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2, 4-се ҡат.
«Ағиҙел» журналы редакцияһы.
**Наш адрес:** 450001, Республика Башкортостан,
г.Уфа, проспект Октября, 2, 4-й этаж.
Наш адрес в Интернете: Agideljurn@mail.ru.
http://agidel.pressarb.ru.

Баҫма Матбуғат һәм киң мәғлүмәт коммуникациялары буйынса федераль агентлыҡтың финанс ярҙамында сығарылды.
Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агенства по печати и массовым коммуникациям.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
(450001, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2).
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
(450001, г.Уфа, пр.Октября, 2).

Банкыла беҙҙең реквизиттар: журнал «Агидель» ИНН 0274014887
р/с 40602810200830000004, к/с 30101810600000000770
филиал ОАО «Урало-Сибирский» банк г.Уфы, БИК 048073770

**©«Ағиҙел», 2011 (7,1059)**

# БЫЛ ҺАНДА:

СӘСМӘ ӘҪӘРҘӘР

**Сабир Шәрипов.** Гонаһлы шарлама. П о в е с т ь . ............................5
**Ноғман Мусин.** Хәтер шаңдауы. Э с с е . Аҙағы. ..............................51
**Мәүлит Ямалетдин.** Буян. Н о в е л л а . .......................................101
**Әлнисә Алдырханова.** Батырлыҡ тәңкәһе. Н о в е л л а . ..............108
**Гөлдәр Әхмәҙишина.** Яңғыҙ ҡайын. Х и к ә й ә . ...........................111

ШИҒРИӘТ

**Таңһылыу Ҡарамышева.** Таш өй. П о э м а . .................................115
**Лилиә Сәғиҙуллина.** Ынтылыш. Ш и ғ ы р ҙ а р . ...........................124
**Хисмәт Юлдашев.** Төпкөлдә. Ш и ғ ы р ҙ а р . ................................129

ӘҘӘБИ ТӘНҠИТ

**Дамир Шәрәфетдинов.** Уйландырырлыҡ әҫәр.
*(Әхмәр Үтәбайҙың “Тыштағы зыярат” романы хаҡында)* .....136
**Сәриә Рамазанова.** Яҙмышы – шиғырҙарында.
*(Рәмил Ҡол-Дәүләт ижады)* ..........................................................141

ПУБЛИЦИСТИКА

**Мәхмүт Хужин.** Климат ниңә көйһеҙләнә? ..................................145

*2011 – Башҡортостанда милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылы*

**Миҙхәт Саҙрыев.** Дини әҙәплелек – тотороҡлолоҡ нигеҙе. ..........160
**Тәлғәт Шаһманов.** Ҡалала башҡорт булыу еңелме? ....................165

ДИН ҺӘМ ФӘН

**Имам Ғариф хажи Ғабдрахманов.** Дин эшмәкәре
һәм мәғрифәтсе. ............................................................................173

ЯҘМЫШТАН ҺЫҘМЫШ ЮҠ

**Зәкиә Фәтҡолисламова.** Һағынам “кулактар” төйәген... ............179

ДУҪЛЫҠ КҮПЕРҘӘРЕ

**Сергөл Вурал.** Китәһең? Ш и ғ ы р ҙ а р . .........................................184

“АҒИҘЕЛ”ГӘ ХАТТАР КИЛӘ

ӘҘӘБИ-МӘҘӘНИ МӨХИТ

# В НАШЕМ НОМЕРЕ:

ПРОЗА

**С. Шарипов.** На грешном перекате. *Повесть.*
**Н. Мусин.** Эхо памяти. *Эссе. Окончание.*
**Маулит Ямалетдин.** Буян. *Новелла.*
**А. Алдырханова.** Монета героизма. *Новелла.*
**Г. Ахмадишина.** Одинокая береза. *Рассказ.*

ПОЭЗИЯ

**Т. Карамышева.** Каменный дом. *Поэма.* **Л. Сагидуллина, Х. Юлдашев.** *Стихи.*

ЛИТЕРАТУРНАЯ КРИТИКА

**Д. Шарафутдинов.** А ведь стоило задуматься *(о романе Ахмера Утябая)*.
**С. Рамазанова**. Его судьба – в его стихах *(о творчестве Рамиля Кул-Давлета)*.

ПУБЛИЦИСТИКА

**М. Хужин.** Климат меняется...

*2011 – год укрепления межнационального согласия*

**М. Садриев.** Религиозная нравственность – основа надежности.
**Т. Шагманов.** Легко ли быть башкиром в городе?

РЕЛИГИЯ И НАУКА

**Г. Абдрахманов.** Неутомимый деятель и просветитель.

ЭТО – СУДЬБА

**З. Фаткулисламова.** Помним землю «кулаков».

МОСТЫ ДРУЖБЫ

**Сергуль Вурал.** Уходишь? *Стихи.*

ПИСЬМА В “АГИДЕЛЬ”

ЛИТЕРАТУРА, КУЛЬТУРА

---

**Телефондар:**
Баш мөхәррир – 277-76-88 (факс)
Баш мөхәррир урынбаҫары һәм яуаплы сәркәтип – 274-89-65
Баш мөхәррирҙең хужалыҡ эштәре һәм подписка буйынса урынбаҫары –292-77-60 (факс)
Шиғриәт һәм сәнғәт, тәнҡит, публицистика бүлектәре –277-87-73
Проза бүлеге – 277-87-50
Бухгалтерия – 277-78-90 (факс)

● Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин.
● Редакцияға килгән ҡулъяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай.
● Журналда сыҡҡан яҙмаларҙы күсереп баҫҡанда «Ағиҙел»дән алынғанлығын күрһәтеү мотлаҡ.
● Нәшриәт ғәйебе менән киткән етешһеҙлектәр өсөн редакция яуап бирмәй. Улар хаҡында 223-76-62 телефоны менән хәбәр итергә кәрәк.



**Сабир**
**ШӘРИПОВ**

# ГОНАҺЛЫ ШАРЛАМА

**ПОВЕСТЬ**

*Гонаһ онотолмаҫ, изгелек ерҙә ятып ҡалмаҫ.*

**Халыҡ әйтеме.**

## I

Дауыт Салауатовҡа Өфө мэрияһының Почет грамотаһы тапшырылды. Таман, хәләл: ни генә тимә, утыҙ йылдан ашыу бер цехтан китешмәй эшләп йөрөй. Өлкән оператор булып башлағайны, әллә ни үрләмәһә лә, смена мастеры хәҙер. Һөнәре ул тиклем үк ҡатмарлы, абруйлы түгел дә кеүек, әммә яуаплы, өҫтәүенә, уяулыҡ, теүәллек кәрәк: тотош производствоны һалҡын йә эҫе һыу менән тәьмин итәләр. Әйтәгүр, мир алдында исем-шәрифкәйҙәрең һырланған ялтыр ҡағыҙ алыу күңелле хәл инде ул. Шуға күрә Сәмәрәһе үҙенең дә, иренең дә иң яҡын дуҫ-иштәрен сәйгә-мәйгә саҡырырға тәҡдим яһаған, Дауыт быға һөйөндө генә. Ғәҙәтенсә, хәләлбикәһе иҫкәртергә онотманы: «Ҡара уны, ауыҙыңды сөйгә элһәң генә!» – Йәғни, үҙең эсмәһәң генә, тимәксе.

Матур ғына үткән мәжлестең иртәгәһе ялға тура килде. Ял тигәс тә, вахта графигына ярашлы түгел, ә календарь буйынса, йәғни йәкшәмбегә. Сәмәрә тағы йомартланды: «…Һыуытҡыста ҡунаҡтан артҡан бешкән шешлек бар… Һин йөкмәнеп баҡсаға ыңғайлай тор, ә мин өйҙө йыйыштырғас барам. Күршеләрҙе әҙмәҙ һыйларбыҙ, тим».

Күрше хаҡы – Тәңре хаҡы… Был һынамыш күп фатирлы ҡала йортона ҡарағанда, йәйге торлаҡтары бүрәнә, таҡта йә брустан һалынған коллектив баҡсала әһәмиәтлерәк кеүек. Турғай осоп үтмәле тимер селтәр аша уңдан күрше Вадим Федоровичҡа, ана, гелән үк булмаһа ла, йомоштары йыш төшә. Йә насос, йә электрика буйынса; алма, йөҙөм үҫтереүҙә лә кәңәштәре бата. Тыҡрыҡ аша күршеләре – һикһәнде уҙған, үҙенә берләғәттә – Танып һөйләшендә аралашҡан

---

*Сабир Шәрипов (1948) — прозаик, тиҫтәгә яҡын китап авторы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

көмрөрәк әбекәй. Өлкән йәше өсөн генә лә хөрмәткә лайыҡ. Ул, күршеләре әйтмешләй, «бабулька Балхиза» иртә яҙҙан ҡара көҙгәсә баҡсанан ҡайтышмай, оҙон көн бөксәндәп, бил яҙмай ҡыбырлап йөрөй. Етмәһә, бына тигән түләүһеҙ ҡарауылсы, йәғни ара-тирәгә күҙ ҡолаҡ.

Бер аҙ томра һүрелгәс, мунса күләгәһендә табын ҡоролдо. Саҡырылған ҡунаҡ әрһеҙ булмайҙыр: күр, Вадим Федоровичты танырлыҡ түгел. Иртәнән алып кискә тиклем өҫтөнән һалмаған гел еңе төрөүле һорғолт спецовкаһын, шамтыр күлдәген сисеп, душ ҡойонған да, ҡупшы ғына йоҡа күлдәксән килгән. Нәҡ бер аҙ упайған күҙ ҡабаҡтары ише күкшел уныһы. Хәйер, ағарып бөткән ҡаштары ла томанһыу төҫтә бит. Ҡыҙғылт йөҙөнә эҫелә – һалам эшләпәһе, күн кепкаһы иртәле-кисле ифрат килешә. Ул ғынамы, һөйләшкән кеүек, мискә йыуанлығы ҡатыны ла пыфылдап, көмрөрәк арҡаһын яҙырға тырышҡандай атлаған Бәлхизә әбекәй менән мәлендә, арыуҙан кейенешеп, эйәртенешеп килделәр. Йәшерәге – теплицала өлгөргән ҡыярҙарын, олоһо яңы ҡайнатҡан еләкле банка тотҡан…

«Һеҙҙең менән яңылыҡтарҙы уртаҡлашырға теләгәйнек…» – Дауыттың итәғәтле ҡунаҡсылауына Сәмәрәнең ауыҙы йәйелде. Йылмайыр ҙа... Ир генәһе быйыл упсы һиммәтләнде, зерә тоталҡаланды. Һүҙен елгә осормай. Тәмәкесе ине – тәки ташланы. Элегерәк хәмергә лә апаруҡ ине, ике былтырмы, ул зәхмәтен дә, бөтөнләй үк арынмаһа ла, ярайһы кәметте. Өсөнсө йыл ошо баҡсаны оҡшатып, һатып алдылар. Элек әҙ-мәҙ инәлтте Дауыт, нимәгә ул сад-мад, ҡыярҙы ни сыҡ та һатып ал баҙарҙан, ти ине, хәҙер баҡсаға атлығып тора. Йылмайырһың да! Уҙған ялда етәкләшеп мәсеткә барҙылар, әхирәттә ятҡыр ата-әсәләре рухына доға уҡытып, хәйер һалдылар. Кесаҙна көн, ана, рамы алтынһыу ҡағыҙ тоттороп ҡайтарҙылар.

Һиҙә күңеле Дауыт ҡартластың, һиҙә… Еңел һөйәкле, һау-һаҡ та бит – ҡыш алтмышы тула, тимәк, алға, хаҡлы ялға! Производстволарында пенсионерҙарҙың бик һирәген алып ҡалалар, ти бит үҙе лә. Дөрөҫ эшләйҙәр, ниңә йәштәрҙең юлын ҡапларға… Шунан өҫтәп тә ҡуя: йәл, йәштәр эш тип атлығып тормай хәҙер. Уларҙы әҙ-мәҙ ҡыймылдап, аҡсаһы мул ҡыштырлаған урындар ымһындыра шул, ни хәл итәһең.

Аулаҡ мәжлескә ни етә. Ихлас ҡотланылар, уны-быны тылҡынылар. Көр тауышлы, һәр һүҙен ҡабаланмай, асыҡ әйтеүсе Федорычтың хәбәре тыныс, яғымлы кеүек хатта. Шулай, уның хаҡында «лаңҡылдаҡ» тип һөйләнгәне бар Дауыттың. Бейек керелсәһенән ыхмылдағансы тыҡрыҡтағы кешегә кәңәш-төңәш бирә, ҡатынына ҡысҡырып теге-был йомош ҡуша. Урыҫ урыҫ инде: нимәнелер оҡшатмаһа, еңелсә һүгенеп тә ебәргеләй. Мәгәр бик ғәҙел дә уҙаман кеүек, харап ярҙамсыл да, оҫталығы хаҡында әйтеп тә тораһы түгел. Минут та тик тормай, артыҡ ҡорһағын йәтеш кенә кәпәйтеп, эшен-көшөн ашыҡмай ғына теүәлләп тик йөрөй. Ул да график буйынса эшләй, ҡайҙалыр һаҡсымы, вахтермы, буғай. Өс көнгә бер ҡараулы ғына, күркле генә йәшкелт «Нива»һын дача өйөнөң аҫҡы ҡатынан сығара ла елдерә Шаҡша юлына табан, артабан – һулға, Өфөгә. «Колхоз баҙары»на яҡын йәшәй Федорычтар. Салауатовтар ҙа шул тирәлә, автовокзалға яҡын.

Һүҙгә һүҙ ялғап, Ағиҙелдең, Ҡариҙелдең күҙгә күренеп һайығыуын, ҡалҡыуҙағы баҡсаларҙа насостарҙың һыу урынына ҡом һурыуын телгә алдылар.

– Яңыраҡ земляк ҡайтып килгәйне районға. Эҫем тәрән генә, төптән гөрөп аға торғайны. Хәҙер йылғаға баҡһаң, төбө күренгән ятыуҙар күбәйгән, ҡырсындар киңәйгән, тип шылтыратты. Картуф әллә була, әллә юҡ… Мин дә һынағаным бар: күпме һыу һипһәң дә, ямғырҙың файҙаһы күберәк ул картуф-фәләнгә. Бына бөгөн – күләгәлә 29 градус!

Ҡолағы ҡарп итте  Дауыттың. Эҫем буйы, тине түгелме ҡартлас? Теге… теге ауылды беләме икән? Иплэп кенә һораштырғанда, һы-ы… Беләлер… Эҫем Силәбе өлкәһендә генә оҙон аға, республика ерендә оҙаҡ мыҙылмай… Ҡапыл ғына иҫенә ҡырҡ йыл элекке сәфәр – байдаркала турпоход төштө, күҙ алдына онотолған йә тоноҡланған һындар баҫты, кемдәрҙер – исемдәре менән: етен сәсле, кәүҙәгә үҙе елле, үҙе килбәтле инструктор Володя, еҙһыу ҡыҫҡа сәсле, тиктормаҫ, тәтелдәк Колька, ҡарасман яҫы йөҙлө Даян, ә юҡ, Раян Баянович, ҡатын-ҡыҙҙарҙан йәшкелт ҡуңыр күҙле, буйһыу зифа кәүҙәле Нэлли-Наилә, йыуантағы, яҫыраҡ ерән ҡашлыһы Аля-Алевтина, сиғанға оҡшағаны Люба ине, шикелле.

Дауыт, үҙе лә һиҙмәҫтән, башын ҡырынайтып, ҡараштарын Ташкисеү яғына төбәне. Өфө тауындағы «Президент-Отель» комплексы бынан юҫыҡ күренмәй икән дәһә. Урман ышыҡлай, бары яҙлы-көҙлө, ағастар япраҡһыҙ саҡта, арлы-бирле генә шәйләп була, шәт унда ла – баҡса уртаһынан, тәпәш ҡабаҡ тирәһенән генә.

«Һеҙ Иглин районынанмы ни?» – Дауыт ҡәҙимге халәтенә ҡайтып, Федорычтан битараф ҡына һорашһа ла: «Эйе, …овканан. Иҫкеһенән. Тик беҙ унан мин иҫ белгәндә күсеп киттек, Ағиҙел яғынараҡ…» – тигән яуапты ишетеү менән ит ҡабымы бармаҡ  араһынан ашъяулыҡҡа төштө. Тимәк, Яңы …овка ауылы ла барҙыр донъяла. Раҫ… Ә был тиклеме табын хужаһына мәғлүм түгел ине. Ул һәләт кенә эйелеп ит киҫәген семтеп алды ла сәбәпһеҙгә тороп китте, юл ыңғайында ризыҡты һыулы мискәгә сайҡағандан һуң, тимер селтәр ашаһындағы сирәмгә ырғытты. Уңдан күршеләре баҡсаһына һирәк килә быйыл. Ҡалдауға әйләнгән түтәлендә баянан бирле ике бесәй ялҡау ғына уйнаҡлай ине, әле берәүһе уғата эҫенән ҡасып, һырғанаҡ сатырына уҡ менеп боҫҡан, ә юҡ, боҫмаған, йәтешләп кенә һуйҙайып ятҡан. Быны күреп, Сәмәрә менән Людмила көлөшөп алды, көлөү түгел, һирәк-мирәк кенә йылмайған Федорычтың да төҫһөҙ ҡалын ирендәре яҙылды, ә ҡартайған көнөндә Танып буйынан оло ҡыҙы Өфөгә күсереп алған Бәлхизә әбекәй ябыҡ йоҙроғон маңлайына терәп, урыҫса һупалап ҡуйҙы: «Нишауа не вижу. Кошки што ли?»

– Мышки, – тине Федорыч. Быға тағы көлөштөләр.

Танып лөғәтендә сутырлығын сыҡҡан әбейгә кемдеңдер әллә йомошҡа килгәне, әллә хәйер  килтергәне шәйләнгәс, оҙаҡҡа һуҙылмаған мәжлестән тәүҙә ҡарсыҡтар ҡайтышты. Дауыт иһә Федорычты ҡапҡаһына хәтлем оҙата сыҡты.

– Тимәк, Вадим Федорыч, һеҙ …овкала тыуғанһығыҙ?

– Эйе. Армиянан аҙаҡ Черниковкала төпләндем. Ғүмер буйы бер участкала эшләнем. Элек «завод», «коллектив» тип ғорурлана инек, хәҙер …акционерҙар йәмғиәте, уныһы ла йә асыҡ, йә ябыҡ. Нимәһе асыҡ, нимәгә ябыҡ – шайтан белһен.

– Ҡайтҡылайһығыҙмы ауылығыҙға?

– Әллә ниҙә бер. Яҡын туғандар ҡалманы унда, дуҫ-иштәр ҙә таралышып бөткән йә теге донъяға киткән. Шулай ҙаһа тормош.

– Шулай… – Эйәк ҡағып торған Дауыт ҡапыл ғына ҡунағының томанһыу ҡарашына төбәлде. Федорычтың тауышы Дауыттыҡынан ҡалынараҡ. Йәшкә олораҡ булғанғамы, әлләсе, өлкәнәйгән һайын тауышҡынаң да үҙгәрә, тиҙәр.

– Федорыч, бер-бер юл төшһә, мине лә алырһың әле тыуған яғыңа, яраймы?

– Ярай, ярай. – Федорычтың тауышынан ғәжәпһенеү ғәләмәте сағылды, аяҙҙа ла, яуында ла сисмәгән, халыҡ телендә «лужковка» тип аталған күн кепкаһын ҡырын һалды. – Ҡатындарҙы алырбыҙ. Ямғыр яуһын да – бәшмәк ишелеп уңа торған. Нимә, туғандарың бармы?

– Юҡ та… – Дауыт баш һелкте. – Таныш урындарҙы бер байҡайһы ине. Мәҫәлән, Шарламаны.

Федорычтың сырайы теремекләнде, зиһене һағышланды.

– Шул тирәлә бойҙай уңа торғайны. Хәҙер ҡарағура баҫҡан, буғай. Ер һөргәндә балаган ҡороп яттыҡ бер йыл. Бәшмәк лыхыр ине, суҡ балан йыйҙыҡ, эре-эре балығын да тоттоҡ. Туҡта, Шарлама …овканан байтаҡ алыҫ таһа?

– Шулайҙыр, – тигән булды Дауыт. – Онотолған…

Мунса инеп ятҡан төнө Дауыттың йоҡоһо ҡаты була торғайны. Был юлы оҙаҡ ҡына тулап ятты, уйҙары Шарлама тирәһендә буталды, урыҡ-һурыҡ ауыл хәтирәләрен иҫләне.

Ярай, барҙы ла, ти, …овкаға. Яр башындағы ситке өйҙө тиҙ табыр. Ә нимә тип әйтер, әгәр иҫән икән, хужаларына? Бынан ҡырҡ йыл элек һеҙгә хаслыҡ ҡылған төн убырҙарының береһе – Дауыт Салауатов шәхсән үҙем инде, тиерме? Атһағыҙ ҙа, киҫһәгеҙ ҙә – разыймын... Юҡ, юҡ, быныһы артыҡ булыр, яҙығына күрә язаның да самаһы булырға тейеш?.. Уның шайым ғына гонаһ өсөн, ҡырҡ йылғы ҡырын аҙымы өсөн һантыйланып йөрөмәйме был, тиерҙәр.

Ниңә юҡҡа башың ҡата әле, Дауыт? Ниндәй яҙыҡ, ниндәй яза, ти, ул? Бәғзеләр, ана, бер-береһенең йәнен ҡыя, икенселәр бер-береһен ҡол итә йә балаларын һатып ебәрә, өсөнсөләр миллиондарҙы сәлдерә, дүртенселәр... – һис кем выждан ғазабы кисермәй. Намыҫтары юҡтар кисермәҫ тә… Ә Дауыттың хәтер һандығына бикләнгән гонаһ юшҡыны ваҡыт-ваҡыт үҙен һиҙҙертә, гүйә, сығар мине, таратып ебәр, тип инәлә, әгәр шуны эшләһәң, күр ҙә тор, күңелең төбөндәге үкенес үҙенән-үҙе ҡул менән һыпырғандай елгә осасаҡ, тимәксе. Гонаһ юшҡыны... Ғибрәтле гонаһ шырауы барыбер ҙә һурып ташлауҙы талап итә. Эйе, барырға, күрергә тейеш …овка тигәндәрен. Был уй-теләк студент сағында уҡ ҡуҙланып яралғайны бит. Йылдар дауамында ул һүрелеп бөтә яҙҙы, әле бары быҫҡып-быҫҡып яңынан терелмәксе.

Әгәр әрләп-ҡарғап сығарһалар өйҙәренән? Хаҡтары бар, бигәйбә. Бәлки, ҡыумаҫтар ҙа, күп һыуҙар аҡҡан… Хәйер, кемдәргә инер бит. Алаһы ла, ҡолаһы бар әҙәм балаһының. Бәлки, рәхмәт әйтерҙәр. Бының өсөн, әлбиттә, ҡырҡ йыл элекке зыянды ипле генә ҡаплау, хужаларҙы һәүетемсә ризалатыу фарыз. Эйе, эйе, иҫән-һау була күрһендәр. Юҡ икән, бәй, балалары бар. Әҙәми заттың гонаһы ла, бурысы ла быуындан быуынға күсеп килә, тип өйрәтәләр ҙә диндә.

Федорович, Федорыч… Бына кем ғәҙел, эскерһеҙ әҙәм! Ауыҙынан ғәйбәт, кемдер, ниҙер хаҡында алдаҡ, властарҙы яманлау ишетмәҫһең. Тауышы лаңҡылдағыраҡ, мәгәр кеше менән ярайһы итәғәтле. Ҡатынына ғына ҡаты иркен өндәшә. Өндәшһә ни, үҙҙәре беләлер әле. Күршеңдә һинең ни ҡыҫылышың? Баҫалҡы, һүҙ ҙә юҡ. Дауыт баҡса һатып алған йәйҙә Бәлхиҙә әбей ураҙа тотто. Ҡыҙыкейәүе, балаларын өләсәһенә ҡалдырып, путевка буйынса Төркиәгә елдергәйнеләрме шул… Федорыч ураҙаның тәртибенә төшөнөптөрмө, һис һорамаһа ла, әбейҙе машинаһына ултыртып, магазинға апарғыланы йә һораған аҙыҡ-түлеген үҙе әпкилгеләне. Сәмәрә лә ауыҙ асырға саҡырған әбейҙе, шунда теге һәләк маҡтап ултырған Федорычты:

– Заводта эшләһә лә, бүтәндәр кеүек тимер-томор, таҡта-маҡта сәлдермәне Вадим күршекәй. Һеҙҙеке, һеҙгә баҡса һатҡан хужағыҙҙы әйтәм, уны-быны эй ташый торғайны. Берәй шөрөп тығып алмаһам кеҫәгә, өйгә ҡайтҡым килмәй, тип йәшермәй бытырлай ине әле үҙе.

Маладис, улай булғас ни, Федорыч матур төштәр күреп, тыныс ҡына йоҡлайҙыр. Ә бына Дауытты йоҡо алмай ыҙалата бөгәсә. Әллә ҡасанғы ваҡиғалар оҙон шарламалай ҡайнашасы зиһенендә. Хәйерлегә генә булһын.

Ҡыҙыҡ, үҙенең машинаһы булһа, аяғы тартмаған …овка тарафтарына юллаңыр инеме Дауыт? Кем белә, әлеге юшҡын күңелен өйкәп ыҙалатһа, барып та

әйләнер ине. Машинаһы юҡ шул, юҡ. Үҙе ғәйепле. Гаражына индермәй, өй алдына ҡуя торғайны. Ғәйеп бер заман «Лада»һы. Бер заман тип, дүрт йыл элек, ошоноң ише томра йәйҙә. Өс егет алып ҡасҡанын күргән, имеш, кемдер… Шунан бирле осоҡ та хәбәр юҡ: ней милициянан, ней уғрыларҙан. Ана бит ниндәй бурҙар була! Улар, моғайын, шайкалары менән рәхәтләнеп кәйеф-сафа ҡороп ултыраларҙыр әле. Әллә яңы машина ҡыуып йөрөүҙәреме. Ә ул, Дауыт, ҡырҡ йылғы юҡ-бар гонаһы менән һаташып аҙаплана. Етте, йоҡла! Бер… Ике… Өс…

Меңәрләп, миллионлап урлаған әҙәмдәрҙең йоҡоһо ҡалайыраҡ икән?

Ҡыҙыҡ, тотонолған «Лада» машинаһына айыу майы һөртөүселәрҙең бәғзеләре ир етеп, ғаилә ҡорғандармы икән? Ҡорһалар, енәйәттәре хаҡында туғандарына йә кәләштәренә сиселделәрме икән? Әлләсе… Ә бит донъяла ирле-ҡатынлыларҙың бер төптән енәйәт юлына баҫҡандары ла бихисап. Нисек бер-береһенең күҙенә ҡарайҙыр мәхлүктәр? Айҙар буйы эшселәренә хеҙмәт хаҡы түләмәгән туймаҫ тамаҡ түрәләр оялмай әҙәм араһына нисек сығаларҙыр – аптыраҡ. Хәйер, асыҡҡандан ҡаныҡҡан яман… Ҡаҙнаны ҡаныҡып имеүселәр кәмемәй. Нәфселе ришүәт алыусылар һуң? Ана, гәзиттәр яҙа, телевидение күрһәтә: нисәмә йөҙ ғаилә, фатир алабыҙ тип, нисәмә йылдар йыйған аҡсаһын һыуға һалған. Йөрөгән була меҫкендәр хәҙер пикет ойоштороп. Оят... Ғәрлек...

Тиҙҙән Дауыт «юл төшһә, алып бар» тигән үтенесен онотто, Федорыч та иҫенә төшөрмәне. Бәлки, ямғыр яумағанғалыр.

Эҫе йәй үтте, оҙайлы әбейҙәр сыуағынан һуң илаҡ көҙ килде. Яуһын әйҙә, исмаһам, ҡорғаҡһыған ер-һыу дымға туйыныр. Ике йыл рәттән эҫе булһа, өсөнсө йылына ысын йот, ҡоролоҡ башлана тип һөйләнә ләһә күпте күргән Бәлхизә әбекәй.

Федорыч та әкәмәт: теге саҡ, Дауыт ...овка, Шарлама менән ҡыҙыҡһынғас, әйҙә, ғәзиз ҡатындарҙы – Людмиланы, Сәмәрәне лә алырбыҙ, бәшмәк йыйырҙар, тине. Алһындар ҙа, ти, хәләлдәрен. Ниңә бында әпкилдең, ниңә яр башындағы иң ситке өйгә индең, кемдәр улар, тип белешһә Сәмәрәһе, ниндәй яуап бирер Дауыт? Хәйләләргә мөмкин, әлбиттә, мөмкин, тик гонаһ өҫтөнә гонаһ ҡына өҫтәләсәк. Иң яҡшыһы – алдан уҡ һөйләп биреү, буласаҡ сәфәрҙең маҡсатын аңлатыу. Ни тиһәң дә, буш ҡул барырға тейеш түгел Дауыт. Кәмендә биш мең аҡса һалып алыр кеҫәһенә. Шулай итмәһә, бәғер итенең ҡай еренәлер һылашҡан юшҡын да юйылмаҫ кеүек.

Йә инде, әүәй, әүәй! Бая ун дүрткә тиклем һанағайны, киттек ары: ун биш… ун алты… ун ете…

Федорычтың уты һүнек, телевизор яҡтыһы ла былҡ-былҡ уйнаҡламай тәҙрәһендә. Йоҡлайҙыр, ғөмүмән, ул йоҡоно һүтә хатта, көндөҙ ҙә серем итә. Унығын шундуҡ һиҙә Дауыт: бер заман тирә-йүн һил булып ҡала, радио-маҙарҙың өнө тығылған, уның ҡарауы, турғайҙар сырҡылдаша, ҡарт сел ҙурлығындағы ярым ҡырағай күгәрсендәр яҡындараҡ, күрше өйҙәрҙең түбәләрендә гөрөлдәшергә керешә. Юғиһә, шаҡ та шоҡ, тыз да быз… Әле таҡта йышһынмы, әле балта сарлаһынмы, әле утын ярһынмы. Ул һыу һиптереүҙәре!

Юҡ, хәжәте юҡ бәшмәгенең! Бисәләрҙең дә хәжәте өс тин бер аҡса… Әллә… Федорычтан башҡа кеше бөткәнме? Китте-барҙы электричка менән. Ҡуй, йөрөрһөң аҙашып-һорашып: «Ҡай тирәлә әле …овка? Шарлама ҡайҙа?» – «Ҡайһы шарлама? Улар бер нисә ләһә беҙҙә…» – «Иң ҙуры, оҙоно, боролошо ярым дуға һымаҡ» – «Шайтан белһен… Ә нимә бар унда?» – «Бер нәмә лә юҡ… Яманһыу иҫтәлек бар. Гонаһ бар. Йәшлектәге ҡыйыш аҙымдарымды һаҡлай ана шул хәйерһеҙ бөгөл».

Ошондай һаташыулы халәттә Дауыттың күҙҙәренә саҡ йоҡо ҡунды.

## II

– Алдағы ялда районға ҡайтып килергә ине. Зыяратҡа һуғылам ыңғайҙан... – Федорыч быны бейек күтәрмәһенән, ғәҙәтенсә, ҡысҡырмай ғына әйтте, ҡарағат төптәрен тырмап йөрөгән Дауыт һүҙ айышын шундуҡ төшөндө һәм икеләнеүһеҙ ризалашты.

– Барабыҙ, Федорыч, барабыҙ. Нәҡ отгулдарым йыйылған… Бензин – минән!

– Килештек. Ошонан ысҡынырбыҙ. Әсәмдең ҡәберенә сәскә тамырҙары илтеп тығам. Һиңә кәрәк …овка, тә-әк, минең ауылдан илле саҡрымдай үрҙәрәк. Туғыҙҙа ҡуҙғалып, ашыҡмай ғына йөрөһәк тә, өлгөрәбеҙ. Яңы …овкала армейский полкташтың хәлен белешәм. Иҫкеһендә һине ҡалдырам да… Бына шундай маршрут!

…Яурындарын киреп, йоҡа күн кепкаһын елкәһенәрәк шылдырып кабинала төҙ ултырған Федорыч рулде ҡарһаланмай, ышаныслы өйрөлтә. «Нива»һын тәрбиәләп кенә тота шул үҙе лә.

«Ниңә бараһың?» – тип һораһа Федорыч, нисек яуаплар Дауыт? Дуҫың да, дошманың да була донъяла. Тимәк, дошманың һинең хаҡта юҡ-бар белеп ҡалмаһын өсөн… дуҫ-иш күргән Федорычҡа ла ул артығын сиселмәҫкә тейештер. Әлбиттә, уға ҡыҙыҡ та булыуы ихтимал: һөйлә, давай, һөйлә, ә-һә-һә (ул бик һирәк һә-һәләп көлгәндәй итә), ана нишләп йөрөгәнһең беҙҙең йәнтөйәктә… Минең ерҙәшҡәрҙәштәрҙе талағанһың, йәберләгәнһең дәһә! Ә мин, алйот, аяғыңа саң ҡундырмай ғына үҙеңде ҡуҡырайтып йәнәш ултыртып сәфәрҙә йөрөтөп ятам…

Һөйләниһә, бәлкем, «лужковка»һын кире түбәһенә шылдырып – абау, Вадим үҙе лә әҙ-мәҙ Лужковты, Мәскәү экс-мэрын сырамыттырып ҡуя – көлөп ебәрмәгәйе... Бушҡа бошонаһың, дуҫҡай, күр, йәмәғәт тормошона ниндәй әшәке һүҙҙәр инде: наркобанда, мафия, коррупция, уйыномания, секс-бизнес. Ә һин... бүстәк! Онот! Выждан ғазабы кисереүең – үҙе тәүбә, үҙе ярлыҡау.

Һорауҙы сәпәне Федорыч. Транспорт тегеләй ҙә былай өҙләкһеҙ ағылған Өфө – Силәбе трассаһына ингәс. Серле сәфәр сәбәбен асыҡларҙан түгел, юлдың айышын аныҡларҙан.

– Ҡайҙа барабыҙ? – Ҡыҙыулана барған машина тиҙлеген кәметте.

– Урман станцияһына. Тәүҙә…

– Туҡта, Урман – алыҫ, теге оста. Һин бит, Азатович, – әле Вадим дөрөҫ әйтте, юғиһә, бәғзе саҡ Азаматович тип тә ебәргеләй, – Шарлама тиһәң, ул бирерәк. Ике …овка ла шул йүнәлештә. Кистән Люся менән бытылдап, хәтерҙе яңырттым: бер сәғәттәй барабыҙ ҙа – гуляй уңға…

Тимәк, бынан илле саҡрым самаһы... Ярай, тиҙерәк әйләнеп ҡайтырҙар. Йәшкелт «Нива» алға шәберәк уҡталды.

– Ҡайҙа, кемгә барабыҙ, тигәйнең әле? – Баранка хужаһы юлдан ҡараштарын алмай ғына белеште.

– Кемгә тип… әйтмәнемсе! – Ыуаланды юлдашы, көсәнеп йылмайҙы. – Ике һүҙ менән генә аңлатып булмаҫ.

– Ә һин бер һүҙ менән генә аңлат. – Федорыч та йылмайҙы, һәләт кенә башын ҡырынайтып Дауытҡа ҡараны ла, ҡалын, тал көсөгөләй аҡһыл ҡаштарын төйнәп, ҡабат асфальт юлға текәлде. – Мин ашығып йөрөргә яратмайым.

– Ярамай ҙа! – Әңгәмә башлар өсөн күршеһен йөпләгән булды Дауыт. – Ҡырҡ йылдар элек, байдаркала ағып төшкәйнек…

– Ҡырҡ...? – Вадим Федорыч телен сартлатты. – Шуны иҫләйһеңме?

– Эйе, сетерекле хәлдәрҙе. Хәҙерге «Президент-Отель» эргәһендә, юҡ, түгел, Милиция мәктәбенә тапҡыр урманлы типһәндә турбаза бар ине совет осоронда. Мәҙәниәт, мәғариф хеҙмәткәрҙәре өсөн. Ун ике көнгә профсоюз путевка бирҙе. Егерме һумлыҡ ҡына инеме... Бараһың – вәссәләм, тип.

– Профсоюз заманы, – тип иркенерәк тын алды Федорыч. – Ә мин ғүмеремдә курорт йә санаторийҙы күрмәнем. Әсәм барҙа отпускыларҙы ауылда үткәрә инем, баҡса алғайным – үҙең беләһең…

– Магнитогорскийға имтихан бирергә барырға инде дәртләнгәйнем, атай бахыр ләж ятты. Фронт яраларынан... Шунан ни, кинйә булғас, бер генә йыл физкультуранан уҡыттым, урта мәктәптә. Разрядлы саңғысы ла инем... – Быныһы бер аҙ маһайыу менән әйтелде. – Командам яҙ пионер слетында еңде, ҡыш үҙем «Урожай» чемпионы булдым. Илле тинлек спорт лотореяһын йөҙ дана тараҡҡайным, шуға шөһрәт күрһәтептер, путевка тотторҙолар. Иллеһенә үҙем түләнем, бер нәмә лә отманым... Килдем, ҡушҡастар ни.

Берме, икеме кис базала ҡундыҡ. Өс ашаталар, концерт-маҙар, кино ҡараталар, тансы-мансы... Әллә ни күңелле түгел, шыҡһыҙ урман инде. Николай тигән йылғыр, аҡмас егет менән дуҫлашып алдым. Йәшерене-батырыны юҡ, ул минән үҙенә ҡуштан яһаны. Ауыл малайымын, әҙ-мәҙ аҡсам да бар – ҡала, база тәртиптәренә өйрәнешем юҡ. Ә Кольканың кермәгән ишеге, белмәгән тишеге юҡ. Ҡайҙалыр һыраханаға, ҡайҙалыр киноға алып барҙы. Яйлап күмәкләнә башланыҡ. Ҡариҙел буйына төтәтеп төшөп һыу индек, ҡомда ҡыҙындыҡ. Ҡыҫҡаһы, Коля бынан алдағы заезда ла ял иткән, шуға ашнаҡсыларҙы ла, физкультура инструкторҙарын да таный. Ике-өс көндән өгөтләй башланы бит: «Байдарочный походҡа яҙылығыҙ. Шәп! Ошонда килеп туҡтайбыҙ!»

Ысынлап та, иртәгәһенә казарма һымағыраҡ оҙонса база алдына теҙҙеләр ҙә, эй, әүрәттеләр, аңлаттылар.

– Кемдәр һаулыҡҡа зарланмай, үҙен романтик һиҙә – байдарка маршрутына рәхим итегеҙ. Бер аҙна ағырға, туристарса йәшәргә... Тәртип боҙмаҫҡа. Инструкторығыҙ – фамилияһы хәтерҙә юҡ, ә исеме тел осомда ғына – Фәләнов Владимир буласаҡ.

Утыҙлап кеше яҙылдыҡ. Поход рюкзактары, одеял бирҙеләр, байдарканың ҡормаһын, йөҙөү ҡағиҙәләрен әҙ-мәҙ өйрәндек.

– Булды элек ундайҙар, лично иптәш Брежнев генсек сағында, – тип ҡеүәтләне Дауытты Федорыч. – Завод профилакторийында апаруҡ күл бар ине, шунда Люся менән байдаркала кататься иттек.

Дауытта ҡапыл килде-киттеле шик ябалды: «Люся менән, тисе. Нисек һыя ла, нисек күтәрә ундай кәүҙәне байдарка? Хәйер, элек буйһыу, нәҙекәй, өҫтәүенә, сибәр ҙә булһа... Бите-ҡашы һөймәлекле генә былай...»

– Электричкала Урман станцияһына барып төштөк – быныһы раҫ. Урман эсендә булғанға станцияны шулай атағандарҙыр, тип уйлағайныҡ. Яңыраҡ белдем: башҡорттарҙы Рус дәүләтенә ҡушырға өндәгән Ҡәнзәфәр бейҙең кинйә улы – Урман атлы сардарҙың ауылымы, йәйләүеме булған, имеш.

– Иван Грозный заманында, тимәк, – тип йәнләнде Вадим Федорыч. – Шулаймы?

– Шулай шул. Дим бассейны, – Дауыт бармаҡ бөгөп барланы. – Павловкаға тиклем – Ҡариҙел туғайҙары, хәҙерге Затон, Алексеевка, Сипайлово, Булгаково тирәләре, Кушнарен да, буғай, – ҡанса биләмәгә мең башҡорттары аҫаба һаналған ул дәүер – Өршәк буйҙары ла, эйе, эйе... Черниковка – Черников, Иглино – Иглин фамилиялы отставной батша әфисәрҙәре алған биләмә, әгәр яңылышмаһам. Журналдамы, гәзиттәме уҡыным.

– Әллә... Әйтә торғайны өләсәйем: Вятка йылғаһы буйынан уҡ йәйәү килдек, аҡса йыйып ер һатып алдыҡ, әллә кем баярҙан, тип... – Федорыч бер юҫыҡ, «великорос»лығын иҫләптерме, дорфараҡ һөйләнде, яйлап ҡына ҡайтымһаҡланды. – Хәйер, баяр тәүҙә үҙенә мул итеп күсемһеҙ милеккә ер алһа, аҙаҡ, шуны һатып, үҙе файҙаһын күрә... Нәҡ хәҙерге олигархтар ише...

Федорыч тоҙло-боросло ғына һүгенергә лә апаруҡ, үҙенекеләр алдында айырыуса тартынмай. 9 май байрамын арлы-бирле билдәләгәндә Дауыт та һүгенеп маташты. Аҡайып ҡараны уға Федорыч, шунан көлгәндәй итте: «Килешмәй, Азатович… Килештермәйһең дә…» Әле уның ҡайғыһы юҡ, ана бит, күршеһе әңгәмәнең айышын ҡыйшайтырға теләмәй, ғәмһеҙ генә:

– Урмандан ҡайҙа һуҡтырҙығыҙ инде? – тип төпсөндө.

– Урмандан күпмелер атланыҡ, һыу ярына тиклем. Унда ни, палаткалар, байдаркалар, аҙыҡ-түлек өйөмө эргәһендә инструктор Володька менән Колька ике беҙрә сәй ҡайнатып көтә ине. Чехолдарҙан бәрсәк-һәрсәк һурып, ҡырсында байдаркаларҙы ҡорҙоҡ, баштарынан, ҡойроғонан күтәреп һыуға төшөрҙөк, ишкәктәрен кәптереп, ултырып ҡараныҡ. Ҡыҫҡаһы, тейәнешеп, бер мужик менән бер мадам парланышып, егет етмәгән ҡатын-ҡыҙ үҙҙәре иптәшләшеп, ундан ашыу экипаж ойошто. Бер сәғәттәй аҡтыҡ та лагерь ҡорҙоҡ. Кем ҡоро-һары ташый, кем дастархан йәтешләй – һәммәһенә лә эш бар. Беҙҙән алдағы заездыҡылар палатка таяҡтарын, шына-фәләндәрен Володя күрһәткән лапы аҫтына йәшереп киткән. Элек ни, пионерский палаткалар ине. Хәҙер генә – раз, два – ҡытай палаткаһы өс секундта әҙер.

– Әлеге баҡсаға участка бүлеп биргәстәр, дүрт урынлыҡ пионерский палаткала ятып, будка әтмәләнем тәүге йәйҙә. Икенсе йәйгә тамам уңды, йоҡарҙы… М-да-а…

– Базала тәүҙә үк Николай тигән теремек егет менән әшнәләшеп алынды. Беҙгә ҡарап, вәт башҡорт менән урыҫ ҡалай дуҫ, – тип һоҡландылар. – Хәҙер...

– Хәҙер дуҫ түгелһегеҙме? – Ниңәлер быныһы дорфараҡ әйтелде һымаҡ.

Юлдашының кәйефенә сәйерһенгән Дауыт, яйы сығыуға һөйөнгәндәй, һүҙ дилбегәһен ипле генә икенсе яҡҡа тартты.

– Бында саң баҫырлыҡ ҡына һибәләгән әллә төндә? Шуның шайымдан ямғырҙар башланһасы!

– Башланыр… Ноябрь уртаһынан яуын вәғәҙәләй прогноз. Тура килә торған… – Федорыч ҡайҙа һуҡтырырға кәрәклеген ҡабат аныҡланы. – Йә, дорогой, айырсаға етәбеҙ. Урманғамы?

– Юҡ, юҡ, …овкаға.

– СПТУ-нан саҡта ер һөрөргә барҙыҡ. Ике ДТ-54 тракторында дүрт курсант бер аҙна эшләнек. Ҡайтыуыма военкоматтан саҡырыу килгәйне. Ләкин медкомиссия үтмәнем. Өфөлә эшләнем. Егерме бишем тулғас ҡына киттем армияға. Дембелдән һуң химзаводҡа урынлаштым. – Федорыч та йәшлек сәхифәләрен ултаҡлашты, ниңәлер көрһөнөп ҡуйҙы, ирекһеҙҙән Дауыт күҙ сите менән генә уға ҡарап алды. Ул-был һиҙелмәйсе. Упайғанырaҡ күҙҙәрен юлға төбәгән дә баранкаһын өйрөлтөүен белә. Ҡыҙыҡ, кемдән ишеткәйне әле, имеш, упайған күҙҙә өмөт аҙ… Бәй, өләсәһенән. Юҡ, юҡ, шөйлә «упайған» тимәне, «сыға күҙҙә өмөт аҙ» тине. «Сыға» – тимәк, сығып торған күҙ. Өләсәһе «өмөт аҙ» тиеүе менән ауылда гелән эсеп, гелән һуғышырға ҡырсынып йөрөгән боҙоҡтарҙы, ялҡауҙарҙы яманланы шәт.

Әйтәгүр, Федорычҡа тура килмәй был һынамыш. Федорыч – ярҙамсыл зат, боҙоҡ әҙәм түгел. Бәлки, бер милләттең һынамышы икенсе милләткә тура килмәйҙер. Этем генә белһен. «Нива» уңға ҡайырылды: күрһәткестә «Яңы …овка. …километр» тип яҙылғайны.

Шыйыҡ урманды уҙғас, баҫыуҙар, сәселгән ағаслыҡтар артта ҡалды, уңлыһуллы сөм-ҡыҙыл миләштәр, уларҙан ары иген киптергес ҡоролмаһы шәйләнде.

Машина, выж-гөж килгән трассанан ҡотолғанға һөйөнгәндәй, ҡырсын юлдан һелкенмәй генә берсә яйлап, берсә талпынған кеүек елдерә. Өнһөҙ барыу ҙа

еләтәлер, Федорыч: «Прогнозды тыңлайыҡ әле», – тигән булып, радиоһын ҡабыҙҙы һәм үҙе яратҡан тулҡынға көйләне. Эфирҙан таныш та, танһыҡ та моң ағыла ине.

*Опять от меня убежала*
*Последняя электричка.*
*И я по шпалам,*
*Опять по шпалам*
*Иду домой по привычке…*

– Беҙ, байдарочниктар, станциянан ошоно йырлап барҙыҡ. Етмешенсе йылдарҙағы бик тә популяр йыр.

Федорычтың да сырайы теремекләнде, тауышы йәнләнде.

– Мулерман бит, Вадим – минең аҙаш! «В хоккей играют настоящие мужчины» тип яңғырап торҙо стадиондар… Э-э, легковушкаларға «Лада» маркаһы ла уның «Ладушка-лада» тип йырлауынан бирелде. Аҙаштың биографияһын әҙ-мәҙ беләм мин!

«Белмәгәнең лутсы… Йәнде көйҙөрөп… Минең «Лада»ны урланылар, ҡулдары ҡороғорҙар», – ошондай үсәүле, көфөр уйҙар тиҙ-тиҙ генә Дауыттың зиһенен ҡуҙғытып уҙҙы. Уңарсы репродуктор ҡыҙыҡ-мыҙыҡ хәбәргә күсте:

– Тибет халҡы күрешкәндә баш кейемен сисеп, уң ҡулына ҡыҫып тора, һул ҡулын ҡолаҡ артына ҡуя ла телен сығара...

– Яңы Гвинеяла Конья ҡәбиләһе вәкилдәре бер-береһен осратһа, эйәктәрен эйәккә терәп ышҡыша. Ә Самоа утрауында кешегә хөрмәт йөҙөнән һин уны еҫкәргә тейешһең… Африкала бер ҡәбилә... төкөрөп...

Ауыл ныҡлап күренгәс, Вадим Федорыч, күңелле тапшырыуҙы шыпа шымайтып, машинаһын сиҙәмгә ҡайырғас, моторын да һүндерҙе.

– Перекур! Ну, дорогой, кем кемде еҫкәргә тейеш? Яңы …овкала служагыма инеп сыҡһаммы, тим. Таныштарҙан белештем: иҫән-һау. Һинең йомошоң, Азатович, арыраҡмы?

– Бая һөйләшкәнсә инде, – Дауыттың яуабында икеле-микеле саҡтылар һиҙемләнде. – Йәйәү тәпәйләрмен.

– Һин нәмә?! Биш-алты саҡрым ғына барҙыр. Көн ҡыҫҡа бит хәҙер. Бергә генә йөрөрбөҙ. – Водитель ыхмылдап ергә баҫты ла арлы-бирле йөрөштөрҙө. Юлдашы кабинанан һонолоп өндәште.

– Былай итәйек, Федорыч: мине арғы ауыл ситенә ҡалдыр ҙа үҙең кире борол, яраймы? – Дауыт кеҫәһенән мобилка сығарҙы. – Берәй сәғәттән шылтыратышырбыҙ ҙа – барып алырһың. Мөмкинме шулай?

– Мөмкин… – Федорыч мөңгөрләп алды. – Йәйәүле походҡа сыҡмағанбыҙ ҙа! Мөмкин служакка ла, һинең дуҫыңа ла икәүләшеп…

– Юҡ, Федорыч, саҡырылмаған ергә морон тыҡмайыҡ.

Төҙ генә өс урамлы төҙөк кенә ауыл уртаһынан арғы осҡа сыҡтылар. «Хәтерҙе тикшерәйем әле, юрый берәүҙән дә юлды һорашмайым», – тип Федорыч ярайһы тапалған юлдан тайпылмай артабан елдерҙе. Кеше йәнле шул үҙе лә. Орсоҡтай ғына ике ҡыҙыҡай менән йәшкә өлкәнерәк күренгән етен сәсле малайҙы ҡыуып еткәс, арҡаларынан мәктәп сумкаларын систереп, «Нива»һына ултыртып алды.

– Ниңә улай иртә ҡайтаһығыҙ? Автобус йөрөтмәйме ни һеҙҙе уҡырға?

– Автобус боҙолған… Уҡытыусыбыҙ ауырый…

– Була ундай хәлдәр, була. Үҙегеҙҙә начальный ҙа мәктәп юҡмы ни?

– Ябылды шул. Өсәү генә йөрөп уҡыйбыҙ бит. – Малай етди яуапланы, ҡыҙыҡай өҫтәмә бирҙе:

– Старший кластарҙа ете кеше уҡый беҙҙән...

* * *

Йоҡа куртка, ҡулына ҡыҙғылт бейсболка тотҡан башҡорт ҡиәфәтле, буйы уртасараҡ уҙаман ҡасандыр аяҙ төндә генә яҙа-йоҙа күргән ауыл уртаһына еткәс, ҡайҙа һуҡтырырға тейешлеген тоҫмалланы. Әлбиттә, яр буйына. Ситке өйҙән башҡа урынға аяғы баҫмаған бит Дауыттың. Ана, япраҡтары һирәкләнгән тирәктәр тирәһенә. Исеменә есеме тура килгән кеүек: Иҫке ...овкала иҫке өйҙәр күберәк, хатта ки ҡаралтыһы аушайған йорттар ҙа күҙгә ташлана.

Тәүҙә мосафир саңдауланған һөҙәк ҡыразға яҡынайып, оло һәм кесе һыу буйҙарын байҡаны. Бәләкәй ҡушылдыҡты анығ тоҫмаллап та булмай, шау әрәмәлек тә таллыҡ. Ә яҡындағы Эҫем ярҙары үтә күренеп тора, ҡайҙа ла тапанты шәйләнә. Йылға тарайған, уғата һайыҡҡан, ағыштары йыуашайған. Ошонан уҙып киттеләр бит көндөҙ. Юҡ, ял ғына алдылар бер аҙ. Ярайһы өҫтәрәк туҡтап, тамаҡ ялғағайнылар, буғай.

«Ике көн аҡмайынса, маршрутта бүтәнсә ярға яҡын сельполы ауыл юҡ, ә ...овкала магазин бар. Кемгә нимә кәрәк – рәхим итегеҙ...» – Тағы низер әйтте Владимир, яр башындағы ауылға эйәк сөйөп. Тәтелдәне шунан әпкәләйе, Николай, эйе: «Аш тәмләргә һуған, теләгәндәргә хәмер-шарап та алырға мөмкин»,– тине. Бындай ымһындырғыс иғланды инструктор бирмәгәндер ҙә, ул, киреһенсә, тыйырға тейеш ине ҡыйыш аҙымдан. Ә бит киттеләр. Команданың яртыһы тиерлек. Ҡара, исемдәре осҡан хәтерҙән. Йыуантыҡ Алевтина алдан төштө, йылмаяҡ Люба ла китте арттарынан, йәнә Наилә эйәрҙе. Уныһы үҙе нәҙек, үҙе һонтор, баскетбол командаһына уҡ булмаһа ла, волейболға ярарлыҡ. Ҡыҙ, үҙенең буйһыулығынан уңайһыҙланғандай, килешле генә бәүелеңкерәп атларға тырыша. Бығаса тыныс ҡына, йомоҡ ҡына йөрөгән Доцент та – Раян Баяновичҡа был ҡушамат тәүҙә хөрмәт йөҙөнән тағылды – рюкзагынан зәңгәр яғалы сөмҡара ҡупшы спорт костюмы кейеп, яңғыҙ-яры, аҙаҡтан юлланды. Китер алдынан ул, командала ирҙәрҙән иң олпат, иң өлкән уҙаман, Дауыттың яурынға аҫмалы транзисторын һорап торҙо. «Сокол» тигән ана шул радиоалғысы институтты бөткәндә генә юғалды, буғай.

«Бөгөн эңерҙә, усаҡ янында – танышыу кисәһе!» – тип тә һөрән һалды түгелме әллә шаталаҡ Коля, әллә аш-һыуға яуаплы Аля. Хәйер, ундай махсус «усаҡ» ҡабыҙылмаһа ла, тәүге кистә үк әҙ-мәҙ таныштылар, бейештеләр ҙә йырлаштылар ҙа. Юғиһә, хәтерләр инеме Дауыт иптәштәренең ике яҡлап тал-өйәңке сатыры ҡаплаған ҡыраздан ауылға табан үрләп барыуҙарын? Әле бынан ситке өйҙәрҙең асыҡ буяулы тәҙрәләрен шәйләргә мөмкин, ә теге саҡ рубероидлы йә шиферлы ҡыйыҡтар саҡ-саҡ төҫмөрләнә ине.

Алтмышын ҡыуған, кәүҙәһе тыңҡышланған яурынтаҡ мосафир – Салауатов Дауыт бейсболкаһын ялтаслана башлаған түбәһенә йәтешләп аҫҡараҡ ыңғайланы. Ошонда, батҡағы таҡыр һымаҡ ярғысланып кипкән уйһыуҙа: «Һин байдаркаларҙы ҡарауыллап ҡал, йөрөмә», – тигәйне ләһә уға инструктор Володя. Ана бит, тәфсилләһәң, ул-был иҫкә төшә. Магазинға китмәгәндәр һыу инде, ҡомда ҡыҙынды. Бер мәл байдаркалар эргәһенән биш метрлы ғына йылым һөйрәп, өсдүрт үҫмер уҙып китте. Яртылаш һыулы биҙрәләрендә ике-өс сабаҡ, әлеге лә баяғы «сыға күҙле» алабуғалар, шырт балыҡтар сыптырҙаша... Ул саҡтарҙа яр буйҙары таҙа ине, полиэтилен тоҡсайҙар, шешәләр туҙышып ятмай ине.

Доценттар ...овкаға йөрөп ҡайтҡас, байдаркаларға ултырышып, яй ғына ҡабат сәфәргә ҡуҙғалдылар. «Бөгөн ялға иртәрәк туҡтайбыҙ ҙа, иртәгә ҡыҙыуыраҡ ағабыҙ», – имеш. Эйе, хәтһеҙ аҡтылар, ишкәк көрәктәренән нурҙар сайралтып, тыныс сыбайҙарҙа уҙышып та алғыланылар.

Йәнә усаҡ ялпылданы, йәнә уйын-көлкө. Магнитофон-маҙар һирәк заман, тәүҙә күмәк һыу инеү, дөйөм аш, аҙаҡ тансы-мансы, йыр тыңлау ойошторҙолар. Берейе һаман иҫтә:

*Где-то на белом свете,*
*Там, где всегда мороз…*

Туҡта, туҡта, гитараһы бар инеме Володяның? Апаруҡ тымбырлата ла ине.

Һандуғастар сутылдай башлағанда ғына таралды һуңғы төркөм. Күмәктәрҙер – хор менән һайраша моңсол ҡоштар. Улар, һандуғастар, теләһә ҡайҙа оя ҡормай – хозур, һил урынды һайлай торған.

Барыбер ҙә ул саҡтағы йәштәр тотанаҡлыраҡ, әҙәплерәк ине. Шаулашып, тәмһеҙләшеп, өймәкләшеп эсмәнеләр. Дауытты яҡташ күреп, үҙ палаткаһына саҡырып алды Доцент… Майшәм яҡтыһында «Московская» тигәнде әҙ-мәҙ йотҡолап, ҡаты перәниккә ҡушып, һуған ҡыяғы, йәш ҡыяр көйшәп, яҡындан танышттылар. Доцент – ысынлап та техник йүнәлештәге ҡайһылыр вузда доцент икән. Юғиһә, Дауыттың унды бөтөп кенә урман-тау ҡуйынындағы аулаҡ ауылда махсус дипломһыҙ көйө физкультуранан, рәсем вә һыҙманан, ауырып-маҙар киткән уҡытыусы урынына тарих йә географиянан һабаҡ биреп йөрөүенә… кәңәш-төңәш йөҙөнән, ағайҙарса нәсихәт һөйләнгәнен оноторлоҡмо ни?!

– Башҡорт йәштәре гуманитар факультеттарға эркелеп тығыла, күбеһе, инә алмай, уҡыуҙан төңөлә, ә техник һөнәргә ынтылыусылар һирәк. Шуға һин, ҡустым, бер нәмәгә ҡарамай, йүнле инженер йә технолог әҙерләй торған институтҡа һынау тот. Быйыл уҡ! – Доцент фильтрһыҙ сигарет көйрәтеп ебәрҙе. – Авиационныйға бар, бәлки, минең дә лекцияларҙы тыңларһың. Ярҙамым тейер, тип вәғәҙә бирмәйем. Башлы тойолаһың, пожалуй, конкурстан үҙең дә үтерһең. Ҡайт та – әҙерлән! Беҙгә инеүе лә, уҡыуы ла – весьма серьезно! Бына мине бер кем арттан этмәне, үҙем… Маҡтанһам да хаҡым бар: минең йәштә диссертация яҡлағандар бармаҡ менән генә һанарлыҡ. Баймаҡланмай (йәнәһе, маҡтанмай) ғына әйтәм: «Зилаирский вундеркинд» тип маҡтай торғайны мине атаҡлы профессор.

Төптән уйлаһаң, «зилаирский» менән әлеге әңгәмә Дауыттың яҙмышына оторо тәьҫир иткән, шәт. Эйе, ул шул уҡ йәйҙә документтарын теүәлләп, Өфөгә килде һәм «нефтяной»ға тапшырҙы. Күрше ауылдан ике туған, өс йәшкә ағай тейеш ҡәрҙәше димләһә лә, «авиационный»ға барырға ҡыйманы. Сөнки… Доцентты осратыуҙан шөрләне, никтер унан уңайһыҙланды. Берәү булһа, таныштыҡ бит турпоходта, үҙең кәңәш бирҙең, абзыҡай, фәлән дә төгән тип ярамһаҡланыр, сөсөләнер ине, тик Дауытмы һуң ундай әпкәләй аҙым яһарға? Оялсан тиһәң – артыҡ оялсан да түгел, хатта алабарманыраҡ та; әһ-һә, моғайын, тәүәккәл түгелдер, хатта ки өркәк заттандыр ул. Әллә намыҫсанмы икән? Бәлки, шулайҙыр, юғиһә, хан заманғы юҡ-бар гонаһы өсөн выждан ғазабы кисермәҫ ине. Бына бөгөн, бына әле…

### III

Яҡты күҙҙә ашап-эсеп, кәйефләнеп алғас, бер төркөм йәштәр ялансыҡта волейбол уйнаны, байдаркалар ағылған ярымутрауҙан аҫтағы сөмәкәйҙә биш-алты егет-елән ярыш ойошторҙо: кем һыу аҫтынан аръяҡҡа күренмәй йөҙөп сыға? Кольканың ғына этлеге булды һымаҡ, сөнки элекке заездың чемпионы, имештер, ул.

Дүртәү баҫты стартҡа, беренсе сират – йәрәбә сыбығын услап үлсәнеләр – һимеҙлегенән бурһыҡ битле Стәрле профсоюзнигына эләкте. Бегемоттай ырғылды йылымыс һыуға. Тулҡын ҡубарып, ажар сумыу менәнме ни, тиҙ үк йә осаһы, йә

иңбашы күренгеләп ҡалды, ҡыҫҡаһы, бүстәк тамаша ине. Ике ҡулын алға һоноп, сүкәйгән еренән ырғыған Николай бер ерен дә күрһәтмәй генә хәтһеҙ оҙаҡ йөҙҙө, тик ярайһы аҫтараҡ бырхылдап өҫкә ырғылды. Ҡырын тейәгәндәр ҡырын йөҙәлер, шәт.

Йөрәкһеберәк, яндырай ташланды ярышҡа Дауыт, мәгәр егерме метрҙай арала һыу төбөн шәйләп, ҡарһаланмай йөҙөргә тырышты. Тик ни ғәләмәт: арғы ярға етмәҫтән һыу буръякланды, хатта ҡом-фәлән кермәһен өсөн күҙҙәрен сылт йоморға мәжбүр булды. Улай ғына түгел, ҡолаҡ өҫтөн ҡумырыҡ сатаһына сыйып уҙҙы, аяҡ-ҡулдары ҡайҙа ишеүен тойғас ҡына, дүртаяҡлап ярға шыуышты. Нисауа, тапҡыр сыҡҡанға оҡшай. Баяғы буръякты «бегемот» ҡуҙғытып киткән, тимәк. Егеттәр ләм-мим, Доцент ҡына, гладиаторҙар алышын күҙәткән Рим императоры ише, уң беләген һуҙған, баш бармағын сөйгән, һул беләген болғапмы-болғай, етмәһә, яр һала: «Молодец, башкир, молодец, егет!»

Призға нимә тотторҙолар һуң? Онотолған… Һә-әй, күмәгенә бухый шешәнән ҡыҙыл шарап һемереп ҡалдылар ҙаһа, ә Дауыт, Доценттың фармандай яңғыраған кәңәшен тотоп, Алевтинаның палаткаһын эҙләп тапты. Санитар сумкаһы унда икән. «Простите, вы дома?» Ләкин палатканан китап тотҡан Нэлли күренде. Эштең ниҙә икәнен аңғармаған ҡыҙ тәүҙә белеште:

– Ни йомош? Аля, бутҡа бешерә, – тигәс, егеттең ҡолаҡ аҫтында ҡан таптарын шәйләп, хафаланып һорашты:

– Һуғышырға ла өлгөрҙөгөҙмө?

– Юҡ та. – Дауыт китергә уҡталды. – Сыйылды… һыу ингәндә.

– Стоп, зараженье булмаһын, – Нэлли, танышыу кисәһендә «Өфөгә яҡын фәлән район гәзитендә корреспондент мин» тип таныштырһа ла, ярым башҡортса, ярым урысса һөйләшкән кеүек. – Эй әле башыңды. Ерунда, но-о…

«Корреспондент» тигәне нисектер шөһрәтле яңғырай ине элгәре – шуға тартыныуын көскә еңеп, егет ҡыҙ артынан эйәрҙе. Усаҡ эргәһенә килделәр, кәнсирле итте ҡарабойҙай бутҡаһына болғап торған Аля, ҡара ҡаҙанды утағастан шылдырып алғас, ҡулын йыуып тороп санитарлығын күрһәтергә кереште. Сәсен айырып, яраһын йод менән көйҙөрткәс, бинт менән башын сырмарға теләгәйне, егетең ҡырталашып ҡотолдо.

– Пожалуйста, не надо!

– Ну ладно, парень, приходи вечером, а ты напомнишь мне, красавица, – тип санитарка палаткалаш әхирәтенә – Наиләгә мут ҡына күҙ ҡыҫты. – До свадьбы заживет, Алла бирса!

Ана шул Аля-Алевтина түгел инеме ни моңсол ғына частушкалар йырлаған ҡатынҡай? «Приходи к воротам – мин бит сине яратам!», «Наша Дема не широка...» Һәр хәлдә, бөҙрәләнеп торған һарысәстең тыумышы Раевка тирәһенән ине, шикелле.

Походта әллә ни ҡыландырмай ғына, һалдатсараҡ туйҙырҙылар тамаҡты. Ҡарабойҙай бутҡаһы, бүктергес «Кильки», «Завтрак туриста» кәнсирҙәре, шәкәрле сәй йә какао, маймы, сырмы яғылған икмәк… Һирәкләп флотса макарон тәтене, уның тәме һаман ауыҙҙан китмәгән кеүек.

* * *

Танауын сирҙы бына әле Дауыт, гүйә, үҙе әллә ни хушһынмаған ҡарабойҙай еҫе аңҡыны. Ни өсөн бында йөрөүен аңларға, аҡларға теләптер, үҙен берсә битәрләне, берсә ҡеүәтләне: «Әйҙә, атла… Теге юлы харап ҡыйыу инең дә…» Ниндәйҙер аумаҡай, баҫынҡы тауышлы иблис тә шыбырлағандай: «Йәш саҡ – йүләр саҡ… Кире боролоп ҡайтһаң да ярай, бушҡа йәнең көймәһен. Ят тупраҡта

юҡты бушҡа ауҙарып, ҡаңғырып йөрөүҙән ни фәтеүә?» Икенсе тауыш фәрештәнекелер, моғайын, уныһы ла әмерен бирә: Исмаһам, өйҙәренә инеп сыҡ, форсаты тейһә, ғәфү үтен. Ярлыҡаһалар, биғәйбә, хәтерендән шиксел шырау һурылыр, йәнең тынысланыр. Төшөндөңмө инде, ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленер, тигән боронғо мәҡәлдең әсе асылына? Беленмәһә лә, белгертер… Тәүбәгә килтерер…»

Ни булһа ла булыр – алға! Дауыт атлы, Салауатов фамилиялы олпат уҙаман, унда-бында ҡаранып, әкрен генә һөҙәк ҡыразға үрләне.

…Бынауҙа, һыуы һайыған сөмәкәйҙең түбәнге ситендәме, өс байдарканан төштөләр. Ике егет ҡарауылда ҡалды. Юҡсы, байдаркаларҙы аҫтараҡ, ауыл күренмәгән, ошоға оҡшашыраҡ боҫонҡо бөгөлдә, ҡалдырҙылар ҙаһа. Эйелә биреп, шымбаҫар атланылар. Ул саҡта яр буйы ҡуйыраҡ сатырлы, ауыл уттары ла тоноҡ, һирәк ине. Эттәре өрҙөмө шул, юҡмы? Әллә арлы-бирле лауылданылар ҙа тындымы – хәтерҙә юҡ. Ярҙағы мал һуҡмағынан һеләүһендәй сос ҡыланып, ошонда яҡынайҙылар. Алдан – Николай, артынса исеме, төҫө-һыны онотолған ҡаҡса егет, унан һуң – Дауыт, артынса – үксәһен типкесләп, бәһлеүән Володя һәптәнләй… Йөрәктәр дөбөлдәп тибә, бер-береһенең тын алғаны ла ишетелгәндәй.

Николай, алдан һөйләшкәнсә, кедыһын сисеп, ялбыр дегәнәк аҫтына тыға һалды ла, ойоҡсан килеш шул уҡ дегәнәк төбөнән метрҙай йәмшек тимер торба алып, яҡындағы кәмәгә йүнәлде. Иң ҙурына. Арыраҡ тағы бер кәмә шәйләнә ине.

Бөтәһе лә һалды кедыларын. Ярай әле, ер дымһыҙ, йылы. Николай шым ғына һыҙғырғайны, эргәһенә эйелә-бөгөлә барҙы – күп тә үтмәҫтән, ы-ых тип көсәнгәне, нимәнеңдер шыңғырҙап ҡуйғаны, йәнә сынйыр сыңғырлағаны ҡолаҡҡа салынды.

…Ирекһеҙҙән бөгөн Дауыттың аяҡтары шунда тартылды. Дөмһәреп ята көҙгө йылғаның төбө, һыуы һалҡын. Битен-ҡулын сайҙы, ҡайырылып йылға үренә баҡты. Теге юлы ҡушылдыҡ тамағы артыҡ беленмәгән икән. Әле асыҡ төҫмөрләнә. Ҡырҡ йыл әүәлге яҙыҡ аҙымдарын иҫләргә маташҡан уҙаман яр башына уҡ күтәрелде.

Мунса эргәһендәрәк кәртә аша берәм-һәрәм бәрәңгелеккә ырғыу… Ситән инеме, һайғау инеме – ҡараңғы аралаш абайланманы. Ыҙан буйлап уң яҡтағы избенкаға – йәйге аласыҡҡа инеү. Николайға Дауыт эйәрҙе. Ул арала ҡаҡса егет юл сумкаһына өс-дүрт төп  һуған йолҡҡосланы. Шунда ғына аңланы Дауыт: «Зарница» уйнайбыҙ, тип алдаштырған даһа Николай.

…Ҡара, кәртә һаман урынында, тик инде ул эре селтәрле тимер сымдан. Мунсалары – яңы нигеҙҙә, элеккеһенән ҡалҡыу, әбшәүәтле. Ғәжәп шикелле: мунса ныҒыраҡ иҫтәсе. Әллә тегеһе ағартылған булғанғалыр?

Күрсе, ыҙба ла ҡалҡыу, ҙур кеүек. Верандалы, уныһы сөм-зәңгәргә буялған. Әүәлгеһе бурама, йәғни йәйге келәт кеүегерәк ине. ...Шунда ингәс кенә, Николай, тәмәке тартмаһа ла, трикоһының артҡы кеҫәһенә махсус һалып алған шырпыһын һыҙҙы. Яртылаш дәү ҡаҙан беркетелгән кирбес мейес, һәндерәләге ҡороуһыҙ сепаратор, төрлө ҡашығаяҡ, өҫтәлдә – клеенка менән ҡапланған ит. Кисә генә һуйылғандыр, урҙалағы сөйҙәрҙә бото ботса, ҡулы ҡулса эленгән һарыҡ ите. Уларын әлдә күрмәне Николай, ә япма ситенән ҡабырғалы өлөш шәйләп, табышын ниндәйҙер сепрәккә төрөп, кинәнес менән шыбырланы: «То что надо!» «Коля, нельзя… Не трогай!» – тигән булды ла уға Дауыт, мәгәр кило ярымдай ит киҫәктәренең үҙ ҡулына күскәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Элек ауылда һыуытҡыс үтә һирәк ине – Николай өҫтө еҙ батмус менән ябыулы дәү алюмин сеүәтәгә  юлыҡты һәм, һис тартынмайса, елле генә бешкән ҡалъяны ауыҙына

һоғондо, арттарынан буйһыу егет инеп, әйҙәләмәһә, сеүәтәһенә лә йәбешә ине. Аласыҡта, әлбиттә, ҡатыраҡ һөйләшергә лә ярай, тауыш әллә ҡайҙа һарҡылмай.

– Ты и ты… – Николай ҡабат шырпы сыйып, ҡаҡса әшнәһенә эйәк ҡаҡты, – килгән юлдан кире китегеҙ ҙә, кәмәне әҙерләп, беҙҙе көтөгөҙ…

– Ә «Зарница»? – Һармаҡ икән Дауыт, шаяртыуға ышанған.

– Уйнап йөрөйбөҙ ҙә инде! – Николай мыҫҡыллап көлөмһөрәне.

Бына ни өсөн кәмәнең сынйырын һурғандар бая. Һ-м-м… Ләкин ҡушҡанды үтәмәй ҙә сараһыҙ егеттәр, бигерәк тә Дауыт. Тыңламаниһәң, ҡурҡаҡ йә һатлыҡ йән тип, ҡыҫымға аласаҡтар. Бәргесләп тә ташлауҙары ихтимал. Бер үҙе бындағы өсәүгә, дозорҙағы икәүгә – йәмғеһе бишәүгә ҡаршы тора алмаҫ. …«Йөҙөп кенә аръяҡҡа сығып, лагерға һыпыртҡанда яраған икән», – тип үкенгән булды уҙаман ҡырҡ йылдан һуң. Бына әле, әле…

…Ебеп төшмә, Салауатов, Раян Баянович әйтмешләй, фамилияң шәп һинең, әйҙә, теүәккәллә. Һәм мосафир үҙ булмышында ниндәйҙер тулҡын ҡуҙғыуын, сикәләре зымбырҙауын тойҙо. Барыбер ҙә кеше – кеше генәме, барса йән эйәһе – асылы менән һунарсы шул.

Ана, ике эт уйнаҡлай урам уртаһында. Бирегә йомолдолар, туҡтап, улай-былай ҡарандылар. Ергә лыпашып, аскәрнә өргән була берәүһе, йәнәһе, эй, мосафир, кем һин, намыҫлымы, боҙоҡмо, кемдәргә, ни йомош менән килдең? «Сеү, мәхлүк, әллә ни йомошом юҡ, мәгәр ниәтләп килгәс, бынау өйгә һуғылмай ҡайтмайым, – тип уйланды Дауыт. – Үҙеңдән уҫалыраҡ өрөр инем, телеңде генә белмәйем». Эттәр апаруҡ яҡынайғас, Салауатов усын-усҡа шапылдатҡан булды – ҡара, ҡара, файҙаһы тейҙе, тегеләр ҡойроҡтарын ҡыҫып ирегә бороло. «Әттәгенәһе, берәй ҡап кәнфит тә алманым…» Эй, саҡырылған ҡунаҡ түгел әле, һәүетемсә һөйләшеүҙәре генә көс, тыҙдыйтып барып килер лавкаларына.

Өйҙәренә иғтибар итте. Ыҡсым, әллә шпалдан һалынып, таҡта менән көпләнгән – белмәҫһең: элеккеме, яңымы. Хәҙер йорттарҙы ғәләмәт елленән өйәләр ҙәһә. Иҫкергән йортта йышыраҡ ҡарт-ҡоро йәшәй торған.

Һынамышы раҫ. Ҡуйы зәңгәргә буялған бәләкәй ҡапҡа төбөндә, шаҡырғамыюҡмы тиеберәк торған ят әҙәмде бая урамдан атлағанында уҡ шәйләгәндәрме – солан күтәрмәһендә яурынына дебет шәл һалған ҡатынҡай, ә юҡ, төҫкә-башҡа күркле, сырайы мөләйем генә ҡарсыҡ пәйҙә булды. Йөн ойоҡ кейгән аяҡтарына күн табанса эләктергән хужабикәнең яҡты йөҙө мосафирға ҡыйыулыҡ, әҙәп өҫтәне.

– Һаумыһығыҙ! Мөмкинме?

– Ҡайышты тартығыҙ – ҡапҡа асылыр.

**IV**

Ҡарсыҡ – күҙ теймәгер, ҡарсыҡ тиергә тел әйләнмәҫ, – елкәһенә төшөп торған күперем сәстәре яртылаш салланһа ла, төҫ ташламаған, ҡаҡсараҡ, килешле кәүҙәһен төҙ тотҡан ҡатынҡай солан ишеген шар асты, ҡулы менән эскә ишараланы. Әйтәгүр, илтифатлы, хатта ки интеллигент. Ана бит:

– София Михайловна мин. Инеп һөйләшәйек. Верандаға… Үткән аҙнала ирлеҡатынлы һатып алыусылар килгәйне лә, хаҡына килешмәнек: уғата осһоҙ бирәләр. Утыҙ йәштә генәләр, ә үҙҙәрен донъяның кендеге һымаҡ тоталар. Бизнес аҙҙыра шул бәғзеләрҙең нәфсеһен… – Дауытты оҙонса верандалағы ҡабарынҡы күне алас-йолас ағарған йәйенке ҡара диванға ултыртҡансы, хужабикә апаруҡ хәбәр һөйләп ташланы.

– Пейзаж гүзәл бында! Һатмам тигәйнем дә, берҙән-бер ҡыҙым саҡыра

Сыбаркүлгә. Силәбе яғындағы Сыбаркүлгә. Ҙур гимназия директоры ул. Айырым бүлмәлә генә йәшәрһең, ейәнсәреңде ҡарашырһың, ти. – Михайловна берауыҡ тынып торҙо. – Ергә пайым да бар ҙа ул, алыусыһы ғына юҡ... Нисек эшкәртәһең инде өс гектарҙай тупраҡты?!

– Проблема... – тигән булды Дауыт башын борғослап, уны-быны төшөнмәһә лә. Хужабикә донъяһын маҡтаны – маҡтарлыҡ та! Өйөн һата икән София апаҡай. Күрһәнә, уң стеналағы көҙгө аҫтына, йыртма календарь эргәһенә, булавка осо менән «районка»нан ҡырҡынды ҡаҙалған: «Продается дом… метр…»

София ханым Дауытты һатып алыусы тип уйлай. Әйтәгүр, уға рәхәт булып китте, әллә ҡасанғы яҙыуына күптән язаһын алғандай, күңеле сафлана төшкәндәй тойолдо хатта. Ләкин тиҙ үк ҡәҙимге хәленә ҡайтты: ҡылған гонаһын бер кем, бер ҡасан һатып ҡына ҡотола алмай, алмаҫ та. Шундалыр ҙа әле гонаһ тигәндәренең ҡөҙрәте.

– Сәй теләйһегеҙме? Әллә кеүәҫ эсәһегеҙме?

Дауыт өндәшмәне, үҙе тыңлай, үҙе уйлана. Гәрәбәләй һарғылт кеүәҫен тәҡдим иткән хужабикәнең һөйләгәндәре бер ҡолағынан инә, икенсеһенән шыла. Урманда – станциялы ауылда тыуып үҫкән, Өфөлә медучилище бөткәндән һуң ошо ауылда – …овкала ҡырҡ йыл фельдшер булып эшләй. Мәктәп ыңғайына медпункты ла ябылғас, оҙаталар үҙен хаҡлы ялға. Почет грамотаһы тотторop. Ауылни, бөтәме тиһәң, ҡарт-ҡоро китешмәй йәшәй бирә, етмәһә, дача өсөн һатлыҡ участка йә усадьба эҙләүселәр осрай. Тирә-йүндәге ҡапыл-ҡара күҙгә бәрелмәгән алаңғырттарҙа умарталыҡ ҡорғандар ҙа байтаҡ. Цивилизациянан аулаҡҡа ҡасыу хас бәғзеләргә хәҙерге заманда. Тәбиғәттә йәшәү һаулыҡҡа ла сихәт.

– Ғәфү итегеҙ, ә супруг?.. – Биреп бөтөрмәһә лә, Дауыттың һорауы аңлашылды.

Эйе, эйе, «ирегеҙ» йә «иптәшегеҙ» тимәне, ҡатындың үҙе ише, йәғни китапсараҡ белешкәйне, киреһенсә, ябайыраҡ яуап ишетте. Һөйләм һайын – фәлән йылда, шунса айҙа…

– Ошонда тормошландыҡ тәүге ирем менән. Уңған механизатор ине, Чернобылдә алты ай бульдозер йөрөтөп ҡайтты… Ун йыл буйы яйлап шиңде… Аңлайһығыҙҙыр, ҡабат балабыҙ ҙа тыуманы. Ағыу бир ҙә үлтер мине, тип инәлә торғайны бахыр. Ауылдың үрге осонда йәшәнек, колхоз балансындағы йортта. Ә аҙаҡ... Тимошка менән загслап өйләнештек. Ни бары ете генә йыл йәшәнек. Тимошка, Тимошка... – София Михайловнаның тауышы һағышланды, күҙҙәре теремекләнде, ниңәлер Дауытҡа ҡарап алды. – Тимербай ине ысын исеме. Лесник булып эшләне, Таутөмәндән күсеп, ошонда төпләнделәр. Өй һалдылар, ике ҡыҙ үҫтерҙеләр. Әйттемме әле, Тимошка минең икенсе ирем ине… Башҡортса алама һөйләшәм, атайым һуғышта үлде, бүтән туғандарым юҡ, урыҫса уҡыным, ти торғайны. – София, шыма биреп, икенсе юҫыҡтан һүҙ ҡыҫтырҙы. – Төш тә яҡынлай. Хәҙер сәй ҡуям, ҡоймаҡ ҡоям.

– Рәхмәт, йәйелеп ултырмаҫҡа ине. Ә кеүәҫегеҙ харап тәмле, София Михайловна.

– Тағы эсегеҙ. Файҙалы ул. Фотоһын күрһәтәйем әле – Тимошканың ике-өс фотоһын алып ҡалдым. Ҡыҙҙарыбыҙ... бер-бер артлы Себерҙә төпләнде. Улар ҙа, ҡайтып китербеҙ быйыл, атайҙың ҡәберенә барырбыҙ, тип хат яҙғайнылар ҙа, ҡайтманылар. Юл йөрөү ҙә ҡыйын бынау эҫелә. Үҙҙәре өләсәй инде хәҙер.

Моңһоу, әммә ихлас хәбәрен өҙөп, хужабикә йомшаҡ баҫып өйгә инеп сыкты ла Дауыт алдына, кәрт өләшкәндәй, байтаҡ фотолар теҙеп һалды. Берәүһендә, ситмиттәре төпәрләнеп һарғайғанында, – ғаиләнең өй алдындағы эскәмйәлә ҡыҫталышҡан сағы. Уртала – сыбар шәл ябынған тумһыҡ йөҙлө әбекәй, уң яғынан

кәүҙәгә йоҡараҡ лесник формаһындағы ир тубығына фуражкаһын һалып ултыра, һул яғында – яулығын маңлайына бөрә бәйләгән мөләйем ҡатынҡай.

– Тәүҙә Марфуша (Мәрфуғалыр, тип уйланы Дауыт) үлде. Рак… Икеме, өсмө йылдан, мейеһенә ҡан һауып, – әсәһе. Ул, ярай, ҡартайғайны… – Быны әйткәс, София йылмайғандай итте. – Ана шул мамаша димләгән инде Тимошкаға мине. Урыҫсаға апаруҡ ине үҙе. Өйлән, улыҡайым, Софияға, яманатһыҙ, игелекле ҡатын, ҡулдары шифалы, тигән. Ә мине укол ҡаҙатҡанда эй өгөтләне: һин дә яңғыҙ, Тимербайым да яңғыҙ, загсланып, ҡалған ғүмерегеҙҙе бергә-бергә үткәрегеҙ, тип. Шулай, татыу ғына торҙоҡ. Балалар үҫте, каникулға ҡайтҡыланылар. – Фекерен ҡеүәтләгәндәй, хужабикә күмәк бала-саға уратымында үҙе Тимошкаға ирәбе һырығып төшкән фотоға усын яҙып ишараланы. – Ә быныһын… ауылыбыҙҙың йөҙ йыллығында төшкәйнек. Беларустан фольклорсы ғалимдар ҡатнашты.

Өҫтәренә балитәкле оҙон күлдәк, баштарына сәскә тажы кейгән ҡатындар һалам эшләпәле ҡунаҡтарҙы икмәк-тоҙ менән ҡаршылай. Араларында көләс йөҙлө София ла шәйләнә. Әһә, гәзиттәр яҙғайны, телевидение күрһәткәйне түгелме? Дауыттың уйын һиҙгәндәй, София быға анығыраҡ туҡталды.

– Күбеһе белорустар бында, украинецтар ҙа бар. Мин, мәҫәлән, әсәм яғынан хохлушка. Һөйләгәйне элек олатайым. Мең туғыҙ йөҙ бишенсе йылдамы, үҙенә ун өс кенә йәш саҡта, Вятка буйынан килгәндәр. Йәйәүләп бит әле. Шырлыҡ ботағандар, ағас үртәгәндәр, ыҙма бурағандар, һөргәндәр, сәскәндәр… Күп күргәндәр ыҙаны.

Дауыт шул саҡ Федорычты сылт күҙ алдына баҫтырҙы, ҡылт хәтере яңырҙы: унан да ошоға оҡшаш иҫтәлектәр ишетте ләһә. Вадим күршеһе, олатайымдар өй һалған, өләсәйемдәр етен, ҡарабойҙай үҫтергән, тигәйне. Булғандыр, үҫтергәндәрҙер, биғәйбә. Кемдәрҙе генә һыйындырмаған башҡорт тупрағы! Тамырҙарын онотмай, байрам итеүҙәрен хупларға ғына кәрәк.

Ике тәҙрә араһында еҙ батмустай балҡыған ҡытай сәғәтенә баҡты Дауыт. Сирек сәғәттән, килешкәнсә, Федорычҡа шылтыратырға кәрәк. Ә ниңә килгәйне һуң әле Дауыт бында? Бөтмәҫ яңғыҙ хохлушканың хәбәре. Ҡарсыҡ үҙе лә ете кисеү кискән ят кешегә эс серҙәрен сисергә әүәҫ кеүек. Нисек кенә һүҙ башлау хәйерлерәк? «Һеҙҙең өйҙә, дөрөҫөрәге, ихатағыҙҙа булғаным бар. Ҡырҡ йыл элек…» – тиһә, килешерме?.. Үтә ҡапыл кеүек…

– Күпме һорайһығыҙ… йорт-фәләнгә, София Михайловна?

– Килешербеҙ. Артығын һорамам. Уҙған аҙнала берәү шылтыратты Таутөмәндән. Бигерәк осһоҙға алмаҡсы. Эшҡыуар үҙе. Хәлбүки, яңғыҙлыҡ тигәс тә, уғата кәмһетмәҫкә ине. Яңғыҙ ҙа түгелмен. – Хужабикә хискә бирелде. – Яҙ һайын һандуғастар ҡайта, йәй буйы илереп һайрайҙар. Әйтә торғайны Тимошка, үҙемдең генә һандуғасым бар, тип. Бер йәй генә йәшәһәләр, ҡошсоҡтары йомортҡа ҡабығын суҡып сыҡҡан төйәгенә ҡайталарҙыр... Йәл дә бит, ҡыҙымды тыңламаһам да ҡыйын. Әлдә өйҙө, нотариус саҡыртып тороп, миңә яҙҙырғайны мәрхүм. Ярты кәүҙәһен паралич һуҡҡас… Ун өс ай ҡараным түшәктәге Тимошканы, шуға яҡындары, хужалыҡ тотош Софияға тейеш, тигәндәр. Үҙем дә иҫәпләшеп торманым, кемгә нимә кәрәк, шуны тараттым. Тәүге иремдең энеһе кинәнде генә! Ул арбасананы, һабан-маҙарҙы, ул ҡорамал-фәләнде ҡырып-һепереп ташыны.

Хужабикәнең һуңғы хәбәре ҡыҙыҡ түгел ине Дауытҡа. Уны берауыҡ «үҙемдең генә һандуғасым бар» тигән фекер арбағайны. Ысынлап та шулай була микән ни тормошта?

Ҡәҙимге телефон шылтыраны, ә юҡ, мөсһөҙ генә зыңғырланы. Хужабикә кемгәлер, көт, һуңғараҡ барам, эшем бар әлегә, таблетканды эсә тор, тине.

– Дача өсөн икән, күрәһегеҙ, донъя шаҡтай, ултырышы йәмле… Хаҡын килешербеҙ, үҙегеҙ ҙә тәрбиәле күренәһегеҙ. Башҡорттарға ышанырға ярай, улар кешене күрәләтә һемәйтмәй торған… – София Михайловна керһеҙ тәҙрә быялаһы аша тал-тирәктәр араһындағы инеш яғына баҡты. –Тимошканы Кордонда ерләнек, мосолманса. Яҙ барҙым әле ҡәберенә, сәскә сәстем. Һәйкәлташ ҡуям. Сафиушка – ты моя соловушка, тип әйткеләне бит миңә – нисек юҡһынмаҫһың?!

«Килешербеҙ… Ышанырға ярай… Һәйкәлташ… Сафиушка…» Зиһенендә алыҫлашҡан шаңдау һымаҡ яңғыраған һүҙҙәр гүйә юламанға тәүәккәллек өҫтәне, Дауыт хатта тороп, ара-бире йөрөштөрҙө, берауыҡ үҙен завод операторныйында кеүегерәк тә тойҙо.

– Ғәфү итегеҙ, София Михайловна, мин бөтөнләй бүтән йомош, хатта ки сәйер визит менән... Күптән йыйынһғайным да... Килһәм икән Тимошканың иҫән сағында. Зинһар, дөрөҫ аңлағыҙ мине.

Хаҡлы ялдағы шәфҡәт туташы күҙгә сос, һүҙгә тос булһа ла, ҡолаҡҡа ҡатыраҡтырмы – ҡабат үҙ зарын тылҡыны. Үтә ҡыҙыл тиҙ уңа тигәндәй, тора-бара ҡәҙимге ауыл хәсиәтенә лә бирелде кеүек. Урынынан ҡалҡынды, фотоларҙы йыйып алды.

– Һатмаҫ та инем – яңғыҙлыҡ ҡыйын. Тәүге иремдең туғандары, бигерәк тә энеһе, өндәшмәй генә йә ситләтә, йә үгәйһетә. Бая мин альбомға ингәндә, тамаҡ яғына уҙып бара ине. Һиҙә күңелем: ниңә шымсылай ят әҙәм, ниңә Михайловнаға инде әле, тиҙер.

«Әллә сығып ҡына һыҙырғамы?» – Дауыт, башына һуҡҡан әлеге теләкте көскә томалап, хужабикәнең күҙенә тура ҡараны һәм һүҙ буҫҡаһынан бүккән ҡиәфәттә һораны:

– София Михайловна, һеҙгә һорау бирергә мөмкинме? Сетерекле генә һорау...

– Мөмкин, ҡаршы түгелмен. – Ханым үҙен тыныс тотһа ла, тауышы һағайыулыраҡ сыҡты. Бына ул ваҡ селтәрле шәлен рәтләп, биле биртенгән сырхауҙай, яй ғына һөйәнмәле ултырғысынан ҡалҡынды, ә мосафир, киреһенсә, ике тубығына ике усы менән таянып, арҡаһын ырғылырға әҙерләнгән януарҙай дуғаландырып, диванға ныҒыраҡ терәлде.

– Хәтерләгеҙ әле: мәрхүм а-анауҙағы аласыҡтан сей ит, аҙбарынан һарыҡ бәрәне юғалғанын һөйләнеме һеҙгә? – Дауыт лыпын терәлгән урынынан баҫты ла, веранда тәҙрәһенә яҡынлашҡас, тәүҙә аласыҡ яғына, шунан тапҡырҙағы оҙонса аҙбарҙың ситке, мүкһеҙ аранына эйәк сөйҙө, әйтерһең, күптән таный. Ни ғәжәп, һулдараҡ, йәшелсә түтәлдәренән арыраҡ, өйкөм генә балан ҡыуаҡлығынан... ҡолағына һандуғас моңо салынғандай итте. – Бынан ҡырҡ йыл элек, эйе, ҡырҡ бер… Һөйләнеме?

– Бөтә ауыл сәйнәне, юҡ-юҡта әле лә иҫләйбеҙ… Хәҙер һарыҡ ҡынамы урлана... – София Михайловна сәйерһенде, берсә йылмайырға, берсә йәмрәйергә маташты, хатта ки аңына килгәндәй, ҡапыл ғына яшыҡ түшенә ҡулдарын ҡаушырып, ишек яғынараҡ шылышты. – Кем Һеҙ?.. Өй белешеүсе түгелме ни?

– Йәшлек йүләрлеге менән Тимербайҙың һарығын сәлдергән мародер туристарҙың береһе мин, – тигәс, ике усын күкрәгенә ҡаушырған Дауытҡа тын алыуҙары еңелләште, хатта һәләт кенә диванға ултырҙы. – Йәшермәйем, урлашыуға ҡаршы инем, тик дуҫ-иштәрҙе еңерлек әмәл табылманы.

Салауатов ҡыйырсыҡ айлы төндәге мажараны аңлайышлы итеп тиҙ-тиҙ генә хикәйәләне. А-ба, барыбер ҙә шөрләберәк, шикләнеберәк, һиҫкәнеберәк йәшәгән дәһә быҒаса. Кемдән? Әлбиттә, намыҫынан. Әле, гүйә, сафланды. Әйтерһең,

ғүмере буйы күкрәген ҡыҫҡан төйөр таралды; әйтерһең, оҙайлы тыйыуҙарға дусар ителгән күңел ҡошо талпынды; талпынды ғынамы, һо-ой, һайрап ебәрҙе.

– Хәҙер нимә кәрәк һуң Һеҙгә? – Михайловна ҡабат инсафлы, яғымлы хужабикәгә әүерелде һәм быны саҡырылмаған ҡунағын уңайһыҙ хәлдән араларға тырышҡан ише һорашты. – Бәғзе бурҙар урылыҡ ҡылған ерене ҡабат аяҡ баҫырға маташа, тигәндәрен ниндәйҙер китапта уҡыған да һымаҡмын. Йәшермәгеҙ: тәүбәгә килеүегеҙме?

– Бәлки… Ярлыҡау эҙләйемдер,бәлки, яза көҫәйемдер – үҙем дә белмәйем. Рәхмәт һеҙгә, күңелемде аңлаған өсөн. Тәүбә, тинегеҙ. Тәүбәгә мин теге записканы, милицияға тигәнде, яҙғанда уҡ килмәнемме икән? Әлләсе...

– Их, бөтәбеҙ ҙә ҡылған гонаһтарыбыҙ өсөн шулай үрһәләнһәк, донъяла боҙоҡлоҡ, аҙғынлыҡ кәмер ине, кем белә, бөтөп тә ҡуйыр ине. Бигерәк тә һуғыштар, репрессиялар, кәрәк-кәрәкмәгән революциялар…

София ханым юлаусыға илтифат менән баҡты. Дауыт уҙаман иһә сырт-мырт күне бызырмаҡлы һорғолт барсеткаһын асып, төпкө кеҫәһенән аҡлы-ҡыҙыллы шып-шыма аҡса һурып сығарҙы. Уртаға бөгөүле биш меңлек икән, алдан уҡ әҙерләнгәнгә оҡшай.

– София Михайловна, һеҙ бая һәйкәлташ хаҡында телгә алғайнығыҙ. Бына – минән дә иғәнә. Ихластан ҡабул итһәгеҙ, иңемдән таш төшкәндәй буласаҡ. – Дауыт беше купюраны яҙып, өҫтәл уртаһына һалды. – Эйе, эйе, мин бит хатта студент көйөмә ошонда килергә бик тә ынтылғайным. Аҡсам етмәһә, ҡалын ғына, ярайһы затлы һинд свитерын биреп, бәхилләргә лә йыйындым. Шундайҙар модала ине ул саҡ. Ниңәлер, юғалған һарыҡ эйәләре мине ярлыҡарҙар, тип өмөтләнгәйнем.

– Тимошка ярлыҡар ине... Ә бына Марфуша, сәлдермеш ризыҡ нисек тамаҡтарына барғандыр, тип ҡарғанған. – София йәнә тәрәнерәк фәлсәфәгә бирелде. – Улай тиһәң… дәүләтебеҙ күптән һауын һыйырға әйләнеп бөттө лә инде. Нисәмә завод, нисәмә колхоз йотолдо. Хәҙер урмандарға, йылға-күлдәргә йәбештеләр. Йәштәргә ҡыйын. Бәғзеләр эш кенә түгел, тормошта ла урын тапмай бәргеләнә… Ул эҫеһе, ул янғындары, ул ташҡындары аптырата халыҡты, террористары теңкәгә тейә! – Хужабикә веранда мөйөшөндәге телевизорға бағып бераүыҡҡа шымды. – Ҡабыҙырға ҡурҡыныс!

Тынлыҡты һуҙмаҫҡа теләгәндәй, Дауыт күне бәҫһеҙләнгән дивандан торҙо. Ханым иһә аҡсаны кире һуҙманы, баш тартыуын белгертмәне – шуныһына ла шөкөр.

– Миңә ҡуҙғалырға ваҡыт, хәҙер машина киләсәк. Рәхмәт һеҙгә.

– Үҙегеҙгә рәхмәт. Тимошканың рухы һөйөнгәндер, тим. Эйәк ҡағып, хужабикә яҡын күргәндәй телгә килде, шкафын аса һалып, тиҫтәләгән ике литрлы банкаларҙың береһен һөрткөләп, өҫтәлгә ултыртты. – Сәй ҙә эсмәнегеҙ. Исмаһам, ғаиләгеҙгә апҡайтығыҙ. Үҙем тоҙлаған помидор ҡатыш ашҡабаҡ салаты. Күпме хәбәр тылҡаныҡ...

Был өй менән араны бөтөнләй өҙөргә теләгәндәй, Дауыт рәхмәт әйтеп, күстәнәстән иple генә баш тартты, һаман хужабикә ҡулына күсмәгән биш меңлекте – әллә ҡасанғы гонаһының өлөшләтә әжерен банканың ҡалай ҡапҡасына һалды һәм, хушлашыу ниәтенән, Софияға текәлде. Нәҡ шул саҡ, икеһен дә еңелсә тертләтеп-һиҫкәндереп, урам ҡапҡаһын шаҡынылар.

– Баяғы мужик – ҡәйнешем маҙама тейә! Өйөн кемгә һата Михайловна, тип тығылырға уйлай. Ә һеҙ... кәртә артлап атлаһағыҙ, Яңы …овка яҡын ғына. – Юл күрһәткәндәй, хужабикә керелсәнән ихатаға алдан төштө, яшыҡ ҡулын нәзәкәт менән баҡса аша һуҙылған һуҡмаҡҡа иҙәне. Дауыт иһә башҡортлоғон ҡайырҙы, әсе генә көлөмһөрәп:

– Ҡараҡтар ғына йөрөй  кәртә артынан… – тип лығырҙаны.

– Һеҙ хаҡлы. Ғәфү итегеҙ. – Итәғәтле һүҙ икеһен дә ҡәҙимге хәлдәренә ҡайтарҙы, уңарсы эргәләренә, алпан-толпан баҫып, шаҙра битле, сығынҡы күҙле, төптән лупыш ирекәй яҡынлашты. Йәш тә түгел, ҡарт та тимәҫһең, илле тирәһендәлер. Айныҡ тойола үҙе, мәгәр һулыштары ҡыҫынҡы, йылмайышы яһалма кеүек.

– Һаумыһығыҙ. Минең оноҡто ултыртып әпкилгәндәр ят машинала, рәхмәт күндерергә үҙҙәре күренмәй, тип урамға сыҡҡайным. Иғлан буйынса йөрөймө иптәш, Михайловна? – Башҡорт һымаҡ «еңгә» йә «ҡәйнеш»тән ҡырҡып, сөсөләнеп аралашмай шул былар. София юғалып ҡалманы, эстән әҙер торғандырмы, хәйләләп ҡотолдо. – Юҡ, юҡ, был... уның атаһы Тимошканың дуҫы булған элек, юл ыңғай хәл белешергә ингән. Яңы …овкаға китә хәҙер.

Ышанырғамы-юҡмы, тигәндәй, мужик, әрһеҙләнеп, берсә Дауыттың йөҙөнә ҡаҙарынды, берсә ҡулындағы барсеткаға текәлде.

– Тә-әк, тә-әк, ә унда кемегеҙ бар һуң?

– Банниковтар… – Биғәйбә, баҡса буйынса күршеһе Вадим Федорычтың фамилияһын атаны ла ҡуйҙы. Саҡырылмаған ҡунаҡ, үҙе лә һиҙмәҫтән шулай ҡапыл ғына мутлашты, ни арала һарыуын ҡайнатҡан сығынҡы күҙҙән, биҙрәткес шиҡандауҙан ҡасырға уҡталғандай, бейсболкаһын башына кейә-кейә, ярым асыҡ ҡапҡаға ыңғайланы. – Хушығыҙ, София Михайловна, иҫән-һау йәшәгеҙ.

Хужабикә иһә баш һелкеп кенә хушлашты, гәрсә уның насар уйҙа ҡалмағанын Дауыт яҡшы тоҫмалланы. Артынса ҡәйнеше бумпылдығын сыҡты: «Банниковтар юҡ таһа беҙҙә. Улар райондың теге осонда йәшәй. Хәтерендәме, Михайловна, бер Банников өйләнергә йөрөгәндә, кәләшен аҡсалы бамовец алды ла китте, туй алдынан ғына!..» Юлаусы ҡапҡаны тыштан япҡас ҡына, тегенең өнө томаланды.

«Ҡыҙыҡ, Федорыч… бер-бер йәш сағында?.. Юҡтыр…» – тип уйланды Салауатов.

– Ҡалай хәтерең шәп, ә мин иҫләмәйемсе. – Быны София әйтә ине.

* * *

Тыныс ҡына икән ыҡсым ауыл, ярайһы таҙа үҙе, бәғзе өйҙәр алдында техника-фәлән күренештерә. Ҡайҙағыса, бында ла бала-саға һирәктер, ана, бикле магазин тирәһендә өс-дүрт кенә ыбыр-сыбыр йүгергеләй.

Федорыч менән бәйләнешкә инеү сәғәте үтеп бара, ә унан ләм-мим өн юҡ. Әйҙә әле, Дауыт үҙе шылтыратып ебәрһен. Мобилкаһын  тоҡандырып, номерын йыйҙы: «Вад. Фед. Бан.» тигән тоҡос исем-шәриф  эргәһенә шыршы һынын сәпәгәйне – йәнәһе, баҡса буйынса ут күршеһе. Ҡапыл ғына алманы әле теге, алғайны, үҙе һөйләшмәне, яңылыштанмы, мобилкаһының берәй төймәһенә баҫҡандыр... тыңлаһаң тыңла, тигәндәй, әллә ярһыу, әллә ҡыҙмаса, дөрөҫөрәге, ҡәһәтле генә тауыш һарҡылды:

– Кукиш япондарға Кунашир! Медведев үҙе – Рәсәй  державаһы Президенты! – беҙ хеҙмәт иткән утрауға  яңыраҡ шәхсән аяҡ баҫты. Ә элек шундағы сопкаларға танк башняларын, сик бағаналарын  кем ҡуйҙы? Беҙ! Кем пургала толоп кейеп, ямғырҙа плащ-палаткаға төрөнөп, автомат аҫып икенсе эшелондың береговая охранаһында йөрөнө! Мәте кисеп…  Ерҙәр тетрәп-дерелдәп китә торғайны табан аҫтында. Беҙ бит, Вадим, беҙ – совет һалдаттары! Кунашир, Шикотан, йәнә Итуруп – шиш ҡыҫыҡ күҙҙәргә! Бигерәк аҡыллылар! Самурайҙарға  армия тоторға ярамай, ә улар?.. Давай, Вадим споем нашу, солдатскую! Ты ж был запевалой, да?

Әлеге утрауҙарҙың атамаһын Курилды күргән-белгән кеше генә дөрөҫ әйтә алалыр… Йәнә Дауыттың зиһененә сәйер генә һорау осоп ҡунды: һы-ы, белорустар ҙа эсәме икән? Хәлбүки, Рәсәй кешеләре ләһә. Ҡыҙыҡ, Федорыч бер ҡасан да үҙенең белорус икәнен әйткәне юҡ. Кәмһенәме, әллә кәрәк тапмаймы?

Бер аҙҙан көттөрөп кенә телгә килде Федорыч, күрәһең, хеҙмәттәшен мөкиббән тыңлап ултырғандыр.

– Даут Азаматович... – «Əһә, бутала, әллә Вадим да шарап йотҡанмы? Йоттониһә, ҡайта алмаҫтыр ҙаһа? Ә иртәгә – вахта…» – Кө-өт ауыл о-осонда, хәҙер барып етәм.

– Вадим Федорыч, давай йөрмәә, ял ит – үҙем барам эргәңә… – Банниковтың кесә телефоны һүнде. Салауатов,ҡарһаланып, күптән ремонт күрмәгән асфальт юлдан атланы. Эх-ма, йүгерер ҙә ине – йәше бара, аяғының ҡан тамырҙары бүртергә генә әҙер – саңғыла күп шыуыу зәхмәте. Ләкин күп тә атламаны, аулаҡ юлдан ҡаршыһына таныш «Нива» гөжләп туҡтаны, һәм ике яҡлап кабина ишектәре асылды.

– Ултырығыҙ, дорогой Даут Азатович! – Башҡорттоң исем-шәрифтәре был юлы нисектер баҙнатһыҙыраҡ, хатта ки ғәфү үтенгән юҫыҡтараҡ, мәгәр бутамай әйтелде. – Һораштым: Шарлама эргәһенән уҙып була, шунан Октябрь усадьбаһы аша трассаға сығырға мөмкин. Ғәфү, бер рюмка һелтәргә тура килде полкташ менән... Минән йәшерәк ул, сөнки мин егерме бишем тулғас ҡына шинель кейҙем.

Кабинаға менергә һонолған ерҙән туҡтап, Дауыт етди генә бойорҙо:

– Вадим абзый, үҙең ғәфү ит һәм… рулде миңә бир, үҙең артҡа күсеп ултыр.– «Абзый» тип белә күрә, асыуланыбыраҡ өндәште. Берауыҡтан абзыҡай ыштанын еүешләгән малайҙай шымтайып ҡына юлдашы ҡушҡанды үтәне.

– Һаҡланғанды Хоҙай һаҡлар… Был мәҡәл руста ла, башҡортта ла бар.

– Азатыч, һин хаҡлыһыңдыр… Тик ашыҡма, яраймы.

Дауыт диҡҡәтен биреп еҙһыу-йәшкелт «Нива»ның рәтен-сиратын төшөнөп тә алды. Бына бая үҙе хәтирәләргә сумып йөрөгән ярлауҙан ышанысллы ғына уҙып китте, артабан ҡыу атҡорһаҡтар, сәнскеле шайтан таяҡтары һерәйгән яландан елдерҙе. Ҡаршыһына ҡулдарына тал кәрзин тотҡан ҡарт менән ҡарсыҡ осрағас, кабинанан төшөп үк, юлды белеште. «Хәйерле көн! Алыҫмы Шарламаға?» Илтифатлы сәләмләнгән өлкәндәр йыбанмай, йәтешләп аңлатты. «Дөрөҫ бараһығыҙ. Ике туғай аша үтһәгеҙ… Бер йырын осрар – урап уҙығыҙ. Беҙҙең әле кәнде шундағы урмандан ҡайтып барыш…»

Һөрөлмәгән баҫыуҙа «Нива» ҡыҙыуланды.

– Ҡара әле, рулде онотмағанһың да!

– Белгән эш онотолмай ул, ти торғайнылар… – Дауыт йылмайып ебәрҙе, ауыл мәҙәге иҫенә төштө. Эсеүен бер башлап, бер ташлап йөрөгән ҡартлас әйткән быны. Иҫәнме икән меҫкен? Инде йәнтөйәгенә ҡайтмағанына биш йылдыр… Яҡын туғандары ла әҙәйҙе, бер уйлаһаң. Ата-әсәһе гүрҙә… Эй ҙә, һөйләһен әйҙә көләмәсте Вадимға.

Аңланы Федорыч мәрәкәнең үҙенә лә төртөлгәнен. Аҡланырға кереште, өҙөкйыртыҡ иҫтәлектәрен барланы.

– Тә-әк, бөгөн дүшәмбе… Хеҙмәттәш илле бишен билдәләгән шәмбелә, юбилейынан бирле баш төҙәтә. Шул землягым вокзал мастеркойына токарь булып урынлашҡайны, прописка, ятаҡ бирҙеләр. Военкомат бер булғас, понятно, бер командаға эләккәнбеҙ, карантинда бергә айт-дваға йөрөнөк.

– Аңлашыла... – тип Вадимды йөпләгәндәй итте Дауыт.

– Мине күреүе булды – шап өҫтәлгә ул «Виски», ул первач... Ныҡ ҡыҫтағас, ике рюмка... һелтәргә. Билмән аҫтына... Әлдә шылтыраттың, әтеү…

– Өсәүгә тулыр ине! – тип еңелсә  мыҫҡылланы Дауыт. Вадим иһә ҡәнәғәт кенә  сырайын сирылтты.

– Күрелде инде һалдат ыҙаһын. Булашмаған эш ҡалманы: казарма төҙөнөк, мейес сығарҙыҡ, канау ҡаҙҙыҡ.  Ыуылдырыҡ сәсергә үрләгән горбуша тотторҡ, шул балыҡты хап-хап ашарға йөрөгән айыуҙы атып йыҡтыҡ. Фотоға төштөк тиреһен йәйеп, миндә лә, унда ла шул фото бар. Әле ҡайҙа барабыҙ?

– Шарлама аша – алға!

– Тимәк, коммунизмдың еңеүенә! – Был юлы икәүләп көлөштөләр.

Бәшмәкселәр иҫкәрткән йырынға еткәс, Дауыт, «Нива»нан төшөп, ҡыуаҡ ялмаған, батҡағы ҡурышҡан соҡор-саҡырҙы ҡарап әйләнде. Ул-был юҡ, именаман уҙырға мөмкин.

Ҙур ғына асыҡлыҡ. Юлдар күп, береһе һулға, урталағыһы – урманға, арыраҡ бик иҫкеһе, ҡурпы алғаны, уңға тартыла. Һулға ҡайырылыу хәйерлелер.

Машина хәтәр йыуан тирәк төбөнә ай ғына барып туҡтаны. Палатка ҡорған, усаҡ яҡҡан урындар шәйләнә.

– Еттекме, Федорыч…

Башы ҡырынайған Федорычты йоҡо баҫҡайнымы, яуап та биреп ыҙаламаны. Бик мәслихәт, әҙәм рәтенә инер. Бәй, сәғәт икеләрҙән һуң төнәй торған ғәҙәте бар ҙаһа. Һөйәнмәһен эйелтә бирергә кәрәк артҡа. Шулай, йоҡо яҫтыҡ таптырмай.

Шымбаҫар ғына ҡыланып, Дауыт уйлағанын атҡарҙы. Маладис, ҡартлас, тыныс ҡына алмаштыра әскелтем тынын. Яланда ла, эргәләге ҡыуаҡлыҡта ла һиллек. Әҙ-мәҙ һары япраҡтар бәүелгән ҡатнаш урманда ғына һайыҫҡан шыҡырыҡлай. Барыбер ҙә урманда серле ҡөҙрәт бар һымаҡ. Әллә бәғзе ағастары оҙон ғүмерле булғанғамы? Анау ялбыр имән кәмендә өс йөҙ йыл ғына үҫкәндер әле.

Машина асҡыстары бәйләмен зажиганиенан һурып, үҙ кеҫәһенә һалғас, Дауыт тәүҙә яҡындағы урман ауыҙына барып әйләнде.

Урман, урман… Һандуғастарың киткән, япраҡтарың һарғайып кипкән, ҡапырыҡ булып түшәлгән. Күҙгә урман үҙенсә тылсымға эйә – гүйә, уйланырға мәжбүр итә: күпме йәшәнең ерҙә, әҙәм балаһы? Ниҙәр атҡарҙың? Ниндәй яҡшылыҡтар, ниндәй гонаһтар  ҡылдың? Күпме йәшәрең бар?

Тимербайҙың һандуғастары сыуалманымы икән был тирәлә? Юҡтыр, улар йыл да үҙҙәренең таллығына ҡайталыр, шунда оя ҡоралыр, София көн дә күргән баҡсалағы балан, миләш ботаҡтарына ҡунып  һайрайҙыр.

Әле бына һулауҙары, атлауҙары еңел кеүек... София Михайловна йөҙөндә ул Тимошка-Тимербайҙың ярлыҡауын тойҙо. Туҡта, туҡта, уны тәүбәгә килергә теге саҡта уҡ уҡытыусы-ғалим мәжбүр итте түгелме ни? Эйе, эйе, тәүләп үкенергә, ғәйебен танырға мәжбүр итте. Нәҡ үҙе, нәҡ шул – ҡалын ҡашлы, яҫы яңаҡлы башҡорт ағайы. Һай, әттәгенәһе,  ҡыҫҡараҡ ине исеме. Раян, Раян Баянович – иртәнсәк иҫләгәйне бит… Эйе лә, Доцент тиеп ҡушамат та таҡҡайнылар үҙенә? Ай-һай, ул заманда Доценттың кемлеген – һөнәрме ул, дәрәжәме икәнен юҫыҡлап айырҙымы икән командалағылар? Бәй, ауыл егете Дауыт, Николай ише ҡала шпанаһы  аныҡ белмәһә, аҙмы-күпме донъя күргән Алевтиналар, Володялар белмәгән тиһеңме ни? Юҡһа, кем таҡҡан ундай ҡушаматты?

Мөһабәт ағас төбөнәрәк яҡынайҙы Дауыт. Ҡарасы, урыны менән кәҫ аҡтарылған, ҡапырыҡ туҙышҡан, бөрсөкләнеп имән сәтләүеге һибелешкән, күбеһе йәнселгән. Ә-һә, ҡыр сусҡалары ашхана ойоштормғандыр бында яңыраҡ. Ул дуңғыҙҙарҙан һағыраҡ булыуың хәйерле. Юҡ, ҡурҡмаҫҡа ла мөмкин. Ҡабан көтөүе бында оҙаҡҡа туҡтамаған, үтеп барышлай ғына темеҫкенеп киткән. Улар ҙа, мәхлүктәр, ике аяҡлы әҙәми заттан алыҫыраҡ йөрөргә тырыша .

Балан сатыры күҙгә салына – эргәһенә барҙы. Егерме бөртөк кенәлер емеше,

шуның биш-алтыһын усына тиргәс, Дауыт яр башынараҡ тартылды. Ошомо Шарлама? Үтә һайыҡҡан, шәт шарлама түгел, бары тик сырлама хәҙер. Тирә-йүндә ағастар ҙа шыйығайған, ҡомлоғо тапантыға әйләнгән. Ә теге саҡ мунса бурарлыҡ ҡара еректәр ғәжәпләндергәйне Дауытты.

Ҡапыл ғына Салауатов асыға башлауын тойҙо. Йә, Михайловна һыйларға әҙер ине, баш тартҡан булды иҫәүән, күстәнәсен дә алманы. Телефонынан һөйләшкәнендә, үҙен кемдер көтөүен аңғарҙы лаһа. Хаҡлы ялда булһа ла, ауылдаштары тынғы бирмәйҙер: верандала дарыу еҫе аңҡый, ул-был һерәйгән медицина тумбаһы бар ине. Нисауа, асығыуҙың да файҙаһы тейә, ҡапһын бынау әсе емештәрҙе.

Көн ярайһы йылы. Дауыт ял алырға иҫке усаҡ эргәһендә янып бөтмәй ҡалған йыуан киҫкәнең ҡоромһоҙ осона терәлде.

## V

Ә теге саҡмы? Теге саҡ кәмәне һыуға этеп, йылдам ғына урынлашҡансы, сынйыр ҡаҙығынан алыҫ түгел ҡуйы тал төбөндә ятҡан – көндөҙ үк самалап ҡуйғандарҙыр? – ишкәктәрҙе беркеткәс, Николай артыҡ шаптырлатмай, таһыллы ғына ишә лә башланы. «Һулға», «уңғараҡ», «тура…» тип , ике йәшлек һарыҡты ике ҡулы менән быуарынан аймаған Владимир уға йүнәлеш биреп ултырҙы. Һарыҡ – һарыҡ инде, бәәлдәмәй ҙә, исмаһам.

– Ниңә орондоҡ… кеше малына? – Дауыт ризаһыҙлыҡ белдергәс, Николай, бер ниндәй хилафлыҡ ҡылмағандай, вайымһыҙ яуапланы: «Унда күп ине… Башҡаларҙа берәү йә икәү, күбеһендә – сусҡа, ә быларҙа тик һарыҡ ҡына…»

«Тик һарыҡ ҡына… Башҡорт булғанға сусҡа аҫырамағандар! – Ҡырҡ йылдан һуң ошондай асыш яһаны Дауыт. – Эте өрмәне, сөнки Тимербай ҡуна ятып диләнкәлә бура бураған...»

Ауылда, Михайловна әйтмешләй, тәүҙә кәмә юғалыуы ғына беленә. Иҫке булғанғамы, хужаһы артыҡ ҡайғырмай ҙа. Килде-китте балыҡсыларҙан күрә… Тимербайҙың Марфушаһы иртәгәһенә һуйылған итен Яңы ...овкала закупҡа биреп, электр сепараты ала, юғалған өлөштө йәтсә йә шәшке йыпырғандыр, ти. Тик өсөнсө көнө, көтөү ҡайтҡанда ғына, иғтибар итә ҡарағусҡыл бәрәненең юҡлығына.

…Кәмә йөгө һәлмәк булғанғалыр, урталағы ике таҡта егенән һыу һарҡылта башланы. Ярай әле, ҡойроғонда йәмшәйгән сүмес ятҡан, шуның менән өндәшмәҫ егет, кеды табандары сыланмаҫ борон, һыуҙы сайпып түгергә кереште. Нишләһен Дауыт, Николайҙың уфылдауын һиҙеп, ишкәккә үҙе күсеп ултырҙы. Ете төн уртаһында ете ят йылға төбөнә кемдең батып ятҡыһы килһен… Байдаркалар ҙа ҡушылғас, апаруҡ аҡтылар, һәр хәлдә, лагерға еткәсме, әллә уҙып киткәсме, ярға баҫтылар. Еңеләйгән кәмә әйләнгеләп аҫҡа ағып китте. Ни өсөн ағыҙып ебәргәндәрҙер – быны аңламаны Дауыт, хәйер, әле лә аңлата алмаҫ. Ҡайҙалыр берәй тобаға йә томбойоҡ араһына үҙенән-үҙе яғылғандыр бит ул кәмә. Эҙләүселәр табыр ине, этлекте һиҙер ине. Эҙләп тә тормағандар, тимәк.

Лагерға яҡын ҡыуаҡлыҡта салырға булдылар һарыҡты. Бәке генә бар Николайҙа. Ул усаҡ эргәһендәге биҙрәләргә тултырылған һауыт-һаба араһынан елле генә бысаҡ, тағы нимәлер алып килде лә Дауытҡа һондо.

– Ну-ка, курбаши, муйынын ҡырҡ… Тунарһың да, бәлки? Мин ҡурҡам…

– Урларға ҡурҡманың даһа! – Дауыт тиҫкәреләнде, сөнки күҙ алдына «курбаши» – киноларҙа уҫал, яуыз итеп күрһәтелгән баҫмасыларҙың ялтас башлығы килеп баҫты. Дауыт яуыздыр шул?

– Ярай, ярай, салып ҡына бир, – тине Николай. – Ҡалғанын үҙебеҙ ҙә булдырырбыҙ.

– Итен иртәнсәк түгел, төшкә бешерербеҙ. – Быныһы инструктор Володяның ниәте. – Маршруттан ваҡытында ағырбыҙ.

Николай һарыҡтың аяҡтарын сырмап бөткән Володяға шешә, көрөшкә һондо, башҡаларға бирәр телем икмәк өләште. Дауыт үҙ телеменең яртыһын һарыҡ-ҡа ҡаптырҙы:

– Фу, аңра, көйшәй ҙәһә! – Ярты телемен түш кеҫәһенә тыҡты ла, хайуандың үңәсен ҡиблаға ҡаратып, эстән генә әкбәр әйтте, һәм… бы-ых.

Ҡорбандың дерелдәүе баҫыла төшөү менән, егет, уҡшый яҙып, ярлауҙан ҡыр-сынға төштө, иңкәйерлек күләүек тапҡас, ҡулын ҡом менән оҙаҡ ышҡып йыуҙы, гүйә, бөткөһөҙ бысраҡҡа буялды. Ҡан таптары тиҙ бөттө, ә бына гонаһ юшҡыны нисәмә йыл, иҫкә төшкән һайын күңел төбөн ышҡыны. Ҡабат иптәштәре эргә-һенә барманы, ҡуҙҙары емелдәгән усаҡ эргәһендәге дәү сәйнүктән йылымыс шыйыҡ сәйҙе икмәкләп һемерҙе лә палаткаға йомолдо…

Икешәрме, өсәрме, кемдәр менән йәнәш йоҡлағандыр – онотолған. Анауы мөштөм егет менән төнәй инеме шул... Николай Владимирҙан айырылманы, ә Доценттың икенсегә ҡунаҡҡа саҡырғаны, шарап тәҡдим иткәне хәтерҙә. Уныһы – һуңғараҡ, походтың әллә бишенсе, әллә алтынсы көнөндә булды.

Таң һыҙыла. Һандуғастар сутылдаша, барҡылдаҡтар бытылдаша. Күпме йон-соһа ла, дежур Алевтина кемдер менән шым ғына тороп, иртәнге тамаҡ яраш-тыра башлағанда саҡ йоҡоға талды бөгәсә ирекһеҙҙән һарыҡ бурына әйләнгән «курбаши».

* * *

Биш-алты бөгөлдө өйрәк бәпкәләреләй теҙелешеп кенә үтте байдаркалар. Төшкө ашҡа йылға каруаны иртәрәк туҡтаны, кистән «һатып алған ит»те беше-рәсәктәр. Дауытта – йоҡо ҡайғыһы. Николайҙа ла. Владимир ғына бирешмәй йөрөп ята. Вазифаһын онотмай, йәнәһе.

Байдаркаһын ҡаҙыҡсаға бәйләп, ҡушағын, йәғни кескәй караптағы ултырҙаш иптәшен ҡороға баҫтырып, әйберҙәрҙе ярға ташығас та, Дауыт бешмәгән муйыл күләгәһенә уны-быны түшәп, йоҡлап та китте. Ҡушағы кем ине һуң әле? Ул саҡта яңы модаға ингән дамский салбар, яҫы эшләпә кейгән, «рәхмәт», «зин-һар», «ғәфү ит» кеүек әҙәп һүҙенән төшмәгән тотанаҡлы, мөштөм генә ҡатын ине, шикелле. Йырҙағыса, «ҡарт та түгел, йәш түгел, самай һөйәр саҡ ҡына» йәштә булһа ла, егермеһе яңы тулған Дауыт уға итәғәтле энекәш ише булды, ә бына Доцент шаяртыбыраҡ гәпләште, ҡармаҡ һалырға ла маташты. Доцент үҙе Алевтинаны ултыртып йөрөттө – быныһы раҫ. Енес яғынан парһыҙ биш-алты ҡатын-ҡыҙ ишкән байдаркалар урталараҡ йөҙгәнен дә хәтерләй әле Дауыт. Бе-реһе, теремек кенәһе, иртәнсәк һайын гимнастика яһағаны, ҡырҡтан уҙған тип тә ишеткәйне… Дауыт үҙе йәш булғас, апаҡай өлкән күренгәндер, шәт. Ҡыҙыҡ, йәй көнө грамотаны сәйләгән-мәйләгәндә, Бәлхизә әбекәй уның йәшен белеш-кәс, кеткелдәп ҡуйғайны: «Алтмышты уҙһаң, атаңдан аҡыл һорамаҫһың, тигән боронғолар...»

…Дауыт бойороусан тауышҡа ҡыйынлыҡ менән уянды. Маңлайын ыуғылап, Николай тартҡылай, үҙе бармағын иренене терәп: «Т-с-с, курбаши, пошли куп-леную баранину жрать!» – тимәһенме.

Нәҡ шул табын хәтеренә ныҡ һеңгән. Боросло һурпала шырпы ҡабындай ике-өс ит киҫәге йөҙгән сөмәкәй тәрилкәһен ике ҡуллап тотоп, сирәмгә аяҡ са-лып ултырҙы. Тиҙ үк эҫерҙе тәрилкәһе, ахырҙа уны алдына ҡуйҙы. Халыҡ, күрсе, кинәнеп ашай. Йә ятып, йә ултырып, йә баҫып һурпа эсә, тамшанып танһыҡ ит сәйнәй, Николай менән шымбаҫар егет һоғаланып һөйәк мөнйөй. Доцент ҡына, аштан баш тартып, яңғыҙ-яры көрөшкәһенән кеҫәл ҡалаҡлай ине, юрамал һымаҡ,

Нэллиҙан тағы өҫтәтте лә Володя, Коля, Алялар эргәһенә яҡынайҙы. Дөмһәйеп һөйләне хәбәрен, яңаҡтарын ҡыҫып, тешен дә шығырлаттымы… Доцент ҡушаматы шунда тығылдымы үҙенә? Руссаға, мәйтәм, барымлы, ә бит Дауыт әллә ни таҙа һөйләшмәй ине, ни тиһәң дә, уҡымы ла ауылдың урта мәктәбе генә ине.

– Һис онотмайым: илленсе йылдамы... иламһырап күрше әбей инде. Баҡһаң, берҙән-бер һарығын бысаҡлағандар. Дезертирҙар йөрөгән элек тауҙарҙа, шуларҙыр. Һунарсы юлыға һарыҡ башына, урманда. Ҡолағын апҡайтып күрһәткәс, теленгән инәүе буйынса таный ҡарсыҡ. Әйтә, минеке, ти. Эй ҡарғаны күршекәй шул саҡ ҡасаҡтарҙы. Тамаҡтарына һөйәге ҡаҙалһын, тине. Һеҙ әле бөтәгеҙ ҙә үҙебеҙҙең мародерҙар урлап һуйған итте йыпырып ултыраһығыҙ. Бер ҙә һөйәк ҡаҙалмай тамағығыҙға. Ә бит ул һарыҡтың хужаһы һеҙгә барыбер, әбей һымағыраҡ, ләғнәт уҡыуы ихтимал. Их, һеҙ, уҡымышлы халыҡ… Аслыҡ йылы түгел дә хәҙер…

Кемдәрҙер табындан тайшанып, кемдәрҙер ҡаҙан эргәһенә аш һалдырырға килгән ерҙән буш тәрилкәһен һелкә-һелкә боролоп китте. Дауыт икенсе ҡалъяны сәйнәргә керешкәйне, унылы тамағына тығылғандай итте. Башҡорт башҡортҡа ҡаты иркен бит инде: «Во-о, берәүһенең тамағына һөйәк ҡаҙала», – тип юрый үсәне Раян Баянович һәм еңеүсе ҡиәфәтендә палаткаһы яғына ыңғайланы.

Әгәр Доцент шул саҡ: «Барығыҙ, ғәфү үтенеп, һарыҡтың хаҡын түләп килегеҙ», – тиһә, нишләр ине икән төн бурҙары? Моғайын, ҡушҡанды үтәрҙәр ине. Йәл, ғалимдың башына килмәгән былдай фекер, хәлбүки, уның гонаһлы ризыҡтан баш тартыуы – үҙе үк батырлыҡ ине, ғәҙеллек миҫалы ине.

Әлбиттә, ғәмәлдә команда икегә, ә юҡ, өскә бүленде. Тәүгеһендә – Доцент, минмин тип ҡысҡырмаһа ла, Дауыт, тағы арала анау иң өлкән ҡатынҡай уның яҡлы; икенсеһендә – инструктор Владимир етәкселегендә Николай, Алевтина, мәүеш егет, йәнә... Күпселек беҙ-беҙ тип күкрәк һуҡмай, мәгәр өҫтөнлөктөң үҙҙәре яғында икәнлеген тоя. Туҡта, аумаҡайҙар, иғланһыҙ көрәштең аҙағын аҫтыртын көтөүселәр ҙә булғандыр. Улары инде – фиғелдәре менән үҙҙәре һарыҡ. Өсөнсөһөндә – шулар, битарафтар.

«Тамағына ҡаҙалғыр…» Ошоно ишеткәс тә, Дауыт көйшәүҙән туҡтағайны, алҡымында үңәс төйөрөнә ҡуша харам ит төйөлгәндәй тойолдо. Булманы ашап, барманы еҫе дан һурпа ла. Егет һиҙҙермәй генә һыу буйына төшөп, тәрилкәһен сайған булды. Ҡайҙан белгән ҡарасман Доцент һыйҙың урландыҡ икәнен? Моғайын, шырлыҡта ҡомға яртылаш ҡына күмелгән һарыҡ башын шәйләгәндер. Күмгәс күмергә ине, их, был Николайҙы. Йыбытҡы! Ҡулайһыҙ! Етмәһә, Доцент кисә байдаркала иң алда йөҙөп барғанында ниңә тыйҙы һуң? Эйе, ҡысҡырҙы шул:

– Николай! Не делай этого! – тип һөрәнләне. Коля текә яр эргәһенән еҙһыу тәпәйҙәрен тилбер ишеп, йәнтәслим муйындарын һоноп ҡасып барыусы, ҡанаты апаруҡ үҫкән ҡаҙ себешенә ишкәге менән киҙәнгәненә һөрәнләне. Бәпкә лә сосайған, һыпырта ғына, мыҙылдымы, – дюралюмин ишкәк ҡыры муйынын өҙә йә башҡынаһын ялпаштырасаҡ . Ә-ә, Николай маҡтанып барҙы лаһа бәрән бурлығына, йәнәһе, уҙған заезда ул елле генә ҡаҙҙың муйынын борған. Әлбиттә, тәүҙә ишкәге менән елгәргән. Мародерлыҡ бит был, Доцент битәрләгәнсә...

Их, ҡайҙан ғына эйәрҙе кисә Дауыт шалопайҙарға! Әҙәмдән оят! Бигерәк тә Нэллиҙан – зифа талдай буйһыу ҡыҙҙан. Йәшкелт күҙҙәрен ҙур асып, бына кем икәнһең, тип бот сабырмы икән? Сөм-зәңгәр, йылҡылдап торған атлас блузкаһы харап килешә үҙенә. Уны ҡыҙый кистәрен генә кейә. Теге юлы, Дауыттың башын бәйләгәндә, киймәгәйне, шәт. Һорғолт футболка инеме өҫтөндә. Бәйләр

өсөн иңкәйгәндә үпкеһе килде уны егеттең, әйтерһең, быға тиклем ҡыҙҙар үпкәне бар берәүҙең. Түҙмәне, ярты кәүҙәһе палатка эсендә булғас, этем дә күрмәҫ типме, киренке ирендәре менән уның дымһыу аҫҡы иренен ҡымтыны. Тәүҙә икеһенең дә ирендәре ҡуша йәбешкәндәй тойолдо, ҡыҙ ҡарышмағас, хатта ки үҙе ләззәтле һурғандай ҙа иткәс, нишләһен – танһығы ҡанғансы үпте лә ҡуйҙы.

Кис Наилә тағы килде, Дауыт – яралы яңғыҙ егет, әллә ял иткән, әллә үҙен көтәүләгән палатҡаға. Күпте күргән, ел-ямғырға уңып һарғылт төҫкә ингән сымылдыҡҡа. Тағы үбештеләр, инде егет, әрһеҙләнеп, ҡулын тегенең түше тирәһендәрәк уйнатҡылағайны, әлеге лә баяғы йәшкелт-һоро күҙҙәр ҙур асылды, унан бигерәк – зәһәр осҡондар сәсте һәм Наиләнең нәҙекәй, оҙонса бармаҡтары нахалдың битен сәп иттереп кенә һыйпаны. Аҡыл алғандырмы, ошонан аҙаҡ физрукта журналистканы ҡосоу түгел, үбеү теләге лә һүрелде.

Уның ҡарауы, аҙаҡҡа табан йышыраҡ осраштылар, мәгәр осрашыуҙары дуҫтарса әңгәмәнән ары китмәне. Нимә тураһында гәпләштеләр һуң әле? Ҡыҙҙың һөйләгәндәре тотошлай тиерлек хәтеренән юйылған, ә бына үҙенең килде-китте лығырҙағы иҫтә...

Тансы-мансы ойошторҙолар яуынһыҙ эңерҙә. Туҡта, магнитофон да, баян йә гармун да юҡ ине, йырлап-мөңрәп өйрөлдөләр, тангола сөйрөлдөләр. Йырҙарҙа юлды ҡыйырға маташҡан ҡара бесәй, әлеге лә баяғы төньяҡ полюста осаһын ер күсәренә тызыған аҡ айыу йышыраҡ телгә алынды, буғай. Ябай ғына тағы бер йыр ярпыһы иҫендә ҡалған:

*Агидель, Агидель, Агиде-ель...*

Тағымы?.. Алевтинаның төнгө усаҡ эргәһендә, телен көрмәлдереп: «Утыр алы яндарыма... Син утырсан...» – тип лаулағаны бына әле, ҡырҡ йылдан һуң, йылмайтып ҡуйғандай.

Эйе, «аҡ вальс» иғлан ителеп, Наилә әйҙәгәс, тансаға төшкәйнеләр, үҙенең ҡыҙҙан бер илеләйме тәпәшерәк икәнен һиҙеү менән, Дауыт аяҡ осонараҡ баҫырға тырышты. Ҡыҙ, киреһенсә, кәүҙәһен аҫҡараҡ һалыуланымы, һәр хәлдә, тамаша ҡылыусылар уларҙың бейеүен харап оҡшатты. Хатта ки Николай, быларҙың буйына ишаралапмы: «Ё-моё! – тип мыҫҡылһыҙ ғына тел сарланы. – Какая равная пара!»

Вальс бөткәс, ситкәрәк атланылар. Ара-тирә аснәкәт серәкәйҙәрҙе сәпелдәтеп, дуҫтарса әңгәмә ҡорҙолар.

– Өс сантиметр үҫһәң икән, – тип йылмайҙы Наилә эскерһеҙ теләктән. Кәмһенмәне егет, сытайманы, бары тик ҡабат-ҡабат баш һелкте, ҡупайғандай итте.

– Бишәүгә, тиң... Бер ҡышта ун бишкә оҙонайғанды!

– Нисек?

Ҡыҫҡа ғына һөйләп бирҙе Дауыт, Наилә әллә тыңланы, әллә юҡ... Физрук булыуының сихәтеме, әллә фатир хужаһының иҫке генә мылтығын тотоп, тауҙан тауға артылып, ял һайын ҡуян йә сел баҫтырғанғамы – тиҙ һонторайыуын тойҙо. Кейем-фәләне ҡыҫҡарғандан ғына түгел, военкоматта табиптар яҙған ҡағыҙҙан да белде.

Турбазаға путевка артынан ингәндә, коридорҙа осратып, РОНО мөдире үҙ кабинетына әйҙәне. Таный түрә Дауытты, етмәһә, ҡыш аҙағында район гәзите фотоһүрәтен дә баҫтырып сығарғайны. Тора унда егетебеҙ саңғысы формаһында бәзерәйеп! Аҫтына һаран ғына мәғлүмәт сәпәгәндәр, йәнәһе, фәлән мәктәптең уҡытыусыһы үҙе лә, командаһы ла сәмле ярыштарҙа ал бирмәй.

– Әйҙәлеү, Салауатов энекәш, әйҙә, ҡайһылай һуйҙайып киткәнһең. Минең ауылға «физра»нан уҡытырға ебәрһәм, барырһыңмы көҙгә? Ҙур мәктәп,

райцентрға яҡын, спорт базаһы бай... Заочно уҡырһың, мәҫәлән, Өфөлә йә Магнитта. Кәләштәр ҙә күп унда, – тип ҡасандыр үҙе директор булған, хәҙер ҡустыһы етәкләгән мәктәпкә димләне, тик Дауыт өҙөп кенә яуап бирмәне. – Әле ни йомош менән индең?

– Путевка бирәләр. Байдарка менән сплав ойоштороған турбазаға.

– Байдарка? Моторлы кәмәме?

– Юҡ. – Баш сайҡаны Дауыт һәм беләктәре менән ишкәк ишеү хәрәкәттәрен яһаны.

– Ә-ә... Аңғарып йөрө, улайһа. Дауыт түгел, кинолағы Ихтиандр һымаҡ йөҙ. Ҡайтышлай инерһең, йәме. Бәлки, Б. ҡалаһына бер йыллыҡ «физра» уҡытыусылары курсына ебәртермен.

«Ҙур мәктәп», «курс» тәҡдиме ымһындырһа ла, Дауыт берәй вузда көндөҙ уҡырға теләге барлығын белдереп торманы. Аҙаҡ ишетте: эҙләткән уны РОНО мөдире. Энеһе лә ике-өс шылтыратҡан, тик егет үҙе улар менән бәйләнешкә инмәне.

* * *

Һалҡынса ел сыҡты. Йәшлек хәтирәләренән арынып, уҙаман йыуан киҫкәгә ултырҙы, «Нива» яғына баҡты. Тауыш-тын юҡ, тимәк, «лужковка»һын сикәһенә түшәп, Федорыч һаман йоҡлай. Йоҡлай бирһен. Тик быны ваҡыт ҡыҫа, етмәһә, асығыуы көсәйгәндәй. Ҡыҙыҡ, ул ҡаҡ палаткала кемдәр менән ҡуша йоҡлап йөрөнө һуң әле? Береһе – өндәшмәҫ егет. Тағы... Николай менәнме? Тәүҙә, бер йә ике төн генә, буғай. Ҡайҙалыр йөрөп, ҡайҙалыр, тип, Володя, Аля, Люба ише йылмаяҡтар менән көн дә кис усаҡ эргәһендә тамаҡ сылатып, иң аҙаҡ төнәй торғайны. Ҡайҙа ул саҡта егет менән ҡыҙҙарҙың аҙғындарса ҡыланыуы, йәғни бергә ҡуныуы...

...Наилгә йәнә ниҙер һөйләгән кеүек Дауыт. Теге, йомарлаҡ ҡар ҡыҙығын. Булыр һиңә ҡыҙыҡ, ыжый, яҙатайым кеше күҙен һытып ҡуйһа.

Былай булды. Апрель аҙағы. Дауыт асыҡ һауа – дымһыу спорт майҙансығында түгел – ҡарҙан әрселгән күләүек ярында күнегеү үткәрҙе. Һигеҙенселә уҡығандар апаруҡ ҙур, уны-быны аңлай. Шаярыуға ла шәптәр. Теҙелгән сафты таратып, мәктәп яғына ҡайтарып ебәрҙе лә, физрук үҙе саңғы келәтен ҡарап сығырға йүнәлде. Ҡапыл дәррәү көлөүгә әйләнеп ҡараһа,бә-әй,кәүҙәгә иң елле малай ҡураныс ҡына ҡыҙҙы ҡыуаҡ араһында иреп бөтмәгән ҡар өйөмөнә әллә күтәреп ултыртҡан, әллә бырғытҡан, үҙе эсен тотоп иһаһайлай, имеш. Дауыт сабып килгән ыңғай теҙелергә ҡушты, синыф теҙелеү менән, әҙ-мәҙ нотоҡ уҡып алды, үҙе лә һиҙмәҫтән усына ҡар йомарланы. Һөйләнсек малайҙарҙың береһе юрамал ҡотҡо һалды.

– Бәрегеҙ, ағай, бәрегеҙ, хулиган бит ул, ҡыҙҙарҙы гелән йәберләй, – тип эргәһендәге тиктормаҫ иптәшен биленән алғараҡ этәрҙе.

– Бәрһәм, ҡаҡ маңлайына сәпәйем инде, – тип үҫмерҙәр ыңғайына Дауыт та малайланды. Әйтәгүр, үҙенең дә малайлыҡтан яңы сыҡҡан сағы.

– Тондороғоҙ ҡарығыҙ менән, ағай, шул былағайға, – тип йылмаяҡ ҡыҙҙар ҙа ажарланды. – Аҡыл алыр әҙерәк, исмаһам.

Һәм... елгәрҙе лә ҡуйҙы физрук усындағы еүеш йомарлаҡты. Әмәлгә таянғандай, уныһы шап – тиктормаҫтың ҡаҡ маңлайына. Ярай ҙа, күҙенә-фәлән теймәгән. Аптыраны тәүҙә Дауыт, ағарынды. Кем уйлаған тейер тип? Сирылып көләмһерәгәйне, теге шуҡтың да ауыҙы йырылды. Шунан ни, күмәкләп көлөштөләр. Сәмәрә шунда Дауытҡа нисектер һоҡланыу ҡатыш наҙ менән ҡараны, нәзәкәтле йылмайғандай итте.

Ай-һай, Нэллиға ошо хаҡта ләпелдәүҙән ни фәтеүә? Теге яндырай малай

ҡарға батырған ҡыҙҙың хәҙер ҡыйғас ҡашлы, муйыл күҙле матурҡай булып буй еткерә яҙғанын әйтергә теләнеме? Юҡ, юҡ, һөйләмәгәндер, ҡыҙҙар, ғәҙәттә, икенсе ҡыҙҙы ҡупайтып һөйләгәнде өнәп бөтмәй.

* * *

Дауыт Салауатов тәнен һелкеп-яҙып ҡалҡынды киҫкәнән. Быуындары һыҙлаштыра. Янғантауға барғанда килешер ине. Ҡиммәтләнә бара шул хәҙер тормош. Ашантыһы ла, кейем-һалымы ла, шифаханаһы ла. Йыйынтыҡ аҡсаһы етһә, арыуҙан машина, мәҫәлән,немецтың «Опель» тигәнен алыр ине. Ана, цехташтары, ярышҡан һымаҡ, береһенән-береһе ҡупшыраҡ вә затлыраҡ иномаркалар ала, хөртәмеш машина эйәләрен «колхозник» тип хурлауҙан да тартынмайҙар. Бынан кире бил ҡайышын нығыраҡ тартырға тура килер. Хаҡлы ялға китергә йәше етһә лә, әлдә Сәмәрәһе, нисәмә йыл инде бер урында, ташҡа үлсәйем генә хаҡҡа, баш баҫып эшләүен белә. Интернатлы мәктәп медпунктында эшләй ул. Маҡтаулы эшләй.

Багажникты шым ғына асып, Федорычтың елле генә берәй алмаһын умыртҡанда? Шым ғына… Ҡалай насар һүҙ? Шыпырт ҡына урлағайнылар һарыҡты, тик выжданында шомло юшҡыны һаман быҫҡый ҙаһа.

Бәй-бәй, ауылда үҫкән сағында фәһемле һүҙҙәрҙе әҙ ишеттеме ни ололар ауыҙынан? Ишетте, йыш ишетте, ләкин күптәре бер ҡолағынан ингән, икенсеһенән сыҡҡан, күрәһең. Унан килеп, йәшлек йылдарында мәҡәл-әйтемдәргә әһәмиәт биреп тә еткермәйһең, еткергән хәлдә лә – аңлап бөтмәйһең. Шулайҙыр, юғиһә, аралашыуҙарына нисә генә йыл, унда ла йәйҙәрен баҡсала ғына, эш-көш араһында ғына бит әле, әммә күрше Бәлхизә ҡарсыҡтың һүҙҙәрендә бүҫкәрмәҫ фәһем бар ул,буйтым бар.

Бер саҡ гелән һуҡмыш, батшаһыҙ йөрөгән баҡса ҡарауылсыһына эйәреп, кейәүеме, улымы балыҡҡа олаҡҡайны, ҡайтмай ҙа ҡайтмай теге. Әбекәйҙең тыҡрыҡта ҡулын ҡашына терәп, һөйләнеп торғанын, дөрөҫөрәге, эргәһендә юҡ кешене әрләгәнен ишетте Дауыт. Сүп үртәгәндә ишетте: «Иҫәр менән бал ашағансы, аҡыллы менән таш ташы…» Хатта Сәмәрәһе абайлап, баш сайҡап ҡуйҙы: «Әбейүшкәлә икән мәҡәл тоҡсайы!» Мәҡәл һиңә, халыҡ педагогикаһының үҙе! Теге саҡта ошо һүҙҙе шыбырлаһасы берәйһе Дауыттың ҡолағына – кәнде әллә иҫәрләнеп, әллә һиңмайланып Николай ише әтрәгәләмдәргә эйәрер алдынан.

Николай ни – бошмаҫ бәндә, нахал зат. Егәрле генә ине бит әле, суҡынмыш, үҙе. Палатка ҡорошорға йә төрөшөргә, дежурҙарға һыу, утын ташышырға, байдарка шөрөптәрен борошорға әҙер генә , ҡулдары ла тәпей кеүек. Музейҙа эшләйем, тигәйнеме шул… Столяр-маҙарҙан ары китмәгәндер, башҡаларҙан ғилем ҡеүәһе лә, мәҙәни кимәле лә ҡайтышыраҡ ине. Хәйер, кешенең холҡо юлда һынала, тиһәләр ҙә, походта кемдең кем икәнен ҡапылғара асыҡлап ҡара – анһат түгел был.

…Кеҫәһен ҡабартырҙай булып мындырлатып, мобилкаһы тауышланды. Сәмәрәһе шылтырата. Баҡсанан. «Юлың уңдымы?» тип ҡыҙыҡһынып, «Эйе» тигәнде ишеткәс, ҡәҙимге генә белеште:

– Ҡасан ҡайтаһығыҙ?

– Эңерҙә…

Көтәсәк, тауыҡ бешереп көтәсәк Сәмәрә.

Тауыҡ төшөнә тары инә, тигән һымаҡ, танауына һурпа еҫе бәрелгәндәй, йә инде. Юҡ, асыҡһа ла бирешмәҫ. Бер уйлаһаң, ныҡлап асыҡҡаны булдымы һуң Дауыттың үҙ ғүмерендә? Булғыланы… Студент йылдарында. Әҙ-мәҙ – бала сағында... Унда ла әсәһе аш яраштырып өлгөрмәгән мәлдәрҙә.

Һо-о, бер тапҡыр уҡытыусы сағында һуң! Эйе, саңғыһына баҫып, март урталарында ҡорҙар гөрләгән алыҫ биләнгә һыпыртты. Буран сыҡты, һунар ҡайғыһы китте. Ҡайтышлай аҙашып, йонсоп, таңға табан ярты яҡ тау ашаһындағы электрһыҙ утарға барып юлыҡты. Эт өрҙөрөп, һуҡыр шәм ялпылдаған иң иҫке өй ҡапҡаһын шаҡыны. Һаҡалтай лесник йәшәй икән хәзәйкәһе менән. Балауыҙ фитәһен көрөшкәгә онтаҡлап, өҫтөнә араҡы ҡойҙо ла теге, тимер мейес өҫтөндә апаруҡ тотҡас, эҫе килеш ҡыҫтап эсерҙе, шунан толобон ябып, йоҡларға һалды. Һин дә мин шәбәйеп килеп торҙо – вәт прополистың шифаһы. Аҙаҡ һаҡалтай ҡарт, атын егеп, оҙатып ҡуйҙы. Ауылда юғалтҡайнылар үҙен, саңғы юлынан эҙләргә йыйынғайнылар. Тыуған ауылынан, утыҙ саҡрымдан, балтаға оҫта сырхау атаһы, орденлы ағаһы машина яллап ҡыуғандар. Шылтыратҡастар ни, бер-бер Дауыт ҡайтманымы тип… Валлаһи, ошо ваҡиғаны хикәйәләне Наиләгә. Ә ниңә? Һорашҡайны ҡыҙый, ҡасан эсергә өйрәндең, тип. Сөнки кемдеңдер тыуған көнөн үткәргәндә Дауыт та, эргәһендә ултырған Раян Баяновичтан күрепме, үҙенә эләккән аяҡты – стакан төбөндәге ике иләләй хәмерҙе сытаймай ғына ғорлаһына елгәргәйне шул, елгәргәйне.

Донъяға билдәле мотоуҙышсы Ҡадиров… менән Өфөгә һалҡын самолетта йәнәш осҡанды һәммәһенә лә сурытты, шикелле.

…Бер яурынына әйберҙән туптайған спорт сумкаһын, икенсеһенә «Сокол»ын аҫып, ярайһы аулаҡ Баймаҡ аэропортында йөрөп ятҡанда, йоҡа таҡтанан әтмәләнгән йәйге буфетта фырт кейенгән өс ирекәйҙе тап итте. Бәй, берәүһе – ҡаларайондың спорт комитеты рәйесе, икенсеһе – мәҙәниәт бүлеге начальнигы ләһә. Тәүгеһе, Дауытты эргәһенә яҡынайтып, ике ҡуллап күреште, һүҙ ҡушты. Ни генә тимә, чемпион бит Дауыт, етмәһә, арыу ғына физрук. Кем белә, үҙен берәй яры райком мөхитенә үрләтһәләр, Салауатовты комитет тирәһенә ылыҡтырырға мөмкин. Уны-быны гәпләшмәнеләр, физкультура әһеле Дауытты юлдаштарына ла таныштырҙы. Әллә – киреһенсә?

– Ете тапҡыр донъя чемпионы Ғабдрахман ағай үҙе инде. – Артабан килештереп кенә мәрәкәләп ташланы. – Дауыт ҡустыбыҙ әлегә ни бары – район чемпионы… Физрук...

Харап мөләйем, асыҡ йөҙлө, илтифат менән һаран ғына йылмая мәшһүр спортсы. Бөйөк, әммә кәүҙәгә-буйға бейек түгел, артыҡ ҡураныс та тимәҫһең, еңел категориялағы көрәшсе ишерәк.

Район чиновниктары данлы спортсыны Өфөгә оҙаталар икән. Самолетта урындары йәнәш тура килде. Өфө аэропортында яҡты, әммә моңһоуыраҡ сырайлы Ҡадиров ағай, Дауытҡа көтөргә ҡушып, тимер селтәрле стоянкаға ҡуйылған «Волга»һын автобус туҡталышына алып сыҡты һәм, егетебеҙҙе йәнәшенә ултыртып, офоҡ һырт өҫтөн иңләп-йәйрәп ятҡан баш ҡалаға табан елдерҙе. Дуҫлыҡ монументына еткәс, «Волга»һынан төшөп, Дауыттың путевкаһындағы адресҡа күҙ һалғас та йылы итеп ҡул биреп хушлашты. Иҫке Өфө тауына табан эйәген иҙәп, әллә автобуста, әллә троллейбуста барыу юлын өйрәтте, ҡайҙалыр ашығыуын да белдереп, турбазаға тиклем илтә алмағанға ғәфү үтенде. Ана бит, хәтерендә ләһә…

Еңелмәҫ мотоуҙышсы менән ошолай осрашыуын Николайҙарға һөйләгәйне, улары – әллә ысын, әллә юрый – ышанмаған булдылар бит әле. Ә мир араһында Нэлли, милләттәштәре өсөн Наилә атлы йөрөгән һонтор ҡыҙ һүҙһеҙ ышанды. Хәбәрсе булараҡ, уға данлы замандаштар күберәк осрайҙыр әле.

Дауыт, оҙаҡ ҡына йылдар үткәс, әлеге лә баяғы элекке райсовет чиновнигын осратып, асығын белде: атаҡлы спортсы ул йәйҙә филармонияла эшләгән, тиме. Эйе, ҡатыны – талантлы йырсы бригадаһында гастролдәр ойоштороу буйынса яуаплы булған.

Былары мөһим түгел, әһәмиәтһеҙ, осраҡлы ваҡиғаларҙы оноторға ла мөмкин. Иң мөһиме: ҡайҙа, ҡасан түңкәрелде һуң әле Доценттың байдаркаһы? Яңылышҡан, бынауҙағы Шарламала түгел, түгел. Уныһы бит поход аҙағындараҡ булды. Ҡыҫҡа ғына, әммә тәрән, көслө шаршы ине ул ерҙә. Аръяҡлап, һыуға йәйекләнеп-сатырланып, өйкөм-өйкөм талдар үҫә ине. Ә бында – ереклек, ҡара еректәр үҫә, талдар үтә һирәк.

Ниңә түңкәрелде – юҡсы, түңкәрелмәне, кәшкәндәне генә Алевтина менән Раян ултырған байдарка. Улай уҡ ҡурҡыныс та түгел ине бит шаршы, өҫтәүенә, һис кем Доцентты ла, Аляны ла йыбытҡы, ибәтәйһеҙ тимәҫ. Һәм бына әле, нисәмә йылдар уҙғас, күпме һыуҙар аҡҡас, Дауыттың хәтере яңырып, шиге таралғандай, ә юҡ, киреһенсә, артҡандай итте: Аля юрамал ҡоламанымы байдарканан? Әгәр раҫ икән, ай-һай мәкерле, ай-һай аҫтыртын, ай-һай дыуамал, улай ғынамы, апаруҡ ҡыйыу аҙым яһаған. Шикләнерһең дә: түңкәреләә яҙған байдарканан ниңәлер Алевтина ғына һыпырылып ауып төшә. Ғалимдың дәрәжәһен мыҫҡыллап, сарбайлап, тупаҫ ҡысҡырынғайны әле, етмәһә: «Козел черномазый! Доцент неуклюжий!» Ә Раян Даянович урынында ҡала. Биш-алты метрҙай араны яр һала-һала ағып өлгөргән ҡатынҡайға һәләк тиҙ, алдан килешкән кеүек, Николай ярҙамға килде. Ибәтәйһеҙерәк егеттең һыу билдән генә ерҙә байдаркаһынан ырғып, сәрелдәкте йәһәт кенә яр яғына өҫтөрәүен… шарламаны имен-аман уҙған Дауыт ҡысҡырыш ишетелеү менән абайланы лаһа. Абайлау менән байдаркаһын төбө ҡомға шығырлағансы ярға яҡты ла өҫкә йүгерҙе – тотош кейеменән, күперенке бөҙрә башынан һыу шыбырҙап аҡҡан Алевтинаны уңарсы Николай ҡырсынға баҫтырғайны.

Тотош команда бер сәғәткә туҡтаны: берәүҙәр кейем алмаштырҙы, икенселәр Николайҙы маҡтаны, өсөнсөләр Раянды һүкте. Йәнәһе, ышан иҫереккә, палаткаһында япа-яңғыҙ эсеп ултырғанын күргәндәр. Төш мәлендә... Ни хәл итәһең, хәмергә йомшаҡлығы бар ғалимдың, бар, юҡҡа ғына Дауыт: «Ни сыҡмаһа башҡорттан сыға. Кеше араһында һуҡмыш йөрөмәһә!» – тип әсенмәҫ ине. Ана, упсы ытырғанып ҡуйҙы әлеге уйынан.

Аля, Алевтина… Йәшерәк сағында пионервожатыйлыҡ тәжрибәһен мул туплағандырмы, алсаҡ ҡатынҡай үҙен байдаркалар каруанының башлығылай тотто. Викториналар, уйындар ойошторҙо, еңгәндәргә өрмәле шар, һабын, тараҡ ише ваҡ-төйәк өләште. Бер мәл таңға табан шыйыҡ томан пәрҙәһе аша йоҡоһо осмаған Дауыт уның Владимир сатырынан дүртаяҡлап… әллә инеп, әллә сығып барғанын шәйләне. Шухыр-мухырмы? Булһын да, ти, унда Салауатовтың ни ҡыҫылышы?

Әлеге һорауҙан уңайһыҙланған кешеләй, Дауыт өшөмһөрәгән яңағын һыйпаҡларға кереште. Шиктәреңдең, фараздарыңдың осона сыҡһаң сыҡ тиҙерәк, иптәш Салауатов, юғиһә, бынан да уңайлыраҡ мәл ҡабат тәтемәҫ. Әйҙә, уйҙар ишкәген кирелеберәк иш, хәтирәләр байдаркаһы Өфөгә табан уҡтай атлыҡһын.

…Бөгөл һайын Эҫем киңәйә, сөмәйә барғандай. Бына Инйәр тамағы – гүйә ике йылға ҡосаҡлашып ҡушыла. Дарьялай Ағиҙелгә төштөләр, баржа-фәләндәр артынса күтәрелгән тулҡындарҙың байдаркаларҙы ярайһы ныҡ бәүелткәне хәтерҙә. Ә командалары Ағиҙел буйлап Ҡариҙел тамағына – тау үңерендәге турбаза тапҡырына уҡ еттеме, юҡмы, быны Дауыт, валлаһи, хәтерләмәй. Ҡайҙалыр яр башынан машина килеп алдымы, әлләсе…

Владимирҙың һөмһөрө ҡойолоп йөрөнө. Уның ярандарына, ҡыҫҡаһы, уға битараф булмаған ярты командаға – тимәк, егермеләп турисҡа – яу аҫкан Раян Баяновичта ла әллә ни еңеүсе сырайы беленмәй. Ул базаға ҡайтыу менән килешле пинжәк, галстуклы сылт һары күлдәк кейеп, һыны килбәтле ҡатынын эйәртеп,

ҡыҙы менән улын тәтелдәтеп ашханала туҡланды, урман араһын сыбарлаған иҫәпһеҙ һуҡмаҡтарҙан йөрөнө, кинозалға ингеләне. Ниндәйҙер ығы-зығы булған да кеүек командала, барыһына ла күҙ-колаҡ булырға тимәгән инде.

Путевка мөҙҙәтенең ахыры йәкшәмбелә тамамланырға тейеш ине. Шәмбелә үк хушлашып ҡайтыусылар табылды. Дауыт ял көнө аэропортҡа барып, килгәндәге кеүек, бөжләй-бөжләй «кукурузник»та һауанан һыпыртмаҡсы. Көндәр аяҙ тора, моғайын, икенсе рейсҡа билет барҙыр. Юллыҡ аҡсаһы таман, тәләфләп кенә ҡуймаһын берүк.

Аҡса тигәндәй, Люда йомала уҡ ҡағыҙ остоғо тотоп, йән башына икешәр һум йыйып йөрөнө. Иғлан да тиҙ таралды: шәмбелә хушлашыу мәжлесе, тансымансы һ.б. Дауыт иһә иртәнге тамаҡтан уҡ күп ҡатлы таш өйҙәре һерәйгән «ысын Өфө»гә һыпырткайны. Ысын ҡала Һыуталаҡ аръяғындағы убанан, дөрөҫөрәге, шундағы монументтан башлана. Һорашып-белешеп, егет тәүҙә телеүҙәккә яҡын университет – Наилә ситтән тороп уҡыған вуз тирәһендә уралды, аҙаҡ techинституtҡа... 

Йәне көйөп үрһәләнгән Дауыт эстән бикләнеп ятты: бүстәккә бимазаламай торороҙ әле. Рөхсәтһеҙ яҡын да юламаһындар, бүлмә хужаһы арыған, кәйефе лә килде-киттеле...

Йоҡомһорай башлағайны, ишекте кемдер итәғәтле генә шаҡыны. Асты егет – үҙе менән байдаркала йөрөгән мадам. Быныһы ла апаруҡ ҡупшыланған, биҙәнгән, ҡапылғара танымаҫһың да.

– Дауыт, ҡәҙерлем, хушлашырға индем. Рәхмәт, байдаркала табанымды ла сылатмай йөрөттөң. Аллочканы ауҙарған өсөн, ана, Раян… Баян… өҫтөнән ялыу яҙып, ҡултамға йыялар. Институт парткомына. Коммунист икән. Имзамды һалманым, шаһит була алмайым, тинем. Коллектив пасквиль бит! Намыҫлы, зирәк күренәһең, уҡырға тырыш. Ҡырмыҫҡалыға юл төшһә, эргәмә инеп сыҡ, район китапханаһында эшләйем.

– Туҡталышҡаса оҙатып барайым һеҙҙе?

– Борсолма, апҡайтырға ирем машина тапҡан.

Бая Дауыт артынса база ҡапҡаһы алдына шыйыҡ зәңгәр төҫтәге «Запорожец» туҡталғайны, шуны әйтәлер нәзәкәтле бармаҡ остарын һелкеп һаубуллашҡан мадам. Коллектив ялыу… Ҡултамғаһын ҡуймаған… Ә ниңә Дауытҡа мөрәжәғәт итмәйҙәр? Әҙәмгә һанамайҙармы? Ышанмайҙармы? Ихтимал…

Ишекте нығыраҡ шаҡынылар. Кем килгәнен асыҡламайса һис асылмаясаҡ лапаҡ казарманы хәтерләткән турбазаның йоҡа ишеге, белдеш! Коридорҙан шыш-быш һарҡыла, әһә:

– Яңыраҡ ҡына комнатала ине… – быныһы Нэлли-Наилә.

– Душта йөрөмәйме? – Николай булыр. Тауышы ҡоро, борсоулы сыға. Душ барлығын белмәй ҙә ине Дауыт. Эшләйме икән бөгөн?

– Банкетҡа килгәндә подпись ҡылыр әле, бында – ун, юҡ, ун бер подпись бар, етер ул… – тине шырҡанараҡ холоҡло, гелән һары лампаслы көрән трикола йөрөгән кәүҙәгә төйөрөм, гимнастарса һығылмалы Люба. Командала иң йәш туристка, буғай, шаҡы-шоҡоно йырларға, фокстрот, твист кеүек тыйылған-тыйылмаған бейеүҙәрҙә маймылланырға ғына әҙер. Сиған һымағыраҡ ҡарасман Любаша әле үк ашҡына ашхана залына. – Башлайыҡ тиҙерәк, килмәй икән – к черту!

«Үҙегеҙ к черту!» – Дауыт ишектән ситкәрәк тайшанды, зиһенендә шик-шөбһә ҡайнашты. Мародерҙар шайкаһын фашларға теләгән өсөн ҡырҡ атанан тыуған ҡырҡ әтрәгәләм – күбеһе шыйылдаҡ ҡатын-ҡыҙ – ғәҙел холоҡло, тура һүҙле Раян атлы мөғәллим башҡортҡа ҡаршы көрәшәме? Подпись ҡылдыниһә – Дауыт та әтрәгәләм, ул – ун икенсе провокатор, ә юҡ, – хыянатсы, ошаҡсы буласаҡ! Барса низағ һарыҡ башынан башланды… Донъяла иң оло гонаһ – бурлыҡ, йәнә юҡты бар итеп ғәйбәт һөйләү, күрмәгән ваҡиғаға шаһит булыу. Күрҙе ләһә Дауыт байдарканың һайҙа ғына ҡырын янтайыуын. Алевтина яр һалғас, уны ҡотҡарам тип, Раян Баянович яйһыҙыраҡ ырғығанда түңкәрелде ләһә байдарка… Әллә комсомолец Дауыт белмәгән башҡа яҙыҡтары бармы ғалим-педагогтың? Һо-о, парткомға, тиҙәр. Ишеткәне бар: коммунистар ялыу тикшергәндә бер-береһен ҡул менән түгел, һүҙ менән бөтөрөргә әүәҫ… К черту, үҙегеҙ әйтмешләй. Тоттормаҫ һеҙгә ҡойроғон ун икенсе шаһит! Туҡта, душ ҡойоноу зыян итмәҫ.

Дауыт гәзиткә төрөлгән таҫтамал-фәләнен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып оҙон коридорҙан уҙғанда, ҡаршыһына Раян Баянович осраны. Тәмәкене күп тартыуҙанмы, күҙе йәшкәҙәгән кеүек.

– Ҡайҙа саптың, спортсмен?

– Душҡа йыйындым, әгәр…

– Эшләй, мин баяраҡ йыуындым.Тәнең таҙарһын… Ә күңел керен кем йыуыр?

– Ниңә улай тиһең, ағай? Мин прощальныйға бармайым… Падпис та итмәнем. Ней, падлис булғы килмәй. – Дауыт, үҙе лә һиҙмәҫтән «подпись», «подлец» һүҙҙәрен ауылсараҡ ысҡындырҙы, быны аңғарған Баяновичтың сырайы асылғандай тойолдо.

– Маладис, падлис малай, маладис. Бар, бар, йыуын да беҙгә ин, …се семейный бүлмәгә, йәме. – Эйе йә юҡ тигәнде лә көтмәй, сәғәтенә секерәйгәндә ғалим үҙ алдына һөйләнеп ҡалды. – Мишәр еңгәнде күрерһең. Бер сәғәттән көтәм, разговор ҙа бар…

## VI

Дауыт ҡаулан, кипкән япраҡ ҡыштырлатып, ары-бире йөрөштөрҙө, мобилкаһын бимпелдәтеп ваҡытты самаланы: бишенсе биш минут. Ҡара көҙҙә көндәр ҡыҫҡа, алтынсы яртыларҙан донъяны ҡараңғылыҡ ялмаясаҡ. Ниңә уянмай әле Федорыч? Моғайын, бер сәркә менән генә хушһынмай, икене һелтәгәндер. «Дальневосточный служагы» ла ай-вайына ҡуймағандыр. Икене һелтәһә, йоҡоһон ике сәғәткә тултырһын әйҙә. Саф һауа, аяҙ һиллеге, бимазалаусы юҡ. Ҡыш алдынан серем итеп кенә алайым, тигәндәй, гүйә, тәбиғәт үҙе лә йоҡомһорай кеүек.

…Баяғы уйҙары ла таралып бөтмәгәйне, өҫтәүенә, ашағыһы килеү Дауыт уҙаманға ҡырҡ йыл элекке ике кешелек кенә табынды хәтерләтте. Шулай, душтан һуң егет ул осор осһоҙ һәм модалы һаналған, селтәрле инеме, сөм-ҡара капрон күлдәген кейеп ебәреүгә, Раян Баянович әйткән ваҡыт та тулды.

Скипидар еҫе аңҡыған бүлмәне дүрт йән төйәкләгән: Раян менән ҡатыны, ете йәшлек яшыҡ ҡыҙыҡай – танауы хас атаһыныҡы һәм алпан-толпан атлаған итләс кенә энекәше. Аҡмаслығы, сәсенең бөҙрәлеге менән әсәһенә тартым малай эй башбирмәҫ ҡылана – апайы кейендерә алмай аҙаплана. Атаһы бармаҡ янағас ҡына ыҡҡа килеп, Дауыт яғына алан-йолан ҡаранды. Атайым һине алма бөйрөгө, кәтлит менән һыйламаҡсы, кем әле һин, ағаҡай, тип тә уйлағандыр.

– Ошо болғаҡтарҙан ҡасып, диссертациянан һуң ал-ял алайым тип байдарочниктар командаһына яҙылдым. Вәт бит… Утыҙ иҫәр әзмәүерҙәй инструктор-мародерға эйәреп йөрөсө. Врач – юҡ, повар – юҡ, завхоз – ашамһаҡ Алевтина.

Ләм-мим өндәшмәгән егет иғтибар итте: балалары урыҫса тәтелдәй, ағай башҡортса ләпелдәй, хәләлбикәһе татарсараҡ сөсөлдәй. Мишәркәләр телгә зәһәр, кешегә ҡырыҫ, һаран була, тиҙәр, бер ҙә ундайға оҡшамағансы. Еңгәй хәрап һөймәлекле, күндәм, ике алтын тешен йылтанлатып, иренең ыңғайына ғына һыпыра.

Ғаиләһе шар ҙа мар прогулкаға киткәс, хужа тумбочкаһынан яртылыҡ «Московская» сығарҙы, хәмере аялай бүҫкәргәйне.

– Тә-әк, бында «ложка» юҡ, өйҙән әпкилгән сынаяҡ өҫтөнә ҡоям, – тип килдекиттерәк һөйләнде табын хужаһы. – Һиңә, ҡустым, белеү зыян итмәҫ: төрмәлә рүмкәне «ложка» тиҙәр.

– Уҫал шаяртаһығыҙ… – Егет тә әрһеҙләнде. – Һейгәк бәрән өсөн төрмәгә тыҡмаҫтар!

– Мин шаяртам да ул, ә бына «дело»ғыҙ ниндәй судьяға эләгер бит. Берәү йә йөҙәр тәңкә штраф һалыр, йә ун биш суткы тотор, ә өсөнсөһө тотто-сәпәне берәр йылды, «за групповое воровство» тигән статья буйынса. Мародерҙарҙы фронтта строй алдында атып йыҡҡандар, белдеш?

– Атайым һөйләгәйне…

– Фронтовик улымы ни әле һин? Ә минеке ҡырҡ дүрттә китә, ҡырҡ биштә, Берлинға етәрәк, ауа… Доброволец! Һин тыуғанды белмәгәндер, белһә, үлмәҫ

ине, тип илаған була әсәм меҫкен әле лә... – Раян Баяновичтың сәгер күҙ алмаһында гәлсәр саҡтылар уйнаҡланы. – Ҡайтам оҙаҡламай ауылға. Бесән сабырға, кәбән ҡойорға әүәҫ мин, яңғыҙ йәшәгән һалдаткалар йәл, уларҙың күбәләрен дә йыбанмай һалам. Маҡтанмайым, шуға беләктәрем дә ҡатҡыл. Әйҙә, кәгәйек залпым. Һыуыҡ ине анау Ҡояштаумы, Ҡыуыштаумы тигән мәмерйәлә... Билем һыҙлаштыра, еңгәйеңдән скипидар ышҡытам шуға.

Эйе, урман-тау һыҙатына ингәс, команда ярты көнгә махсус туҡтаны, һәм телəгәндәр мәмерйәгә экскурсия яһаны. Хикмәтле уныһы: тышынан шишмә күҙәүләнә һәм эскә ағып инә лә, ярты километрҙай барғас, ҡая ҡуйынына инеп юғала.

– Ниңә эсмәйһең? Үпкәләнеңме, әллә шыртланыңмы? Иҫәр, һарыҡ һынлы һарыҡ урларға шыртламай барғанһың! – Раян Баянович көйшәнә-көйшәнә бармаҡ яны. – Урлағас, йәтешләп һуймағанһығыҙ ҙа. Фу-у, боҙоҡлоҡ йә яуызлыҡ күрһәм, хәсислек, әшәкелек хаҡында ишетһәм, йәшәгеләр килмәй китә хатта.

– Салып ҡына бирҙем, һорағастар... – Йәшәү ҡыҙығы тураһындағы фәлсәфә егеткә бигүк барып етмәне.

– Ике ботонан аҫып, тиреһен йоҙроҡ менән һыҙырып ҡына... Йөрәк-бауырын ҡурып, башы-тояғын өтөп, эсәк-ҡарынын бешәкләп... Ә тултырмаһы – батшалар ашы бит! – Доценттың мал һуйырға ла оһоло барҙыр, шәт. – Салған, берәү... Бурҙар иң тәүҙә харам малдың башын күмә... Ә һеҙ арлы-бирле сытыр өйгәнһегеҙ ҙә... Әлдә ҡарыны бүҫелмәгән, валлаһи, еҫе ...овкаға етер ине. Ысыҡтан сирҡандым, әлеге билде лә уйланым, ...овкаға барып, хужаһын табып, шайкағыҙҙы рисуай итергә кәрәккән. Башҡорт аҡылы төштән һуң! Позор, ғәрлек – хәҙер шул ҡәбәхәт шайка минең өҫтән коллектив кляуза әҙерләй. Кисә база директорына индем, теге икәүҙе – Володька менән Колькаһы саҡыртып, шыйырҙым ғына. Өндәшмәй директор, кәнишне, базаның яманаты сыға лаһа. Тегеләр алдаша белмәй алдаша. Тәүҙә, йәнәһе, итте һатып ала булалар. Өс килолай. Юлда ҡанһыраған йәш һарыҡ осрай – шуны йәлләп һуялар. Запросто ышанырға мөмкин был әкиәткә. Ә хәҙер яҙғандар: имеш тәһә, мин көн дә лаяҡыл, етмәһә, завхозмы, старостамы Алевтинаны батыра яҙғанмын. Өҫтәүенә, кис һайын мин һорай булам, ул бирмәй була. Нимә һорағанды аңлайһыңмы?

– Әлләсе...

Табында үҙен артыҡ ҡашыҡ һанаған егеткә ҡарап, Раян иренен бүлтәйтеп көлөмһөрәне.

– Йәшһең шул, аңраһың.

– Аңланым да ул... Шуға подпись та итмәнем, уҡыманым да. Ә ҡайҙан белдегеҙ ялыу әтмәләүҙәрен?

– Напарницаңды тап иттем иртәнсәк. Хәтерләйһеңме, мин, урландыҡ, харам ит тигәс, аҡланда күмәкләп ашағанда шул ҡатын: «Ужас!» – тип тәрилкәһен түкте. Бирән Алевтина эргәһендә ултыра ине.

– Ә-ә... – Дауыттың тешен ҡом тызығандай тойолдо, күҙ алдына бая ғына үҙе менән хушлашып киткән Ҡырмыҫҡалы китапханасыһы баҫты. – Эйе. Миңә лә инде... Форточканы әҙерәк кенә асайыммы, ағай?

– Үҙем асам, ә һин етешеп ултыр. – Ҡунағы һөйәк һаплы сәнскене тотоп ҡына ҡараны ла сыңҡылдатмай ғына кире өҫтәлгә һалды, хужа уфтанып алды. – Шарлама күңелде шыртлата... Дә-ә, гонаһлы шарлама икән...

Форточканы яртылаш асыу менән ашхана яғынан күңел елкендергес музыка һаркылды. Берауыҡтан Доцент, студенттарына лекция уҡығандай тигеҙ тонда һөйләй-һөйләй, былай ҙа ҡыҫынҡы бүлмәне тарайтып, ары-бире йөрөргә кереште.

– Ҡустым, эйелгән башты ҡылыс сапмай – һиңә справка, ә юҡ, пояснительный яҙыу хәйерле. Район милицияһымы, прокурор исеменәме. «Чистосердечное признание» тип атала ул, «явка с повинной»ға бәрәбәр. Беләм, сөнки криминал хаҡында китаптарҙы әле лә уҡыштырам, етмәһә, аспирантура ятағында юрист дуҫым йәшәне. Урыҫ әйтмешләй, на всякий пожарный мин дә аңлатма яҙам. Уйлап ҡара: әгәр …овкалағы ҡырын эшегеҙ беленә ҡалһа, дүртегеҙҙең дә ҡойроғона баҫасаҡтар. Унда инде, бая иҫкәртеүемсә: йә штраф, йә күпмелер срок. Значит, хуш, комсомол, прощай, вуз… Аҡҡа төшкәнсе… Мәкәлдең аҙағын беләһең. Минең дә барлы-юҡлы биографиямды ударға ҡуймайыҡ, йәме? Шөрләгәндән түгел: партком тирәһендә шутки плохи… Унда беҙҙекеләр юҡ дәрәжәһендә.

– Ҡағыҙ әпирегеҙ… – Дауыт быны ышаныслы үтенде, гәрсә үҙ ғәйебен таныу уға ҡеүәт кенә өҫтәне. Раян Баянович та уны һаҙға батырыр өсөн яҙҙырмай ҙаһа, киреһенсә, яҡлай, алдан ҡапаҡлай.

– Аҡылдарың камил, ҡустым, молоток. Ҡағыҙ ней бар инде ул, бар. – Хужа яй һөйләнә, мәгәр йәһәт ҡылана. – Ручканың аҫылы, тә-әк, еңгәңдең тумбаһында, хәҙер… Асыуым да килмәгәйе, оп-осһоҙға дүрт путевка тапҡан алма кеүек бисәмә ниңә хыянат итергә тейеш әле мин! Күрше поселоктан ул, первоцелинник ғаиләһенән… Яҙырға ҡыйынһынһаң, диктовать итермен. – Шунан йәнә нәсихәт юҫығында өҫтәне. – Һине бит заставить иткәндәр, пацан! Үҙеңсә йәшә, һис ҡасан шухыр-мухыр өйөргә эйәрмә. Бигерәк тә бүреләр өйөрөнә. Эйәреп тә йығылдыңмы – тор ҙа кит, ятма шыңшып…

Биш-алты һөйләмде ни – тиҙ үк сыймаҡланылар.

– Адресың аныҡ булһын. Иртәгә һыпыртаһың, шикелле.Ҡайҙа ҡайтаһың?

– Тәүҙә – уҡытҡан ауылға. Отпуск алғас – тыуған ауылға.

– Ярай, тәүгеһенә яҙ, бөгөнгө числоны ҡуй, кәрәк икән – табырҙар. Ҡабатлайым: на всякий случай ғына хәжәт... «Козел» тигәндәре өсөн ғәфү үтенһәләр, коллектив кляузаларын йыртып ырғытһалар – кәрәкмәҫ тә.

Тимәк, көндәҙ ҙә низағ апаруҡ ҡыҙыу булған.

Шыма ғына кәнсә ҡағыҙын уртаға тәҫләп портфеленә тыҡҡас, ғалим ҡунағына хәмерле сынаяҡ һондо. Сәкәштерергә.

– Закускаға үрел. Әйткәндәй, сәнскең дөрөҫ ятмай. Приборҙың үткер остары, ҡалаҡ эстәре поминкала ғына аҫҡа ҡаратып һалына. – Дауыт тыңлаусан балалай буш ҡулы менән сәнскене тәүҙә әйләндереп һалды, шунан һәләт кенә күтәреп, яңы өлгөргән ҡыяр телеменә ғыршлатып ҡаҙаны. – Дөрөҫ, беҙгә йәшәргә кәрәк. Ә йәшәү, философтарса әйтһәк, көрәш ул. Намыҫ өсөн көрәш…

Онотма, ҡустым: иҫәрҙе өндәшмәй торһа ла, танып була. – Аҡыл һатып, ҡул бирмәй мыңғырҙап хушлашты Доцент. – Алама хәбәр шәп йүгерә, яҡшыһы көскә атлай. Белгертмәҫкә тырыш баймаҡтарға бындағы ҡыйыш аҙымдарыңды. Аҙаҡ, ҡотолғас, һөйләрһең… Кәрәк тапһаң ғына. Хоҙай ҡушһа, осрашырбыҙ, тим.

Тиҙҙән коридорҙа бала-сағаның бытырлығын сыҡҡаны ҡолаҡҡа салынды. Доцент шешәне карауат аҫтына боҫорҙо, физрук урынынан үрә ҡалҡты.

– Ҡара әле, Салауатов, һаҡ бул. Шпанаға оҡшаған дуҫтары бар Николайҙың, «темный» ойоштороп ҡуймаһын.

– Рәхмәт… – Егеттең ни өсөн рәхмәтле икәнен аңғарыуы ауыр ине.

...Иҫән-һаумы икән әле Раян Баянович? Дан булыр ине үҙен эҙләп тапҡанда… Танырҙармы инеме бер-береһен? Иҫәндер, етмеше лә тулмаған бит әле. Иҫән генә була күрһен кәбән һалырға яратҡан ҡарасман ағаҡай. Хәйер, ғилемле кешеләр оҙаҡ йәшәй торған.

* * *

Ҡәҙимге хәләтенә ҡайтҡан, Дауыттың машина яғына ыңғайлауы булды, ҡаршыһына аҙымлаған яланбаш Федорыч күренде. Көләкәсләнһә лә, үҙен ғәйепле һиҙгән кеүек.

– Мин хәҙер, һин термостан сәй һемерә тор, Азатович.

– Эҫе генә ләһә! Сырлы-майлы бутерброд та эсте тишмәҫ.

Ҡартлас тиҙ йөрөнө. Биленә тиклем сайынған, ялтырай төшкән салланған сәсен һыйпапмы-һыйпай. Кибеңкерәнеме, «лужковка»һын кейәсәк. Уның ыңғайына Дауыт та ҡыҙғылт бейсболкаһын сисеп, пеләшләнә башлаған түбәһен өйрөлтөп-өйрөлтөп тызыштырҙы.

– Юҡ, тамаҡ туҡ… Сәй йотам, әҙерәк алма ҡабам, әрсеп кенә… Төптән тағы ике тешем ҡупшаған әле.

Машинаның «Нива» тигән яҙыуын, номерын мәтенән таҙартып, ҡағынып-һуғынып, ҡулдарын сепрәк менән һөртөп, әҙәм сүрәтенә ингән водитель, кабинаһына һин дә мин менгәс: «Ну, Вадим, ехай с богом!» – тип төсһөҙ ирендәрен еңелсә ҡымтыны ла, баранкаға йәбеште.

Урман юлдары шаҡтай арыулана, киңәйә барҙы. «Нива» тәпәшерәк түмәләскә үрләне, ҡалҡыуыраҡ урында туҡтаны, сөнки башҡорт урыҫтан һорай ҡуйҙы:

– Федорыч, Ҡыуыштау ҡай тирәлә әле?

– Минең ауылдан ун ете километрҙа ғына ул. Мәктәптән йыл да барғыланыҡ экскурсияға. Хәҙер а-анауҙан беҙгә боролабыҙ…

Тимәк, апаруҡ дуға яһап, урауҙан елдерәсәктәр.

– Ғәфү ит, Вадим Федорыч, православие эңергә ҡарай зыяратҡа инеүҙе тыймаймы ни? Ислам буйынса, мәҫәлән, ярамай.

Әмәлгә таянғандай, автоһәүәҫкәр, бара биргәс, ауылына табан боролмайса, тура елдерҙе.

– Федорыч, мин... динде былай ғына иҫләнем.

– Былай ғынамы, тегеләй генәме – барыбер ғәҙел әйттең. Үпкәләмәҫ мәрхүмә әсәм, кис ҡырын зыяратҡа инеү ситен. Йыраҡ ер түгел, килермен, ер туңмай әлегә. – Дауыт өндәшмәгәс, Вадим хәбәрен дауам итте. – Улым менән киленем, ана, быйыл Грецияға барҙылар, алдағы йәйгә Чехияғамы йыйыналар. Рәхәт шул: уны ла тулмаған тиктормаҫ оноғомдо Люсяма ҡалдыра ла, һыпырталар ғына. Ә мин уларға емеш үҫтереп ташыйым, нисәмә банка йәшелсә тоҙлайым. Ярай, ҡайтайыҡ һөйөклө ҡатындарыбыҙ эргәһенә, шулаймы?

Дауыт баш һелкте, Доцент әйтмешләй, алма кеүек, тип ғәмләнде. Ҡырҡ йыл элек ишеткән һүҙ бит әле. Әйтәгүр, нәзәкәтле һүҙ.

Машина ҡыл тартҡандай тура баҫыу юлына төшөп алды, моторы тигеҙ генә выжлай.

– Кәйефең юҡмы әллә, Азатович?

– Кәйеф арыу, тик бер аҙ арытты. Тимошканың һары һандуғасын күрҙем…

Юлдашына Федорыч һынамсыл ҡараны: бер-бер ялтас-пеләш башына, йәнәһе, зәхмәт ҡағылмағанмы бының?

– Эҫем һандуғастары Африкаға етеп баралыр, ә беҙ ун биш минуттан Шаҡшала булабыҙ. Азатович, …овкала эшең бештеме һуң?

– Берәй һөйләрмен әле, Федорыч, ун биш минутта ғына һөйләрлек нәмә түгел шул. Ысынлап та, донъяла Сафиушка-соловушка ла бар икән.

Федорыч, минең өсөн барыбер, тигән мәғәнәлә яурындарын йыйырып яҙҙы.

Күпергә етәрәк Федорыч, уң бармаҡ остарын төйнәп ҡабалан-ҡарһалан суҡынып алды. Суҡыныр ҙа… Ярай әле автоматлы патрулдәр йә оҙон-оҙон рефрижераторҙарҙы, йә затлы иномаркаларҙы туҡтатып, мыштыр ғына, тәкәббер генә эргәләренә аҙымлай.

Һөйләрмен әле, тине лә ул, нимә генә һөйләй алыр һуң Дауыт Федорычҡа. Форсаты сыҡһа, һөйләр ҙә. Әҙәм балаһының нисектер теле асылған, хатта артығын ысҡындырғаны, шуның өсөн үкенеп йөрөгән саҡтары була бит, була. Ә хәжәтме ни, ҡыҙыҡмы ни Федорычҡа Дауыттың, атаһы мәрхүм әйтмешләй, һәүрек сағындағы  хатаһы, дыуамал гонаһы? Остоҡ та хәжәте юҡ, әлеге лә баяғы, минең йәнтөйәктә нишләп йөрөнөң бөгәсә, тип кенә ҡыҙыҡһыныуылыр. Ана бит, гелән ҡабаланмай ғына, тәмләп кенә гәпләшергә әүәҫ Федорыч әле шымып ҡалған, зирәклеге юлға ҡаҙалған, мәгәр тирә-йүнгә һирпелеп тә алғылай. Алғылар инде, ошо иркенлектә кендеге ҡырҡылып, тәүге һулышын алған уҙаман даһа. «Ғәфү ит, Федорыч, бөгөндәре генә уртаҡлаша алмаҫ йәнәшеңдәге  юлдашың йүләр йәшлегенең  елпендергес, иң һиҫкәндергес, иң алабарман хәтирәләре менән… Бәлки, бер ҡасан да уртаҡлашмаҫ. Унан  килеп, күп йылдар уҙған, күп  һыуҙар аҡҡан, күп нәмә онотолған, томанға  сорналған. Һөйләниһә, көлмәҫһеңме һуң? Эй, брат, юҡ-бар гонаһыңды юллап маташтыңмы? Күр, замана уғрылары нишләй? Эйе, муйылгүҙ Сәмәрәһенә сисмәгәнде, эс серҙәрен яттарға һис сисмәҫ Дауыт...»

* * *

…Оҡшатып та бөтмәне Дауыт Салауатов маҡтаулы Өфөнө имтиханға килгәнендә. Әллә баш ҡала оҙайлы яуындан йонсоғайны, әллә ҡасандыр айырым ҡала һаналған Черниковканың яманатын ишеткәйне. Ни булһа ла, документтарын тапшырып, имтихандарҙа студентлыҡҡа дәғүәсе булырлыҡ балдар йыйып ҡайтты. Ҡайтышлай физрук булып йөрөгән ауылға – уныһы оло юлдан ике саҡрымда, ала-сола урманлы тау ашаһында ғына – һуғылып, төнәп сыҡты. Түшәктә оҙаҡ ятмай ғына әжәле еткән бабайын – фатир хужаһын ерләгәйнеләр, был хаҡта автобуста таныш-тоноштарынан ишеткәйне шул. Мәрхүмдең әбей генәһе Дауытты етемһерәп ҡалған иркен өйөндә ғәзиз улылай күреп ҡаршыланы, барынса һыйланы. Арманһыҙ йоҡланы юлаусы уҫаҡ таҡта менән көпләүле элекке бүлмәһендә, клубҡа ла ынтылманы.

Иртәгәһенә урамға сыҡты. Бесәнселәр сабаулай, бала-саға һикерәндәшә. Почтальонка уҙып бара ине, егет унан һаулыҡ һорашты. Йәш ҡатын, Сәмәрәнең почтальонка апаһы, үҙен дә ихлас сәләмләне.

– Ошо арала күренмәнең, жигет?.. – Юрый «жигет» ти бит әле, силәбеләр һымаҡ. – Ҡайҙарҙа ер гиҙҙең?

– Отпускыла… – тип ҡотолдо Дауыт, ҡайҙа ул имтиханда буталыуын телгә алыу.  Уҡыуға инмәй ҡуйһа, хурлығы ни тора! Нәҡ ошо уйҙарын һиҙгән ҡиәфәттә, һеңлеһенекенән яҫыраҡ ҡашлы, ҡабарынҡыраҡ түшле, тығыҙыраҡ билле Миңлебикә:

– Ауылдан дүрт-биш ҡыҙ Сибайҙа медсестралыҡҡа икзәмен биреп ята. Эркелеп барғас, инә алырмы Сәмәрә, ай-һай… – тине лә һәлмәк сумкаһынан: «…хәзәйенең вафат, уҡый белмәһә лә, хәзәйкәңә…» типме гәзиттәр, Дауыттың үҙенә «Башҡортостан уҡытыусыһы», «Физкультура и спорт» журналдарын тотторҙо.

– Инер ул Сәмәрә, өлгәше яҡшы ине… – тигән булды егет, ә ҡатынҡай бумпылдап ары уҙҙы.

– Арыу булғас, ниңә миҙал йә грамыта бирмәнегеҙ? Нашалствы балаларына ғына бирергә, тигән указ бармы әллә?

Эй, апаҡайҙың һеңлеһе өсөн өҙөлөп тороуҙары! Бөтә апайҙар ҙа шулай булһасы. Сәмәрә лә ярҙамсыл: Миңлебикә ауырып-фәлән киттеме, почтаны үҙе йүгергеләп тараткылай.

...Үҙ ауылында утын-бесән эштәрендә атаһына ярҙамлашып йөрөгән август көндәренең береһендә Дауытты киң урам аша күршеләре саҡырҙы. Ике туған ағайы – орденлы механизатор йәшәй унда: Салауатовтарға алыҫтан шылтыратһалар, телефонды механизатор өйөнә тоташтырғылайҙар. Анау аҡман-тоҡман аҙаштырғанда мәктәп директоры ла шул телефондан эҙләткән...

– Кәләшеңме, ҡәйнеш, эй тауышы йәш кенә? – Еңгәһе әле мәрәкәләп әйҙүкләне. – Биш-алты минуттан ҡабат звонок бирәм, ти. Бар, көт тә һөйләш бәләкәй өйҙәге телефондан.

– Һаумыһығыҙ, Дауыт Азатович, Сәмәрә борсой һеҙҙе. Ике хат бар һеҙҙең исемгә. Апайым әйтә, Миңлебикә, почтала эшләй, беләһегеҙҙер –килеп алмаҫмы, ти? – «Тауышы йәш... Һы, булмайса...» Әҙәп менән «һеҙ»ҙән ҡырҡып, рәсмиерәк һөйләшеүен әйт.

– Әлләсе... Ә юҡ, барам. – Һағайған егет ҡасан, нисек юлланасағын үҙе лә белмәгәс, һорай ҡуйҙы: – Ә һине ҡотларға мөмкиндер бит? Уҡыу буйынса. – Аңланы ҡыҙый, ҡайтармыш ҡотлауын да еткерергә ашыҡты:

– Эйе, рәхмәт. Һеҙҙе лә! Апайым әйтә, конвертына ҡарағанда, уҡырға ингән физругың, ти. – Яңылыштан «физругың» тигәнде ысҡындырғанын Сәмәрә төҙәтә һалды. – Эй ҙә, физругығыҙ, ти, Дауыт Азатович...

– Рәхмәт, һылыу... – И бешмәгән, уңайлы мәлдә «һылыу»ға «ым»ды өҫтәргә йөрәге етмәне егеттең. Әҙерәк бөжләне: хат икәү, ти ҙәһә. Береһе – институттан хәбәрҙер. Ә-ә... Икенсеһендә?..

Машинаға өмөт аҙ, хәйер, ул саҡ крәҫтиәндәрҙең шәхси автомобиле һирәк ине. Мотоцикл эҙләп ҡараны, ҡапыл-ғара унының да тапманы. Йә бесәндә йөрөйҙәр, йә боҙоҡ ултыра. Туҡта, ә, велосипед?! Әлеге шул механизатор ағайыныҡы бар.

Фәҡир үк булмаһа ла, етешһеҙерәк йәшәгәндәрҙер – велигы ла юҡ Дауыттың. Алғас-алғас, «спортивный»ҙы посылторг аша яҙҙырырға йыйына ғына ине.

Ағайының велигын тиҙ генә майлап, тәгәрмәстәрен тынлап, елдерҙе туранан-тураға. Ошоноң ише баҫыу юлдарынан да һыпыртты. Бер ҡыраҙы төшкәндә, тормозы йүнләп тотмай, гөрҫ – сатыр араһына. Улай ҙа имгәнмәне, яланғас беләктәре генә һыҙырылды, иллә барып етте яҡты күҙҙә. Тик, мин килдем – давайығыҙ хаттарҙы, тип кеше маҙаһыҙлап йөрөргә теләмәне. Яраларын дарыулап, үтекләнеп, клубҡа сығып әйләнде. Йәштәр арлы-бирле тансала өйрөлә. Һуҡмыш егеттәр бильярд төртә, шашка шылдыра. Ҡыҙ-ҡырҡын араһында ике әхирәте менән Сәмәрә лә сыуала, әйтәгүр, хәҙер уларҙы, «өлкән» һанап, бәйләнсек ветеран уҡытыусылар быйылғы яҙҙан уҡ клубтан ҡыумай.

...Иртәгәһенә егет, яҫы ҡайышлы сумка аҫҡан төйөрөм ҡатынҡай күренмәгәс, почта тирәһенә үҙе яҡынлашты. Хәзәйкәһе әйтмешләй, почтальонка Миңлебикә «хәрәпселәргә» сығып ҡына килә ине. Осраштылар. Ниңәлер ҡатындың, ҡараштары һынамсыл, ғәжәпһенгән дә төҫлө. Ләм-мимһеҙ генә тәүҙә ябайыраҡ штамплы хат тотторҙо. Нефть институтынан, тимәк... Елемен ҡуптара-ҡуптара ҡырғараҡ янтайып, ниндәйҙер илһам бөркөлгән конвертты һаҡ ҡына асты. Ур-ра, ҡабул ителгән! Деканаттағы нәҙекәйбил ҡыҙ өмөт уятып ҡалғайны шул: «Абитурҙар эргәһендә ике офицерҙың буталғанын шәйләгәнһеңдер, Салауатов? Ана шулар сосораҡ егеттәрҙе хәрби училищеға димләп йөрөйҙәр. Әгәр 3-4 солдатик документтарын алһа, һиңә студент булырға шанс өҫтәлә...» Нисек кенә

булмаһын: ул – студент, ул – буласаҡ инженер! Раян Баяновичтың нәсихәте, юрауҙары юш килә, шөкөр. Шулай, Доцент уйынлы-ысынлы, тупаҫыраҡ әңгәмәлә тәүҙә әртислектән төңөлдөрҙө. Төҫөң-башың чепуха, тинеме… Спортта ла карьераң икеле, ошо йәштә район чемпионы ғынаһың – бүстәк; ә имгәнһәң, тфү-тфү, һөнәрһеҙ көйө кемгә кәрәкһең? Быныһын Дауыттың Эҫем буйында шпагат яһауын иҫләп әйтте, буғай.

Ысынлап та, икенсе курста Дауыт һыуыҡ алдырып ятты, өсөнсөлә саҡта балтырҙарында ҡан тамырҙары бүртте. Хуш, саңғы! Шунан бирле саңғыға прогулка өсөн генә баҫҡылай. Ғәҙәттә, Еңеү паркына. Аҡ ҡайындар араһына...

– Ҡотлайым… – Почтальонканың тауышы ихлас. – Ә бынауһын падпислап ал, бөгөн – августың ун туғыҙы, числаланы үҙем ҡуярым.

…Һаман аптырай Дауыт: милиция ебәргән повесткаҡның эстәлегенә хәбәрҙар инеме почтальонка? Ирендәрен ҡымтып, ниңә бик һынамсыл, бына кем икәнһең, тигәндәй ҡараны икән? Әлләсе… Уҡымағандыр ҙа, бәлки, повесткаҡның ҡайҙан килеүен уҡып та ләм-мим өндәшмәгәндер, ләстит таратмағандыр: хол-ҡо-фиғылы ирҙәргә биргеһеҙ һымаҡ бит .

«Салауатов Д. А. Тейешһегеҙ…15 августа… (һа, үтеп киткән) сәғ. 11-ҙә … район милицияһының …-се бүлмәһенә… Килмәһәгеҙ …статьяға ярашлы… Следователь… (фамилия, сатай-ботай имза)» Кескәй генә бланкыға тыңҡыслаған янаулы юлдарҙы уҡығас, артыҡ ҡаушаманы егет. Ҡаушарға ни, Раян мөғәллим, тимәк, тик ятмаған, Дауыт яҙып ҡалдырған аңлатманы ла ҡушып биргән милицияға. Йыбанмай, намыҫ һаҡлап райүҙәккә барғандыр, ул яҡҡа электричка һәләк йыш йөрөй, тиҙ йөрөй.

Почта ташыусының үҙенә ҡырын ҡарап ҡуйғанын шәйләп, кисәге уҡытыусы – буласаҡ студент һыр бирмәй, сер сисмәй генә мөңгөрләүҙе кәрәк тапты:

– Бер ямаҡ хәлдең… шаһиты булынғайны. Шуға записка һорайҙар... – «Аҙна уҙған, килеп арестовать...» Ошо уйынан ғына Дауыт бер аҙ һиҫкәнеп ҡуйҙы.

Рәшәткәгә эленгән һәлмәк сумкаһын итләс яурынына аҫҡас, Миңлебикә эшенә ашыҡты. Уның өндәшмәй-нитмәй ҡуҙғалыуы нисектер яҙығына күрә яза кеүек тойолдо егеткә. Эй, тормоштоң әкәмәттәре яҡтары бихисап шул. Туҡта, туҡта, хәтерләйем тигәс тә, хәтирә ептәрен рәтен-сиратын белеп тағатыу хәйерлерәк.

Ни булһа ла булыр, аҙналай ваҡыт ҡалған Өфөгә юлланырға, шул арала тота һалып, судһыҙ-ниһеҙ Себер һөрмәҫтәр, типме, Дауыт повестка буйынса орҙобәрҙе сәфәр сығыуҙан тыйылды. Эшенән бушатылаһы, расчет алаһы, был ауылда отпускынан йыйыла башлаған уҡытыусыларҙы, ә тыуған ауылында ул саҡтағы йола буйынса йәштәрҙе мәжлескә йыйып, һәүетемсә хушлашырға теләне. Ошо теләктәрен бойомға ашырғас ҡына, берсә ҡанатланып, берсә шөбһәләнеп һыпыртты Өфөгә. Алданыраҡ юлланды. Сөнки бер-бер һуңлап ҡуйһа, ятаҡтан биреләсәк урындан ҡолаҡ ҡағыуҙан да шөрләне.

## VII

Көндәр берсә көлә, берсә илаулай. Ҡайҙа ла мәктәптәр, училищелар, техникумдар, вуздар 1 сентябргә әҙерләнә.

Тура килһә килә бит: үҙ ауылына ҡайтҡас, көн аша йәнә ике хат алды. Былары – ҡәҙимге, маркалы.

Николай сөсөләнмәй-нитмәй, ҡыҫҡа ғына сыймаҡлаған сәләмен. Шыр хата бит әле хатҡынаһы, улай ҙа аңлашылды. Ҡайҙалыр саҡырһалар (әлбиттә, тикшереү органдарына), кемделер тыңлап (әйтәгүр, Раян Баяновичты) йөрөмә, зинһар, команда менән үтенәбеҙ, тигән. Юғиһә, үпкәләрбеҙ, тип тә ҡапаҡлаған.

Əһə, Николай – йылмаяҡ Алевтина усаҡ яҡтыһында йырлағанса, Коля-Коля-Николаша – Раян Баяновичҡа Дауыт ҡалдырған «признательный» хаҡында бер нәмә лә белмәйҙер. Тыныслан, Николай, август аҙағынараҡ Өфөләргә барасаҡ Дауыт. Мотлаҡ! Тәүҙә деканатта әңгәмә үтергә тейеш, шунан дөйөм ятаҡҡа морон төртөр. Аҙаҡ нишләргә кәрәген нисек тә самалар әле. Улай уҡ иҫәүән түгел дә.

Икенсе сәләм – Наиләнән, урыҫ араһында Нэлли ул. Оҙон ғына хаты, хисле генә, тик йылыһы аҙ һымаҡ. Адресын бирмәгәйне ләһә? Хәйер, Дауыт ҡайтып киткәс йә дирекциянан, йә Доценттан һорағандыр. Раян Баяновичтың уны: «Һин дә минең өҫкә сүп өйөшәһеңме, журналист туған? – тип быжғыртыуы ла ихтимал. – Оҡшатҡан егетеңде яҡларға тырышыуың һәйбәт, тик бүтәнде – мине батырыу иҫәбенә яҡлашма. Ҡурҡма, Салауатовҡа бер ни ҙә булмаҫ. Ул – эйәрсән, шаһит ҡына».

Бәй, Нэлли менән хушлашмай ҙа һыпыртты, гүйә, ҡасты. Дауыт быға үкенмәй. Үҙе бәләсник, үҙе өтөк Алевтина ыңғайына ялған ялыуға имза йыйып йөрөүен нисек аңламаҡ, нисек ғәфү итмәк кәрәк. Үпкән-ҡосҡан – елгә осҡан… Шундайыраҡ ҡиәфәт менән Дауыт матур почерклы хатты аласыҡтағы ут тамағына бырғатты. Ҡыҙыҡ, шыма кәнсә ҡағыҙы яна, ә ҡолағында теге авторы билдәһеҙ туристик йырҙың тап Наиләнән ишеткән башҡортсаһы – тимәк, тәүҙә милли вариантын берәй ауыл егете сығарған – сағылды:

*Тик шатлыҡтан күҙҙәреңә*
*Ҡайнар йәш килһен.*
*Ағиҙел, Ағиҙел, Ағиҙе-ел…*

…Ҡаҙан аҫтында ялҡын ялмаған хаяһыҙ хатты күҙ алдына килтергәс, Дауытта ҡапыл һынамыш яралды: ә бит теге саҡта, Доцент өҫтөнән күмәк ошаҡты раҫлатыр өсөн… йәшкелт күҙле һомғол Наиләнең, нәҡ Салауатовтың мәнфәғәтен үә абруйын уйлап, имза йыйышып йөрөүе ихтимал. Бик тә ихтимал, сөнки парткомға хат яҙһалар – ул осор кеше яҙмыштарын күп осраҡта партократтар хәл итә ине – Доцент бығыр-бығыр үҙе һаҙлыҡҡа батасаҡ, ул инде дүрт ҡараҡ, шул иҫәптән һыуға сумыу маһиры Дауыт, өҫтөнән ошаҡ әтмәләмәйәсәк. Тимәк, Владимир менән Николай ҙа имен-аман ҡотола яуаплылыҡтан. Бына ниндәй мәкерле ҡапҡан ҡорған йәшләй генә эскесе иренән айырылған Алевтина! Бигәйбә, нәҡ шул ҡапҡанға баҫҡандыр ҙа әле Наиләкәй – йәшел күҙкәй.

Салауатовтың йыш ҡына уйланғаны булыр: ҡаҙна талаусылар, пирамидасылар, рэкеттар, бер көнлөк фирмачтар,бала урлап, аҡса таптырыусылар, кидалолар, ришүәт алыусылар, бизнеста бер-береһен һемәйтеүселәр, аферистар һ.б. әтрәгәләмдәр туғандары, яҡындары араһында, белегеҙ, ярамһаҡланығыҙ, теләнселәгеҙ, ашағыҙ, эсегеҙ: мин – бур, харам иҫәбенә кеҫәм ҡалын минең, тип маһаямы икән? Юҡтыр. Гәйебеңде таныу өсөн дә выждан көсө, ҡыҙара белеү кәрәгәлер. Мәгәр, һуңғы осор ярайһы байман башҡорт илендә лә уғрылыҡтар, мутлыҡтар, ай-һай, ишәйә бара, отҡостар, алдаҡсылар, нахалдар кәмемәй һымаҡ. Уҙған ялда ғына, ана, Федорыч төҙөлөштә буталған прораб энеһенең йылға яҡын өйөнә аҡса апҡайтмауына бот сабып зарланды. «Һеҙгә тейеш аҡсаны берәй йыл крутить итәйем әле», – тип асыҡтан-асыҡ әйткән заказ, йәғни объект биреүсе начальниктары. Өлкән прорабтары әрмән тиме. Ул, меҫкен, «оҙон аҡса»ға әллә ҡайҙағы ҡәрҙәштәрен саҡырған. Ныҡыш эшләйҙәр, ти, көнө-төнө… Яңыраҡ гостарбайтерҙар һуҡыр тинһеҙ ҡайтып киткән илдәренә. Түрәләрен судҡа биреп кенә эш хаҡын даулап алырҙар ине – прорабтарға ҡабат объект тәтемәҫе көн кеүек асыҡ.

…Дауыт, йәшерен-батырын түгел, Өфөгә шөрләберәк юлланды, лекцияларға ла хафаланып йөрөнө – милиция ана-бына арестҡа алып китмәгәйе.

Раян Баянович иҫкәртеүенсә, тәфтишсе соҡонғанда теге өсәү – Владимир, Николай, йәнә ҡарпыш ҡолаҡ әпәү, үҙ-ара килешеп, һарыҡты вә кәмәне Дауытҡа ғына япһарыуҙары ла бик мөмкин. Анау сос, теремек башҡорт ҡотортто, бәрәнде момент салды, беҙ ни – ҡала егеттәре һарыҡты кәзәнән айырмайбыҙ; Салауатовҡа әҙ-мәҙ ярҙамлаштыҡ ҡына, команданы һыйлайыҡ әле тип инәлде бит, тинеләрме – бөтөр башың, ҡалыр муйының һерәйеп. Гәрсә Доцентҡа «признательный» ҡалдырып йәтеш иткән. Дауыт… Асыҡтан-асыҡ апаҡлауы ла урынлы булған ғалимдың. «Ҡара уны, аңғарып йөрө, «темный»…» Гәрсә донъя хәлен белеп булмай, ҡабырғаһын һанауҙары ла ихтимал ине. Николай, әгәр хәтере буталмаһа, һарыҡҡа, барышлай ...овка хулигандары бәйләнһә, бер төптән отпор бирербеҙ. Әгәр дүртәүҙән уҙмаһалар…» тигәйне. Бигерәк ышанған ыштанһыҙ Дауыт шалопайҙарға...

Э-эх…Доцентҡа ҡалдырған «признательный» ҡағыҙы берәй нисек нефть институтына юлыҡтыниһә, кем белә, Салауатов иптәш, һин – разрядлы спортсмен, фронтовик улы, тип аяп тормаҫтар, артына типмәй генә тәүҙә комсомолдан, аҙаҡ факультеттан ҡыуырҙар ине. Валлаһи… Арҡаланыр түрә-мүрә, таяныр туғаны ла юҡ. Хәйер, әле лә юҡ, әҙ-мәҙ яҡташтары, дуҫтары, фекерҙәштәре генә бар. Ә Федорычты дуҫтар исемлегенә индерә аламы Дауыт? Әлләсе… Юҡ, юҡ, ала.

Трассаға яҡынлашҡас, Вадим машинаһын туҡтатты. Сәй һемерергә ниәте, сәйҙең еҫ-боҫто кәметерлек ҡеүәһе бар инде былай. Термосына йәбешерҙән алда авторадиоһын борғосланы. Үҙәк каналдар «…ышанысты юғалтыу сәбәпле» тип Мәскәү мэры Лужковтың ғауғалы отставкаһын сурыта.

– Әйтсе, дорогой, һинең миңә ышанысың юғалманымы? – Күн кепкаһын ҡырынайтҡан ҡартлас мәрәкәсел күҙ ҡыҫты, Дауыт уйсан, фәлсәфәүи яуапланы: – Афоризм яралды әле күңелдә: ышанысты юғалтмаҫ өсөн, уны тәүҙә ҡаҙаныу фарыз.

– Яҡшы-ы… – тине Федорыч, радиоһын икенсе тулҡынға күсереп.

Ҡайһылыр илдә, ҡайһылыр телдә «Евровидение-2010» конкурсында гран-при алған Норвегия йырсыһы, милләте белорус Александр Рыбактың үҙе яҙған көйөн ҡабатлайҙар ине.

– Уртаса… – Аңғартып торманы Вадим: йыр оҡшамаймы, йырсыһымы?

Йырсыһылыр, бер саҡ баҡса яңғырап торғанда: «Скрипкаһын тызый-тызый шпагат яһамаһа…» – тип тә һөйләнде бит. Шпагат уҡ түгел дә, уның нимә икәнен белә Дауыт, бигүк еренә еткермәһә лә, үҙе лә маһир ине йәшлегендә аяҡтарын яҙырға.

Теге хәйерһеҙ походтағы танышыу кисәһендә, мини юбкала акробатик элементтар башҡарған миңле ҡыҙ Люба тамашаһынан һуң, Дауыт менән тәү көндән апаруҡ дуҫлашырға өлгөргән Николай:

– Во дает! Кто еще так может? Среди нас есть же физрук, тренеры...– тип һөрәнләне. Берәү ҙә ҡыбырламағас, Дауыт түңәрәккә атланы һәм, ир-атты дәррәү һыҙғыртып, ҡатын-ҡыҙҙы аһ иттереп, аяҡтарын бер мәлгә генә алға-артҡа бөркөт ҡанатылай сатландырғас – һо-оп! – устарына таяна һалып, бесәй етеҙлегендә үксәләренә баҫты. «Приз! Приз!» – тип барсаһы уға ҡул сапты, Алевтина еҫле һабын тотторҙо.

...Дауыт үтә тиҙ елгәрҙе әлеге хәтирәне зиһененән. Вадим Федорыч радиоһын

борғослап, ҡабат Башҡортостан «Юлдаш»ына яҙа-йоҙа тоташҡан арала ғына. Ә эфирҙа Салауатовтың яратҡан йыры тапшырыла ине.

*Һайрай ҙа һайрай һандуғас –*
*Үҙәкте өҙә инде...*

Музыка фоны баҙыҡ һайланған, гүйә, гөл баҡсаһында былбылдар һайраша.

*...Яратҡандар сабыр итә –*
*Сабырҙар түҙә инде.*

Йыр ике ҡорҙаштың әңгәмәһе аҫтында тымды:

– Минең районда[ш] йырлай. Театр актрисаһы Алмаҡай Бәхтейәрова…

– Яҡшы-ы! – Федорыч ашыҡмай ғына термосына йәбеште. – Әйҙә, бергәләп…

– Рәхмәт, эстем мин. – Дауыт «первач кәрәкме?» тип Федорычты төртмәсләргә уҡталғайны, уйынан төңөлдө. Үпкәләр, йә ни... Кабинанан шыуып-шылышып төштө лә йәшел ҡурпы keләменән ары-бире атлаштырҙы. Ай-һай, биле ойоп та өлгөргән, яҙылдырыу зарур.

– Азатович, тыумышың ҡай тирәнән әле? – Вадим быны рыяһыҙ белеште, ҡараштарын, күҙҙәрен алыҫ иркенлеккә төбәп.

– Баймаҡтан. Элек автономияның үҙәге беҙҙә булған. Бай яҡ, тибеҙ.

– Юл төшмәне. Иген мул, һарыҡ күп, шикелле, һеҙҙә.

– Күп… – Танауын сирып, йылмайҙы Дауыт. – Әйҙә, апҡайтам киләһе йәй…

Федорыч «лужковка»һын күтәрә биргәс, Мәскәү экс-мэрының әсәһе мәрхүмә Башҡортостанда тыуғанын, Лужковтың икеме, өсмө тапҡыр Башҡортостанға килгәнен, оҫта умартасы икәнен, ә ҡатынының Өфөлә эре сауҙа нөктәләре барлығын ҡуйыртырға самалап, башын уң яурынына апаруҡ ҡырынайтҡайны, «йоҡомһорай Азатыч» типме, хатта ки машинаһының барышын яйлатты. Ә күршеһендә йоҡо ҡайғыһы юҡ, ул бына-бына алыҫтағы урыҡ-һурыҡ иҫтәлектәренең осона сыҡмаҡсы, күҙҙәрен яртылаш ҡыҫып, зиһенен генә көсәндерҙе.

## VIII

Салауатов беренсе курстарға студент билеты тапшырылған тантанала кәйефһеҙерәк йөрөнө. Төркөмдәренең ойоштороу йыйылышында куратор староста итергә ымһынғайны, егеткәй ҡәтғи баш тартты. Әлеге лә баяғы күңелендәге шөкәтһеҙ юшҡын, шик-шом арҡаһында… Яҙатым судҡа эләкһә, а-ба, старосталыҡҡа кемде һайлағанбыҙ, тигән нәфрәтле ләститтән һағайҙы. Йәкшәмбелә мотлаҡ барасаҡ …овкаға! Электричкала елдерер Урманғаса, ары тәпәйләр әле йә йүгерер. Сөнки белешкәйне вахтершанан: ...овкаға автобус йөрөгәндә йөрөй, йөрөмәгәндә – юҡ, буғай. Аҡсаһы әҙер, свитерын да йәлләмәҫ… Кәмәсене «Сокол»ын биреп ризалатыр. Ә ниңә, тишек кәмә хаҡына зона спартакиадаһында алған приз – күн тышлы транзистор, етмеш һумлыҡ – тамандыр бит? Йәһәт табыр үҙҙәрен… Әрәмәгә яҡын әбшәүәтле өй, аҡ мунсалы баҡса.

Дөйөм йыйылыштан һуң Салауатов та ятағына ҡайтты. Бәй, фойела вахтерша ымлаған мөйөшкә баҡһа – Владимир менән Николай торасы. Килешә икән Володяның атлетик һынына замоклы бәҙ курткаһы. Николай ләпелдәүенсә, ул тәүҙәрәк грек-рим көрәше буйынса ҡала беренселегендә бирешмәгән, аҙаҡ елкәһеңерен һуҙып, спорттан бөтөнләй төңөлгән. Йөҙө ғәмле, бүлтәйгән ирендәренә еңелсә йылмайыу яҙып, Дауытты студент булыуы менән ҡотланы:

– Здорово, курбаши! – Николай, бошона белмәгән бөрсә, ә юҡ, өтөк, торғаны бер фетнә, шундуҡ студентты тышҡа, сәнскеле акациялар араһына, әйҙәне. – Пойдем-ка...

Һүҙ дилбегәһен ҡыҫҡа, үҙен ҡупым тотмаҡсы Николаша-әпкәләй. Владимир иһә пүнәтәйен сабыр ғына эйәк ҡағып йөпләп торҙо.

– Һиңә повестка ебәрелгән – алғанһыңдыр, мәгәр һин уны алманым тип иҫәпләә һәм бер ҡайҙа ла барма. Ғөмүмән, …овкала тансыға сыҡманыҡ, остоҡ та эш боҙманыҡ. Ышанмаһаң, Доценттан һора, ул да раҫлар. Морале облико! Һинең ментураға яҙған ҡағыҙың да – ғәйеп…

Владимир Николайҙың бөйөрөнә төрттө, тегеһе шундуҡ тауышын үҙгәртте: «Ҡайҙа әле повесткаң? Шул уҡ следователь ебәргәнме?» Әмәлгә таянғандай, ул хәсрәт ҡағыҙ паспорты араһында, түш кеҫәһендә ине. Алып күрһәткәйне Дауыт, Николай: «Шикләнһәң, Башпрокуратуранан белеш: унда Володьканың әшнәләре муйындан!» – тип повестканы  ваҡ-ваҡ йыртҡыслап, сүп кәрзиненә елгәреп, ҡәнәғәт ҡиәфәттә әйләнеп килде. Сәйер, бераууҡ еңел булып ҡалды Салауатовҡа.

«Башпрокуратуранан… Әллә ысынды бумпылдай, әллә шыттыра. Һәр хәлдә, юғары даирәлә блаты барҙыр»,– тип уйлап та өлгөрмәне, тегеләр йәһәтләп китеп тә барҙы. Эре генә атлап. Хушлашмайса. Еңеүсе ҡиәфәтендә. Мәгәр Владимирҙы барыбер ҙә ниҙер борсой кеүек… Намыҫымы? Әлләсе…

Дауыт иһә ни һөйөнөргә, ни көйөнөргә белмәне. Тимәк, ярашҡандар. Юҡ, ярашыу түгел, килешеү был. Килешеү ҙә булмағандыр, һатыулашып, бер-береңде тыйыу ойошторғандарҙыр. Хөрмәтле Доцент, милициянан ғаризағыҙҙы, йәнә Салауатовтың аңлатмаһын кире алығыҙ, ә беҙ... өҫтөгөҙҙән авиация институтына юллаған коллектив ялыуҙы ебәрмәбеҙ, вәссәләм. Бер ғалим-педагог тиҫтәнән ашыу алдаҡсы, шантажсы менән ярашҡанмы? Дауыт – уртала. Былай әйтеү ҙә урынһыҙ, «муйындан» блаты арҡаһында ғына ҡотолғандыр  уғрылар. Раян әфәнде шикәйәт биргән, мотлаҡ биргән прокуратураға;  әтеүсә Салауатов – шаһит та, енәйәттә ҡатнашсы ла, ер тишегенә инерҙәй оялып, милиция ебәргән повестка  алмаҫ ине ләһә һынамсыл ҡарашлы почтальонканан. Имзаһын һалып... Сәмәрәнең һөйөклө  апаһы бит әле уныһы. «Бриллиант ҡул» комедияһындағы  аферист әйтмешләй, бына ҡайҙа ул «морале облико»!

Ышандырмай, ышанғы килмәй ҙә бит арыҫлан рухлы, саф выжданлы Раян Баяновичтың бер өйөр сәүектәрҙән еңелеүенә, йәнә уны меҫкен, бөрөшкән хәлдә күрге лә килмәй, тик ни хәл итәһең, күмәктә – көс.  Хикмәт күмәклектә лә түгелдер, хикмәт оҫта ҡоролған тоҙаҡта. Ай-һай, Алевтина, ҡарамаҡҡа фәрештә кеүекһең дә, эскенәйең тулы мәкер, ахырыһы. Доцент та әкәмәт… Нимә ти бит, сәмгә тейеп, ә юҡ, намыҫҡа сиртеп: «Урлағас ҡыҙ  урлайһың уны, Дауыт ҡустым. Йә – һөләктәй ат, түлке һарыҡ түгел».

Күпмегә барыр был йән ыҙалары? Ҡасан сиселеше булыр? Билдәһеҙлек – иң ҡыйыны…

Бигүк тынысланып бөтмәһә лә, студент Салауатов яй аҙымлап  төнәгән урынлашҡан, тәп-ләп кенә ремонтланған бүлмәһенә инде. Иптәштәре төрлө йомош менән ҡалаға һыҙғайнылар. Тимәк, бармаҫ …овкаға Дауыт. Бер яҡтан – яҡшы, икенсе яҡтан – хөрт. Әгәр Николашкалар бая  уны төп башына ултыртып киткән булһа? Булмаҫ, йомоштары ысынға оҡшай. Сабыр итеү фарыз. Әллә Раян Баяновичты эҙләп табырғамы? Мәгәр был йәмһеҙ, ғәрлекле аҙым булыр һымаҡ. Бәлкем, турбазала… һыйлағандарҙыр абзыйҙы? Дауыт бер аҙ алданыраҡ һыпыртты, дөрөҫөрәге, ҡасҡандай итте. Ә Раян Баяновичҡа, хатта ки тотош ғаиләһенә турбаза директоры йәнә ун көнгә бушлай путевка вәғәҙәләгән, әгәр ул… инструктор Владимирҙың гонаһтарын күрмәмеш тә белмәмеш икән. Юҡ, юҡ, баяғы фаразы раҫтыр: Доцент органдарға мөрәжәғәт иткән – тоҡтомалға саҡыртып ятмаҫтар ине ләһә Салауатовты район милицияһына.

Сабыр итергә… Күтәргә… Ҡыйын барыбер. Һәр хәлдә, свитеры ла, ана, сумаҙанда тәҫле генә ята. Иш янына ҡуш – киң еңенә транзисторы ла ҡыҫтырылған. Походта күп тыңлауҙан өс көн уҙыуға уҡ зарядкаһы ултырғайны, шунан бирле «Сокол»ын йәшергән төҫлө һаҡлай. Ҡабырғаһын ҡутарып, сәтәкәй бармаҡтай дүрт батарейка тыҡ – гөжләп тоҡанасаҡ.

Барыһына ла Дауыт үҙе ғәйепле. Ярай, эйәрҙе лә икән, ти, хурлыҡлы «танса»ға йә «Зарница»ға. Ә ниңә, уҡытыусы, комсомолец булараҡ, күрәләтә бурлыҡ ҡылғанда тегеләрҙе теше-тырнағы менән тыйманы, ҡарышманы йә иһә, теләһә нишләгеҙ, минән булмай, тип тайшанманы? Һыпыртһа ла бата ине. Ә бәрәнде ниңә салды? Вәт диуана!

Студент Салауатов тора-бара башкөллө уҡыуға сумды, әкренләп хафаһы ла, ана барам, бына барам …овкаға, зыян күреүселәрҙән ғәфү үтенәм, ризалатам, тигән теләге лә һүрелде.

Хаҡлы иҫкәрткән Раян Баянович: юғары техник белем алыу анһат түгел. Ярай ҙа, Дауыттың зирәклеге, ныҡышлығы бар, юғиһә… Сәмәрәләргә черчениенан һабаҡ биреүе лә файҙаға булған.

Тәүге ҡышта уҡ Дауыт институттың йыйылма командаһына эләкте, тик икенсе курстан спорт мастерлығына кандидат дәрәжәһен яҡлауҙан ваз кисергә тура килде. Врачтар тыйҙы, сөнки ҡаты һыуыҡ тейҙереп, оҙаҡ йүтәлләне. Һиҙелерлек тайыш табанлығы өҫтөнә, һәр күнегеүҙән, һәр ярыштан һуң ҡан тамырҙары ҡыҙарып шешенде, урыны менән күкшелләнеп төйөрләнде.

* * *

Илде компартия етәкләгән осорҙа 7 ноябрь ифрат тантаналы – Октябрь байрамы итеп билдәләнә торғайны. Йырлы-бейеүле, «ура»лы хеҙмәтсәндәр демонстрацияһы… Тигеҙ шеренгалы физкультурниктар парады… Колоннала йылы спорт костюмы, суҡлы кәпәс, йоҡа бирсәткә, ҡупшы кроссовка кейгән Дауыт та атлай. Бик ашҡынһа ла, ҡайта алманы йәнтөйәгенә, шулай ҙа көләс, ғорур.

Уның ҡарауы, деканаттан көн һорап, 5 декабргә – Конституция көнөнә ҡайтып әйләнде. Ваҡыты ҡыҫтауыраҡ ине, ҡар ҙа ҡалын яуҙы, юғиһә, фатир хужабикәһенең хәлен белешеү һылтауы менән, бер ҡыш уҡытҡан ыҡсымыраҡ ауылға ла бик тартҡайны дәрте. Ихтимал, Сәмәрә лә ҡайтҡандыр. Ҙурайғандыр ҙа әле ҡыҙыҡай, ҡултыҡларлыҡ, улай ғынамы, ҡосорлоҡ, кем белә, үберлек тә һылыуҡайҙыр хәҙер.

Тәүге курста Наиләне лә иҫкә алғыланы Дауыт. Былай ғына. Теге оҙон сәләменә яуап яҙмағанына үкенмәй. Яҙҙыниһә, яҙмышының да башҡасараҡ юлланыуы мөмкин ине. Ҡайһы вузға ингәнеңде хәбәр ит, Дауыт, эргәңә килгеләп йөрөрмөн, ауылымды күрһәтермен, тип асыҡтан-асыҡ яҙ вәғәҙәләгәйне журналистка анау оҙон хатында. Килгеләп йөрөһә, кем әйтмешләй… Ҡыҙҙар ҡарамаҫлыҡ тимәҫһең Дауытты ла. Саңғы командаһынан Мишкәлә тыуған зифа буйлы мари сибәркәйенә күҙ атҡыланы, мөләйем ҡыҙ үҙе лә ихлас һырпаланды эргәһендә. Шуның ауыҙынан ишетте: имеш, сибәр тигән сифат – мариҙыҡы, матур ҡыҙ тигәнде аңлата. Аңлатһа ни… Башҡорт «сибәр егет» тип тә әйткеләй. Күрше факультеттан оҙон толомло Бөрйән һылыуы өмөтләнеп ҡарағандай ине. Уға ла иҫе китмәне. Сөнки Дауыт барыбер ҙә саф, ысын һөйөү сәғәте һуғырын көтәүләне.

Коммунизм идеялары менән һиңмайланған совет иле тора-бара етешерәк йәшәй башланы. Ҡалаларҙа икмәккә, селедкаға, башҡаһына сират кәмене, ауыл хеҙмәтсәндәренең малы, шәхси транспорты ишәйҙе. Әлеге лә баяғы орденлы ир солтаны йәшәһен: «Москвич» апҡайтыу менән иҫке матайын, ремонтлап ал да йөрө, тип каникулдағы энеһенә тотторҙо. Борғосланы-майланы, тәки эшкиндерҙе. Һәм

бер көндө һыпыртты физрук штатында ҡыш үткәргән, эреле-ваҡлы түмәләстәр ҡуйынына һыйынған боронғо ауылға. Күрҙе Сәмәрәне, һо-о, күҙ теймәһен, әҙмәҙ ит ҡунған ҡыҙыйға, ике бите алһыуланған, ҡашы ла оҙонайған, йофарҙай ҡарая, ҡыйғаслана төшкән. Клуб соланында арлы-бирле генә һөйләштеләр. Аҙаҡ оҙатып ҡуймағанына үкенде. Сәбәбе – ҡыҙҙың кем менәндер арлы-бирле йөрөүен ишетте. Кем менәндер, тип, әрменән яҙ ҡайтҡан сержант, ҡарсәһенә шахталы ҡасабанан килгеләй, тиме. Бәлки, ләститтер ҙә…

Бәхетенәлер, ҡыш уртаһында Дауыт нисәнселер яңы йыл менән өс-дүрт ҡотлау открыткаһы алғайны. Берәүһенә сабыйҙарса ҡыуанды. Сәмәрәнән килгәненә. Хат һалды үҙенә – эскерһеҙ яуап алды. Шунан китте хатлашыу, байрам һайын ҡотлашыу… «Яратам»дар, «көтәм»дәр, ҡысыр вәғәҙәләр юҡ ине уларҙа. Хәл белешеү, һауа торошон, ауыл йә ҡала яңылыҡтарын барлау – шул ғына.

Йәйҙә тағы осраштылар, ярым ай яҡтыһында ағышы баҫалҡы инеште буйланылар. Йылғасыҡ, гүйә, сөрләп кенә серен уртаҡлаша, яҡындағы әрәмәлә һайрар ҡоштар сутылдаша. Хозур мәл, моңло мәл. Шунда, ҡәҙимге ҡыйыуланып, егет киң ҡосағына наҙлы һыйынған, йөрәге йыш типкән ҡыҙҙы һурып-һурып үпте; иләҫ-миләҫ сағында былай ҙа емшеү ирендәренә әскелтем, йылымыс күҙ йәштәренең ағылыуын тойоп, хисләнеп һораны:

– Ниңә илайһың, Сәмәрә?

– Эй ҙә... – тип бышылданы гүзәл зат. – Шатлыҡтан…

Ҡыуанды бығa егет һәм һөйгәнен ҡуйы керпектәре кипкәнсе үпте лә үпте. «Тик шатлыҡтан күҙҙәреңә ҡайнар йәш килһен…» Ҡайҙан әле был һүҙҙәр? «Ағиҙел» тигән туристик репертуарҙан түгелме?

– Сеү! – Ҡапыл шыпырт бышылданы ҡыҙ, үҙе егеткә лыпын ышыҡланды.

Хәтерләһәң мәҙәк: бына шунда ысын йыр ишеттеләр… Сәмәрәнең апаһы менән еҙнәһе ҡайҙандыр мәжлестән ҡайтып килә, имеш. Әмәлгә таянғандай, Миңлебикә ҡыҙҙы таныны, егетте лә сырамытты. Ҡылансыҡ көйләп уҙмаһынмы буласаҡ ҡәйенбикәһе йәштәр эргәһенән:

*Араларҙың алыҫлығын*
*Кем яҡынайта?*

Дауыттың фатир хужаһы: тәҙрә аша Миңлебикәне күреп ҡалдынмы: «Пуштыбикә хәрәпселәйме урамда?» – тип мәрәкәләй торғайны. Егет үҙен саҡ тыйҙы. Көлөргә ярамай шул, ярамай.

*Һағынғанда сәләм хатын*
*Кем алып ҡайта?*
*Почтальон, почтальон,*
*Почтальон яҡынайта ла*
*Почтальон алып ҡайта…*

Көсәнеп көйләмәне лә ҡатынҡай, бары меңдәргә таныш куплетты һуҙмаҡламай ятланы ғына. Ниндәйҙер кинәйә өҫтәргә теләгәндәй... Ҡара, һеңлем, мин уға ҡаҙна йортонан повестка тотторған кеше әле, һиңмайланып, һемәйеп ҡуйма берүк, тимәксеме әллә?

Алдағы йәй башында ике студент район һабантуйында осрашты. Халыҡтың күплеге! Ул уйындар, ул ярыштар – ғәләмәт. Дауыт, үҙе белгән егет-еләндең өгөтө буйынса оҙонлоҡҡа һикереүҙә ҡатнашып, икенсе урынға сыҡты. Ағастан ырып лак яғылған кескәй генә ҡоралай бирҙеләр, егет шул призын, ай-вайына ҡуймай, Сәмәрәгә тотторҙо.

…Сәмәрә медпрактиканы Баймаҡта үтте. Ҡышҡы каникулға ҡайтышлай һуғылды бит әле Дауыт фатирына. Нисектер һалҡын ҡаршыланы уны ҡыҙ, киноға ла бармаған булды. Туғандарында ҡунып, таң һарыһынан ҡайтыуҙан башҡа сара ҡалманы мәжнүнгә.

Баҡтиһәң... Дауыт 9 Май байрамында кем менәндер буталған, «өйләнергә йөрөй», тигән ләстит йүкә телефондан өс тау, өс йылға ашаһындағы Сәмәрәгә лә ишетелгән... Дөрөҫ, Еңеү байрамына ҡайтҡайны Дауыт ауылға, йәш-елкенсәк аулаҡ өйҙә йыйылды. Шағараҡ мәжлестә элекке класташы менән йәнәш ултырҙылар, аҙаҡ клубта тансыла өйрөлдөләр – бары шул. Фырт кейенгән, биҙәнгән-яһанған, Силәбелә официантка ханым уныһы. Иренән йәшләй айырылғанмы, юҡмы – этем генә белһен.

Дауытҡа ҡабат хат яҙманы Сәмәрә, ҡотлау открыткаһы ла ебәрмәне. Ә бит диплом алғас районда ҡалырға теләгәйне, тотҡан да Архангель районының утһыҙ-юлһыҙ төбәгенә йүнәлтмә алған. Етмәһә, үҙен тегенән дә, бынан да һората башлағандар.

Әлдә Сәмәрәнең апаһы Миңлебикә теге ауылдан был ауылға шылтыратты, әлеге лә баяғы алсаҡ еңгәйе, ҡәйнешкәйем, күңелкәйем һиҙә, арыу хәбәр, тип телефонға әйҙүкләне. Йоҡлап ятма Дауыт туған, тип аңғартты почтальонка: йоҡлап ятма, һеңлекәшем Ташкенттағы туғандар эргәһенә ҡунаҡҡа йыйына, ә унда үзбәктәр һөмһөҙ, урланы-ҡуйҙы, ҡолаҡ ҡағаһың бит. Яратышҡанығыҙҙы беләбеҙ. Һапа йә больнуй түгелһең, һау-һаҡһың, ниңә башлы-күҙле булмайһығыҙ? Сәмәрә һине ҡыр типмәй ҙәһә.

Төҫө буҙарып сыҡты Дауыт бурама аласыҡтан. Еңгәһе ай-вайына ҡуймай төпсөнгәс, һөйләне лә бирҙе хәлкәйен. Орденын партком ҡушҡанда ғына таҡҡан ағайы ҡайтып ингәйне, яйлап уныһы ла ныҡышты: «Дауыт брат, ни булды?» Телсән генә бисәһе ҡыҫылды хәбәргә. Шул саҡ рәхмәт төшкөр еңгәйе әйт тә һал: «Һыпырттыҡ һоратырға!» – «Кемде?» – «Ҡыр типмәгән ҡыҙҙы». «Ҡасан?» – «Бәй, иртәгә үк! Барығыҙ, һаранбай персиҙәтелдән арыуыраҡ машина теләнселәгеҙ!»

Әлдә ҡарышманы Сәмәрә. Апаһына ни әйтерһең – үҙе димләште. Ата-әсәһе лә ҡыҙҙы яусылағанда тиҙ үк ыҡҡа килде. Никах, туй – барыһы ла һәүетемсә булды.

Бишенсе курсҡа бына шулай өйләнеп төштө Дауыт. Ә юҡ, Сәмәрәһе ярты йылдай ҡайны-ҡәйнә йортонда йәшәне, күрше ауыл медпунктында эшләне бит әле. Ике яҡтан да туғандары, бергә торорғоҙ, ярҙам итербеҙ, тигәстәре, ҡышҡы каникулдан һуң йәштәр баш ҡалаға етәкләшеп һыпыртты. Баш ҡала тигәс тә, институтҡа яҡын биҫтәлә иҙәнендә һалҡын ел уйнаҡлаған ағас өйҙән ҡуналҡа тапҡан булдылар. Аҙаҡ та эшкә урынлашҡас унда-бында күсенделәр, завод профкомы фатир йүнләне, тора-бара ҙурыраҡтан, уңайлыраҡтан көтөп алдылар. Ике улдары уҡып башлы-күҙле булып бөттө. Олоһо ҡырҙа, офицер, кинйәһе Мәскәүҙә – инженер. Ана ҡасандан бирле Өфөлә Салауатовтар. Хәҙер әллә ҡайҙа йөрөмәҫтәр инде. Йәйҙәрен ялға ҡайтыр өсөн Талҡаҫ ярында ҡупшынан өй һалырға ниәттәре юҡ түгел былай. Быныһы ла күңелдәре төбөндә ҡуҙғыған теләк кенә әлегә.

...Һо-о, Дауытҡа ни саҡлы онотолмаҫ йә онотола төшкән хәтирәләрен барларға форсат тейҙе. Кире боролорға ваҡыттыр, Федорыч сәйен һемереп, рулгә ҡәҙимгесә тотонорға әҙерҙер. Эйе, әҙер, өҙөк-өҙөк бипелдәтеп алды бит. Ышаныслы, дәртле генә бипелдәтте. Ҡуҙғалдыҡ, тимәксе.

– Кепкаң шәп һинең, Вадим Федорыч, – тип үрмәләне кабинаға Салауатов. – Аукционға ҡуйғанда, ә?

– Ә ниңә, шәп тәҡдим! – Федорыч бер аҙҙан башын сайҡап ҡуйҙы. – Үҙемдеке өсөн оялмайым мин, маркаһы өсөн оялам.Төшөнәһеңдер... Березовский кеүек аҡса тоҡсайҙары йәл миңә…

– Сөнки улар беҙҙең һандуғастарҙы алып китә алмай... – Быны ишеткәс, Федорыч йәнә Дауытҡа һирпелеп ҡараны: икенсегә һаташа лаһа Салауатов һандуғас менән.

– Кем ҡушҡан һуң Лужковҡа шунса байлыҡ йыйырға? «Золотая моя Москва» тип йырлаған була бит әле, етмәһә, Кобзонға ҡушылып. Ҡасырмы экс-мэр берәй сит илгә, нисек уйлайһың? Унса виллаларҙы, унса дачаларҙы юҡҡа ғына алдан уҡ хәстәрләмәгәндер әле бисәһе…

Дауыттың уны йөпләгеһе килмәне, асығын белмәгәс, ни өндәшһен, шулай ҙа кепка тураһында һүҙ ҡуҙғатыуына үкенмәне. Ҡара, бер көндә бер ай сәфәрҙә йөрөгән кеүексе күңел генәһе.

– Әлләсе, Федорыч, үҙ илебеҙҙә әҙәмсә йәшәргә яҙһын, тим.

– Раҫ, үҙебеҙҙә лә комфорт. – Фекерҙе хупланы руль хужаһы. – Бына мин бер ҡайҙа ла йөрөгөм дә, күскем дә килмәй. Тиҙерәк ҡайтып, иртәнсәк радио һөйләгәнсә, африкандар бер-береһен сәләмләгән кеүек, Люсенькаға төкөргөм килә.

– Дөрөҫ, беҙҙең дә ҡәбилә утрауҙа йәшәй! – тип көлдө Дауыт. – Бәлхизә бабуся, тетя Люся, мадам Самарка...

– М-да, бабулька оҙаҡ йәшәгән, нужаны күп күргән. Йә, йәшләй өйләнешеп, арыу ғына донъя көтә башлағастар, ударник ирен Беломорканал тамуғына оҙаталар. Ике ат аҫырай, өй түбәһе ҡалай менән ябылған, атаһы аҡтар яҡлы һуғышҡан ти. Ҡайта алмай, ауыр эштән аяҡ һуҙа. Олоғайған ҡыҙы шул ирҙән.

– Белмәгәйнексе... – Дауыт эргәһендә юҡ Сәмәрә өсөн дә һүҙ ҡыҫтырғайны, Федорыч дауам итте.

– Икенсегә кейәүгә сыға, уныһынан өс бала таба. Йәнә йәл: аталары фронтта ауа. Бәлхизә – тыл ветераны, һуғыш осоронда колхоз тракторын йөрөткән... Ярай әле пенсияһы апаруҡ.

«Бына ниндәй зат икән, һыңар ҡул һыртын гелән арҡаһына терәп атлаған әбекәй! Алдағы ялда сәйгә өндәшеп, хәйерҙәр һалып, яҙмышы ҡиссаһын шәхсән ауыҙынан ишетергә кәрәк»,– тип уйланды Дауыт Федорыч шымыу менән.

...Салауатов ҡайҙандыр уҡығайнымы, кемдәндер ишеткәйнеме: имеш, элек бергәләп енәйәт ҡылған бәндәләрҙең аҙаҡ бер-береһе менән күрешкеһе килмәй. Уның ҡарауы, енәйәт ҡылған урындарына ҡыҙыҡһынып – темеҫкенеп барыусылар осраштыра. Фу-у, әллә был ғәжәби һынамыш Дауытҡа ла тап киләме? Ихтимал… Бына бит, уның Николай йә Владимир менән һис тә осрашҡыһы килмәй. Иҫәндәрме, юҡтырмы, ҡайҙарҙа кем булып йөрөйҙәр, нисегерәк донъя көтәләр – упсым да ҡыҙыҡһындырмай. Эйе, …овка ауылына, Шарлама ярына Дауыт барыбер сәфәр ҡылды. Аяғы тартҡанғамы? Ай-һай… Язаһыҙ ҡалған ҡырҡ йылғы яҙыҡ аҙымы тәүбәгә әйҙәне, тиһәк, йәтешерәк булыр.

Сәмәрәгә нисегерәк аңлатыр, әгәр төпсөнһә, бөгөнгө сәфәренең сәбәбен. Бәлки, төпсәнмәҫ тә, ваҡай түгел; бәлки, Дауыт үҙе лә сиселмәҫ. Вәт әй, сер тигәнең үҙе бер сир имеш. Эс серҙәрең гонаһҡа сорналһа – бигерәк тә.

София Михайловнаға иғәнә биреп дөрөҫ эшләне, буғай. Аҡса ни, Грамотаға ҡушып, премия бирҙеләр ҙәһә – ун биштән биш мең йәлдер шул. Белеште: һарыҡ та шул сама тора икән. Уф, гонаһ бизмәне еңеләйеп ҡалды кеүексе... Ә бит Тимербайға байдаркасыларҙан бер кем бер тин бирмәгән теге йәйҙә. Үҙе лә ожо һалып йөрөмәгән шул мәрхүмкәй.

Етте, Дауыт, күп соҡонма әле күңел сүплегендә. Тимербайҙың һандуғасы барлығын белеп ҡайтыуың – үҙе бер йыуаныс. Ә һандуғастар бер саҡта ла әрләшеп сутылдамай.

...«Нива» оҙон, ҡараулы-ҡарауыллы, парлы, йәғни йәнәш һалынған Шаҡша күперҙәренең яңыһынан уҙғанда, барса автотрасса, тотош ҡала яҡтыртҡыстарын ҡабыҙҙы.

Йәшәгеләр килә!

**2010, ноябрь – 2011, март.**

Ноғман
МУСИН

# Хәтер шаңдауы*

Эссе

...Рауил Бикбаевтың өсөнсө тапҡыр идараға рәйес итеп һайланыуы тураһында һөйләй башлаған ерҙән әллә ниндәй уйланыуҙарға төшөп кителде лә, яҙыуҙан бөтөнләй туҡтап уҡ ҡалдым. Яҙыусылар союзында кемдең рәйес булыуы, уның нисек эшләүе кемгә кәрәк? Быны ҡәләмдәш тураһында кәрәкмәгән соҡсоноу тип ҡабул итмәҫтәрме? Үҙемдең бер кемгә лә ҡаҫта һаҡламауымды әйткәйнем дә әйтеүен... Хәҙер килеп ҡасандыр булған күңелһеҙ хәлдәрҙе хәтерләү... Икенсе яҡтан, ижад кешеләренең эше, тормошо ла шул уҡ көнитмештәге ғәҙәти күренештәр бит. Ул турала беҙ үҙебеҙ уйланмаһаҡ, айырым ситуацияларға үҙ мөнәсәбәтебеҙҙе белдермәһәк, ҡулына ҡәләм алып кем яҙыр? Ижади тормош беҙҙән һуң да дауам итәсәк бит әле, беҙҙең яҡшы яҡтарҙан фәһем алһындар, хаталарыбыҙҙы ҡабатламаһындар.

Рауил Бикбаев дүртенсе ҡабатына ла ултырҙы рәйес өҫтәле артына. Яҙыусылар союзында хәҙер гел пенсионерҙар ғына эшләй тиерлек. Бикбаев – етмеште уҙып китте, Аралбаев – етмешен тултыра, Рәшит Низамов – һикһәнен ҡыуа һ.б. Яҙыусылар союзына тиҫтәһе-тиҫтәһе менән ағза итеп алынған йәштәр ҡайҙа булып бөттө икән?

Беҙҙең быуынды, хәҙер инде ярты быуаттан артыҡ әҙәбиәт ҡаҙанында ҡайнаусыларҙы, ошо күренештәр, йөрәккә уңалмаҫ яра һалып үткән хәлдәрҙең күренә башлауы күңел болоҡһоуын тағы ла көсәйтә төшә. Рауил Бикбаевтың, туранан-тура булмаһа ла, теге саҡта үҙенең кандидатураһына асыҡтан-асыҡ ҡаршы төшкәнемде өнәмәүен һиҙеп йөрөй инем. Ә бер килеп уның эсендә йөрөткән асыуы, ҡон ҡайтарыу теләге тышҡа бәреп сыҡты.

Ике мең дә беренсе йылдың сентябрь урталары. Минең етмеш йәшкә арналған кисәгә әҙерләнгән мәл. Был юбилейҙы сентябрҙә үткәреү ҡаралғайны. Уны октябргә күсереүҙәрен ишетеп, ошоға бәйле ҡайһы бер мәсьәләләрҙе һөйләшеү өсөн Яҙыусылар союзына килгәйнем. Секретарь-машинистка Рита, Рауил ағайҙа кешеләр бар, инмәй тороғоҙ, тигәс, идара рәйесе кабинетына һуғылмай, уның урынбаҫары Риф Тойғонов янына үттем.

Әммә уның менән башлаған һүҙем осланмай ҡалды. Беҙҙең эш тураһында һөйләшеп ултырғанға ҡамасауларын да уйламай, бүлмәгә Ғәзим Шафиҡов килеп

*Аҙағы. Башы 6-сы һанда.



Тәүге президентыбыҙ Мортаза Рәхимов яҙыусыға Салауат Юлаев орденын тапшыра.

инде лә шаптыр-шоптор килтереп өҫтәлдә ятҡан гәзиттәрҙе аҡтарырға тотонҙо. Уның артынса уҡ ишектә Ирек Кинйәбулатов күренде. Ул, ниҙер мөңгөрләп һөйләнә-һөйләнә, барып Ғәзимгә ҡаршы яҡтан урын алды. Әле төш тә етмәгән, былар ҡасан ҡунаҡ булып өлгөргән, тип, артабан үҙемдең йомош тураһында һөйләшеү мөмкин булмағанлыҡтан, сығып китергә уйлап торғанда, ишек йәнә шар асылып китте лә, унда Бикбаев ҡусты пәйҙә булды.

– Тор! – тип ҡысҡыра был ҡапыл йәмһеҙ тауыш менән.

Уның ҡыланышына көләмһерәп ҡарап ултыра инем, йәнә ҡысҡыра:

– Вон бынан! Һин Тайфур Сәғитов менән һәр саҡ Союзға ҡаршы көрәш алып бараһың!..

Был юлы инде, үҙ ҡолағыма үҙем ышанмайынса, аптырап сығып киттем.

Иҫ китмәле бит, ирмен тигән ир шунса йылдар буйы вазифаһына йәбешеп ятып, теге саҡта уны тәүге һайлау мәлендә үҙе өсөн тауыш бирмәгәнгә үс һаҡлап йөрөһөн әле! Ә Тайфур Сәғитовты ҡайҙан килтереп ҡыҫтырҙы һуң ул? Мине кәмһетергә теләпме? Союзға ҡаршы һуғыш алып бараһың, тиме? Бер аҙ тыныслана төшкәс, көтмәгәндә килеп тыуған был хәлде аңлағандай булдым: табындарында “дуҫтар һәм дошмандар” тураһында һүҙ ҡуҙғалғандыр. Мин өнәп етмәгән Кинйәбулатовтың һүҙ йөрөтөргә, кешеләр араһын боҙорға оҫта икәнен күптәр белә. Мең туғыҙ йөҙ һикһән туғыҙынсы йыл Башҡортостан Китап һөйөүселәр йәмғиәте пленумының ҡарары менән иң яҡшы художестволы әҫәргә Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премия булдырылғайны. Конкурс комиссияһының ҡарары буйынса тәүге премия күренекле яҙыусы Кәтибә Кинйәбулатоваға бирелергә тейеш ине. Ул ҡарар республика гәзиттәрендә баҫылды. Һәҙиә Дәүләтшина исемендәге премияның Кәтибә Кинйәбулатоваға бирелергә тейеш булып та, йәмғиәт рәйесенең урынбаҫары Сабитованың башбаштаҡ холҡо арҡаһында, уны Шафиҡовтың алыуын яҙыусыларҙың съезында һөйләгәндән аҙаҡ, Ғәзим дә миңә ҡырын ҡарабыраҡ йөрөй ине. Шулар һөйләгәндер инде Рауилға ярамһаҡланып юҡ-бар хәбәрҙе.

Илебеҙҙәге хәлдәргә ипләберәк ҡараһаң, аптырайһы ла түгел. Дәүләт эшмәкәремен тип йөрөгәндәр, һәр кимәлдәге депутаттар, сенаторҙар араһында кемдәр генә юҡ! Аҡса ҡолдары, коррупционерҙар, кеше үлтереүселәр, уйнашсылар, алдаҡсылар... Рәсәйҙең бөтә тамырҙары буйлап ағыла был үлемесле йоғошло сир вирустары. Ун һигеҙенсе быуат башында йәшәгән инглиз драматургы һәм сәйәсмәне Шеридан: “Әгәр яуызлыҡ үтеп инһә, аҡыл тигәнең бөтә күркәмлеген, һоҡланғыс сифаттарын юғалта”, – тип беҙҙең заман кешеләренә васыят итеп әйткән кеүек. Шуға өҫтәр инем: Бикбаевтың холоҡһоҙланыуы, – һис шикһеҙ, уның етәксе вазифаһын оҙаҡ биләүенең касафаты ла.

***

Кит инде, “Бер кемгә лә һөйләмәм” тигән йәмһеҙ хәлде ҡағыҙға уҡ төшөрөп ҡуйҙым. Ижади тормошта бит һағынып һөйләрлек иҫтәлектәр ҙә бар. Ҡәләмдәштәр менән осрашып йә сәйгә саҡырышып, ихлас итеп һөйләшкән, ижад, айырым әҫәрҙәр тураһында бәхәсләшкән мәлдәр, күңелдәрҙе күтәреп ебәрә торған, юғары кимәлдә үткән йыйылыштар, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыу өсөн урындарға бик йыш сығып йөрөүҙәр...

Бер мең туғыҙ йөҙ алтмыш туғыҙынсы йылда булһа кәрәк, Яҙыусылар союзы эргәһендә әҙәбиәтте пропагандалау бюроһы ойошторолдо. Уның тәүге етәксеһе итеп Мөкәрәмә Садиҡова ҡуйылғайны. Был бюро байтаҡ йылдар йәшәне һәм, әҙәбиәтте пропагандалау менән бергә, яҙыусыларҙы уҡыусыларға яҡынайтыу яғынан да ҙур ғына роль уйнаны. Был ойошманың эшендә миңә лә ҡатнашырға, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыу өсөн йыш ҡына районДарға сығып йөрөргә тура килде.

Мең туғыҙ йөҙ етмешенсе йылдың көҙөндә Дүртөйлө һәм Илеш районДарына барып, ауылдарҙа әҙәби кисәләр үткәреү тураһында килешеүҙәр төҙөп ҡайттым. Пропаганда бюроһы осрашыуҙарҙы күберәк түләүле үткәрә, ойошмалар биргән аҡсаның бер өлөшөн үҙенә алып ҡала, икенсе өлөшөн кисәлә ҡатнашҡан яҙыусыларға түләй ине.

Минең һәр төрлө йыйындарҙа китап һөйөүселәр алдында сығыш яһау маһирлығым юҡ ине. Трибуна артына сығып, үҙемдең ижад, ғөмүмән әҙәбиәт тураһында аҡыл һатыуҙы өнәп тә еткермәйем. Әлбиттә, был шөғөл шағир халҡы өсөн ауыр түгел, сығып баҫа ла дәртләнеп-талпынып шиғырҙарын һөйләргә тотона. Ә прозаик роман йәки повесын уҡый алмай бит инде, хатта хикәйә генә уҡыһаң да тыңлаусылар ялҡып китер төҫлө.

Хәйер, прозаиктың да тамашасыны әүрәтерлек итеп сығыш яһай алыуын, быны өсөн айырым бер һәләт кәрәклеген дә беләинем. Ундай яҙыусы – Әнүәр Бикчәнтәев. Стәрлетамаҡ уҡытыусылар институтында уҡыған саҡта уҡытыусыбыҙ Хәким Ғиләжев беҙҙе байтаҡ яҙыусылар менән таныштырҙы. Уларҙы йә махсус рәүештә Өфөнән саҡырып килтерә, йә Эстәрлелә үҙ йомоштары менән йөрөгәндәрен осратып институтҡа алып килә лә осрашыу үткәрә.

Әнүәр Бикчәнтәевты ла ул урамда осратҡан да институтҡа әйҙүкләгән. “Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ” повесын яҙғандан аҙаҡ киң танылған яҙыусы “Сода” заводы төҙөлөшөнә – нәүбәттәге биш йыллыҡ планға кертелгән һәм Европала иң ҙур сода етештереүсе буласаҡ был завод ул саҡта төҙөлөп кенә ята ине – эшселәр менән осрашып һөйләшеү өсөн саҡырып килтерелгән икән. Хәким Ғиләжев башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенең студенттарын, лекциялар бөткәндән аҙаҡ, марксизм-ленинизм кабинетына йыйҙы ла Әнүәр Бикчәнтәев ағай менән осрашыу үткәрҙе. Әллә бик ыҫпай кейенеүе, әллә мөләйем ҡиәфәте менән үҙенә тартып торған ағайыбыҙ тәүҙән үк русса һөйләй башлауы менән беҙҙе ғәжәпләндерә биреп тә ҡуйғайны. Сөнки беҙ башҡорт яҙыусыһы менән осрашырға тип килгәйнек бит, студенттар араһында урыҫтар юҡ. Тик беҙҙең сәйерһенеүебеҙ тиҙ үк онотолдо. Әнүәр Бикчәнтәев шундай шыма һәм мауыҡтырғыс итеп һөйләй – ауыҙҙарыбыҙҙы асып тыңлап ултырабыҙ. Аҙаҡтан бер хикәйәһен яттан уҡып та ишеттергәс, яҙыусы хаҡында бик һәйбәт тәьҫорат ҡалды, осрашыуҙан бик тә ҡәнәғәт булып таралыштыҡ.

Ләкин быңдай оҫталыҡ һәр прозаикка бирелмәгән. Ул сифат миндә лә юҡ. Шуға күрә биш-алты көн эсендә тиҫтәнән артыҡ урында осрашыуҙар үткәреп, унда ниҙәрҙер һөйләү үтәп булмаҫлыҡ ауыр эш һымаҡ тойола. Икенсе яҡтан, мин төрлө һөнәр кешеләре менән осрашып, ғәҙәтисә генә һөйләшеп алырға



*Татарстан Республикаһының халыҡ шағиры*
*Роберт Миңнуллин, Хәсән Назар һәм Ноғман Мусин.*

ярата инем. Шуға күрә, ярар, рәте табылыр әле тип, кисәләр үткәрергә барырға булдым. Иптәшкә бер кеше – оҫта сығыш яһаусы шағир табырға кәрәк ине. Рафаэль Сафинға, Әнғәм Атнабаевҡа, тағы ла кемдәргәлер әйтеп ҡараным, ниндәйҙер сәбәптәр табып, ризалыҡ бирмәнеләр. Шулай аптырап йөрөгәндә, Союзға ниндәйҙер йомош менән килгән Тимер Арыҫлан ағайҙы осраттым. Ағайҙың оҫта сығыш яһаусы икәнен яҡшы беләм, әммә өлкән кешегә (хәҙер уйлап ҡараһам, уға илле биш йәш кенә булған) өндәшергә ҡыймайыраҡ торҙом. Бына шулай йөрөп ҡайтырға юлдаш тапмайым әле, тигәйнем, Тимер ағайҙың сырайы асылып китте. Ни эшләргә белмәй ҡаңғырып йөрөй инем әле, ҡана, үҙем барайым, ти был. Мин ни шатланып риза булдым. Ағайҙың төп тормошо Октябрьский ҡалаһында булыуын, әле Өфөлә һатып алған өс бүлмәле фатирында яңғыҙы йәшәп ятыуын белә инем. Шуға күрә уның ни эшләргә белмәй ҡаңғырып йөрөүен дә аңланым.

Мөкәрәмә Садиҡоваға командировка ҡағыҙы яҙҙырырға ингәндә районға кем менән барырымды әйткәйнем, ул:

– Тик ағайҙы ҡарабыраҡ алып йөрө инде. Ул төшөрөү мәсьәләһендә йомшағыраҡ бит, бер башлаһа, туҡтата алмай ҡуйыуың бар, – тип күңелгә шик һала биреп ҡуйҙы.

Шуға күрә үҙемә бер грамм да йотмаҫҡа, кисә үткәргәндән аҙаҡ ҡунаҡ итергә булһалар, ағайға ла берәй рюмканан артыҡ эсермәҫкә, тигән фекергә килдем.

Нисек кенә булмаһын, ул саҡта партияның район комитеттары һәр төрлө мәҙәни саралар үткәреүгә бик яуаплы ҡарай һәм уларҙы һәйбәт итеп ойоштороуҙа яҡындан ҡатнаша ине. Беҙ килеүгә ҡайҙа, ҡасан кисә үткәреү билдәләнгән һәм тәүге көн үк район үҙәгенең үҙендә осрашыуҙар башланып та китте.

Беҙҙе райком вәкиле оҙата йөрөй, барған еребеҙҙә кисәгә алдан әҙерләнеп, көтөп торалар. Осрашыуҙы райком вәкиле аса, беҙҙең менән таныштыра ла, алдан килешеү буйынса, миңә һүҙ бирә. Мин башҡорт әҙәбиәтенең бөгөнгө торошо хаҡында, унан үҙемдең ижад тураһында һөйләйем, үҙемдең күңелдә, юҡ-бар хәбәр менән кешене ялҡытмайыммы икән, тигән уй ташлап китмәй. Ә инде тыңлаусылар повестарым, бигерәк тә "Өҙәрем юл кешеләре" тигән романым, ғөмүмән, әҙәбиәт тураһында үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һорауҙарын бирә башлағас, эскә йылы йүгерҙе. Ҡарасы, әҫәрҙәремде уҡығандар, әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыналар. Тимер Арыҫлан шиғыр уҡый башлағас иһә, тыңлаусылар бөтөнләй йәнләнә, геү килеп ҡул сабалар, көлөшәләр, тағы, тағы шиғыр уҡыуын һорайҙар.

Ә Тимер ағай һалмағыраҡ көйгә һала биреп, үҙенсәлекле яғымлы тауыш

менән яңынан-яңы сатирик, юмористик шиғырҙарын ғәжәп бер ихласлыҡ менән уҡый. Ул үҙе менән бер ваҡытта ла китаптарын алып йөрөмәй, шиғырҙарын тик яттан ғына һөйләй торғайны. Шулай итеп, тәүге осрашыуҙан уҡ шик-шөбһәләр таралды, бигерәк тә Тимер Арыҫлан ағай менән килеүемә ҡәнәғәт инем.

Кисен, ике осрашыу үткәргәндән аҙаҡ, райком вәкиле беҙҙе кафеға саҡырып, артҡы ишектән генә айырым бер бүлмәгә алып инде. Унда табын әҙерләп үк ҡуйылған. Өҫтәлдә һәр төрлө ашамлыҡтар, урталыҡта бер йылтыр шешә лә һерәйеп ултыра. Уны күргәс тә, Мөкәрәмәнең, ағайҙы ҡарабыраҡ алып йөрө инде, тигән һүҙҙәре ҡылт итеп иҫкә төштө.

Райком вәкиле тәүге һәйбәт осрашыуҙар менән ҡотлап тост тәҡдим итте. Мин рюмкаға тотона биреп кенә ҡуйҙым, үҙемдең күҙ Тимер ағайҙа. Ул бик һәйбәтләп түңкәрҙе рюмканы, ҡәнәғәт рәүештә тамағын ҡырып алды. Икенсе рюмканы эскәндә, ағайҙы тыйырға тел әйләнмәне, өсөнсөһөн ҡойғас, райком вәкиленә, беҙҙең эш башланып ҡына тора, артыҡ ҡунаҡ булыу ярамаҫ, тигәйнем, ул, минең хәлде, тел төбөн аңламағас, ярар, күтәреп осмаҫ әле, фәлән дә төгән тип, һаман ҡунаҡсыллыҡ күрһәтеүен белде. Тимер ағайым апаруҡ булып алғайны инде.

Ҡунаҡханаға ҡайтҡас (бүлмәләш инек), уны тынысландыра алмай аптыраным. Бар әле, берәй нәмә табып алып ин, ти. Хәҙер бит магазиндар бикле, тип ҡарайым, юҡ, урын тапмағандай, иҙәндә ары-бире йөрөй. Һаран кеше һин, егет түгел икәнһең, тип һуҡранып та ала. Уға иғтибар итмәҫкә тырышып ята торғас, йоҡлап киткәнмен. Бер аҙҙан уянып китһәм, ағайым өҫкө кейемен сискән, өҫтәл артында ашанып ултыра. (Уның юлға сыҡҡан һайын тауыҡ ҡурып әҙерләүен, кипкән балыҡ һалып алыуын аҙаҡтан белдем.)

Райком вәкиле иртәнгелекте лә әлеге бүлмәгә инеп ашарға ҡушҡайны. Барҙыҡ. Мул ғына итеп ашарға ултырттылар. Ағайым ҡалағына тотонорға ҡабаланмай. Шунан:

– Әйт әле, теге нәмәне берәй йөҙ грамм бирһендәр. Бынау тиклем ризыҡ әрәм була бит, – ти.

Кисәге хәлдән һуң ҡәтғи ҡарарға килгәйнем.

– Уныһы булмай, ағай, – тим. – Бынан ары кисен дә бер рюмканан артыҡ эсмәйһең. Үҙеңә ҡыйын була бит.

Ныҡышманы Тимер ағай, әммә ашауының рәте булманы, көнө буйы тиерлек өндәшмәй, турһайыбыраҡ йөрөнө.

Ул көндө беҙҙе "Победа" колхозына алып барҙылар. Был колхозда элек гәзит редакцияһында эшләгәндә булып киткәйнем. Ул ваҡытта колхоз идараһы рәйесе булып райкомда эшләп йөрөгән еренән килгән Ҡәйүмов эшләгәне лә хәтерҙә. Һәр яҡлап алдынғы иҫәпләнә ине хужалыҡ.

Быҫҡаҡлап ямғыр яуып торған көҙгө көн. Яландарҙа уңыш йыйып алып бөтөлгән. Ҡараһыу төҫкә ингән эҫкерттәр, бер тигеҙ рәт булып теҙелгән буй-буй баҫыу һаҡлағыс урмандарҙың яланғаслығы, бигерәген дә машинаның артҡы урынында йәнәш ултырған Тимер Арыҫлан ағайҙың, беҙҙе оҙата йөрөүсе райком вәкиленең райондағы хәл-әхүәлдәр тураһында һөйләүен дә ишетмәгән төҫлө, муйынын яғаһы эсенә тарта биреп шоҡорайып ултырыуы кәйефте ебәрә төшә ине.

Хужалыҡтың етәксеһе Хәүис Ҡәйүмов беҙҙе идара контораһы алдында ҡаршыланы. Мыҡты кәүҙәле, түңәрәгерәк ҡуңғырт йөҙлө урта йәштәрҙәге ир. Уның ошондай көндә өҫтөнә тун һәм бүрек кейеп алыуы ғәжәберәк тойола ине. Һуңынан ғына белдек: ул сирләп ятҡан еренән тороп килгән икән. Ул беҙҙе үҙенең иркен, түр башында ике Ҡыҙыл байраҡ һөйәүле (ярыштарҙа еңеп сыҡҡан өсөн бирелгәндер инде) иркен кабинетына алып инде лә хужалыҡтағы эштәр торошо

менән таныштырҙы, шунан, ҡоро һүҙ менән генә ҡәнәғәтләнмәй, һөтсөлөк фермаһына алып китте. Ныҡлы аҙбарҙарҙың стеналары ағартылған, тышта күҙгә бысраҡ булыуға ҡарамаҫтан, аҙбар эсе таҙа, ҡоро. Бында эшләүсе ҡатын-ҡыҙҙар өҫтөндә ап-аҡ халат. Хәүис Ҡәйүмов һыйырҙарҙың тоҡомон яҡшыртыу өсөн башҡарылған эштәр, уларҙың һәр береһенән күпме һөт һауып алыныуы тураһында һөйләй, һауынсыларҙы маҡтай. Шунан, әле генә иҫенә төшкәндәй, ҡапыл ғына әйтә:

– Малсылар өйөнә инеп, шунда эшселәр менән һөйләшеп алабыҙмы әллә? Көн буйы эшләп йонсоған кешеләрҙең клубҡа бара алмауы ихтимал, – тине.

Әлбиттә, уның тәҡдименән баш тартып булмай ине. Минең баштан иһә, был беҙҙе һыйырҙар күрһәтеү өсөн түгел, ошонда эшләүселәр менән осраштырыу, уларҙы кисәнән мәхрүм ҡалдырмау өсөн алып килгәндер, тигән уй үтте һәм үҙ ҡул аҫтында эшләүселәргә шулай иғтибарлы булған өсөн уға ҡарата ихтирам уятты.

Күберәге аҡ халатлы ҡатындар йыйылған. Ҡыҙыҡһыныуҙары йөҙҙәренә бәреп сыҡҡан малсылар эргәһенә ингәс, Тимер ағайҙың да сырайы асылып, кәйефе күтәрелә төшкән һымаҡ булды. Уның осрашыуҙа кемдәр ултырыуға ҡарап үҙ репертуарын тиҙ генә самалап алыу һәм тыңлаусы күңеленә ятышлы шиғырҙарын уҡыу һәләте бар ине. Уның көлкөлө лә, ғибрәтле лә шиғырҙары ең һыҙғанып эшләп йөрөүселәргә шифа булды, күрәһең, – бик ҡәнәғәт ҡалдылар.

Йонсоуыраҡ сырайлы күренгән Хәүис Ҡәйүмовтың да кәйефе күтәрелеп киткәндәй тойолдо. Колхоз ҡунаҡханаһына инеп ҡапҡылап алғас, мәктәпкә алып китте, клубҡа барғанда ла беҙҙән айырылманы. Аҙаҡтан уның сирләп ятҡан ерҙән тороп, ана шулай көн буйы беҙҙең менән йөрөүен белгәс (бына ул ни өсөн тун кейеп йөрөгән икән), аптырап та ҡуйҙым: әҙәбиәткә һөйөү шулай йөрөтәме уны, әллә ҡул аҫтында эшләүселәргә күңел байлығы өҫтәргә теләү, бының өсөн беҙҙе тулыраҡ файҙаланып ҡалыу маҡсаты хатта сирен дә онотторҙомы? Нисек кенә булмаһын, был артыҡ күп һөйләшмәгән, әммә ихлас күңелле кеше бик тә оҡшаны миңә. Артабан уның менән күп тапҡырҙар осраштым. Уның менән һөйләшеп ултырыу күңелде байыта, тормошто тәрәнерәк аңлай белергә ярҙам итә ине. Беҙгә, ҡәләм тибрәтеүселәргә, моғайын, ана шундай ҙур маҡсаттар менән йәшәгән кешеләр менән осрашыу, аралашыу етмәйҙер. Хәүис Ҡәйүмов тураһында мин аҙағыраҡ очерк та яҙҙым, ҡайһы бер әҫәрҙәрем өҫтөндә эшләгәндә ул күҙ алдымда тере образ булараҡ та баҫып торҙо.

Ә кисен осрашыу бик һәйбәт үтһә лә, аҙағы әллә нисегерәк булды. Клубтан сыҡҡас, беҙҙе клуб эргәһендәге бер йортҡа инеп, киске аш ашап сығырға саҡырғайнылар. Тимер ағай ҡырҡа баш тартты ла ҡуйҙы. Төрлөсә димләп ҡарайҙар, хәҙер ваҡыт һуң, Дүртөйлөлә ашханалар ябылған, ҡапҡылап алайыҡ, тибеҙ, юҡ, яҡын да килмәй. Беҙҙе Дүртөйлөгә алып китәсәк машинаға инеп үк ултырҙы. Ни эшләйһең, эс көтөрләберәк торһа ла, ҡайтып китеүҙән башҡа эш ҡалманы. Мин инде ағайҙың ни өсөн шулай кеҙеләнеүен аңлаған кеүекмен. Иртәнсәк араҡы эсеү тураһындағы киҫәтеүем оҡшамаған, шуның байын ҡайтара.

Ул саҡта әле бигүк күркәм булмаған иҫке ҡунаҡхана күҙгә һалҡынлығы менән ҡаршы алды, хатта ауылда ашалмай тороп ҡалған ризыҡтарҙың тәмле еҫе танауға бәрелгән һымаҡ тойолдо. Ни ҡылаһың, ваҡыт һуң, иртәгәһенә иртүк йәнә ауылға китәсәкбеҙ, тигәйнеләр. Сисенеп ятыу яғын ҡараныҡ.

Төнөн ниҙер ҡыштырлаған тауышҡа уянып киттем. Тыңлап ятам. Сысҡан ниҙер кимергән төҫлө. Тауыш Тимер ағай ятҡан карауат яғынан килә. Ятҡан ерҙән ынтылып утты тоҡандырһам, Тимер ағай тороп ултырған һәм ауыҙын кәүшәңләтеп ниҙер һурып маташа. Минең уянып ут яҡтыртыу уға оҡшаманы.

– Едрин-кудрин, ниңә йоҡламайһың? – ти.

Уның ҡулындағы кипкән балыҡ башын, өҫтәлдәге ҡылсыҡтарҙы абайлағас, көлкө килеүен баҫып, етди генә һораным:

– Ағай, миңә лә юҡмы аҙыраҡ, асыҡтырҙы бит.

– Ана, алып һур, – тип өҫтәлдәге вобла һөлдәһенә ымлай. – Буш ҡорһаҡҡа ярай ул.

Рәхәтләнеп көлмәйенсә түҙмәнем.

– Ҡорһаҡты алдап булмай, тигәндәр бит, ағай. Юҡҡа ғына ашап ҡайтманыҡ.

Ағай өндәшмәне. Ул бик йыйнаҡ йөрөргә ярата ине. Ятҡан урынын бик тәпейләп йыйыштыра, артынса һис ниндәй сүп-фәлән ҡалдырмай. Әле лә өҫтәл өҫтөндәге балыҡ ҡалдыҡтарын йыйып, сүп биҙрәһенә алып барып һалды, өҫтәлдәге графиндан стаканға һыу ҡойоп, ауыҙын сайҡаны. Койкаһына ятып, өҫтөнә ябынғас, артабан һөйләшмәҫен белдерҙе:

– Һүндер утыңды.

Байтаҡ тынлыҡтан һуң, уның алыҫтан килгән кеүек тауышы ишетелде:

– Ноғман, ҡабат улай итмәм, тик һин мине кеше алдында эсеүҙән тыйып ултырма.

Уның һүҙен ишетмәмешкә һалышыуҙы артыҡ күрҙем. Ағайыбыҙ артабанғы осрашыуҙарҙан һуңғы аш мәжлестәрендә, ни тиклем генә димләп ҡарамаһындар, йотом да эсмәне. Хатта ошо мәлдә лә көләмәслеген ташламайынса:

*Мәгәр тотондоммо, әрһеҙләнеп,*
*Араҡы ла тигән хәмергә,*
*Тимер генә тигән Арыҫланығыҙ*
*Әйләнә лә ҡуя ҡамырға, –*

тип әллә ҡайһы арала үҙенә сығарған шиғырын уҡып, бүтәндәрҙең күңелен күтәреп тә алды.

Дүртөйлө яҡтарындағы осрашыуҙарҙан бик һәйбәт кәйеф менән ҡайттыҡ беҙ. Ошонан аҙаҡ бер ҡатлыраҡ, әммә үҙ һүҙле, ихласлығы менән үҙенә тартып торған, бик тә үҙенсәлекле талантлы Тимер ағайға ихтирамым тағы ла арта төшкәйне. Ул да мине үҙ итте шикелле.

– Ноғман, әйҙә, берәй яҡта йөрөп әйләнәбеҙ, – тип килә лә етә.

Байтаҡ районга дарҙа булдыҡ беҙ уның менән. Осрашыуҙарҙа һөйләгәнен тыңлап йөрөй торғас, уның шиғырҙарынятҡа бикләп бөттөм. Уның осрашыуҙарҙа сығыш яһау өсөн үҙенсә төҙөп алған сценарийы бар. Етди шиғырҙар һөйләүҙән башлай ҙа әкренләп көлдөргөс һәм ғибрәтлеләренә күсә, тамашасыларҙың иғтибарын яулап ала. Уның ҡатнашлығында үткән кисәлә булған кеше Тимер ағайҙы ғүмеренә онота алмайҙыр.

Уның менән бергә йөрөгән һәр сәфәрҙе, һәр кисәне һөйләп бөтөп булмай. Шулай ҙа ағайҙың характерын күрһәткән бер мәлде иҫкә төшөрөп үтмәксемен.

...Мең туғыҙ йөҙ етмеш икенсе йыл ине шикелле, Дәүләкән районына барырға булдыҡ. Һуңғы ваҡытта һис ҡайҙа йөрөгәнем юҡ, елләп йөрөп ҡайтҡы килә, тип Назар Нәжми ҙә беҙҙең менән бармаҡсы булды. Ике оло шағир менән йөрөү минең өсөн ҙур мәртәбә ине, шуға ҙур ихласлыҡ менән юлға сыҡтым.

Күңелле ине ағайҙар менән йөрөүе. Йәш ваҡыттарын, фронт юлдарын, һуғыштан һуңғы йылдарҙағы әҙәби тормошто хәтерләйҙәр. Осрашыу кисәләрендә иһә сығышты Назар Нәжми ағай башлай, тәүге һүҙенән үк кисәгә килеүселәрҙең иғтибарын яулай, уға мин ялғанып китәм. Ә Тимер Арыҫлан ағай уны күңелле итеп ослап ҡуя. Тик бына Назар Нәжми сәфәребеҙҙең аҙағына тиклем йөрөй алманы, сессия ултырышы була тип (ул республика Юғары Советы депутаты ине),

Өфөгә ҡайтып китте, ә беҙ партия райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире Солтанғолов оҙатыуында Имай-Ҡарамалы ауылына юлландыҡ. Был ауылға барыуҙы түҙемһеҙлек менән көтөп йөрөй инем. Сөнки унда һалдат хеҙмәтенә бергә барып, бер взводта хеҙмәт итеп ҡайтҡан, байтаҡтан бирле күрмәгән дуҫым Зөлфәр Тажиев йәшәй. Шунда күп кенә йылдар мәктәп директоры булып эшләй ине ул. Шуға күрә барған ыңғайы уҡ уның өйөнә һуғылырға тәҡдим иттем.

Дуҫым ҡолас йәйеп ҡаршы алып, ихлас ҡунаҡсыллыҡ күрһәтһә лә, яйлап ултырырға форсат юҡ ине. Мәктәптә осрашыу үткәрергә киттек, ә унан тура клубҡа юлландыҡ. Осрашыу ғәҙәттәгесә һәйбәт кенә үтте. Назар Нәжмиҙең дә килерен көткән икән халыҡ, ул ниңә килмәне, тиҙәр. Тимер ағай был һорауға ла, уның ҡатыны бик йәш, шуны һағыныуҙарын баҫа алмай ҡайтып китте, тип көләмәсләп яуап бирҙе.

Клубтан сығыуыбыҙға буран күтәрелеп киткән. Урам араһындағы юлдарҙы ла көрт баҫа башлаған. Клубҡа ҡаршы ғына өйҙә сәй әҙерләткәндәр икән, шунда алып инделәр. Өҫтәлдә мәй ҙә күренә. Өҫтө сисенеп йөрөгән арала Тимер ағай:

– Бер-ике рюмка эсермен инде, буран бит, – тип шыбырланы.

Мин:

– Берҙе, – тигәс, танауын сирып йылмайып ҡуйҙы.

Әммә ул икенсе рюмкаға үрелеүҙән ҡулын тыя алманы. Кешегә һиҙҙермәй генә уның беләгенә ҡағылғайным, ағайым миңә табан боролоп ҡараны ла, йөҙөнә ризаһыҙлыҡ сығарып, рюмканы кире ҡуйҙы. Үҙемдең ҡылыҡҡа аҙаҡтан үкендем дә (эсһен ине әйҙә, Зөлфәр дуҫҡа барып йоҡлар инек), һуң ине инде.

Зөлфәр, унда ҡатыным әҙерләнеп көтөп тора, мунса яҡтырғанмын, тип хатта инәлеп саҡырыуына ҡарамаҫтан, райком вәкиле Солтанғолов, буран юлға арыу уҡ һалғандыр, төнө менән йөрөмәйекме әллә, тиһә лә, Тимер Арыҫлан минең дуҫҡа барыуҙан ҡырҡа баш тартты, машинаға инеп ултырҙы ла, һеҙ теләһә ни эшләгеҙ, мин Дәүләкәнгә ҡайтам, тиеүҙән башҡаны белмәй. Ни эшләйһең, хужалар менән хушлашып, төнгө сәғәт ун икеләрҙә юлға сыҡтыҡ.

Буран баҫылмай, көслө ел ҡар бөртөктәрен шыптырлатып машинаға бәрә. Машина юлға тығыҙлап һалған көрттө ҡыйынлыҡ менән ярып барҙы-барҙы ла, урман ауыҙына етә яҙғас, бөтөнләй туҡтап ҡалды. Төшөп ҡараһаҡ, машина ныҡ ҡына сумған. Шофер, анау урман эсенә барып инһәк, унда юлға бигүк һалмағандыр, бәлки, ыңғай уҡ китербеҙ, ти. Минең баштан иһә, их, Тимер ағай, тигән уй үтә. Ә ағайым пальто яғаһын торғоҙоп, муйынын эскә тартҡан да өндәшмәй ултыра. Беҙ өсәү юл тапарға тотондоҡ. Ләкин беҙ тапаған юлға ел шундуҡ ҡар тултыра. Машинаны Солтанғолов менән арттан этеп ҡарайбыҙ, ярты метр самаһы алға бара ла хәле бөтөп туҡтай машина. Йәнә юлды тапап, аяҡ менән һыпырып таҙартып аҙапланабыҙ. Көрәк тә юҡ бит, исмаһам.

Урман эсенә инергә күп тә ҡалмағайны инде, машинабыҙ бөтөнләй һүнде. Шофер егет, бензин бөттө, ағайҙар, тигәс, минең сабырлыҡ өҙөлдө. Һеҙ яйлап ҡайтып етерһегеҙ, мин атлай торам, тип көрт ярып урманға табан йүнәлдем. Тимер ағайҙың кеҙелегенә йән көйә, ниңә шуның менән ризалаштым, Зөлфәрҙәргә алыр ҙа китергә кәрәк ине. Дүртөйлө яғында булған хәлдән аҙаҡ икенсе тапҡыр аҡылға ултыра ине Тимер ағай.

Урман эсенә ингәс, ысынлап та юлда ҡар әҙәйә төштө, атлау еңеләйҙе. Дәүләкән – Стәрлетамаҡ шоссеһына килеп сыҡҡас, еңел һулап ҡуйҙым. Бында ел ҡарҙы һепереп алып китеп торған, юл тап-таҡыр. Ҡунаҡхана ишеге төбөнә еткәндә, сәғәт иртәнге алты ине. Арыу уҡ арыттырған, сисенеп койкаға ауҙым.

Тимер ағай иһә сәғәт ундарҙа ғына ах та ух килеп ҡайтып инде. Хәле бөткәйне

унығ, сисенергә ярҙам иттем. Ә ул бер хәбәр ҙә һөйләмәй, урынына ятты ла юрғанын бөркәнде.

Үҙемде унығ алдында ниңәлер ғәйепле тоя инем. Ял итеп тороуына ҡунаҡханаңың буфетынан йөҙ грамын да ҡойҙороп, ашарына алып килдем. Хәстәрлегемде күреп, ағайымдың кәйефе күтәрелер тигәйнем, юҡ, эсемлек һалынған стаканды алдына ҡуйғас, үҙең эс, тип уны ситкә этәрҙе. Ниңә шул тиклем ныҡ үпкәләне икән ул миңә?

Нисек кенә булмаһын, Өфөгә ҡайтып китергә кәрәк ине. Командировка ҡағыҙҙарына мисәт һуҡтырыу өсөн райкомға киттем. Әйләнеп ҡайтыуыма, Тимер ағай һәйбәтләп кейенгән, кәйефе лә арыу күренә. Мин бер ни өндәшмәһәм дә, өҫтәлдәге буш стаканға ымлап:

– Түктем бынау нәмәнде, – ти.

Унығ алһыуланған сырайына ҡарап, ай-һай, ҡайҙа түктең икән, тип уйланым да:

– Һәйбәт булған, ағай, әйҙә киттек вокзалға, – тим.

Назар ағайҙың алданыраҡ ҡайтып китеүе бер аҙ кәйефте ҡырғайны, өҫтәүенә, Имай-Ҡарамалынан ҡайтҡанда килеп тыуған сетерекле хәл бик матур үткән кисәләрҙән аҙаҡ күңелде төшөрә биреп ҡуйҙы, әлбиттә. Шулай ҙа икеһе ике төрлө, әммә икеһе лә талантлы өлкән ағайҙар менән бергә үткәргән көндәр онотолмаҫлыҡ булып хәтергә һеңеп ҡалды.

Хәйер, Назар Нәжми ағай менән сәфәр йөрөүҙең һуңғыһы булмаған был. Ошонан аҙаҡ байтаҡ йылдар үткәс, беҙ икәүләп минең тыуған яҡтарҙа йөрөп әйләндек. Ғөмүмән, беҙ унығ менән яҡындан аралашып йәшәнек. Бигерәк тә йәй көндәре дачала торғанда, йомош бармы-юҡмы, бер-беребеҙгә йыш йөрөшә инек. Шулай бер килгәнендә:

– Әллә ниңә һеҙҙең яҡтарҙа йөрөп әйләнге килә, – ти ҙә өҫтәп ҡуя: – Тиңдәштәрҙең хәлен белешеп ҡайтаһы ине.

Унығ ниндәй тиңдәштәре тураһында һүҙ алып барыуы менән ҡыҙыҡһынып торманым, тыуған яҡтарҙа йөрөп ҡайтырға ихлас риза булдым. Ишембай районының ул саҡтағы хакимиәт башлығы Харис Шаһиев менән телефондан һөйләшеп ҡуйҙым. Ул юлға сығасаҡ көндө әйтеп тағы шылтыратырға ҡушты.

Мең туғыҙ йөҙ туҡһан алтынсы йылдың июль урталары ине. Беҙҙең менән бергә телевидениенан да бригада сыҡмаҡсы. Район хакимиәте еңел машина ебәргәйне. Хакимиәт башлығының былдай ихласлыҡ күрһәтеүенән бик тә күңеле булды Назар ағайҙың. Ә инде район башлығы беҙҙе хакимиәттең ишеге алдына сығып ҡаршылап, кабинетында район хәлдәре тураһында һөйләй-һөйләй сәй менән һыйлағас, айырыуса кәйефләнеп китте, хатта район хакимиәтенең мәҙәниәт бүлеге мөдире Хәлил Йомағужин оҙатыуында Ҡолғона яғына табан юлды дауам иткәндә:

– Минең район етәкселәре лә (үҙенең Дүртөйлө районын әйтә) һәйбәттәр, тик һеҙҙекеләргә етмәй, – тип әйтеп ҡуйҙы.

Кәлимосҡан ҡаяһы эргәһенә (ундағы таш ҡыуышын Салауат мәмерйәһе тип йөрөтәләр), Ташкүпер шарлауығына һуғылдыҡ. Артабан юл йылға буйынан, тау битләүҙәрендә тарбағай ағастар үҫкән тарлауыҡтан һуҙыла. Назар ағай, машина тәҙрәһенән тирә-яҡты күҙәтеп килә торғас:

– Һинең яҡ, Ноғман, мине үҙенең ҡырағайлығы менән һоҡландыра, – тине.

Ысынлап та, Маҡарҙы үткәндән һуң Бөрйән районының Берәтәк ауылына тиклем булған илле саҡрым аралағы тау-урмандар Бөрйән һәм Белорет яҡтағыларҙан айырылып тора. Ул яҡтарға табан тау-урмандар ыҫпайыраҡ, йомшағыраҡ, нигеҙҙә, ҡарағай, шыршы үҫә. Ҡарттар ауыҙынан ишеткән бар: беҙҙең тирә

– ҡыш ҡарҙың, йәй көнө ямғырҙың иң күп яуған төбәге. Шуға күрә боландар, ҡыр кәзәләре, ҡар кисеп йөрөү ауырлашҡас, Бөрйән яғына күсеп бөтә. Ағастарҙы иһә ауыр ҡар баҫымы имгәтә, шуға ла улар һомғол матурлығын юғалтып, тарбағайланып үҫә.

Йыраҡтарҙан күгәреп күренеп ятҡан Алатауға артылып, Ҡолғона яғына табан ауыша башлағас, тау битен тишеп урғылған ҡаран тәңгәлендә туҡталдыҡ. Шишмә эргәһенә юлаусылар ултырып ял итһен өсөн эшләнгән түбәлек ҡыйығына “Ресторан Алатау. Медведь хозяин” тип яҙып ҡуйылған.

Назар ағай шишмә эргәһенә беҙҙән алда барып етте һәм теш ҡамаштырғыс һалҡын һыу менән йыуынырға тотондо, ниндәйҙер сихәтле тат тойғандай, услап-услап һемерҙе.

– Был шишмәнән дүртенсе тапҡыр һыу эсеүем, – тине ул, ҡаран сылтырауына ҡолаҡ һалғандай, өндәшмәй тора биргәс. – Тәүге тапҡыр мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ етенсе йылда уҙғайным был юлдан. Ҡолғонанан алып Берәтәккә тиклем булған араны йәйәүләп үтергә тура килде. Ана шул саҡ тауҙар йыры тигән төшөнсә күңелгә һеңде, аҙаҡтан “Тауҙар йыры” тигән шиғыр тыуҙы, унан һуң пьеса яҙылды... Икенсе ҡабатына илле етенсе йылда килгәйнек бит инде. Иҫәңдәлер, Ноғман, ул саҡта Ҡолғонала туҡтап, һиндә ҡунып сыҡҡайныҡ. Мостай Кәрим, Ғүмәр Бәшировтар менән өсәүләп килгәйнек был яҡҡа. Ишшеү беҙҙе һыйларға араҡы тапмағас, бер ҡосаҡ шампан күтәреп ҡайтҡайның. – Назар ағай урман яңғыратып көлөп алды. – Бер нисә йыл үткәс, Сибәғәт Хәкимде Бөрйән яҡтарын күрһәтергә алып килгәндә туҡтаныҡ. Шиғыр йәнле кеше ине Сибәғәт, ошо шишмәнең һыуын эсеү өсөн генә лә йәшәрлек бында, тигәне хәтерҙә. Бына тағы килдем һиңә, шишмә. Ҡабат күрә алырмынмы, юҡмы...

Назар ағай йәнә тынып ҡалды, шунан “Тауҙар йыры“н кинәнеп йырларға тотондо. Шишмәнең шылтырауы ла баҫыла төштө, сатай-ботай ағастар үҫкән ҡарт урман, ҡоштар донъяһы тынып ҡалды – бөтәһе лә Назар тауышын, Назар моңон тыңлай һымаҡ ине. Аҙаҡ ул “Алатау шишмәһе” тигән шиғыр яҙҙы.

*Алатауҙың тау башынан*
*Ул таштар ярып сыға,*
*Һалҡын һүҙе тура килмәй*
*Һыуы һалҡынлығына.*
*Уның һыуы эскән саҡта*
*Тештәрҙе ҡамаштыра.*
*Шифаһы ауыр тәнеңде*
*Еңелгә алмаштыра.*
*Шишмәләр юлы – тар һуҡмаҡ.*
*Көйәнтә, күнәк – юлдаш.*
*Был шишмәнең тар һуҡмағы –*
*Оло юл юлы ҡом-таш.*
*Юлы ауыр, үрле-ҡырлы,*
*Үрелгәс кенә еңел.*
*Бында туҡталып китмәгән*
*Юлсы ла юлсы түгел.*
*Тау аҫтында шишмәләр күп,*
*Тау башындағы һирәк.*
*Һалҡын һыуҙар эскең килһә,*
*Матурлыҡты күргең килһә,*
*Был юлды үтеү кәрәк.*

Кисен ауыл клубында халыҡ менән осрашыу кисәһе булды. Назар ағай оҙаҡ ҡына итеп ихлас күңелдән һөйләне, шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе. Уҡыусы бала сәхнәнән “Котелогым” йырын башҡарғас, өлкән йәштәге бер апай:

– Бәй, теге “Кәтелүк"те һин яҙҙыңмы ни ул? Мин уны берәй һалдаттыҡылыр ул тиһәм, – тигәс, рәхәтләнеп көлөп алды ла:

– Хәҙер бер ҙә оҡшамайым шул һалдатҡа. Ә һалдат кәтелүген тағып байтаҡ юлдар үтергә тура килде, – тип яуап бирҙе.

Ауылдаштарым килгән ҡунаҡтарҙы хөрмәтләй белә ине. Назар Нәжмигә матур ғына бүләктәр тапшырҙылар. Ә иртәгәһенә урманға сығып, йылға буйҙарында йөрөп әйләнгәс, ауыл хакимиәте башлығы, тау ҡыҙҙарынса сибәр Әнисә Ғирфанова (ҡайтыр юлға сыҡҡас, Назар ағай: “Анау Әнисәгә ысынлап ғашиҡ булдым, ҡартмәкәш”, – тип көлөп алды) өйөнә алып ҡайтты. Бай итеп табын әҙерләгәндәр. Ир заттары юҡ, биш-алты ҡатын-ҡыҙ йыйылған, кейенгәндәр-яһанғандар. Өҫтәл артына урынлашҡас, Назар ағай:

– Ашамайынса һеҙгә генә ҡарап ултырғы килә, – тип шаҙраларын уйнатып көлөп алды.

Уның сырайы яҡтырып, бер нисә йылға йәшәреп киткән һымаҡ тойолдо. Аҙыраҡ ашап-эсеп ултырғас, ул үҙенең хис-кисерештәрен, ҡыҙҙарҙы хайран ҡалдырып, йыр менән әйтеп бирҙе – “Һиңә барам”ды тик үҙенә генә хас матур тауыш менән йырлап ебәрҙе. Бик оҡшағандыр был ауылдаштарыма, аҙаҡтан ауылға ҡайтҡан һайын, Назар ағайға беҙҙән сәләм әйт, тип ҡалалар ине.

Был матур сәфәр Назар ағай менән һуңғы йөрөүем булған икән. Хәҙер ҡайтҡан саҡтарымда Алатау шишмәһендә туҡтаһам, мин бында Назар Нәжми рухын тойғандай, уның моңон ишеткәндәй булам...

Назар Нәжмиҙең “Тиңдәштәрҙең хәлен белешеп ҡайтаһы ине” тигән һүҙҙәренең мәғәнәһен ҡайтыр юлға сыҡҡас ҡына төшөндөм.

– Минең ике тиңдәшем эргәһенә һуғылайыҡ инде. Уларҙы күреп, һуңғы бурысымды үтәп китәйем, – тине ул. Минең аңламайыраҡ ултырғанды күреп, өҫтәп ҡуйҙы: – Ибраһим менән Яҡупты күрергә ине.

Бөтәһе лә аңлашыла ине хәҙер. Тере кешеләр һымаҡ күреп һөйләшһә лә, вафат булғандан аҙаҡ тыуған яҡтарына ҡайтып ятҡан Ибраһим Ғиззәтуллин менән Яҡуп Ҡолмойҙоң зыяраттарын күреп китергә теләй. Улар бит Назар Нәжмиҙең тиңдәштәре – ун һигеҙенсе йылғылар ине.

Ибраһим Ғиззәтуллиндең тыуған ауылы Түбәнге Әрмет ауылына боролоп индек. Ҡыш Өфөлә тора ла йәй ауылда йәшәгән Зөләйха апай (Ибраһим ағайҙың ҡатыны) беҙ килеп төшөүгә аптырап ҡуйҙы.

– Ниңә улай әйтмәй-нитмәй йөрөйһөгөҙ? Бына нишләйем инде хәҙер, – тип ығы-зығы килә башлағайны, ниңә бында һуғылыуыбыҙҙы, Яҡуп ағайҙың ауылы Ҡанаҡайға ла туҡтарға, бөгөн Өфөгә ҡайтып етергә кәрәклеген әйтеп, уға борсолмаҫҡа ҡуштым. Ул арала, беҙ килгәнде әллә ҡайҙан ишетеп, Әмир килеп етте (Ибраһим ағайҙың кесе улы колхоз рәйесе булып эшләй ине). Күмәкләшеп Бәләкәй Әрмет йылғаһының аръяғындағы һөҙәк тау битләүенә урынлашҡан зыяратҡа юлландыҡ.

Ибраһим Ғиззәтуллиндың ҡәбере зыяраттың урта төшөндә. Матур итеп кәртәләнгән, бюсы тирәләй сәскәләр ултыртылған. Назар ағай:

– Хәлдәр нисек, тиңдәш? – тине, тере кешегә өндәшкәндәй. – Ожмахтың түрендә инде һинең урының, әүлиә кеше инең бит һин. – Әҙерәк өндәшмәй торғандан һуң дауам итте: – Әҙәм күтәрмәҫ ауырлыҡтарға дусар булһаң да, бәхетле кеше һин, тиңдәш. Донъялыҡта ҡатыныңдың, балаларыңдың ҡәҙерен күреп йәшәнең, бында ла сәскәләргә төрөнөп ятаһың.

Назар Нәжмиҙең тиңдәш-замандашы менән шулай һөйләшеп тороуын аңларға мөмкин. “Ике Зөләйха” тигән тетрәндергес поэмаһын яҙырҙан алда Ибраһим ағай, уның ғаиләһе менән аралашып, уларҙың көн итмеше менән яҡындан танышып, Ибраһим ағай менән фронтовиктарса оҙаҡ-оҙаҡ һөйләшеп ултырған. Үлемесле сирен еңеп йәшәүсе һәм ижад итеүсе Ибраһим ағайҙы ул Бөйөк гражданин тип атай ине.

Артабан беҙ Әхмәр ауылы аша үтеп, Яҡуп Ҡолмойҙоң тыуған ауылы Ҡанаҡайға табан юл тоттоҡ. Ауыл кешеләре өсөн бик тығыҙ мәл – бесән ваҡыты ине был. Бындай аяҙ көндә кем өйҙә торһон, мәшәҡәтләп йөрөмәйек тип, ауыл эсенә кермәй, тура зыярат яғына боролдоҡ. Ул ауылдың көнбайыш яғына урынлашҡан. Урман менән кәртәләнгән, эсенә әҙәм буйы үлән үҫкән зыярат эргәһенә барып баҫҡас, Яҡуп Ҡолмойҙоң зыяратын ҡайһы тирәнән эҙләргә белмәйенсә, туҡтап ҡалдыҡ. Килгәс-килгәс, уны нисек тә булһа табырға кәрәк ине. Оҙон үләнде ярып зыярат эсенә инеп киттек. Үлән араһынан ҡәбер кәртәләре лә йүнләп күренмәй.

–Яҡуп, һин ҡайҙа?! – Назар ағай шулай ҡысҡыра, ә минең күңелгә әллә нисегерәк булып китә.

Шулай буталып йөрөп, зыяраттың кәртәһе тышына сыҡтыҡ та алға табаныраҡ атланыҡ. Бәй, Яҡуп Ҡолмойҙоң ҡәбере Торатау яҡ остараҡ юлдан күренеп үк тора икән дә баһа.

– Бына һин ҡайҙа ятаһың икән, күрше, – ти Назар ағай (улар дачала ут күршеләр булып йәшәй ине), ҡәбер кәртәһенә терәлеп. Байтаҡ ваҡыт уйсан сырай менән һүҙһеҙ торҙо шағир. Ниҙәр кисерҙе икән ул ошо мәлдә? Тиңдәштәр менән бына шулай осрашыу, әлбиттә, төпһөҙ яманһыу уйҙарға тарыталыр.

Бына нисәмә йылдар үтте инде ошо сәфәрҙән аҙаҡ, хәҙер Назар ағай ҙа яҡты донъя менән хушлашҡан, ә уның ап-аҡ сәсен ялпылдатып, оҙон үләнде ярып тиңдәшен эҙләп йөрөгәне һаман күҙ алдында. Уның “Яҡуп, һин ҡайҙа?” тигән тауышы ҡолағыма килеп бәрелгәндәй була. Назар ағайҙың тыуыуына туҡһан йыл тулған мәлдә:

– Назар ағай, һин ҡайҙа? – тип тауыш биргем килһә лә, өндәшмәнем. Хәйер, ошо урында атаҡлы шағирҙың туҡһан йәше айҡанлы ойошторолған кисәне иҫкә алып үтеү ҙә урынлылыр. Минеңсә, ул әллә ни әҙерлекһеҙ үтте һәм тейешле кимәлдә булманы.

Назар Нәжми – башҡорт шиғриәтендә иң алғы сафтарҙың береһен биләп торған шағир. Һуңғы ваҡытта телдән төшөрмәй һөйләнгән Шәйехзада Бабич йәки Рәми Ғариповтар кеүек шиғыр яҙыу оҫтаһы ғына түгел, ижад ҡоласының киңлеге, ғәжәп сағыу поэтик образдар һынланған, һуңғы йылдарҙа ижад иткән “Ике Зөләйха”, “Урал”, “Иблис” кеүек поэмалары менән өр-яңы асыштар яһаған, әҙәбиәтебеҙҙә ҡабатланмаҫ үрҙәр яулаған фронтовик-шағир. Ә бына әҙәбиәтебеҙҙең ошондай вәкилен иҫкә алыу кисәһенә республика администрацияһы һәм хөкүмәтенән күҙгә күренерҙәй яуаплы кешеләрҙең дә килмәүе бик ғәжәп хәл булды. Хәйер, ғәжәп тип, был Яҙыусылар союзы, беренсе ситтта уның рәйесенең ошо хәтер кисәһенә мөнәсәбәте, уны ойоштороуға етерлек иғтибар бирмәүенең һөҙөмтәһе ине. Ә бит Назар Нәжми талантлы шағир ғына түгел, күренекле драматург та, тиҫтәләгән йыр текстарының авторы ла. Уның хәтер кисәһе хәҙер инде ҡәләм тибрәткән һәр кемдең юбилейы үткәрелә торған филармония залында түгел, уғата күренеклеләр генә урыны тип иҫәпләнгән Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры бинаһында уҙғарылырға тейеш ине. Назар Нәжми дәрәжәһе менән ана шул иң абруйлы тип иҫәпләнгән сәхнәгә күтәрелмәҫлекме ни? Ул бит – Рәсәйҙең Максим Горький исемендәге, республиканың Салауат

Юлаев исемендәге премияларға лайыҡ булған халыҡ шағиры. Ваҡытында Яҙыусылар союзының идара рәйесе, республиканың Юғары Советы депутаты булды. Шуға күрә мин хәтер кисәһенән һуң Рауил Бикбаевҡа: “Был юбилей кисәһен Опера һәм балет театрында үткәргәндә тағы ла яҡшыраҡ булыр ине”, – тип әйтмәйенсә түҙмәнем. Ул, унда һәр төрлө юбилей саралары үткәреү ҡәтғи рәүештә тыйылған, тип яуап бирҙе. Ә бит бер ни тиклем ваҡыттан һуң, һис тә тыйылған тип тормай, үҙенең етмеш йәшлек юбилей кисәһен шунда үткәрҙе. Уҡыусы, был йәнә лә Бикбаевтан етешһеҙлек эҙләй, тип уйламаһын ине. Бында һүҙ ҡәләмдәштәр, бигерәк тә мәрхүмдәр ижадына ҡараш тураһында бара.

Назар Нәжмиҙең тыуған йыллығына арналған кисәлә сығыш яһағанда ла ошо хаҡтағы фекерҙәремде ҡыҫҡаса булһа ла әйтеп бирергә тырышҡайным мин. Шунда һөйләгәнде ошо яҙмаға ла теркәп ҡуям.

“Хөрмәтле дуҫтар! Ҡунаҡтар!

Бөгөн был йыр һәм моң залы Назар Нәжми рухы, Назар моңо менән тулған төҫлө. Хатта минең ҡолаҡҡа уның атаҡлы “Урал” поэмаһындағы:

*Башҡортлоҡ – ул милләт кенә түгел,*
*Ҡурай кеүек ябай, ҡатмарлы.*
*Ерҙә әле рух бар – халыҡ рухы,*
*Ҡабул итмәй ул рух юҡ-барҙы.*
*Халыҡ рухы һәр кем йөрәгендә,*
*Ул дөйөм дә һәм ул үҙ аллы.*
*Әгәр ҙә һин ысын башҡорт икән,*
*Йырлап күрһәт миңә “Урал”ды, –*

тигән юлдары ишетелгәндәй була.

Эйе, Назар рухы, Назар шиғриәте башҡа бер кем менән дә бутарлыҡ түгел. Уның әҫәрҙәрендәге һәр юлда, һәр һүҙҙә, ҡояш нурын һыйҙырған ысыҡ тамсыһы кеүек, оло мәғәнә ята. Назар Нәжми – башҡа бер кем менән дә сағыштырғыһыҙ һүҙ оҫтаһы.

Ошо оло әҙибебеҙҙе бөгөн баһалап еткерәбеҙме? Уның ҙур әҙәби мираҫын, яҡты образын киләһе быуындарға тапшырыу өсөн ниҙәр эшләнә? Шағирҙың үлеменә һигеҙ йыл үтеп бара. Ә беҙ уны онотҡанда бер генә иҫкә алабыҙ кеүек. Дүртөйлөләргә рәхмәт, улар яҡташтарын онотмаҫҡа тырыша, уға һәйкәл ҡуйҙылар, уның иҫтәлегенә төрлө саралар үткәрелә. Ә һуң шағирҙың исемен мәңгеләштереү, ижадына тейешле баһа биреү өсөн республика күләмендә ниндәй эштәр башҡарыла? Ниңә уның һайланма әҫәрҙәренең тулы йыйынтығы һаман донъя күрмәй? “Өфө йүкәләре” шағир моңон иҫкә төшөрә, ә уның исеме бирелгән урам, уҡыу йорто, мәҙәни үҙәктәр ҡайҙа? Ошо филармония сәхнәһенән дә уның йырҙары өҙлөкһөҙ яңғырап тора бит. Назар Нәжми бит талантлы шағир ғына түгел, ут-һыуҙар кискән фронтовик, күренекле йәмәғәт эшмәкәре лә булды. “Һәнәк” журналын тергеҙгән мөхәррир, театр директоры, Яҙыусылар союзының яуаплы сәркәтибе, идара рәйесе һәм республикабыҙҙа Максим Горький исемендәге премияны алған берҙән-бер шағир.

Рус әҙәби күгендә Пушкин һәм Лермонтов, татар әҙәби мөхитендәге Туҡай һәм Хәсән Туфан кеүек үк, Мостай Кәрим һәм Назар Нәжми исемдәре йәнәш торһа, улар бер-береһенә изге нур өҫтәр, һәм һөрөмләнгән донъябыҙ яҡтыра төшөр ине.”

Ошо ерҙә йәнә бер фәһемле күренеште иҫкә төшөрөп үтке килә. Назар Нәжмиҙең тыуған йыллыҡ юбилейынан һуң бер аҙна үттеме-юҡмы, “Башҡортостан” гәзитендә, Башҡортостан дәүләт филармонияһына Шәйехзада исемен бирергә кәрәк, тигән мәғәнәлә мәҡәлә баҫылып сыҡты. Автор филармонияға Назар

Нәжми исеме бирелеп ҡуймаһын, тигәндер инде. Бабичтың филармонияға ни ҡыҫылышы бар? Әлеге шул бер исемде тылҡауҙары. Әлбиттә, йәмәғәтселек был дөрөҫлөктө аңланы, һәм бик хаҡлы рәүештә филармонияға атаҡлы композиторыбыҙ, бер нисә йылдар буйы филармонияның художество етәксеһе булып эшләгән Хөсәйен Әхмәтов исеме бирелде.

Һуңғы ваҡытта әҙәбиәтебеҙҙәге күренекле шәхестәрҙең ижади мираҫына тейешенсә баһа биреүҙе ҡайғыртмау насар бер күренешкә әйләнә бара. Бөйөк Аҡмулланың, ғүмере йәшендәй ялтлаған Бабичтың, талантлы шағир Рәми Ғариповтың әҙәбиәт тарихында үҙ урындары бар. Ә бына башҡорт әҙәбиәтен юғары баҫҡысҡа күтәреүҙә ижади батырлыҡ күрһәткән Баязит Бикбайға ниңә кәмһетеп ҡарарға? Уның шиғыр һәм поэмаларын, роман һәм повестарын әҙәбиәт һөйөүселәр бөгөн дә яратып уҡый. Ә һуң уның драмаларынан, музыкаль комедияларынан, опералрға либреттоларынан башҡа башҡорт сәхнәһен күҙ алдына килтереп буламы?

Башҡорт әҙәбиәтендә бына ошондай айырым бер урын биләгән оло яҙыусының хәтер кисәһе филармонияның бәләкәй залында ғына үткәрелде. Унда әҙәбиәт һөйөүселәр ябырылып килгәйне, хатта залда ултырырға урын етмәне. Ә бына яуаплы постар биләгән чиновниктар күренмәне. Уныһы инде – ғәҙәти хәл. Опера һәм балет театрының етәкселәре ошо ваҡиғаны һанға һуҡмауы иһә бер ниндәй тәртәгә лә һыймай.

Әҙәбиәтебеҙҙең үткән юлына, уны үҫтереүгә үҙ өлөшөн индергән һәр ижадсының әҙәби мираҫына иғтибар һәм ихтирам менән ҡарарға ҡасан өйрәнербеҙ?

* * *

...Фанилыҡтан теге донъяға күскән ағайҙарҙы йыш иҫкә алыусан булып киттем һуңғы ваҡытта. Бигерәген дә ана шулай бергәләп юлда йөрөгән саҡтар хәтерҙә ныҡ ҡалған. Яҡуп Ҡолмой ағай менән Илеш районына барғанды нисек онотаһың инде.

Шағирҙар менән командировкаға барып, әҙәби кисәләр үткәреп йөрөүҙең ике яғы бар: улар менән бергә саҡта уҡыусылар менән осрашыу үткәреү еңел. Улар халыҡ алдына сығалар ҙа шиғыр уҡырға тотоналар, тамашасыны тиҙ үк үҙҙәренә ҡараталар. Ҡыҙыҡ бер күренеш бар: кеше шиғыр китабын һатып алып уҡыуҙы ғәҙәт итеп бөтмәһә лә, авторҙың үҙ ауыҙынан сыҡҡан шиғырҙы йотлоғоп тыңлай. Икенсе яҡтан, шағир күңеле шауҡымға тиҙ бирелеүсән, тамашасының ихласлығынан күккә менгәндәй булып, ҡайһылыр мәлгә йомшарып төшөүе лә мөмкин.

Яҡуп Ҡолмой ағай ҙа бындай сифаттан мәхрүм түгел ине. Бер ҡатлыраҡ холоҡло, үҙенә әйткән хуплау, күтәрмәкләү һүҙенән ҡанатланып осорға әҙер.

Илештең "Октябрь" колхозы клубында үткән тәүге кисәнән аҙаҡ Яҡуп ағайға һағайыбыраҡ ҡарауым онотолғандай булды. Ул бик матур сығыш яһаны. Беҙҙең менән бергә мәҙәниәт йортоноң концерт бригадаһы ла сыҡҡайны. Йырсылары, бейеүселәре, баянсылары бар. Концерт Яҡуп Ҡолмойҙоң "Ленин йәшәй йөрәктә" тигән йыры менән башланып китә, уның Илеш районына арнап яҙған йыры ла башҡарыла, шиғырҙарын һөйләйҙәр. Ошо мәлдәрҙә ағайымдың тулҡынланыуы йөҙөнә үк сыҡһа ла, артыҡ бирешмәне, үҙен баҫалҡы тотто.

Икенсе осрашыу "Коммунар" колхозында ине. Колхоз рәйесе – Баев тигән урта йәштәрҙәге төйөрөм кәүҙәле, етеҙ хәрәкәтле кеше. Ул Яҡуп ағай менән тиҙ үк уртаҡ тел тапты, Яҡуп Ҡолмой кеүек үк, һалдатта йөрөгәндә кавалерияла хеҙмәт иткән икән.

Клубтағы кисә бында ла һәйбәт үтте. Осрашыу бөткәндән аҙаҡ колхоз башлығы Баев беҙҙе оҙатып фатирға килде. Ә унда бик шәп табын әҙерләгәндәр, өҫтәл һығылып тора. Үҙенән-үҙе кинәнеп байрам итке килеү теләге уяна. Тик миңә әскернә теләкте баҫырға, эс көтөрлөп торһа ла, хәмергә тотонмаҫҡа кәрәк. Төп бурыс – Яҡуп ағайҙы һаҡлау. Юлға сығыр алдынан Фатима еңгәнең, ағайыңды ҡарап ҡына йөрөт инде, ауырып-фәлән китмәһен, тигән һүҙҙәре лә хәтерҙә.

Мәжлес матур ғына барҙы. Артистарыбыҙ баянда уйнай, йырлап та ебәрәләр. Күҙ һалып ултырам: Яҡуп Ҡолмой, ҡыҙмаса булып алһа ла, артыҡ бирешмәй, шайтан һыуын самалап йота. Бер мәл арыу уҡ булып алған Баев аттар тураһында һүҙ ҡуҙғатты бит. Колхоз бик һәйбәт тоҡомло юртаҡтар тота икән. Бәйгеләрҙә бер кемгә лә ал биргәнебеҙ юҡ, тип маҡтана рәйес һәм ҡайҙа, ҡасан ниндәй призыдар алыуҙары тураһында һөйләй башлай. Яҡуп ағайым уның хәбәрен ғәжәп бер ихласлыҡ менән тыңлай, хатта, ат өҫтөндә елгәндәй, ҡалҡынып-ҡалҡынып ҡуя. Ахыр килеп, ул түҙмәне.

– Ул юртаҡтарың әле ҡайҙа? – тип һораны.

–Ҡайҙа булһын – конюшняла.

– Әйҙә барып күрәбеҙ! – Яҡуп ағай ырғып торҙо.

Ватан һуғышында генерал Доваторҙың кавалерия дивизияһында фашистар менән алышҡан, яйы сыҡҡанда, мин кавалерист, тип ҡупырайып алырға яратҡан Яҡуп ағайымдың хәлен аңлай инем. Шуға күрә, күптән төн уртаһы ауыуға ҡарамаҫтан, уның Баев менән сығып китеүенә ҡаршы төшмәнем. Әйҙә, барып, тышта йөрөп, күңелен баҫып ҡайтһын, тинем.

Йортта мәжлес бөттө, табынды йыйыштырҙылар, ятып ял итергә кәрәк, ә беҙҙең кавалеристар юҡ та юҡ. Минең борсола башлағанды күреп, беҙҙе оҙата йөрөгән Халиҡов (район гәзитенең мөхәррире), бер ни ҙә булмаҫ, хужа менән йөрөйҙәр бит, йә өйөнә алып ҡайтып киткәндер, тигәс, ятып йоҡлау яғын ҡараныҡ.

– Кавалерист Кульмухаметов явился! Встать! – тигән тауышҡа уянып киттек беҙ.

Аш-һыу бүлмәһе яғынан төшкән тоноҡ яҡтылыҡта бер һын күҙгә ташлана. Яҡуп ағайым командирҙарға рапорт биргәндәгесә бармаҡ остарын сикәһенә терәгән, кәүҙәһен артҡа саңҡайта биргән, бер шәлкем сәсе бүрке аҫтынан ялпылдап сыҡҡан. Булдырған икән был, тигән уй баштан үтә. Тышта еҙ ҡыңғырау тауыштары, кемдәрҙеңдер һөйләшкәне ишетелә. Уңарсы ишектә Баев пәйҙә булды.

– Йәгеҙ, иптәштәр, “Искра”ға китергә бөтә нәмә әҙер, – ти ул.

Шулай уҡ урынынан тороп ултырған Халиҡов:

– Ниңә ул хәтлем ҡабаландыраһың, – ти. – Сәй эсеп, баш-күҙ алаһы ла бар бит әле. Ҡайҙа йөрөнөгөҙ һеҙ?

Колхоз рәйесе хужабикәгә йәһәт кенә өҫтәл әҙерләргә ҡуша ла хәлде аңлатып бирә.

Улар төн буйы конюшняла юртаҡтар араһында йөрөгән, кәйеф өсөн йоҡолап та алғандар. Бер ыңғайҙан пар аттар ектереп алып килгәндәр.

Мине иһә икенсе нәмә борсой: “Искра”ға барғас, мәктәптә сығыш яһарға тейешлегебеҙҙе әйткәйнеләр, Яҡуп Ҡолмой уға тиклем рәткә инерме?

Унан-бынан ҡапҡылап сәй эстек тә урамға сыҡтыҡ. Унда ике санаға егелгән пар аттар түҙемһеҙләнеп, хәҙер осортоп алып китергә әҙер тора. Дуғаларға таҫма уралған, еҙ ҡыңғырауҙар тағылған.

“Искра” колхозы үҙәгенә буран уйнатып барып индек. Фатирға урынлашыу менән, Яҡуп ағайҙы ял иттереү яғын ҡараным. Ә ул ятып торорға теләмәй.

– Мин Нәжмиевты беләм (колхоз рәйесе, Социалистик Хеҙмәт Геройы), ул минең дуҫ, уны барып күрәм, – тип сығып китергә ашҡына.

Халиҡов менән икәүләп өгөтләй торғас, көскә ятҡырҙыҡ. Тик ул төшкә тиклем барыбер ныҡлап ҡына йүнәлә алманы. Мәктәптәге кисәлә шиғырҙарын уҡыуға уҡыны ул. Ә бына уҡыусылар уның шиғырҙарын һөйләй, һүҙҙәренә яҙылған йырҙарҙы йырлай башлағайны, тулҡынланыуын тыя алманы – күҙҙәренән йәштәре субырлап ҡойолоп тик тора.

Кисен клубтағы кисәгә иһә Яҡуп ағай тамам төҙәлеп килде, ғәҙәттәгесә матур итеп сығыш яһаны. Һәм, ғәжәпләнеүемә ҡаршы, киске табында хәмерҙе ауыҙына ла алманы.

Аҙаҡҡы көн район үҙәгенән алыҫ булмаған Куйбышев исемендәге колхозға алып килделәр. Унда партия райкомының беренсе секретары Тәлғәт Рахмановтың ҡустыһы Әсҡәт Рахманов рәйес икән. Ныҡлы кәүҙәле, ҡарар күҙгә өндәшмәҫерәк, бик тә етди кеше һымаҡ. Ә аҙаҡтанырағ беҙ уның бик алсаҡ, телгә лә апаруҡ оҫта икәнен белдек. Ул үҙе кисәне асты. Сәхнәгә ҡуйылған өҫтәл артынан беҙҙең менән бергә урын алды. Халыҡ менән бергә ихлас ҡул сабып, мәрәкә һүҙҙәр ҡыҫтырғылап ултырҙы. Кисәнән һуң иһә тура үҙенең өйөнә алып ҡайтты. Бына шул саҡ көтөлмәгән хәл килеп сыҡты ла инде.

Хужабикә клубтан алдараҡ ҡайтып киткән, күрәһең, беҙҙе йылмайып ҡаршыланы. Уның:

– Ныу, Мусин иптәш, бик йәтеш иттең бит әле, – тигән һүҙҙәре мине һағайта төштө. – Әҫәрегеҙҙән өҙөк уҡығанда ҡайһы берәүҙәр ултырған еренән тороп китерҙәй булды.

Тунының һыңар еңен сискән килеш туҡтап ҡалған Әсҡәт Рахманов хәтәр уҫал тауыш менән екереп ебәрмәһенме.

– Нимә лыҡылдап тораһың? Бар, эшеңдә бул!

Хужабикәнең йөҙөнән һаман йылмайыу китмәй.

– Асыуланма юҡҡа. Туп-тура ғына барып тейҙе бит.

– Шаулама!.. Һаман телеңде тыймайһыңмы...

Ярһыуы йөҙөнә сыҡҡан хужа тунын сисеп бөтөп, элеп маташҡан арала, хужабикә йылт итеп аш-һыу бүлмәһенә инеп китте. Ә Халиҡов (бик әҙәпле, баҫалҡы холоҡло кеше ине) Рахманов эргәһенә барып, яурынына ҡулын һалды.

– Ярай, Әсҡәт, быныһын онотток, ҡунаҡтарҙы ҡарайыҡ, – тип беҙҙе аптыраашта ҡалдырған хәлде онотторорға тырышты.

Тамаҡ туйҙырып, Йәркәйгә ҡайтырға сыҡҡас ҡына, Халиҡов рәйес өйөндә килеп тыуған хәлгә бер аҙ асыҡлыҡ индерҙе.

Клубта сығыш яһағанда "Өҙәрем юл кешеләре" романынан өҙөк уҡығайным. Унда колхоз рәйесе Миҙхәт Яхиндың балалар баҡсаһы мөдире, һөйәркәһе Рәшиҙә менән район үҙәгенән ҡайтып килеүҙәре һүрәтләнә. Бер урында юлдан ситкә ҡайырылып, урман эсендә туҡтап та китәләр.

– Әсҡәт Рахманов та үҙҙәрендәге балалар баҡсаһында эшләгән ҡыҙ менән шаяра, тиҙәр. Күҙ менән күрмәгәс, әллә ни әйтә алмайым... Ҡатыны өндәшмәй түҙеп торһа ла арыу булыр ине лә...

Халиҡовтың был хәбәре мине шаңҡытты, шул уҡ ваҡытта яҙыуымдың ҡайһы берәүҙәргә тура тейеүенән ҡәнәғәтләнеү тойғоһо ла уяна биреп ҡуйҙы.

Нисек кенә булмаһын, халыҡ менән ана шулай аралашып ҡайтыу күңелде яңырта, тормош, кеше яҙмыштары тураһында уйланырға мәжбүр итә, өҫтәл артына ултырып, ҡәләмеңде алырға мәжбүр итә ине. Ҡайһы бер сәфәрҙәр ғәҙәти генә тойола, хәтерҙә ҡалырҙай әллә ни күрмәгән дә һымаҡ булаһың. Ләкин әҫәр яҙып ултырғанда кемдәрҙеңдер ҡиәфәте, буй-һыны, һөйләшеү манераһы, шул

яҡтарға ғына хас тәбиғәт күренештәре ҡылт итеп иҫкә килеп төшә, уйлап сығарып булмаҫтай тормош деталдәре күҙ алдына баҫа. Ғөмүмән, яҙыусыға, бигерәгендә прозаикка, күкәй баҫҡан тауыҡ шикелле, өйҙә ултырып ҡына әҫәр яҙыу мөмкин түгел. Тормоштоң уртаһында ҡайнап, үҙең йәшәгән осорҙоң тиктормаҫ ағзаһы булһаң ғына, уй-фекерҙәреңде, хис-тойғоларыңды байытырға мөмкин.

Заманында актив эшләүсе күренекле прозаигыбыҙ иҫәпләнгән Әкрәм Вәлиҙең бер йыйылышта, мин очерктар аша роман яҙыуға киләм, тип һөйләгәне иҫкә төшә. Ул, ысынлап та, районымарға йыш сығып йөрөй, гәзиттәрҙә очерктар баҫтыра, республика күләмендә үткән һәр төрлө йыйылыштарға бик теләп йөрөй ине. Уның “Май ямғыры”, “Июнь ҡояшы”, “Гөлйемеш сәскәһе” тигән романдары тап бына ошондай тәьҫораттар нигеҙендә яҙылған. Һәм уның ошо әҫәрҙәре күргән-ишеткәндәрҙең туранан-тура тәьҫораттарынан ҡотола алмай, тормош, яҙмыштар, бөгөнгө көн генә түгел, үткәндәр һәм киләсәк тураһында ла уйланмайынса тыуған әҫәрҙең ғүмере ҡыҫҡа булыуын да иҫкәртә беҙгә.

Аллаға шөкөр, тим, иҫән саҡтарҙа күпме йөрөлдө, ярты ғүмер тиерлек юлда үткәндер. Ҡасандыр (миңә биш йәш самаһы ине) әсәйемдең бер туған ағаһы Хәлим бабай менән Кинйәһолтан инәйҙең арбаһына ултырып, көнбайыштан ауылыбыҙҙы кәртәләгән һымаҡ күгәреп-ҡабарып ятҡан Алатауға тәү тапҡыр артылып, ялан яҡтарына килеп сыҡҡас, донъяның шул тиклем киңлегенә аптырағайным. Бабайым менән инәйем Егән ауылындағы урыҫ белештәренә ниндәйҙер йомош менән килгәйне. Мин урыҫ бабайҙың кәртәһе башына менәм дә тирә-яҡты ғәжәпләнеп күҙәтәм. Шул тиклем ҙур яландар, улар ниңәлер һапһары төҫтә. Урмандар йыраҡта-йыраҡта – саҡ-саҡ тимгелләнеп кенә күренә. Урамда мин шулай уҡ быға тиклем күрмәгән сусҡалар хырхылдашып йөрөй, күскүс булып урамды сыбарлаған ҡаҙҙар (ул саҡта беҙҙә ҡаҙ тотоусы юҡ ине), ҡапҡа алдындағы еп тағылған оҙон ҡолғаның башын юғары сөйөп тороуы, киң юбка кейгән мәрйә апайҙарҙың уның эргәһенә килеп, еп осондағы биҙрәне доңғорлатып ҡайҙалыр тәрәнгә төшөрөп ебәреүҙәре – бөтәһе лә ғәжәп бер яңылыҡ. Мин, ҡыйыулыҡ итеп, ситән үреп кәртәләнгән (быныһы ла минең өсөн яңылыҡ: беҙҙең урман яғында ситән үреү юҡ) бәрәңге баҡсалары аша үтеп, әлеге үҙемде ғәжәпләндергән һары баҫыу ситенә үк барып еттем. Ғәжәп күренеш ине был: бер тигеҙ ҡуйы булып билемә етмәле буйлыҡта үҫкән һары һабаҡлы, туҡ башлы үҫемлектәр. Берәүһенең башын эйгәйнем, усыма тос бөртөктәр ҡойолдо. Нимә икән был, тим. Һөҙәк ҡалҡыулыҡ яғынан иҫкән талғын ел әсәйем Кинйәкәү баҙарына барғанда алып ҡайта торған ҡалас икмәк еҫен танауға килтереп бәрә... Аҙаҡтан белдем: мине ғәжәпләндергән, һары балаҫ япҡандай тойолған ялан – иген баҫыуы, ә беҙ ашаған икмәкте ана шулай сәсеп үҫтерәләр икән...

Донъяларҙың киңлеген, ер йөҙөндә төрлө күренештәр барлығын ана шулай тәү тапҡыр күргәндән аҙаҡ күпме ваҡыт үткән дә нисәмә саҡрым юлдар үтелгән. Утыҙ саҡрымдағы Маҡар ауылындағы урта мәктәпкә өс йыл буйына йәйәү йөрөп уҡыу. Унан һуң институтта уҡығанда һикһән саҡрымдағы Стәрлетамаҡ юлын ни хәтлем тапалған. Унда ла йәйәү, ҡыш көндәре саңғы менән йөрөлдө. Һирәкләп йөк машиналары үтһә лә, уларға түләп ултырырға аҡса юҡ. Хәҙер үҙем дә аптырап ҡуям: институтта шәмбе көн ике пар уҡығас, ҡайтыр юлға сығам. Илле саҡрымдағы Маҡарға төндә килеп етеп, Мәфрүзә апайымдарҙа тамаҡ туйҙырам да артабан китәм. Ауылыма төнгө сәғәт өс-дүрттәрҙә ҡайтып етә инем. Ҡасан ҡайтырымды алдан хат аша хәбәр иткәнлектән, яңғыҙы ғына торған әсәйемдең йоҡламай мине көтөүен тәҙрәһендәге шәм яҡтыһынан уҡ беләм,

күңелгә әйтеп аңлатҡыһыҙ рәхәтлек йүгерә һәм ҡапҡанан арыуҙарымды онотоп инәм...

Өс-дүрт сәғәт тәмле итеп йоҡлап алғас, ихаталағы үҙем юҡта тарайған юлдарҙы күрәп иркенәйтәм. Бысып келәт артына өйөлгән утынлыҡ түмәрҙәрҙе ярып, соланға ташып ҡуям. Унан кәртәгә инеп китәм дә мал аҫтындағы тиҙәкте кәртә уртаһына сығарып өйөргә тотонам. Төшкә тиклем бер минут та тик тороу юҡ. Яңғыҙы ғына йәшәгән, хәҙер инде оло уҡ йәштәге әсәйемә күберәк ярҙам итеп китке килә.

Әсәйем әҙерләгән, татлы еҫ бөркөп торған аш менән тамаҡ туйҙырғас, төш ауғас, ваҡ-төйәк ашантыны йөкмәп кире юлға сығам. Ҡыш көндәре саңғы менән йөрөгәндә утыҙ саҡрымдағы Маҡарға етеү бер ни түгел: Алатауҙы артылдыңмы, кире яҡҡа өс саҡрымды һә тигәнсе шыуып төшәһең. Казарма үренә менеп еткәс, Ҡуҡрауыҡҡа тиклем һигеҙ саҡрым ара гел һарҡыуға табан бара – елдерәһең генә. Маҡарҙағы Мәфрүзә апайымдарҙа туҡтап, биш-алты сәғәт ял итәм, ятып йоҡлап алам һәм төнгө сәғәт өстәрҙә торам да Эстәрлегә табан юлымды дауам итәм (Маҡарҙан унда тиклем илле саҡрым ара). Ҡалаға туғыҙ тулмаҫ элек килеп етә инем мин. Эҫе сәй менән тамаҡты ебетәм һәм институтҡа лекцияға йүгерәм...

Һай, йәш саҡтар! Нисегерәк йөрөлгән бит. Бәлки, ана шулай сабауыллау мине артабан тормошта юл ауырлыҡтарын тоймаҫҡа өйрәткәндер. Ә бит юлдарҙың ниндәйҙәрен генә үтергә тура килмәне.

Институтты бөткәндән һуң үҙебеҙҙең районда дүрт ай мәғариф бүлегендә инспектор булып эшләгән арала райондың бөтә мәктәптәрендә тиерлек булырға өлгөрҙөм. РОНО-ла минән башҡа Людмила Яшина (район военкомының ҡыҙы) тигән инспектор ҙа бар, тик ул бер ҡайҙа ла сығып йөрөмәй, конторалағы яҙыу-һыҙыу эштәре менән булаша. Мин иһә, торорға йүнле фатир ҙа булмағас, сығам да китәм. Һәм гел йәйәү. РОНО-ның аты бар барлыҡҡа, тик уның менән сыҡһаң, уны ҡарап та йөрөтөргә кәрәк. Ат кәрәк, тиһәләр, теләйһеңме-юҡмы, район үҙәгенә кире борололорға тура килә. Ә мин былай бер ауылдан икенсеһенә һалдырып сығам да китәм. Ана шундай йөрөмтәллек, төрлө кешеләр менән күп осрашыу бай ғына тормош материалы биргәйне. Һалдат хеҙмәтендә йөрөгән саҡта “РОНО инспекторы” тигән повесть яҙырға тотоноуым да юҡтан ғына булмағандыр. Ул яҙманың ҡайһы бер өҙөктәре архивымда һаҡланып та ҡалған әле.

Һалдат хеҙмәтенә саҡырылғас, ер сигендәге тиерлек Хабаровскиға тиклемге араны ла ике тапҡыр урарға тура килде: унда теплушкаға тейәлеп егерме көнгә яҡын барылғайны, бер йылдан отпускаға ҡайтып әйләндем, аҙаҡтан сәпсим ҡайтылды.

Был оҙон юлды үткәндә иң онотолмаҫлығы мең туғыҙ йөҙ илле өсөнсө йылдың март башында отпускыға ҡайтып килгәндә булды. Хәрби казарма тәртиптәренән ваҡытлыса булһа ла ҡотолғас, тиҙ йөрөшлө поездың вагонында иркенләп киленә ине, Новосибирскиға яҡынлағанда, радио йөрәк өҙгөс хәбәр әйтте: Сталин ҡаты ауырып йығылған. Ҡайһы аралалыр вагонды шом уратып алды, геүшау килеп ваҡыт үткәргән сәфәрселәр, хәүеф-хәтәр көткән кеүек, ҡапыл тынып, тыйнаҡланып ҡалды. Юлбашсыбыҙҙың сәләмәтлеге тураһында әленән-әле хәбәр итеп торған радионың ниндәй яңы хәбәр әйтерен ҡолаҡтарҙы ҡарпайтып көтәбеҙ. Һәм ул яман хәбәр килтерҙе: мәңге тере булыр төҫлө тойолған Сталин үлгән! Вагон бер мәлгә генә тынлыҡҡа сумды ла һыҡтанырға, үкһергә тотондо. Ҡайһы берәүҙәр үкереп илай, икенселәре танауҙарын мыш-мыш тартып һыҡтай. Беҙ бер купела килгән сержант менән һалҡынса тамбурға сығып, балауыҙ һығып индек.

Поезд Омскиға килеп туҡтап, перронға сыҡҡайныҡ, бөтә ерҙә – ситтәре ҡара менән ҡаймаланған флагтар, кешеләр өйкөм-өйкөм йыйналып, ниҙер һөйләй-һөйләй илайҙар. Әйтерһең, донъя емерелгән.

Виктор Шумский тигән хеҙмәттәш дуҫым менән Аша станцияһында туҡтап, үҙен (Виктор бәләкәйҙән ата-әсәһеҙ ҡалған) аҫырап үҫтергән еңгәһенең хәлен белеп, күстәнәс тапшырып сығыуымды үтенгәйне. Сталиндың үлеү хәбәрен ишеткәндән аҙаҡ күңелде ауыр тойғо иҙеп торһа ла, һалдат дуҫлығына хыянат итмәнем. Аша станцияһында поездан төшөп, сумаҙанымды һаҡлау камераһына тапшырҙым да, Викторҙың күстәнәстәрен ҡултыҡ аҫтына ҡыҫтырып, Буденный урамындағы етенсе һанлы йортто эҙләп йүгерҙем. Ике сәғәт ярымдан киләсәк поезға ултырып, юлды дауам итергә кәрәк ине.

Теге йортто тиҙ үк эҙләп таптым. Ишекте асып инһәм, тәҙрә эргәһендәге ҙур яланғас өҫтәл артында өс ҡатын ултыра. Икәүһе урта йәштәрҙәлер, берәүһе ныҡ ҡартайған, биттәре сырышып бөткән. Уларҙың бөтәһенең дә сырайҙарын хәсрәт баҫҡан, күп илауҙан күҙ тирәләре шәмәреп бөткән.

Мин кем икәнемде, ҡайҙан килеүемде әйткәс, ҡайһылыр мәлгә уларҙың йөҙө яҡтырып китте, мине яртылаш эселгән шешә, ҡырлы стакан ултырған өҫтәл артына әйҙүкләнеләр, Викторҙың хәлен һорашырға тотондолар. Хужабикә ҡағыҙ бөкө менән тығыулы башланмаған шешә, туҫтаҡ менән тоҙло кәбеҫтә ҡуйып, икмәк телеп ташланы. Ана шул саҡ миңә хәҙер инде ауылдағы һәр йортта тиерлек осратыу һис тә ғәжәпләндермәгән көмөшкәне тәү тапҡыр ауыҙ итергә тура килде. Ә мәрйә апайҙарым әҙерәк төшөрөп алғайны, йәнә буҙларға тотондолар: үкһеп-үкһеп, ай ҙа уай килеп илайҙар, әйтерһең, үҙ аталары үлгән.

Улар ыңғайына яйлап ултыра алмай инем, ҡайғыға сумған апайҙар менән хушлаштым да тимер юл станцияһына йүгерҙем. Ҡайғынан ҡара янған өс һалдатканың (ирҙәренең һуғышта үлгәнен һөйләшеп ултырған арала белгәйнем) илашҡанын күргәндән аҙаҡ, тағы ла ҡыйыныраҡ булып киткәйне. Күп йотмаһам да, әллә көмөшкә башҡа сыҡҡан, килгән юлымды бутап бөттөм. Тимер юл станцияһы күренеп үк тора, ә килгән юлды таба алмайым. Йүгереп йөрөй торғас, бер йылға буйына килеп сыҡтым. Күпер кеүек нәмә күренмәй. Тура сыҡһаң, аръяҡта ғына станция. Поезд килер ваҡыт яҡынлай ине. Күп уйлап торманым, итек ҡуныстарына һыу тултырып, йылғаны кистем дә сыҡтым.

Өфөгә Сталин ерләнәсәк көн иртүк килеп төштөм. Стәрлетамаҡ поезы кис кенә буласаҡ. Көнө буйы вокзалда ултырып булмай ине, ҡалала йөрөп әйләнмәксе иттем һәм Сталинды күмгән көндәге мәхшәрҙәргә эләктем. Ҡала үҙәгенә табан транспорт туҡтаған. Сырайҙарын ҡайғы һөрөмө баҫҡан кешеләр Сталин урамына табан ағыла. Мин дә улар менән бергә атлайым. Ул саҡта Опера һәм балет театры бинаһы эргәһендәге скверҙа Сталиндың ап-аҡ һәйкәле тора ине. Унда яҡын бармалы түгел, меңәрләгән халыҡ шул тирәгә йыйылған. Һәйкәл иһә сәскәләргә күмелгән. Бер аҙ буталып йөрөгәндән аҙаҡ, юлбашсы менән хушлашыу митингыһы башланды. Тағы ла илау-һыҡтауҙар... Ҡарты ла, йәше лә, хатта бала-сағаһы ла тартынып тормай илайҙар.

Шулай итеп, ил ҡайғыға батҡан көндәрҙе юлда йөрөп үткәрҙем. Һәм, ирекһеҙҙән, хәҙер һәр төрлө ғәйептәр тағып яман күрһәтергә тырышҡан юлбашсыны халыҡтың ни тиклем ихтирам итеүен күрергә тура килде. Ил башлығы дәрәжәһенә күтәрелгән шәхес ана шундай һөйөүҙе яуларға тейеш тә. Минеңсә, халыҡтың Сталинды олологлауы, ихтирам итеүе, бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышында ил өҫтөнә ябырылған ҙур афәттән ҡотолғандан аҙаҡ, һис тә ялған түгел, ихлас ине. Унан һуң да башлыҡтар үлде йәки тронынан бәреп төшөрөлдө, әммә бындай хәлде күргән булманы. Ана бит, халыҡтар дуҫлығының символына

әүерелгән бөйөк СССР-ҙы быран-заран килтерҙе Ельцин тигән дыуамал. Булғанды туҙҙырыу, юҡ итеү өсөн әллә ни аҡыл кәрәкмәй, ә уны яңынан йыйып алыу, ҡабаттан тергеҙеүҙәре, ай-һай, еңел түгел. Әле шуның әсе һабаҡтарын татып йәшәйбеҙ түгелме?.. Бына шуның өсөндөр, мин Ельцин үлгәндән аҙаҡ илаған кешене күрмәнем, ә, арыу булды, тип үсәп ҡуйғандарын ишеттем...

Армия хеҙмәтенән ҡайтҡанға, әле һөйләгән ваҡиғаларҙы күргәнгә бик күп йылдар үтеп киткән. Ошо ваҡыт эсендә – гәзит, журнал редакцияларында, Яҙыусылар союзында эшләгән мәлдәрҙә ҡайҙарҙа ғына булынмаған да ниндәй юлдарҙан үтелмәгән. Төрлө маҡсат, төрлө эштәр менән яңғыҙ ҙа, коллектив рәүештә лә йөрөлгән һәм уларҙың бөтәһе лә күңелдә онотолмаҫ эҙ ҡалдырған. Германия Демократик Республикаһына мине меҫ туғыҙ йөҙ етмеш беренсе йылдың көҙөндә ижади ҡомар алып барҙы. “Һайлап алған яҙмыш” романының тәүге вариантын проза секцияһы ултырышында тикшереп, “Немецтарҙың тормошон белмәйһең” тигән һәм башҡа тәнҡит һүҙҙәре ишеткәс, республиканан шунда экскурсияға барған ауыл хужалығы делегацияһына ҡушылып барғайным унда. Беҙҙең йөрөү маршруты Одерҙағы Франкфурт тигән ҡаланан башланды ла Галле, Дрезден, Люксембург, Эрфурт, Айзинах, Магдебург ҡалалары аша үтеп, һуңғы туҡталыш Берлинда булды. Ҡаланан ҡалаға барғанда юл ыңғайындағы ауылдарға ла туҡтап китә инек. Беҙҙең делегацияның ауылда эшләүселәрҙән торғанын әйткәйнем шикелле. Уларҙың иһә немецтарҙың ауыл хужалығындағы эштәре менән танышҡыһы килә. Көҙгө эштәр бөткән мәл. Ҡайһы ауылда ғына туҡтамайыҡ, баҫыуҙа эшләгән машиналар ремонтлап, ялт иттереп таҙартып, елямғыр үтмәҫлек ангарҙар эсенә ҡуйылған. Беҙҙең бер юлдашыбыҙ:

– Ә беҙ яҙ яҡынлағас ҡына ремонтты иҫкә төшөрәбеҙ, – тип әйтмәйенсә түҙмәне.

Икенсе берәүһе:

– Беҙҙекеләр ҡар аҫтында ҡышлай, – тип уға ҡушылғайны, төркөмдөң етәксеһе Сәмиғулла Торомтаев:

– Юҡ-барҙы күп һөйләнмәгеҙ әле, – тип уларҙы тыйҙы. Бында килеп, үҙебеҙҙәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләү ярамаған эш ине.

Дөйөм алғанда, ГДР-ҙа йөрөп ҡайтыу һәйбәт тәьҫир ҡалдырһа ла, уйландырырлыҡ күренештәргә лә шаһит булдыҡ. Одерҙағы Франкфурт ҡалаһында беҙҙе ҙур йылғанан йырып эшләнгән каналдар буйлап йөрөтмәксе булдылар. Бына яр буйында торған кәмәләр эргәһенә таҙа кәүҙәле, нисектер ҡыҙғылт йөҙлө бер немец килде лә ишкәктәрҙе тотҡолап ҡарай башланы, күрәһең, беҙҙе кәмәлә ошо кеше йөрөтөргә тейештер. Ләкин ул беҙҙе оҙатып йөрөгән экскурсоводтан ниҙер һораны ла ҡулына алған ишкәкте көс менән ергә күтәреп бәрҙе һәм ситкә атланы. Беҙгә икенсе ишкәксе бирҙеләр. Беҙҙең делегацияла Әбйәлил районынан милләте менән немец бер иптәш тә бар ине. Аҙаҡтан уның аша белдек: теге немец, мин атайымды үлтергән кешеләргә хеҙмәт итмәйем, тип китеп барған икән. Бына бит нисек, һуғыш килтергән ауыр юғалтыуҙарҙы бөтә ерҙә лә онотмайҙар һәм кемгә булһа ла үс тотоп йәшәйҙәр...

Ә бына Айзинах ҡалаһындағы осрашыуҙар күңелдәрҙә бик һәйбәт тәьҫораттар ҡалдырғайны. Кешеләрҙең, ниндәй генә милләттән булмаһын, ҡайҙа ғына йәшәмәһен, бер-береһе менән аралашып, яҡын таныштар булып йәшәргә тырышҡанын мин шунда күрҙем. Унда беҙҙе, тәржемәсе булараҡ, Һайди Лингәлбах тигән ҡыҙ оҙата йөрөнө. Һөнәре буйынса – уҡытыусы, Айзинахтан йыраҡ түгел ерҙәге ауылда уҡытыусы булып эшләй икән. Беҙҙе ана шул ауылдағы кооператив эшмәкәрлеге менән таныштырырға ла алып барҙылар. Шундағы ойошторолған оҙон өҫтәл артына теҙелешеп ултырып ихлас күңелдән һөйләшеүҙәр

онотолмаҫлыҡ булды. Бында кооператив хеҙмәткәрҙәре, уҡытыусылар, юғары кластарҙағы уҡыусылар ҙа бар ине. Һәр кем һөйләшеүҙә ҡатнашырға теләне, уҡыусылар уҡытыусыларына ҡушылып йырлап та алдылар. Уларҙың “Катюша”ны йырлап ебәреүе күңелдәрҙе бигерәк күтәрҙе. Быға тиклем мин немецтар иленә ниңә килеүемде бер ҡайҙа ла, бер кемгә лә, хатта юлдаштарыма ла һөйләмәгәйнем. Бында серемде йәшереп ҡала алманым. Минең тыуған тупраҡта немец ҡатыны йәшәүен, уның яҙмышын ҡыҫҡаса ғына һөйләп биргәс, немец дуҫтарҙың, айырыуса уҡыусы балаларҙың беҙҙең яҡ менән ҡыҙыҡһыныуы уғата ла артып китте, әллә ни хәтлем һорауҙар биреп ташланылар. Ә кисен Айзинах ҡалаһына әйләнеп ҡайтҡас, Һайди Лингәлбах (уның йәшәгән урыны ҡалала икән) миңә ҡайһы бер һорауҙары барлығын әйтте һәм өйөнә тиклем оҙата барыуымды һораны. Мин делегация етәксеһенән рөхсәт һораным да, Һайди “Бында яҡын ғына торам” тигәс, уны оҙатырға киттем. Юлда барған арала Лингәлбах байтаҡ нәмәләр хаҡында һорашты, уны бигерәк тә әҙәбиәт, мәҙәниәт мәсьәләләре ҡыҙыҡһындыра икән. Ул ике тапҡыр Мәскәүҙә, бер тапҡыр Ленинградта булыуын, бындай сәфәрҙәр үҙенең рус телен байытырға, һөйләшеүен шымартырға ныҡ ярҙам итеүен әйтеп алды. Ул, ғөмүмән, төрлө телдәрҙе өйрәнеү менән мауыға икән, инглиз һәм француз телдәрен яҡшы белә. Шуға күрә мин уға, Башҡортостанға килегеҙ, башҡортса өйрәнерһегеҙ, тигәйнем, ул ихлас итеп:

– Их, барырға ине, – тип торҙо ла ҡапыл һорай ҡуйҙы: – Ә теге һеҙ һөйләгән немка иҫәнме?

Минең Зильда етмешенсе йылда, йыл ярым элек кенә, вафат булғайны. Быны белгәс, Һайди ҡапыл күңелһеҙләнде, уның кәйефен күтәреү өсөн:

– Уның ҡыҙы, ике улы иҫән, – тигәйнем, ул йәнә теремекләнеп, сырайы асылып китте.

Ошо мәлдә мин уның ҡиәфәтендә ниңәлер үҙемдең героинямЗильданың йәш сағындағы йөҙөнөң сағылышын күргәндәй булдым. Һуңынан, роман өҫтөндә эшләгәндә, ошо портрет һәр саҡ минең күҙ алдымда торҙо.

– Әгәр беҙҙең яҡтарға, Уралға, барып сыҡһағыҙ, уларҙы ла күрер инегеҙ, – тигәйнем, Һайди бер аҙ өндәшмәй атланы.

– Мин сәфәргә йөрөргә яратам. Байтаҡ илдәрҙә булдым.

– Бына беҙгә барһағыҙ, башҡортса һөйләшергә өйрәнерһегеҙ.

Һайди, минең һүҙҙәрҙән ҡыҙыҡ тапҡандай, көлөп ебәрҙе.

– Шәп булыр ине. Һеҙҙә башҡорт телен өйрәнә торған китаптар юҡмы?

ГДР-ҙа йөрөп ҡайтҡас, мин, уның был һорауына яуап итеп, русса-башҡортса һүҙлек, кескәй генә форматта сыҡҡан русса-башҡортса “разговорник” һәм Шукшиндың хикәйәләр йыйынтығын ебәрҙем. Ул миңә рәхмәт белдереп хат яҙҙы. Ғөмүмән, беҙ уның менән ике йыл самаһы хат алышып торҙоҡ, артабан ул ниңәлер яуап биреүҙән туҡтап ҡалды. Илгәҙәк күңелле немец ҡыҙының бер нисә хаты минең архивта һаҡлана. Әлеге осрашыуға барғанда русса апаруҡ һупалаған бер ҡыҙ, һеҙҙең яҡ менән хат алышҡым килә, тип адресын биргәйне. Ул саҡта егерменсе мәктәптә уҡып йөрөгән ҡыҙым Фәрзәнә уға хат яҙҙы ла, улар байтаҡ ваҡыт хәбәрләшеп торҙолар. Шул саҡта мин кешеләрҙең, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, аралашыуға, танышыуға, дуҫлыҡҡа ынтылыуына йәнә бер тапҡыр шаһит булдым.

Беҙҙең сәфәр артабан Магдебург, Эйфурт ҡалалары аша үтеп, тағы ла бер-ике ауыл кооперативында туҡталып, Берлинда тамамланды. Беҙҙең бала сағы һуғыш осорона тура килгән үҫмерҙәрҙең күңелендә был ҡала ниндәйҙер шомло, хатта ҡурҡыныс төйәк һымағыраҡ тойғо ҡалдырғайны. Урыны-урыны менән

һаман һуғыш емеректәре күҙгә ташланған Берлин буйлап йөрөгәндә лә, юҡ-юҡ та, ошондай кисерештән ҡотолоп булманы. Трептоф парктағы совет һалдаттарының батырлыҡ иҫтәлеге итеп ҡуйылған мөһабәт һәйкәл, Бранденбург ҡапҡаһынан йыраҡ түгел ерҙә һерәйеп торған Рейхстаг (Бранденбург ҡапҡаһынан ары ул саҡта сығып йөрөп булмай ине) – бөтәһе лә күңелдә әллә ни хәтлем тойғолар ҡуҙғата. Ә инде Бранденбург ҡапҡаһы эргәһендәге бинаның аҫҡы ҡатындағы ресторанда ашап ултырғанда беҙҙе оҙата йөрөүсе экскурсовод ошо йортта һуғыш мәлендә гестапоның үҙәк штабы урынлашыуын әйткәйне, бөтөнләй хәтәр кисерештәр солғап алды.

Ҡыҫҡаһы, тәьҫораттар бик күп булды. Йөрөп ҡайтыу менән "Юлдар, юлдар, оҙон булһа булһын" тигән ҙур ғына очерк яҙҙым да немец ҡыҙының ғибрәтле яҙмышына арналған романыма тотондом. Ҡайһы берәүҙәр был романды сығармау өсөн (быны сәбәбен әле булһа нығлап аңлап етмәйем) бик тырышып ҡаранылар. Партия өлкә комитетының мәҙәниәт бүлеге мөдире Клара Төхвәтуллина ҡулы аша үтеп, ул күрһәтмә биргәндән һуң, әҫәр "Ағиҙел"дә баҫылды, китап булып сыҡты һәм уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Был роман тураһында уҡыусыларҙан килгән бик күп хаттар минең архивта айырым папкала һаҡлана.

...Юлдар мине Балтик буйҙарына – Рига ҡалаһына ла алып барҙы. Мең туғыҙ йөҙ етмеш икенсе йылда ошо ҡалала СССР Яҙыусылар союзы, комсомол Үҙәк Комитеты һәм СССР Профессиональ-техник белем биреү комитеты бик ҙур кәңәшмә-семинар үткәрҙе. Унда беҙҙән республика профессиональ-техник белем биреү комитеты начальнигының урынбаҫары Әҙғәт Кайбышев, комсомол өлкә комитетынан Нина Федянина, Композиторҙар союзынан Светлана Шәйәхмәтова, Яҙыусылар союзынан мин делегат булып барҙыҡ. Хәҙер тик яманлап ҡына телгә алған совет осоронда һәр төрлө саралар бик ойошҡан рәүештә, юғары кимәлдә үтә торғайны һәм һәйбәт һөҙөмтә бирә ине.

Ригалағы кәңәшмә лә бик юғары кимәлдә үтте. Уны төп доклад менән СССР Яҙыусылар союзы идараһының секретары Сартаков башлап ебәрҙе. Мин уны, быға тиклем ҡайһы бер әҫәрҙәрен уҡып сыҡҡандан аҙаҡ, урта ҡул яҙыусылыр, тип йөрөй инем. Ә ул докладты шул тиклем шәп итеп һөйләне, алдындағы яҙыуға ла йүнләп ҡарамай, нисектер тәьҫоратлы итеп һалдыра ғына. Күрәһең, ҡайһы берәүҙәр – яҡшы әҫәрҙәре менән, икенселәре трибуна артынан ялҡынлы сығыштары менән танылалыр...

...Рига ҡалаһы ла бик матур тәьҫораттар ҡалдырҙы миндә. Һәр урында таҙалыҡ, магазиндар бай ғына, ниндәй ҙә булһа йомош менән мөрәжәғәт итһәң, бик тә ихтирамлы яуап бирәләр. Бигерәгендә органда башҡарылған концертта булыу онотолмаҫлыҡ булып хәтерҙә ҡалды. Минең шуға тиклем быңдай сихри орган моңон тыңлағаным юҡ ине.

Ошо урында Ҡаҙағстан яҡтарында булып ҡайтыуҙы ла иҫкә алып үтке килә. Унда күренекле ҡаҙаҡ яҙыусыһы, "Ҡарағанда" тигән романы өсөн Сталин премияһы лауреаты исемен алған Ғәбидин Мостафиндың етмеш йәшлек юбилей кисәһенә барғайным. Ул бик юғары кимәлдә үтте. Барлыҡ союздаш һәм автономиялы республикаларҙан тиерлек ҡунаҡтар бар ине. Татарстандан талантлы, киң танылған яҡташыбыҙ Әмирхан Еники ҡатыны менән килгәйне.

Кисә Ҡаҙаҡ академия драма театры бинаһында үтте. Президиумда – ҡунаҡтар, Ҡаҙағстан коммунистар партияһы Үҙәк Комитетының беренсе секретары Ҡунаев, хөкүмәт етәкселәре. Юбилярҙең тормошо һәм ижады тураһында докладтан һуң, килгән ҡунаҡтарҙың ҡайһы берәүҙәренә һүҙ бирелде. "Ҡайһы берәүҙәр" араһында мин дә бар инем. Ҡыҫҡаса ҡотлау һүҙенән һуң, юбилярға

матур итеп эшләнгән ҡумтаға һалынған ҡурай һәм Нәжиб Иҙелбай тәржемәһендә башҡортса сыҡҡан “Абай” романының ике томлығын бүләк иттем.

Иртәгәһенә Ғәбидин Мостафин байтаҡ кешене ҡала ситендәге дачаһына мәжлескә йыйҙы. Улар араһында Әмирхан Еники ағай менән Яҡутстандан килгән Семен Руфовтан башҡа танышым юҡ ине. Мәжлес барышында күптәре менән танышыу насип булды. Алма-Ата ҡалаһы менән танышырға ла форсат тейҙе. Бөтәһенән бигерәк ҡала эргәһендәге бейек тау башына эшләнгән, бар донъяға билдәле боҙ яланы иҫтә ҡалған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, уны хәҙер, ташландыҡ хәлгә төшкән, тиҙәр.

...Бер мең туғыҙ йөҙ етмеш һигеҙенсе йылда Яҡутстанда йөрөп ҡайтҡан көндәр оноторлоҡмо ни! Бик ҙур делегация унда әҙәбиәт һәм сәнғәт көндәрен үткәрергә барғайны. Июнь аҙағы – унда төндәр бөтөнләй булмаған, тәүлек әйләнәһенә яҡты торған мәл ине. Ҡояш офоҡҡа барып байыны ғына тигәндә ҡабат күтәрелә лә китә.

Яҡутстанға барып төшкәс үк, беҙҙең яҙыусыларҙы Семен Руфов өйөнә ҡунаҡҡа йыйып алды. Ошонда беҙ яҡуттарҙың милли аштарынан тәү башлап ауыҙ иттек. Туңдырылған балыҡ, болан ите, болан теле уларҙа иң һәйбәт һый иҫәпләнә икән. Бешермәйенсә туңдырылған балыҡ һырты ауыҙға ҡабыу менән ireп тора.

Бында беҙҙең өсөн яңылыҡтар, көтөлмәгән һәм ҡыҙыҡлы хәлдәр байтаҡ булды. Регламент буйынса ҡаралған Яҙыусылар союзында, унан журнал редакцияһындағы рәсми осрашыуҙарҙан һуң, беҙҙе әҙәбиәт музейына алып барҙылар. Тыштан ҡарауға күҙгә юҫыҡ бәрелмәгән ҙур булмаған йорттоң эсенә ингәс иһә беҙ хайран ҡалдыҡ. Бындағы бай экспонаттарҙан яҡут әҙәбиәтен алыҫ үткәндәрҙән алып бөгөнгөһөнә тиклем бик асыҡ күҙ алдына килтереп була ине. Хатта күңелдә көнләшеү тойғоһо уяна биреп ҡуйҙы. Төҙөлөш материалдарының һәр бөртөгө алтынға бәрәбәр ерҙә әҙәбиәт музейы төҙөү мөмкинлеген тапҡандар, беҙ ошоғаса был турала ныҡлап уйлап ҡарағаныбыҙ ҙа юҡ ине. Дөрөҫ, һикһәненсе йыл урталарында, Әсҡәт Мирзаһитов идара рәйесе булған саҡта әле, ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғала биреп ҡуйҙы. Ул турала Динис Бүләков заманында ла ынтылыш булды, ошо хаҡтағы һүҙ егерме биш йыл дауам итә, хатта хәҙер уның байтаҡ кешенән торған штаты, генераль директоры ла бар. Ә музей юҡ.

Ярай, Яҡутстанда күргән-кисергәндәрҙе бер ни тиклем хәтерҙән үткәрәйек. Яҡутскиҙа донъялағы берҙән-бер мәңгелек туңды өйрәнә торған Боҙлоҡ лабораторияһы бар. Тик ул ер өҫтөндә түгел, бик тәрәнгә ҡаҙып эшләнгән. Беҙҙе ана шунда алып төштөләр. Ул һикәлтәләп-һикәлтәләп ҡаҙып төшөлгән. Стеналар ҡат-ҡат булып ятҡан төрлө төҫтәге боҙҙан тора. Уларҙан тәнгә үтеп инмәле һыуыҡлыҡ бәрелә. Иң түбәндәге зал һымағыраҡ урында боҙлоҡто өйрәнеү һөҙөмтәләре тураһындағы белешмәләр, экспонаттар ҡуйылған. Арыу уҡ өшөүгә ҡарамаҫтан, беҙ унан ер өҫтөнә ҡабатланмаҫ тәьҫораттар алып сыҡтыҡ.

Әлбиттә, иң онотолмаҫы – Төньяҡ боҙло океан ярынаса сәйәхәт булды. Унда барған төркөмдә яҙыусыларҙан Яҡуп Ҡолмой, Муса Ғәли, Рафаэль Сафин һәм мин бар инек. Шул сәфәргә йөрөгәндә мәктәптә уҡыған сағыбыҙҙа “СССР-ҙағы иң һыуыҡ төйәк” тип уҡығандан ғына белгән Верхоянскиға ла һуғылдыҡ беҙ. Унда ҙур аэропорттан бәләкәй самолет менән алып барҙылар. Беҙҙе ҡала менән таныштырып сыҡтылар. Бер уҡытыусының ихатаһына алып барыуҙары хәтерҙә. Биология уҡытыусыһы булып эшләгән урта йәштәрҙәге ир өйө эргәһенә

быяланан теплица эшләгән. Уның эсендә ҡыярҙар бауланышып тора, ҡып-ҡыҙыл помидорҙар ауыҙ һыуын ағыҙа. Мәңгелек туң менән ҡапланған ерҙә был күренешкә ҡапыл ғына ышаныуы ла ҡыйын ине. Уны, төньяҡ полюсҡа ҡараған зонала берҙән-бер теплица, тинеләр. Әҙәм балаһының, әгәр теләһә, ошондай мөғжизәләр яһарҙай әмәл таба алыуын күрһәткән бер миҫал ине был. Беҙ Верхоянскиҙа йөрөгән арала көслө ел күтәрелеп киткәйне. Былдай саҡта "У-2" менән осоу хәүефле икән. Беҙҙе алырға киләсәк вертолетты көтөп торорға тура килде. Батағай аэропортына вертолет тауышынан ҡолаҡтар тоноп килеп төшкәс, иркен тын алып ҡуйҙыҡ. Ә беҙҙе унда геологоразведчиктар көтөп торған. Улар аэропорттан саҡ ҡына ситтәрәк йәшәү урыны ҡороп, ошо регионда геологик эҙләнеүҙәр алып баралар икән. Был партияның етәксеһе беҙҙең яҡташ – Ишле ауылында тыуып үҫкән ир-азамат булып сыҡты. Геологтар күлгә оҡшап торған һыу ятмаһы ярына табын әҙерләгәйне. Яр буйында сибек кенә, бейеклектәре метр ярымдан да артыҡ булмаған ҡайындар үҫеп ултырған була. Ергә аяҡ баҫыу менән беҙҙең башҡа селтәр япма кейҙерҙеләр. Эре мошкалар ҡорт күсе кеүек мыжғып тора ине. Шуға ла ҡарамай, мәжлес бик күңелле үтте. Яҡуп Ҡолмой ағай осоп йөрөп бейеп алды, хужаларҙың күңеле булһын тип, әллә ни оҫталыҡ булмаһа ла, мин "Сибай"ҙы йырлап ташланым.

Беҙгә әле артабан осоу бурысы тора ине. Әллә ҡайҙарҙа булып, әллә ни ғүмер ваҡыт үткәрҙек, ә һаман ҡояш яҡтырта, көндөң кисләүе һиҙелмәй ҙә. Төньяҡҡа табан тағы оҙаҡ ҡына остоҡ беҙ. Төньяҡ боҙло океандың яр буйында тиерлек урынлашҡан бик ҙур, заманса аэропортҡа барып төшкәндә лә ҡояш яҡтырта, ҡайһы ваҡыт икәнен дә белеп булмай ине. Ҙур булмаған ҡунаҡханаға әйберҙәрҙе ҡуйып, ашханала тамаҡ ялғап алыу менән, клубта үтәсәк осрашыуға алып киттеләр. Былдай ваҡиға әллә ниҙә бер булғас, беҙҙең сығыштарҙы бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар.

Бынан беҙҙе тура Индигирка буйына алып барып, катерға ултырттылар ҙа йылға буйлап алып киттеләр.

Был Төньяҡ боҙло океанға ҡойоусы тулы һыулы йылғаның яр буйҙарында, йәй уртаһы яҡынлашыуға ҡарамаҫтан, эре-эре боҙҙар ята. Беҙҙе Индигирка йылғаһы океанға ҡойған ергә тиклем алып барып еткерҙеләр. Ярға сығып баҫҡас, күҙ алдында бөтөнләй ят донъя асыла. Икһеҙ-сикһеҙ булып йәйелгән океандың яр буйҙарында – ғәжәп ҙур боҙ өйөмдәре, арт яҡта – ҡараһыу төҫтәге мәңге туң ер. Океандың тулҡынып ажғырыуынан тыш, бер ниндәй йәнлелек юҡ. Бер-ике таҡта ҡағып эшләнгән өҫтәлгә оҡшаш нәмә генә бында ниндәйҙер йән эйәләре барлығын белдерә. Ысынлап та, ана бит ике-өс кеше яр ситендә һыуҙан нимәлер һөйрәп маташа. Бына улар яр башына ауҙарын тартып сығарҙы һәм унда ҡотоп ҡояшы аҫтында ялт-йолт итеп һикерешкән балыҡтар күренде.

Беҙҙе оҙатып йөрөүселәр был яҡтағы тормоштоң үҙенсәлектәре тураһында һөйләй, ә теге ау тартыусылар көмөштәй йылтыр тәңкәле балыҡтарҙы таҙартырға ла тотондо. Күп тә үтмәне, әлеге эре үк балыҡтар телгеләп һалынған, хәмер шешәләре ҡуйылған өҫтәл йораты эргәһенә саҡырҙылар. Аҡһыл-ҡыҙыл балыҡ киҫәктәре һаман тере, дерелдәп ятҡан төҫлө, ә беҙгә шуларҙы ашай башларға ҡушалар. Быға хәтлем әле генә тотолған сей балыҡты ашаған булмағас, ҡапыл ғына тотонорға баҙнат итмәй торҙоҡ. Иплəп кенә ҡабып ҡарағас иһә, балыҡ киҫәге ауыҙҙа иреп үк китте, ул шундай тәмле, әҙерәк хәмерҙән дә ауыҙ итеп алғас, беҙ инде балыҡты үҙебеҙҙең ҡаҙылыҡ һымаҡ күреп ихлас ашарға тотондоҡ. Йә, Хоҙай, Төньяҡ боҙло океан яр буйына килеп, бына шулай сей балыҡ ашап торорҙо кем уйлаған?..

Тамаҡ туйғас, тотондоҡ яҡуттарса түңәрәк яһап, ҡулға-ҡул тотоношоп

бейергә. Яҡуттар һайт та һойт тип һөрән һала, беҙҙе моторлы кәмәлә оҙата килгән Коля тигән, төҫ-ҡиәфәте менән башҡортҡа оҡшап торған эвен егете урталыҡта әйләнә, һикерә, ҡаңҡылдай. Әкәмәт инде. Балыҡсылар ҡасабаһына әйләнеп ҡайтҡас, ҡунаҡханаға инеп, ял итергә, йоҡларға тейеш инек. Тик ҡайҙа инде ул йоҡлау. Офоҡҡа яҡынайған ҡояш ҡабаттан юғары күтәрелә башланы, йоҡолар осто. Байтаҡ ваҡыт үткәс, тороп, иртәнгелеккә ашаныҡ та пограничниктар менән осрашыуға киттек, унан туп-тура аэропортҡа алып барҙылар. Унда ресторанға инеп ултырып ашай ғына башлағайныҡ, бер егет кереп:

– Бында кем Мусин? Һеҙҙе телефонға саҡыралар, – тип хәбәр һалды.

Аптыраным. Бында кем мине телефонға саҡырһын, тим.

– Яңылышмайһығыҙмы? – тим теге егеткә.

– Юҡ, – ти егет, – тауышына ҡарағанда, ҡатын-ҡыҙ.

– Өфөнән Фәһимәң эҙләйҙер, – тип көлөшә минекеләр.

Барҙым телефонға. Трубкала:

– Һаумыһығыҙ, Ноғман ағай, – тигән яғымлы тауыш ишетелгәс, бер мәлгә телһеҙ ҡалдым.

– Кем әле был? – тим.

– Зәйтүнә был. Хәлитова... Хәтерегеҙҙәме, мин был яҡтан ҡайтҡанда, һеҙҙең янға инеп сыҡҡайным.

Әҙерәк уйланып торғас, иҫкә төштө: Яҙыусылар союзында әҙәби консультант булып эшләгәндә ингәйне бит ул минең эргәгә. Уның бер-ике очеркы гәзиттә лә баҫылғайны. Теге саҡта ул миңә күләмлерәк әҫәр өҫтөндә эшләүен, кәңәшләшер кешеһе юҡлыҡтан, өҙлөгөбөрәк тороуын да һөйләгәйне.

Ошо хәлдәр бик тиҙ хәтерҙән үтте.

– Бөтәһен дә хәтерләйем, Зәйтүнә. Әле һин ҡайҙа? – тим.

– Мин һеҙгә яҡын ғына. Аэропорттың диспетчерскийында ултырам. Инеп сыға алмаҫһығыҙмы икән?

Тиҙҙән самолетҡа ултырырға саҡырырға тейештәр ине. Ҡайҙалығын һораштым да диспетчерскийға йүгерҙем. Зәйтүнә мине эш өҫтәле артында ҡаршыланы. Урынынан тороп, эргәмә килде лә күрешергә ҡулын һондо, ә күҙҙәрендә бына-бына һытылып китергә торған күҙ йәше.

– Дежурствола булғас, кисә һеҙҙең менән осрашырға ла бара алманым... эй үкендем. Ҡарышҡан шикелле, алмашсым ауырып киткән.

Оҙаҡ һөйләшеп торорға ваҡыт юҡ ине. Хәл-әхүәл белешкәс, Зәйтүнә йәнә күләмлерәк әҫәр яҙа башлауын, тик кәрәк саҡта кәңәшләшер кеше юҡлығын әйтте. Мин уға, хат аша булһа ла хәбәрләшеп торайыҡ, әҫәреңде яҙып бөткәс, миңә ебәр, тинем.

Миндә шул мәлдә башҡорт ҡыҙының ошо тиклем ерҙә бик тә яуаплы эштә эшләп йөрөүенә ғорурлыҡ тойғоһо ла, уның япа-яңғыҙ ни эшләргә белмәгән һымаҡ тороуына йәлләү һымағыраҡ кисереш тә ҡуҙғалып ҡуйғайны.

Байтаҡ ҡына ваҡыт үтеп, мин инде “Китап” нәшриәтендә эшләп йөрөгәндә, Зәйтүнәнең теге саҡта әйткән ҡулъяҙмаһын алдым. Уҡыһам, төньяҡ ҡотоптағы аэропортта эшләүселәрҙең үҙенсәлекле лә, ҡатмарлы ла тормошо тураһында яҙылған ҡыҙыҡлы ғына повесть килеп сыҡҡан. Зәйтүнә Хәлитованың оҫта ғына ҡәләме барлығы күренеп тора. Мин уны бер аҙ мөхәррирләп, машинкала баҫтырып алдым да “Ағиҙел” журналына тәҡдим итергә булдым. Мәсьәләне тиҙерәк хәл итер тип, журналда мөхәррир булып ултырған Әмир Гәрәевҡа индем. Үҙем “Ағиҙел”дә проза бүлеге мөдире булып эшләгәндә Гәрәевтың тәүге повесын ныҡ ҡына төҙәткеләп, кеше уҡырлыҡ итеп журналда баҫтырғайным, шуны ла онотмағандыр, Хәлитованың повесын тиҙерәк донъя күрһәтергә ярҙам итер, тим.

Шул саҡта унан бер нисә йылдар алда, Гәрәев "Китап" нәшриәтендә баш мөхәррир булып ултырған саҡтағы бер хәлде онотоуыма һаман булһа үкенәм. Был ғибрәтле хәлде иҫкә алып үтке килә.

Ҡаҙыҡ Ибәтуллин тигән бик үҙенсәлекле ҡәләмле яҙыусы бар ине. Ул тыумышы менән беҙҙең районда. Ғүмеренең күп өлөшөн хәрби хеҙмәттә йөрөп үткәргән подполковник. Каунаста литовка ҡатынын ҡалдырып (ул Башҡортостанға килергә теләмәгән), яңынан өйләнеп, матур ғына тормош ҡорҙо. Хәрби хеҙмәттә ваҡытта уҡ Ибәтуллиндың хикәйәләре матбуғатта сыҡҡылап торҙо. Ул ҡайтҡас та "Бүләк" исемле повесын яҙып, ул "Ағиҙел" журналында баҫылды, һуңғараҡ бер нисә хикәйәһе менән бергә китап булып сыҡты. Мин был ихлас күңелле, төплө белемле, мәҙәниәтле ағай менән яҡындан ҡатнашып йәшәнем. Шуға ла ул һәр яҙған әҫәре хаҡында миңә һөйләй, уҡып, кәңәшләшеп алған саҡтар ҙа була ине. Шулай бер барғанымда ул ҙур ғына әҫәр өҫтөндә эшләүен һөйләп ултырҙы. Хәл-ваҡиғалар Октябрь революцияһына тиклемге һәм унан һуңғы йылдарҙа хәҙерге Ишембай ҡалаһы тирәһендәге ауылдарҙа һәм Стәрлетамаҡта бара икән. Ҡаҙыҡ ағай миңә ике йөҙ бит самаһы ҡулъяҙмаһын уҡып фекер әйтеүемде үтенде, ҡалған өлөшөн шунан һуң яҙып ҡуйыр инем, тине. Әлбиттә, мин ҡулъяҙманы алып ҡайтып, уҡып сыҡтым. Ҡаҙыҡ ағайға хас бик бай тел менән яҙылған ҡыҙыҡлы әҫәр булмаҡсы ине ул. Ошонан аҙаҡ уның әҫәрен яҙып бөтөп, машинкала баҫа башлауын ҡатыны Мөнирә апай осрашҡанда әйткәйне. Шунан Ҡаҙыҡ ағай бик ныҡ ауырып китте.

Ул һуғышта ҡатнашыусыларҙың Туҡай урамындағы госпиталендә ята ине. Уның янына тәүге тапҡыр ҡатыным менән барып хәл белешкәйнем. Икенсе ҡабатына яңғыҙым барғанда уның хәле ауырайғайны. Аяҡтары шешеп киткән, тын алыуы ауырлашҡан. Ана шул саҡта ул миңә романын машинкала баҫып бөтөүен, ләкин проза секцияһында тикшертеү өсөн Яҙыусылар союзына алып барып өлгөрмәүен әйтте.

– Донъя хәлен белеп булмай, ҡустым, тегеләй-былай булып китһә, шул нәмәнең яҙмышы менән ҡыҙыҡһынһаң ине, – тине ул. – Исемен "Кыуғынсылар" тип ҡушҡайным, килештермәгән һымаҡ күрҙем дә... Уныһын да ҡарарһың әле.

Үҙенең хәлен самалап әйткәндер инде был һүҙҙәрен. Ошонан аҙаҡ күп тә тормай ул вафат булды. Мөнирә апай уның ҡырҡын уҡытҡанда барғанымда, кешеләр таралышҡандан аҙаҡ, миңә уның ҡулъяҙмаларын күрһәтте лә, мин бит уларҙы нишләтергә лә белмәйем, тине. Роман таҙа итеп машинкала баҫып, папкаға һалып ҡуйылған. Был көндә яйлап ултырырға ваҡытым юҡ ине. Бер аҙ ваҡыт үткәс, Мөнирә апайға ҡабат килдем, һәм ҡулъяҙмаларҙы икәүләп ҡарап сыҡтыҡ. Ағай, хәрби кеше булараҡ, төгәллекте ярата ине. Гәзиттәрҙә баҫылған хикәйәләрен ҡырҡып алып, бер ергә йыйған. Яҙылып та баҫылмай ҡалған хикәйәләре лә байтаҡ ине, уларын бер башҡа йыйған. Мин барлыҡ әҫәрҙәрен бергә туплап, нисек тә уларҙы донъяға сығарырға кәрәк, тигән ҡарарға килдем. Әммә хикәйәләрен машинкала баҫтырырға кәрәк ине. Уйланым да үҙемсә йүнен тапҡандай булдым: яҡташыбыҙ Әмир Гәрәев ул саҡта "Китап" нәшриәтендә баш мөхәрир булып эшләй ине. Ҡулъяҙмаларҙы күтәреп уға барҙым да:

– Яҡташ ағайҙың әҙәби мираҫын бергәләп донъяға сығарайыҡ. Романы әҙер, һин бында хикәйәләрен машинкала баҫтыра алмаҫыңмы? – тинем.

Әмир, ихласлыҡ күрһәтеп, булдырабыҙ уны, тип ебәрҙе һәм барлыҡ ҡулъяҙмаларҙы алып ҡалды. Ике ай самаһынан, нисек, теге эште эшләй алдыңмы әле, тип һорағайным, юҡ шул, эштәр бик тығын бара, тип яуап бирҙе. Байтаҡ ваҡыт үткәс һорағанымда ла ул шулайыраҡ яуап бирҙе, борсолма, эшләрбеҙ уны, тип тынысландырып та ҡуйҙы. Әммә Гәрәевты ҡапыл ғына эштән сығарҙы ла

ебәрҙеләр. Шунан һуң мин унан Ҡаҙыҡ Ибәтуллиндың ҡулъяҙмалары ҡайҙалығын һорашҡайным, белмәйем, мин уларҙы күтәреп йөрөй алмайым бит, тип дорфа яуап бирҙе. “Китап” нәшриәтенә барып, баш мөхәррир бүлмәһенән, унда булмағас, художестволы әҙәбиәт редакцияһынан эҙләтеп тә ҡараным. Бер ҡайҙа ла юҡ, регестрация журналына теркәлмәгән. Әмир Гәрәевтан ҡабат һорашҡайным, ул асыуланып уҡ китте. Ниңә бәйләндең әле миңә, ул кешенең әйберҙәрен мин знайт та незнаю, тип ебәрҙе.

Ҡаҙыҡ Ибәтуллиндың бай ғына әҙәби мираҫы ана шулай бик сетерекле рәүештә юғалып ҡалды. Иманым камил, уға Әмир Гәрәевтан башҡа кешенең ҡулы ҡағылмағандыр.

Зәйтүнә Хәлитованың ҡулъяҙмаһын Әмир Гәрәевҡа тапшырғанда ана шул хәлде онотоуыма үкенгәйнем дә инде. Һәм бер ҙә юҡҡа булмаған. Был ҡулъяҙма ла, һыуға батҡандай, юҡҡа сыҡты. Кешенең ҡыҙелендә нимә ятҡанды белеп бөтөп булмай, Гәрәев был ҡулъяҙмаларҙы нимә өсөн йыйҙы икән?..

Ә мин иһә Ҡаҙыҡ ағайҙың рухы алдында ла, алыҫ-алыҫтарҙа – төньяҡ ҡотопта эшләп йөрөгән Зәйтүнә Хәлитова алдында ла бөтмәҫ бурыслы булып ҡалдым.

Яҡутстанға булған сәйәхәт тураһында ҡабат һүҙ оҙайтып тормаҫтан, шуны ғына әйтәм: был юл йөрөү миңә, әле һөйләгән борсолоуҙан тыш, “Хыялый ҡыҙ хикәйәте” тигән әҫәр ҙә бүләк итте.

* * *

...Илай-илай яҙ килә, тигән әйтем бар. Быйыл ҡыш та илай-илай килде: ҡар яуа ла бөтә, әҙ-мәҙ йылытып тора ла йәнә һыуытып ебәрә. Былдай көндәр беҙҙең кеүек өлкән йәштәге кешеләрҙең сәләмәтлегенә лә кире яҡтан һуға. Бына үҙемдең дә өҫтәл артына ултырып бер аҙ яҙыштыммы, баш һулҡылдап ауырта башлай, хәл бөтә.

Көндөң нисек булыуына ҡарамай, тормош дауам итә, әлбиттә. Эшле кешеләр эшенә йүгерә, эшһеҙҙәре, нисек тамаҡ туйҙырырлыҡ аҡса табырға белмәйенсә, урамда ҡаңғырып йөрөй. Шулай ҙа быйылғы йыл, бүтәндәренә ҡарағанда, ниндәйҙер күтәренкелек менән үтә кеүек. “Рәсәй менән ҡушылыуға дүрт йөҙ илле йыл тулыуҙы яңы уңыштар менән ҡаршыларға!” тигән саҡырыу шауҡымы ныҡ тойола. Ошо уңай менән Өфөлә генә лә күпме ҙур төҙөлөш эштәре бара: Салауат Юлаев һәйкәле эргәһендә Дуҫлыҡ йорто һалына, тимер юл вокзалын, аэропортты, “Аҡбуҙат” ипподромын ҡайтанан төҙөйҙәр. Бүтән ҡала һәм районларҙа ла бик дәртләнеп эшләүҙәрен ишетеп торабыҙ. Һуңғы йылдарҙа төшөнкөлөккә бирелгән халыҡтың рух күтәренкелеген күреү ҡыуандыра, тик был ваҡытлыса ғына күренеш булмаһа ярар ине. Сөнки, әле илдә хөкөм һөргән сәйәсәт һәм иҡтисад Рәсәйҙе һәр йәһәттән күтәрерлек итеп үҙгәртелмәһә, яңы төҙөлгән объекттарҙың тышҡы матурлыҡ ҡына булып ҡалыуы ла ихтимал бит...

Рәсәйгә ҡушылыуҙы байрам итеү аңлашыла. Был тарихи аҙымды ата-бабаларыбыҙ үҙ теләктәре менән яһаған һәм Рәсәй Башҡортостанды ят баҫҡынсыларҙан ҡурсалап, үҙ ҡанаты аҫтына алған. Шул уҡ ваҡытта башҡорттар үҙҙәрен урыҫтың бөтөнләй йотоуынан һаҡланып, уға ҡаршы быуаттар буйы һуғыш алып барған. Әгәр тарихҡа ныҡлабыраҡ күҙ һалһаң, Рәсәйҙең беҙҙең илгә һәр саҡ үҙенә байлыҡ туплау сығанағы итеп кенә ҡарауын бик асыҡ күрергә мөмкин. Ул шулай булды, шул рәүешле бара, шулай буласаҡ. Был ҡапҡандан ҡотолоу юлын күрмәйем мин. Уйлаһаң, Рәсәйҙән башҡа ҡайҙа бараһың хәҙер? Бандиттар талап киткән йорт хәленә ҡалып барабыҙ бит инде: нефть һурҙырып бөтөлгән, күмер ятҡылығының ҡотдәһенә сығылды, мәғдәндең һуңғы ятҡылыҡтарын аҡтарабыҙ, урмандарыбыҙ ҡырылып бөтөп бара. Әҙәм балаһы ер байлығынан

башҡа көн күрә алмай. Шуға күрә киләсәгебеҙ тураһында уйлаһаң, күңелһеҙ күренештәр күҙ алдына баҫа. Мәҫәлән, эйәһе ҡыуалап сығарған ас эттең төпһөҙ күккә ҡарап олоп ултырыуы...

Кит инде, артыҡ насар уйҙарға бирелдәм. Тормош бит ул тиклем зарланырлыҡ түгел. Бына һуңғы көндәрҙә генә ике яҙыусыбыҙҙың юбилей кисәләре үтте. Рәми Ғариповтың тыуыуына етмеш биш йыл тулып киткән. Вафат булыуына утыҙ... Ә бит бөтәһе лә әле генә һымаҡ. Мең туғыҙ йөҙ илле дүртенсе йылда (ул саҡта "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында эшләй инем) башлап осраштайным Рәми менән. Ул Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтында уҡып йөрөгән ерҙән йәйге каникулға ҡайтҡас, редакцияға ваҡытлыса эшкә алынды. Секретариат һәм корректорҙар бүлмәләре алдындағы тар ғына коридорға кескәй өҫтәл ҡуйып, үҙенә урын йүнәтеп алды. Хәҙер ҡайһы берәүҙәр ул саҡтағы Рәмиҙе гәзит мөхәррире Ғаффан Ғафаров менән сәкәләшеп, бәхәсләшеп йәшәгән итеп күрһәтеп маташа. Йәнәһе, Рәмиҙе ҡыйыу кеше итеп күрһәтмәкселәр. Ниңә уға булмағанды йәбештереп маташырға? Берҙән, Рәми тәүге шиғырҙарын донъяға сығарған, ауыр саҡта урын табып эшкә алған кешегә төкөрөп ҡарарға алйот түгел ине. Икенсенән, Ғаффан Ғафаров – алсаҡ күңелле, әммә тура һүҙле, кәрәк саҡта уҫал да була белгән кеше. Ҡәтғи һөйләшә, ваҡлыҡтарға бирелеп тормай ине. Рәмиҙең көндәлектәренә генә ҡарап шул замандағы кешеләргә, ваҡиғаларға баһа биреү дөрөҫмө икән?..

Рәми Ғарипов менән мең туғыҙ йөҙ илле һигеҙенсе йылдың октябренән башлап "Әҙәби Башҡортостан" ("Ағиҙел") журналы, алтмыш өсөнсө йылдан алып гәзит редакцияһында бергә эшләргә тура килде. Ул үҙенә ҡушылған эште бик әкрен башҡара, гәзит редакцияһының өҙлөкһөҙ һәм ҡабалан әйләнгән эш ритмына ҡулайлашырға тырышмай ине. Рәми талантлы, шәп шағир булды. Әҫәрҙәрен уҡыһаң, уның тормошто үҙенсә ҡабул итеүен, кешеләргә, һәр төрлө хәл-ваҡиғаларға үҙенсә баһа биреүен күрмәү мөмкин түгел. Уғата ла үҙ һүҙле ине. Ир кеше өсөн насар сифат та түгел был. Әммә үҙ-үҙенә генә ышаныу ҡайһы саҡта бәкәлгә һуғып та ҡуя.

Шундай бер көлкөлө лә, ғибрәтле лә миҫал. "Совет Башҡортостаны" гәзите редакцияһында эшләгәндә редакция хеҙмәткәрҙәренә Кооператив аҡландың арьяғынан бәрәңге сәсергә ер бирҙеләр. Тәүҙә барып ерҙәрҙе бүлешеп алдыҡ, унан орлоҡлоҡ бәрәңгеләрҙе йөк машинаһына тейәп, бөтәбеҙ бергә бәрәңге ултыртырға барҙыҡ. Ер көҙҙән һөрөлгән. Ул бер ни тиклем ҡатыңҡыраһа ла, ҡайһы берәүҙәр уны ҡабат ҡаҙып тормай, бәрәңгеләрен шул килеш кенә ултырттылар. Беҙ, бер нисә кеше, тәүҙә үҙ өлөшөбөҙҙө йәһәт кенә ҡаҙып ташлап, шунан ғына сәстек. Рәмиҙең участкаһы минән йыраҡ түгел ине. Эргәләренә барһам, ул да ҡатыны менән эшләп йөрөй. Арыу уҡ ҡатҡан ерҙе Рәми, бағана ултыртыу өсөн ҡаҙған шикелле, тәрән итеп соҡой ҙа ҡатыны шунда бәләкәй генә орлоҡ бәрәңгеһе төшөрә.

– Рәми, – мин әйтәм, – ул тиклем тәрән ҡаҙма, орлоғоң да вағыраҡ, тонсоғоп, сыҡмаҫ бит.

– Бүтәнен белмәһәк тә, бәрәңге сәскән бар инде, – ти Рәми. Ҡатыны:

– Беҙ бит ауылда йәшәп килдек, шуны ла белмәгәс, – тип өҫтәне.

Аҙаҡтан уларҙың был һүҙҙәренең дөрөҫлөгөнә шик тыуҙы: сәскән ерҙәрендә өс төп кенә бәрәңге шытып сыҡты. Ҡайһы берәүҙәр, бәрәңгең бигерәк күп, нисек ашап бөтөрһөгөҙ икән, тип көлһә, Рәми:

– Аҙ булһа, тәмлерәк була ул, – тигән булыр ине...

Башкөллө шағир Рәми Ғарипов ысын мәғәнәһендәге журналист була алманы. Бигерәген дә гәзит редакцияһында эшләгәндә, кәрәк сағында, бер көндә

районға барып әйләнергә лә иртәгәһенә бер полосалыҡ материалды мөхәррир алдына һалырға кәрәк. Рәмиҙә иһә быныдай оперативлыҡ юҡ ине. Шуға күрә лә ул редакцияларҙа оҙаҡ ваҡыт ултырып эшләй алманы. Эштән йә үҙе китә, йә ебәрәләр ине. Ә хәҙер уның коллективта эшләү рәүешен бөтөнләй белмәгән иптәштәр, уны ситләткәндәр, эштән ҡыуғандар, эшһеҙ йөрөгән, ошо арҡала тормошо, көнитмеше бик ауыр булған, тип яҙа. Йәнәһе, шулай итеп тағы ла уның абруйын күтәрмәкселәр. Иң дөрөҫө – Рәми һәр даим саф шағир булып ҡалды, тормошҡа, һәр төрлө эш шарттарына яраҡлаша алманы. Уға бит әллә ни зарланыр урын юҡ ине: интернатта хөкүмәт иҫәбенә ашап, кейенеп уҡыған, Яҙыусылар союзының йүнәлтмәһе буйынса Мәскәү институтында белем алған, уҡыуҙы бөтөп, Өфөгә ҡатыны менән ҡайтып төшкәндән аҙаҡ, ике йылға яҡын фатирһыҙ йөрөгәс (быныдай хәлде кем генә башынан үткәрмәгән? Фатирһыҙ йөрөгән йәш яҙыусылар әле аҙмы ни?), Фрунзе урамындағы йорттоң сарлағындағы фатирҙы бирҙеләр. (Һуңғараҡ унда миңә лә алты йыл буйы йәшәргә тура килде.) Үҙ районында бер нисә йыл эшләп ҡайтҡайны, тәүҙә Октябрь проспектынан ике бүлмәле, унан Зорге урамындағы йорттан өс бүлмәле фатир алды. Бүтән яҙыусылар тормошонан кәм дә, артыҡ та түгел. Ниңә уны ҡыйырһытылған кеше итеп күрһәтергә? Ҡабатлап әйтәм: Рәми Ғарипов – башҡорт әҙәбиәтенә ҙур өлөш индергән талантлы шағир. Уны меҫкен итеп күрһәтеп, кәмһетергә ярамай, шағир булараҡ күтәрмәкләргә кәрәк.

Быныһы – Рәмиҙең юбилейы айҡанлы килеп сыҡҡан уйланыуҙар. Мостай Кәрим үҙенең "Юбилярҙар" тигән очерктар циклында, түңәрәк датаһын билдәләгән мәлдә яҙыусының үҙен нисегерәк тотоуын күҙәтеү аша, уның үҙенсәлекле портретын тыуҙыра. Ысынлап та, кеше характерын күп яҡлап асып һала торған мәл был. Ҡайһы берәүҙәр тыуған көнөн юғары кимәлдә билдәләү өсөн бөтә көсөн һала: ҙур наградалар талап итә, гәзит һәм журналдарҙа үҙен маҡтаған мәҡәләләр баҫтырыуҙы ойоштора, юбилей кисәһен иң күркәм урында үткәрергә тырыша.

Тыуған көндәрен билдәләүгә артыҡ иғтибар итмәгән, баҫалҡы ҡылыҡлы ҡәләмдәштәребеҙҙең юбилейҙары ла үтә тора. Уларҙың кисәһенә юғары начальство килеп, ҡотлау һүҙҙәре лә әйтмәҫкә мөмкин, уларға арналған шалтырауыҡ шиғырҙар ҙа күренмәҫ (ә беҙҙә кемдеңдер тыуған көнө йәки вафат булыуы уңайы менән шиғыр сығарыуҙы һөнәр иткән Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбаев кеүектәр ҙә бар), шулай ҙа был хәл уларҙың тормошона, артабанғы ижадына һис нисек тә тәьҫир итмәҫ, нисек булған, шулай йәшәй бирерҙәр ине.

Элегерәк, илленсе-алтмышынсы йылдарҙа, яҙыусылар ҙа аҙ, шуға күрә юбилей кисәләре лә һирәк үтә торғайны. Уларҙы үткәргәндә лә яҙылмаған бер тәртип (моғайын, уны партия өлкә комитеты шулай ҡуйғандыр) ҡәтғи һаҡлана. Кисәне үткәреү урыны яҙыусының вазифаһына, дәрәжәһенә, власть органдарында эшләүселәр алдындағы абруйына ҡарап билдәләнә. Иң түбәнгеһе – юбилярҙы Яҙыусылар союзына саҡырып алып, аҙ-маҙ ғына кеше ҡатнашлығында ҡотлау. Артабан ул, кемдәрҙеңдер уйлауынса, күтәрелгәндән-күтәрелә бара: республика китапханаһы, "Белем" йәмғиәтенең залы (хәҙерге Коммунистик урамындағы МВД йортонда ине), Ленин урамындағы Сәйәси ағартыу йорто (хәҙер Йәштәр театры), күренеклерәк драматургтарға – Академтеатр сәхнәһе, Министрҙар Советының ултырыштар үткәреү залы, ә иң юғарыһы – Опера һәм балет театры. Быныһы Мостай Кәримдән башҡаға эләкмәне шикелле. Күрәһең, был тәртипкә күнегеп кителгәндер. Миңә теге урынды, был урынды бирмәнеләр, тип үпкәләп йөрөүсе лә булмай торғайны, ундай кисәне үткәрергә әллә ни атлығып та тормайҙар ине.

Үтә лә баҫалҡы холоҡло Маҡсуд Сөндөклө ағайҙың етмеш йәшен һис нисек тә үткәреүҙән баш тартыуы хәтерҙә. Уның Яҙыусылар союзы бүлмәһенән сығып, коридор тәҙрәһе эргәһендә тәмәке тартып тороуын күргәс, янына барҙым. Ҡулында ҡатырға папка.

– Юбилейығыҙ менән, ағай, – мин әйтәм.

Ул ҡулын һелтәп ҡуя.

– Һәй, юбилей тип инде... Ул минең иҫкә лә төшмәй ине. Әйткәстәр, баш тартҡайным. Бына, – тип ҡатырға папкаһына ымлай, – саҡырып алып, ҡотлау телеграммаларын биреп сығарҙылар. Нимәгә кәрәге бар уларҙың? Унда яҙылғандарҙың бөтәһе лә буш һүҙ, күҙ буяу өсөн генә бит...

Хәҙер бөтәһе лә юбилей үткәрергә тырыша. Аҡсаң булһа, иң ҙур, иң күркәм залдар ҙа һине ҡолас йәйеп ҡаршы алырға әҙер.

Һөйләй китһәң, күҙәтә йөрөһәң, ҡыҙыҡ инде ул. Юбилей кисәһе булған саҡта дуҫ-иштәрҙе йыйып мәжлес үткәрәһең бит инде. Уны банкет тип йөрөткән булалар. Уның да төрлөһөн күргән бар. Ғәҙәттә, бындай мәжлескә иң тәүҙә яҡын туғандарыңды, яҡташтарыңды, дәрәжә-вазифаһына ҡарамай, быға тиклем яҡындын ҡатнашып йәшәгән, үҙеңә эскерһеҙ ярҙамы тейгән кешеләрҙе саҡыраһың бит. Ярамһаҡ, ике йөҙлө, үҙ карьераһы тураһында ғына уйлаусылар хатта туғандарын, көндәлек ярҙамын тойоп йәшәгән яҡын дуҫтарын да онотоп, табынға етәкселәрҙе, үҙе йомош йомошларға бара торғандарҙы ғына йыя. Йәнәһе, был осраҡта ла үҙ проблемаларын хәл итә, тормошҡа яраҡлашыу йүнен күрә...

Һуңғы йылдарҙа бындай кисәләрҙә һирәк булырға тура килә ине. Саҡырһалар ҙа, бара алмайым. Балалар йыш ҡына эштән һуңлап ҡайта (беҙҙә, ненормированный труд, тиҙәр), сирләп ятҡан Фәһимәмде яңғыҙ ҡалдырып булмай.

Ә бына Роберт Байымовтың етмеш йәше тулыуға арналған кисәлә ҡатнашҡым килде. Гөлшат ҡыҙым төштән һуң эшенән һорап ҡайтты ла әсәһе эргәһендә ҡалды.

Роберт – ҡәләмдәштәр араһында иң яҡын күргән кешеләремдең береһе. Аҡыллы, баҫалҡы, төплө белемле, зарланыу-фәләнде белмәй ең һыҙғанып эшләп йөрөй. Күп ғилми хеҙмәттәр яҙған фән докторы, академияның мөхбир ағзаһы, кафедра мөдире, ғилми журналдың баш мөхәррире, бынамын тигән хикәйә, повесть, романдар авторы. Әммә уның үҙ “мин”ен алға ҡуйып йөрөгәнен күргәнем юҡ. Республикалағы һирәк шәхестәрҙең береһе булараҡ, уның юбилей көндәрен иң юғары кимәлдә үткәреү хәстәрлеген күрергә кәрәк ине. Үҙ тирәләрендә һырпаланып йөрөмәгәс, Яҙыусылар союзы идараһы был турала әллә ни борсолмаған, күрәһең. Ә Роберт Байымов иһә тегендә-бында барып давайлашып йөрөй торған кеше түгел.

Уның юбилей кисәһе эш урынында – Башҡорт дәүләт университетында үтте. Ҙур зал халыҡ менән шығырым тулы ине. Тик беҙҙең яҙыусылар халҡы аҙ күренә. Ҡайһы берәүҙәр, мәжлескә саҡырыу ҡағыҙы алмаһа, кисәгә килеп тормай шул. Иҫ киткес түбәнселеккә төшөрә торған ғәҙәт...

Ә кисә, юғарылағы етәкселәр үҙҙәре килмәйенсә, урта ҡул ғына вәкилдәрен ебәреүгә ҡарамаҫтан, бик матур үтте. Рәсми өлөш өс сәғәт самаһы барһа ла, ваҡыт уҙғаны ла һиҙелмәне. Кешегә ҡасандыр Маҡсуд Сөндөклө әйткән буш һүҙ йәки награда түгел, ысын күңелдән яҡын күреп әйтелгән ихлас һүҙ ҡәҙерлерәк. Робертҡа юбилей көндәре үтеп, байтаҡ ваҡыт уҙғас ҡына республиканың ордены бирелде. Һуңлап булһа ла иҫтәренә төшкәндер...

Юбилейҙар була ла үтә лә китә. Һин тағы ла ығы-зығылы көндәлек эшкә сумаһың. Ябай уҡыусы яҙыусыны, бәлки, күберәк өҫтәл артында ултырыусы итеп күҙ алдына килтерәлер. Яҙыу, ижад итеү төп һөнәре булһа ла, ул ултырғыс

ҡоло булып ҡала алмай, кеше араһына сығып, һөйләшеп, әңгәмәләшеп йөрөү, елләп алыу күңелде яңырта, башты сафландыра.

Әлбиттә, яҙыусының өҫтәл артында эшләү, ял итеү ваҡытын бер кем дә тәғәйен билдәләп ҡуймай. Уға бирелгән айлыҡ, йыллыҡ план да юҡ. Ул эш ваҡытын да, ялын да, эш күләмен дә үҙе билдәләй. Шуға күрә ваҡытты дөрөҫ файҙаланыу, үҙен ниндәйҙер рамка эсендә тота белеү уның тормошонда иң мөһим фактор булып тора. Әүәле, совет власы ваҡытында, СССР Яҙыусылар союзының төрлө урындарҙа – Мәскәү эргәһендә, Балтиҡ ярҙарында, Ҡара диңгеҙ буйында путевка буйынса барып, рәхәтләнеп эшләү өсөн бынамын тигән ижад йорттары бар ине. Яңы әҫәр яҙыу өсөн шунда барыр булһам, көн элгәре бик ныҡлап әҙерләнә инем. Ике-өс ай буйы ауыҙға хәмер ҡабыу юҡ – баш бик тә саф булырға, хәтер ныҡ һәм сағыу булырға тейеш. Әҫәрҙә сағылыш табасаҡ материалдар тәртипкә килтерелә, ҡағыҙ, матур яҙа торған ручкалар әҙерләнә. Ижад йортона барып инеп, бүлмәгә урынлашыу менән эшкә тотона инем. Әҫәрҙе башлап китә торған тәүге һөйләм уйлап ҡуйылған. Эш режимым иһә һәр саҡ бер төрлө булды. Ун биш минуттан алты тигәндә торам, йыуынып, бер стакан кофе эсәм, бүлмәнән сығып, тәмәке көйрәтәм дә өҫтәл артына ултырам. Иртәнге сәйгә тиклем өс сәғәт эшләнә. Ашағас, ун биш минут һауала йөрөп инәм дә йәнә өҫтәл артына ултырам. Төшкө аштан һуң теүәл ярты сәғәт ятам. Был тәртипкә шул тиклем өйрәнелгән – ятыу менән йоҡлап китә лә теүәл утыҙ минуттан уяна инем. Киске ашҡа тиклем тағы ла эшкә сумыла. Кис сәғәт һигеҙҙән туғыҙынсы яртыға тиклем һауала йөрөйөм, унан бүлмәмә инеп, йәнә эшкә тотонам. Хәрбиҙәрсә әйткәндә, сәғәт ун икелә – отбой. Ошо тәртипте мин бер ваҡытта ла боҙманым. Өфөнән бергә барған иптәштәр, кит, һинең шулай ныҡ кеше икәнеңде белмәй инем, тип аптырап та ҡуялар ине. Яңынан-яңы әҫәрҙәремдең донъя күреп тороуы ана шулай егәрле эшләү арҡаһында ине.

Ә бына Ҡара диңгеҙ яр буйындағы Пицунда ижад йортонда – август айҙары ине шикелле – булғанда, уғата ла егәрле эшләгән яҙыусыны күреп, үҙемдең әллә ни маҡтаныр ерем юҡлығын аңланым. Был юлы эшләргә түгел, ғаиләм менән ял итергә килгәйнек. Ә теге уғата ла егәрле яҙыусы әҫәрҙәре, кинофильмдары буйынса яҡшы таныш Юлиан Семенов ине. Ул да ике ҡыҙы менән килгән. Ләкин ул бер тапҡыр ҙа диңгеҙ ярында күренмәне. Ҡыҙҙары һыу инә, ҡомда ҡыҙына һәм... аталарына ашхананан аталары йәшәгән бүлмәгә аш ташыйҙар. Юлиан, ваҡыт әрәм итмәү өсөн, ашханаға ла йөрөмәй ине. Бер ҡыҙы менән һөйләшеп торғайным, атайым төнгө сәғәт ун икенән һуң ғына диңгеҙгә төшөп һыу инеп ҡайта, тине. Бына бит Юлиан Семеновтың бик тә ырамлы эшләүенең сәбәбе ҡайҙа!

Әлбиттә, һәр яҙыусының үҙенсә эш режимы була. Ниндәй ҙә булһа хөкүмәт эшендә эшләмәй, олоғая килә тик ижад менән генә шөғөлләнеүсе ҡайһы бер яҙыусыларҙың көн режимын да белә инем. Мәҫәлән, Сәғит Агиш төш алдынан йөрөргә сыға ла ике-өс редакцияға һуғыла. Әүәле барлыҡ гәзит, журнал редакциялары, Яҙыусылар союзы бер тирәлә, ҡаланың үҙәгендәрәк урынлашҡайны. Әле булһа күҙ алдында. Көр тауыш менән иҫәнлек-һаулыҡ һорашып, гөрләп килеп инер, ҡышҡы мәл булһа, өҫ кейемен сисеп, кемдеңдер өҫтәленә ырғытып, уның өҫтөнә таяғын ҡуйыр һәм хәбәрен һәр саҡ яңыса, көтөлмәгәнсәрәк башлап ебәрер, берәй мәрәкә һөйләп көлдөрөр ине. Бер ваҡытта ла уның эшкә ҡамасаулауы тойолмай, хатта уның килеп китеүе ял биргән һымаҡ була. Ул артыҡ һүҙгә әүрәп оҙаҡ та тормай.

– Ярар, етте, китәйем әле. Йә Фәрҙәнә (ҡатыны) әрләр. Мин бит, һеҙҙең һымаҡ, юҡты бушҡа ауҙарып ултырмайым, – тип сығып китеү яғын ҡарай.

Сәғит Агиш ағай вафат булғас, Өфөнөң бер кешегә кәмеүе бик асыҡ тойолдо.

Әнүәр Бикчәнтәев иһә төш мәлендә берәй редакцияға килеп (күберәк “Һәнәк” журналы редакцияһына йә “Китап” нәшриәтенә), шахмат уйнауҙы ғәҙәт иткәйне. Бик сәмләнеп, донъяһын онотоп уйнай ине.

– Эш өҫтәленән айырылып, аҙ ғына ваҡытҡа булһа ла геройҙарҙан ситләшеп тороу яҡшы, – тигәнен ишеткән бар. Ни өсөн шулай тигәндер, быныһын һаман аңлай алмайым.

Әкрәм Вәли бик әҙәпле, үҙ эшенә мөкиббән киткән кеше ине. Ул көндөҙгө тамаҡҡа партия өлкә комитетының буфетына йөрөүҙе (быны өсөн махсус пропуск кәрәк ине) көн тәртибенә индергән. Шунда ашап сыҡҡас, Яҙыусылар союзына йә “Әҙәби Башҡортостан” редакцияһына һуғыла, билдәле бер маршрут буйынса – йә Матросов исемендәге, йә Луначарский паркында, урамда йөрөп әйләнә. Ошонан аҙаҡ ҡайтып, бер сәғәт ял итә лә йәнә эшкә ултыра. Быларҙы ул миңә үҙе һөйләне. Бер ваҡыт Әкрәм Вәли ағайҙың өйөнә барып, оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултырып, уның хаҡында яҙып сыҡҡайным. Үҙенең эш көнөн нисегерәк ойоштороуын шул саҡта белдем. Ул миңә әҫәр яҙырға нисек әҙерләнеүе менән дә таныштырҙы. Иң тәүҙә әҫәренең планын төҙөй, унда ваҡиғаларҙың йылын, ҡайһы миҙгелдә барыуын, урынын билдәләй, һәр герой өсөн картотека төҙөй. Унда геройҙың йәше, төҫ-киәфәте, холоҡ-фиғеле теркәлгән. Был миңә бик ҡыҙыҡ тойолдо ул саҡта. Үҙем яҙырға ултырғанда алдымда аҡ ҡағыҙҙан башҡа бер әйбер ҙә булмағас ни... Әкрәм ағай һуңғы минутынаса үҙенең көн тәртибен боҙманы, тиергә лә мөмкин. Бәлки, осраҡлы рәүештәлер, бәлки, яҙмыштыр: ул төшкөлөккә ашарға барғанында йөрәк өйәнәге һуғылыуҙан өлкә комитеттың буфеты эргәһендә йығылып, вафат булып ҡуйҙы.

Ә бына Динис Исламовтың, киреһенсә, билдәле бер көн тәртибе булманы, шикелле. Эшләгәндә көнө-төнө ултырып яҙа ла дилбегәне ысҡындырып ала. Уның эш бүлмәһен дә күргән бар. Эш бүлмәһе тип инде, уның иркенләп ижад итер өсөн уңайлы шарттары булған фатиры юҡ ине. Йоҡо бүлмәһенең бер мөйөшөнә ҡуйылған өҫтәл. Шул өҫтәл өҫтөндә генә түгел, иҙәндә лә яҙылған, яҙылмаған ҡағыҙ биттәре тулып ята.

– Бальзак кеүек бит ул Динис, – тип көлә ҡатыны Мәфрүзә, – яҙа ла иҙәнгә ырғыта, аҙаҡтан шул биттәрҙең осон осҡа ялғай алмай аптырай...

Яҙыусының гел өҫтәл артында ғына ултырмауы, аҙыраҡ яҙылып, елләп алырға ла теләүе тураһында яҙырға тотонғайным бит әле. Мең туғыҙ йөҙ алтмыш етенсе йылда Дим буйында ер участкалары алып, һәр кем үҙенә йорт һала башлауы байтаҡ яҙыусыларҙың (дача төҙөлөшө кооперативына нигеҙҙә өлкәнерәк быуын яҙыусылары ҡабул ителде, унда иң йәше мин инем) тормош рәүешен ныҡ ҡына үҙгәртеп ебәрҙе.

Иң активтарҙан бер төркөм яҙыусылар, Өфө менән Шишмә араһын ҡыҙырып, Дим буйынан күңелгә ятышлы, аулаҡ һәм йөрөргә уңайлы урын эҙләнеләр. Йөрөй торғас, Әлкә ауылынан арыраҡ Димдең уң яҡ ярындағы төбәккә күҙҙәре төшә. Бер яҡ ситен ҡайын һәм йүкә урманы япҡан киң генә аҡлан, көньяғында иген баҫыуы йәйрәп ята. Яҙғы ташҡындарҙа һыу баҫырлыҡ түгел, ҡалҡыу урын. Бер яҡ эргәләге ҡарағай урманы эсендә Аксаков урамындағы хәрби завод профилакторий төҙөй башлаған. Ғөмүмән, бик матур урын.

Ул саҡта баҡса торорға теләүселәргә тегенән-бынан өс-дүрт сутый ғына ер бирәләр, унда ла кескәй генә йорт һалыуҙан башҡа мунса-фәлән төҙөргә, хатта ул өй йоратына мейес сығарырға ла рөхсәт итмәйҙәр ине. Ауылда саҡта өҙлөкһөҙ эшләп өйрәнгәнлектән (бәрәңге сәсеү, бесән эшләү, утын әҙерләү, кәрәк саҡта үҙеңә лә, кешегә лә бура бурау, өй күтәреү – донъя көткәс, эш бөтәме ни), бигерәк тә йәй булһа, берәй кәсеп табырға ҡулым ҡысып тора торғайны. Кеше

ыңғайына бәләкәй булһа ла баҡса алыу теләге лә бар ине. Тик юғарыла әйткән сикләүҙәр күңелде һүрә лә ҡуя.

Ә хәҙер килеп, Совминдың махсус ҡарары буйынса, һәр яҙыусыға ун – ун биш сутый ер бирелә, һәйбәтләп йорт һалырға, уның янына мунса, һарай, гараж төҙөргә лә мөмкин. Дәрт ҡуҙғалды, ҡатынға әйтмәй генә, кооперативҡа ҡыҫтырыуҙарын һорап, ғариза яҙҙым. Өҫәр йөҙ һум тәүге взнос йыялар ине, уныһын да түләнем. Иң ҡыҙышҡаным – үҙемә бирелгән ергә ҡарағайҙан бурап матур итеп йорт һалып ҡуйыу ине. Шуға күрә, һәйбәт инициатива күрһәтеү маҡсаты менән, ағайҙарға әйтеп тә тормай, Урман хужалығы министрлығына барҙым да, бына шулай-шулай, яҙыусыларға баҡса йорто һалыу өсөн уңайлыраҡ урындан ҡарағай бирмәҫһегеҙме икән, тинем. Электән һөйләшеп, танышып йөрөгән урман хужалығы министры Марсель Хәбиб улы Абдулов, ҡайһы райондан, күпме кәрәк, рәхим итегеҙ, ти. Ошо хаҡта Яҙыусылар союзының рәйесе Назар Нәжми менән яуаплы сәркәтип Шәриф Бикҡол ағайҙарға әйткәйнем, улар яҡын да килмәне. Йәнәһе, урман алғас, уны ҡырҡырға, бура буратырға кәрәк, таҡта-фәләнен ҡайҙан алаһың да уны ҡайһылай итеп килтереп, нисек күтәреп ултыртаһың... Ағайҙарҙың өй һалыу эшендә бөтөнләй тәжрибәһе юҡлығы күренеп тора. Икенсенән, Совмин ҡарарында йорт төҙөүгә сикләү тигән нәмә лә ҡуйылған икән: дача кооперативындағы барлыҡ йорттар бер төрлө булырға тейеш. Берәһенән-берәһе уҙҙырып уғата ҙур йәки ике ҡатлы йорт һалыу тыйыла. Шулай ҙа мине ошондай сикләү һәм Назар ағайҙарҙың ҡаршы төшөүе матур итеп ҡарағай бүрәнәләрҙән өй һалыу теләгеннән һындыра алманы. Йомош табып, Ҡариҙел районына командировкаға сығып киттем. Ундағы леспромхозға барып һөйләшкәйнем, заказ буйынса бер төрлө итеп бура бурарға, уға таҡтаһын, бүтән кәрәк-яраҡтарын ҡушып бирергә әҙерҙәр.

Әммә ләкин минең был йөрөүем дә бушҡа ғына булды. Ағайҙар эште икенсе төрлөрәк хәл иткән: Совмин юллауы буйынса, Пермь өлкәһенән ике һәм өс бүлмәле йыйылмалы фин йорттары ҡайтартыла. Уны баҡсаңа алып барып ауҙарҙыңмы, тиҙ үк ҡороп ултыртаһың да ҡуяһың, тиҙәр.

Ул йорттарҙы, ысынлап та, тиҙ үк тауар вагондарына тейәп килтереп, Дим станцияһына ауҙарҙылар. Тик уларҙы барып күреү менән минең әҫәрем ҡайтты. Ике яҡлап таҡта ҡағылған щиттарҙың эсенә алам-һалам тултырылған, түбә һәм иҙән таҡталары йоҡа – утыҙлы ғына... Ғөмүмән, бындай ҡорама йортта йәшәүҙе күҙ алдына ла килтерә алмай инем. Бының кеүек материалдан беҙҙең ауылда аласыҡ та төҙөмәйҙәр, тип уны алыуҙан һәм бүленгән ерҙән баш тарттым.

Ә балта тоторға ҡул ҡыҙыша. Түҙмәйенсә, дачалар төҙөлгән ергә бер-ике тапҡыр барып әйләндем. Ағайҙар оҫталар ҡушҡандар, нигеҙ ҡоралар, өйҙәренең ҡорама стеналарын күтәрәләр. Ғәли Ибраһимов ағайҙың һорауы буйынса, балтамды, бысҡы, ҡасау кеүек ҡорамалдарымды (уларҙы һатып алып әҙерләп ҡуйғайным) алып килеп, уға ике-өс көн буйы ярҙамлашып йөрөнөм. Хәким Ғиләжевтың верандаһының тышҡы яғына солан, унан, ҡайҙандыр табып килтергән иҫке таҡталарын рәтләп, йышып, участкаһында үҫкән бер-ике йүкә ағасын йығып, уларҙы һырлай биреп сабып бағаналар әҙерләп, һарай төҙөп бирҙем. Ана шулай бер аҙ эшләп ҡайтһам, күңел баҫылып ҡала ине.

Әммә миндә үҙемә йорт һалыу теләге һаман һүнмәй ине. Мең туғыҙ йөҙ алтмыш һигеҙенсе йылда, элек алған дачалар территорияһына өҫтәп, йәнә һигеҙ участкалыҡ ер бүлгәйнеләр. Ундағы арыуыраҡ урындарға ла йорт һала башланылар. Ҡарап йөрөйөм – урта төштәге бер урын буш ята бит. Уның бер-ике сутыйҙай ғына асыҡ урыны бар, бүтән ерен ҡайын, йүкә, имән урманы баҫып алған, етмәһә, бер яҡ ситенән тәрән генә йырын үтә. Күрәһең, был ҡотһоҙ

күренгән урынға килергә теләүсе булмаған. Ә мин үҙемсә ҡарап, самалап йөрө-йөм: анау тирәләге ағастарҙы ҡырҡып, таҙартып, өй һалырға мөмкин, түбән яҡ-ҡараҡ – һарай, йырын аръяғына – мунса. Яйлап-яйлап ағастарҙы төпләһәң, ваҡ-төйәк сәсерлек ер ҙә буласаҡ.

Тоттом да ошо урынды биреүҙәрен һорап ғариза яҙҙым. Берҙән, тирә-яғын ап-аҡ ҡайындар уратып аласаҡ өйҙө күҙ алдына килтереү күңелде ауараландырҙы, икенсенән, ул өйҙө ҡарағайҙан һалыу теләге һаман бөтмәгәйне.

Кооператив рәйесе Ғәли Ибраһимов, ғаризамды ҡарағас, ул ерҙе алырға тип йөрөгән ике кеше барып ныҡлабыраҡ ҡарағас баш тартты инде, рәте юҡ бит ул урындың, ти. Ысынлап та, был урынды Фәрит Исәнғолов, унан Иван Слободчиков килеп ҡарағандар икән. Оҡшатмағандар.

– Ә миңә, урман кешеһенә, ярай ул, – мин әйтәм.

Йыйылышта ғаризамды ҡаранылар, теге ҡотһоҙ ерҙе бирҙеләр. Фәһимә менән көрәк тотоп, ҡурай еләге, ҡарағат үҫентеләре алып уҡ килгәйнек. Урман ситендәге теге бәләкәй генә асыҡ урындың ситтәренә ҡарағат, ҡурай еләге ултырттыҡ, бер нисә түтәллек урынды ҡаҙып ҡуйҙыҡ.

Башымда иһә дыуамал уй: ауылға ҡайтып, ҡарағайҙан бура буратыу, хатта мин аҡ ҡайындар араһында тәҙрә ҡапҡастары аҡ һәм йәшелгә буялған, ҡыйығы шифр менән ябылған, франтондары һырлап-кәкерсәкләп көпләүле өйҙө күргәндәй булам.

Урман хужалығы министры Марсель Абдуловҡа барып, Маҡар лесхозынан илле кубометр ҡарағай бүрәнә алыу өсөн ҡағыҙ яҙҙырып алдым да, балаларҙы ла үҙебеҙ менән алып, киттек Ҡолғонаға.

Үҙ ауылың – үҙ ауылың инде, эште башлап алып китеү ҡыйын булманы. Лесничествоның техникгы Ғаяз Хужәхмәтов мотобысҡылы ике егет, бер трактор тапты. Тик электән бүлеп ҡуйылған ҡарағай диләнкәһе ауылдан алыҫыраҡ, бүрәнә ташыуға уңайһыҙыраҡ урындан – Иҫке Һәйет ауылына бара торған юлдағы Һабүлгән буйлауының төньяҡ ауышынан бүленгән икән. Тик һайланып, икенсе урындан диләнкә бүлдереп тороп булмай ине.

Ауылдан биш саҡрым самаһы ерҙәге Һабүлгәнгә юл тоттоҡ. Барҙыҡ та дәррәү эшкә тотондоҡ: Ғаяз йығыласаҡ ҡарағайҙар төбөнә хикмәтле сүкеше менән һуғып билдә яһай, егеттәр мотобысҡылары менән уларҙы дөбөр-шатыр йығып ебәрә. Үҙем бер егет менән уларҙы ботарға тотонам. Бына ҡеүәтле трактор төбөнән осонаса боталған хлыстарҙың дүрт-бишен тросына тағы ла ауыл яғына йүнәлә.

Эштең шулай дәррәү һәм уңышлы башланыуы күңелде күтәреп ебәргәйне. Был көндә ҡарағайҙарҙы йығып бөтөп, остарын үртәп, диләнкәне таҙартып уҡ ҡайттыҡ. Иртәгәһенә йүгереп йөрөп йәнә өс трактор таптыҡ һәм хлыстарҙы ауылға – үҙемдең йорт тәңгәлендәге һыртҡа ташытып уҡ ҡуйҙыҡ. Беҙҙә бурасылар табыу ҡыйын түгел, өс оҫта ялланым, дүртенсеһенә – үҙем. Бурағанда һәр мөйөшкә бер кеше булһа, эш ырамлы бара. Биш көн үтеүгә, тыш яҡтан үлсәүгә ҙурлығы етегә ете самалы ялтлап торған ҡарағай бура әҙер ине инде. Буранан ҡалған бүрәнәләрҙе таҡта итеп ярыу өсөн пилорамаға ташытып ҡуйҙым да, кире Өфөгә елдерҙек.

Хәҙер бураны алып ҡайтыу өсөн оҙон бүрәнәләр тейәрлек автомашиналар кәрәк бит инде. Ауылға китер алдынын "Башэлектромонтаж" тресында идаралыҡ начальнигы булып эшләгән Асҡар бажа менән телефон аша һөйләшеп ҡуйғайным. Бик тә ярҙамсыл, эшмәкәр кеше ул. Эргәһенә барғайным, бөтәһен дә һөйләшкән, килешкән. Автопредприятиенан ике вертлюга йөк машинаһы алып, йәнә киттек ауылға. Ҡарышҡан шикелле, тап шул мәлдә көн боҙолоп, ямғыр

яуырға тотондо. Ауылға барып инһәк, урамдарҙың батҡағы әйләнеп ята. Бура ултырған һырт өҫтөнә машиналарҙы трактор менән тарттырып мендерергә тура килде. Өс-дүрт кеше яллап, машиналарға бураны тейәтеп бөткәндә, ҡараңғы төшкәйне инде.

Иртәнсәк алға йәнә бер проблема килеп баҫты: ауыр йөк тейәлгән машиналар ямғыр яуып йомшартҡан текә тау битләүенән үҙ ыңғайы менән түбәнгә төшә алмай икән. Шыуып китеп, әллә ниндәй яман хәл тыуыуы бар. Шоферҙар гусиницалы көслө трактор табырға ҡушты. Бәхеткә, ауылда ундай трактор ҙа бар икән. Өҫтәүенә, уны ике туған Фәғилә апайымдың улы йөрөтә. Ауыр йөк тейәлгән оҙон вертлюга тау түбәненә ҡарай боролоп торғас, уның артына йыуан трос таҡтылар, ә икенсе осон тракторға эләктерҙеләр. Машина түбәнгә төшкәндә, трактор уны үргә табан тартып ҡыбырларға тейеш ине. Шул саҡтағы көсөргәнешле кисереште белһәгеҙ: йәйәү кеше лә тайып йығылырлыҡ текә тау битләүе, ауыр йөклө ғифриттәй оҙон машина, тау түбәнендә – йорттар. Трос өҙөлөп-фәлән китһә, бөттө баш, мин әйтәм. Машина түбәнгә төшөп еткәнсә, тау башында, ҡаҡҡан бағана шикелле, ҡуҙғалмай баҫып торҙом. Иркен тын алғанда иһә йән тиргә төшкәйнем.

Алатауға менгән юл да соҡор-саҡырлы ине. Тауҙың һыртына күтәрелеп еткәнсе йәнә трактор оҙата килде.

Был көндә бураны урынына алып барып еткерә алманыҡ. Әлеге шул ике көн буйына барған ямғыр ҡамасауланы. Стәрлетамаҡ яғынан килгәндә аэропортты үтә биргәс, Зубово ауылына табан юл борола. Әүәле Иҫке Шишмә юлы тип йөрөтөлгән был юл ташландыҡ хәлдә ине. Зубово ауылын үтеп саҡ ҡына барғайныҡ, машиналар бысраҡҡа инеп батты. Алға ла, артҡа ла китеп булмай. Трактор эҙләп йәнә Зубово ауылына йүгерергә тура килде. Өфөгә әйләнеп килеп ҡунғандан һуң, шоферҙар Шишмәгә тиклем Октябрьский юлынан барып, шунан Келәшкә табан боролоп инергә ҡарар итте. Шулай итеп, иртәгәһенә бураны урынына алып барып еткереп ауҙарҙыҡ. Шатлыҡтан, тәүге түләгәндән тыш, шоферҙарға мул ғына итеп аҡса тотторҙом.

Бура артынан йөрөүҙе ниңә шулай ентекләп яҙаһығыҙ, тиерһегеҙ. Хәҙер олоғайғас, йәш саҡта нисек итеп дәртләнеп-ҡанатланып донъя көтөргә тырышып йөрөгән саҡтарҙы һағынып иҫкә алаһың икән шул. Хатта ана шул юлдарҙан ҡабат үтке килеп китә...

Ярай, бура килеп ятты, ләкин бит кемдәрҙер күреп ҡалып, буранан өй һалырға кем рөхсәт итте, тип тауыш сығармаҫ борон, уны мүкләп күтәрә һалып ҡуйырға кәрәк. Фәһимәнең ике ағаһына, тиҙ генә килеп етергә ҡушып, телеграмма һуҡтым. Бура күтәрешергә Өфөнән дә бер нисә кеше таптым. Бер төрнәк сүбәк, эреле-ваҡлы ҡаҙаҡтар, ныҡлы арҡан, бүтән кәрәк-яраҡтар әҙерләп ҡуйҙым. Шәмбе көн барып тотонғайныҡ, йәкшәмбе көн бура күтәрелеп, ҡыйыҡ бәпкәләре ултыртып ҡуйылды.

Өфөгә ҡайтып бер көн ял иттем дә тағы ла киттем аҡ ҡайындар араһында ултырған өйөмә. Участкам урманлы урынға тура килгәнгәме, был ер миңә тыуған яғымдың бер өлөшө һымаҡ күренә башлағайны инде. Өй бит инде хәҙер хыялда түгел, ысынлап күтәреп ҡуйылған һәм уны тиҙерәк эшләп бөтөү теләге лә мине шунда ылыҡтыра ине.

Минең урын тәүҙә килеп төпләнгәндәрҙән ситтәрәк – урман һыҙаты аша ине. Шуға күрә минең өй күтәргәнде күрмәгәндәр. Өйөм эргәһенә килеп, ерҙәге ваҡтөйәк эште бөтөргәс, үргә менеп киттем. Шифыр менән ябыу өсөн, ҡыйыҡ таҡталарын ҡаҙаҡларға кәрәк ине. Өй төҙөүҙәге барлыҡ эштәр минең өсөн таныш. Өфөгә ныҡлап килерҙән алда дүрт йыл ауылда йәшәгән осорҙа үҙемә яңы өй

һалырға, Нәзилә апайымдарҙың өйөн эшләп бирергә, йәтим генә үҫкән Рәхилә туғаныма ла өй бурап бирергә өлгөргәйнем. Ә күпме кешегә өй күтәрешергә йөрөлдө.

Күп тә эшләмәнем, юлда Ғәли Ибраһимов күренде. Килә бирә лә туҡтап ҡарап тора, йәнә ҡуҙғала. Әйтерһең, ҡайындар араһында өй тороуға ышанмай. Эштән туҡтап, йә, ни әйтер икән был тип, ҡыйыҡ өҫтөндә тыныс ҡына көтөп ултырам. Теге иһә килеп етмәҫ борон уҡ:

– Ҡасан һалып ҡуйҙың әле һин был өйҙө? – тип һорай. Тауышы, ҡыҙыҡһыныуҙан бигерәк, асыулы.

– Уҙған ялда, – тип өй башынан төштөм.

Ағайҙың бәйләнсекләнеп һөйләнере төҫөнә үк сыҡҡан.

– Бүрәнәнән өй һалырға кем рөхсәт итте? – ти.

Уның шундай һорау бирере билдәле ине, аптырап ҡалманым.

– Һуң, Ғәли ағай, өйҙө бүрәнәнән һалалар бит инде.

– Һин улай көлгән һымаҡ һөйләнмә! – Ағай ныҡлап асыулана уҡ башланы. – Былдай өй һалырға рөхсәт юҡлығын беләһең бит.

– Аҙаҡтан тышын таҡта менән көпләп тә ебәрһәм, ҡарап тороуға һеҙҙең йорттарҙан әллә ни айырылмаясаҡ ул.

– Нисек айырылмаһын, ти, бүрәнә бит ул.

Башымдан: “Бына, әй, бүрәнәнән йорт һалған өсөн бәйләнгәнде күрәһеләр бар икән”, – тигән уй үтә, шулай ҙа Ғәли ағай менән һүҙ оғаштырғы килмәй, ә ул тәмәке төпсөгөн асыу менән ергә бәрә лә:

– Алдағы ялда уҡ идара ултырышында тикшерәсәкбеҙ, – тип китеп бара.

Ял көндө Фәһимә лә, балалар ҙа килгәйне. Олондарын ап-аҡ туҙ ҡаплаған йәш ҡайын урманы араһын ҡыйғаҡ үлән келәме ҡаплаған. Балалар шунда аунаптәгәрәп уйнай, ҡатыным һуған, ҡыяр ултыртылған түтәлдәр тирәһендә соҡоноп йөрөй, үҙем әлеге шул өй ҡыйығы таҡталарын ҡағам. Күңелдә ниндәйҙер бер иркенлек, илаһи рәхәтлек. Байтаҡ йылдар йәй көндәре лә ҡаланан сыҡмай тиерлек йәшәү саф һауа көҫәткән. Эштән туҡтап, тирә-яҡҡа хужаларса күҙ йөрөтәм. Участкамды матур итеп кәртәләп алһам, ҡайһы ағастарҙы ҡырҡып, төпләп, әйбер сәсергә ерҙе киңәйтеү, ҡайҙа мунса ултыртыу, ваҡ-төйәк донъя әйберҙәрен ҡуйыу өсөн һарай кеүек әйбер әтмәлләп, һауала ултырып ашарға беседка төҙөү тураһында фекер йөрөтәм.

Ләкин миңә ана шулай кәйефләнеп оҙаҡ эшләргә насип булманы. Ҡарауылсы булып эшләгән кеше килеп, мине идара ултырышына саҡыртыуҙарын әйтте. Ниңә саҡырғандары билдәле: ни өсөн йортто бүрәнәнән һалдың, тип бәйләнәсәктәр.

Дача кооперативының идара ағзалары урам уртаһына йыйылып көтөп торалар. Ибраһим Абдуллин:

– Ана килә башбаштаҡ, – тип ҡаршыланы.

Бүтәндәре лә миңә ят күргән һымаҡ ҡараш ташлай. Үҙемде сит кешеләр янына килгәндәй тойҙом, күңелгә әллә ниндәй яманһыу уй йүгерҙе.

Тәүҙә һорауҙар менән күмеп ташланылар: ниңә бер кемгә лә әйтмәй-нитмәй өй күтәргәнмен, уны ҡайҙан алғанмын, ни өсөн өлкә комитет секретары Нуриевтың күрһәтмәһен боҙғанмын, үҙеңде бүтәндәрҙән өҫтөн ҡуйырға теләйһеңме һәм башҡа, һәм башҡалар. Һүҙ әйтергә лә ирек бирмәй тетәләр генә. Әйтерһең, мин бик ҙур гонаһ эшләгәнмен. Уларға аҡланып ни әйтергә лә белмәй инем. Әгәр, миңә һеҙҙеке шикелле ел үтә һуғып торған ҡорама өй кәрәкмәй, тиһәм, бөтөнләй үпкәләйәсәктәр. Кооперативтан сығарырға, өйөн теләһә ҡайҙа алып барып һалһын, тигән тәҡдимдәр ҙә булғас, түҙмәйенсә, өҙә генә әйттем:

– Һалған өйөмдө ҡутарасағым юҡ. Бик тә оҡшамаһа, барығыҙ ҙа ҡутарығыҙ.

Ағайҙарым йәнә ҡыҙыбыраҡ ябырыла башлағайны, ул саҡта “Һәнәк” журналында яуаплы сәркәтип вазифаһында эшләүсе Зөлфәр Хисмәтуллин:

– Ағай-эне, – тип уларҙы бүлдерҙе, – ниңә шул тиклем һүҙгә барып еттек әле? Ноғман бик ҙур енәйәт эшләгәнме ни? Бүрәнәнән өй һалған икән – һалһын, тикшереү-фәлән булһа, үҙе яуап бирер. Берәй ауыл кешеһе тыңлап торһа, бүрәнәнән өй һалған өсөн ғәйепләгәнгә беҙҙән бот сабып көлөр ине.

Зөлфәр ағай, минең шикелле үк, тау-урман яҡтарында – Сермәндә тыуып үҫкән, донъяны байтаҡ күргән, ҡулына балта, йышҡы тота белгән кеше. Ул ғәжәп ярҙамсыл, ихлас күңелле, юҡҡа-барға сәпсәңләп бармай. Уны күптән – мең туғыҙ йөҙ илле дүртенсе йылдан беләм. Ул саҡта “Ленинсы” гәзитендә мөхәррир урынбаҫары булып эшләй ине. Бер-ике хикәйәмдең ошо гәзиттә донъя күреүе уның хуплауы арҡаһында ине. Бынан һуңғы йылдарҙа ла тел ярҙамы, аҡыллы кәңәштәре менән ышаныслы терәк булды. Уның фронттарҙа йөрөп ҡайтҡан замандаштары араһында ла абруйы ҙур.

Дачала минең өй хаҡында барған бәхәстә лә уның ипле генә итеп әйткән һүҙҙәре бик тә ҡаты бәғерле кешеләрсә һөйләшкән ағайҙарҙы һиҫкәндереп ебәргәндәй итте. Назар Нәжми ғәҙәтенсә шарҡылдап көлөп үк ебәрҙе.

– Ысынлап та, иптәштәр, беҙ бит кешене өй һалған өсөн ғәйепләйбеҙ. Бер-беребеҙгә, ниңә миңә оҡшатып яҙмайһың, тигән кеүек инде, – ти.

Ошонан аҙаҡ атмосфера йомшара төштө. Быға тиклем бик ҡаты һөйләшкән Ибраһим Абдуллин да:

– Әгәр мунсамдың ишеген ҡуйып бирһә, Ноғманды мин дә ғәфү итәм, – тип үҙ яғын ҡайырыбыраҡ уйынлы-ысынлы һүҙ әйтте.

Аҙаҡ килеп, ярар, тикшереүселәр килеп бәйләнһәләр, үҙең яуап бирерһең, идара үҙ һүҙен әйтте, тип, бик ҙур эш башҡарғандай, таралышты ағайҙар.

Ана шулай ғауғалыраҡ башланған эш артабан матур ғына дауам итте. Көҙгә тиклем өйҙөң ҡыйығын ябып, гәрнисләп, фронтондарын ҡапланым, хатта ҡар яуғанға тиклем ишек яғын һуғып, ишек яһап ҡуйырға ла өлгөрҙөм.

Ҡыш буйы дача юлын тапаным мин. Форсат булдымы, электричкаға ултырам да Алкиноға табан елдерәм. Яйлап-яйлап иҙән, түбәләрҙе түшәнем. Балта, быҫҡы, йышҡы тота белгән кешегә ябай ғына тойолған был эш тә байтаҡ ваҡытты ала ине. Сөнки таҡталарым йомро бүрәнәнән ярҙырған көйө, эргәләрен еп һуғып алырға (был шөғөлдө хәҙер күптәр белмәйҙер ҙә әле: сүстән нәҙек итеп ишелгән епте йүкә ағасын яндырып әҙерләнгән торонбаштың ҡоромона буяйһың да таҡтаның ситенән һуҙып, ныҡ ҡына тартып ситтерәһең. Тип-тигеҙ булып ҡором эҙе ҡала һәм таҡтаны шул эҙ буйлап сабып тигеҙләйһең), рубанка менән йышырға, фуганка менән шымартырға тура килә.

Иҙән, түбә эшен бөтөргәс, тәҙрә яҡтарын әҙерләргә, унан тәҙрә рамдарын эшләргә тотондом. Ә көндәр ныҡлап йылынғандан һуң, апрель айында, тәҙрә урындарын уйып, яҡтар һуғып, ап-аҡ рамдарҙы ла ултыртҡайным, өйөм бөтөнләй өйгә оҡшап китте. Йәһәтләп тәҙрәгә наличиктар ҡуйып, уларға ҡапҡастар элергә лә өлгөрҙөм. Май байрамы көндәрендә дачаға килгән кешеләр минең өйҙө күреп, аптырып та ҡуйҙылар. Минән ике өй аша ғына торған Зәйтүнә Бикбулатова апайҙың:

– Иҫ киткес бит был, күктән төшкән әкиәт өйө кеүек, – тип аптырап ҡарап торғаны әле лә күҙ алдында.

Үҙ хеҙмәтеңә һәйбәт баһа алыу, ул ниндәй генә эш булмаһын, бик тә күңелле бит ул. Ошонан аҙаҡ мин дә быға тиклем күргән ауырлыҡтарҙы, күңелһеҙ мәлдәрҙе бөтөнләй оноттом. Тағы бер өй һалдым бит, тигән ҡыуаныс тойғоһо ғына ҡалды.

***

...Был дәфтәрҙе бер ни тиклем алып ҡарамай торған арала, донъяла әллә күпме ваҡиғалар булып үтте. Күңеллеһе лә, борсолдора торғаны ла. Был ике төрлө күренеш тә ғүмер тураһында уйланырға, был ерҙә нимә хаҡына йәшәлде һуң әле, тигән һорауға яуап эҙләргә мәжбүр итә. Күрәһең, шулай уйланыр йәшкә етелгәндер.

Рафаэль Сафин менән Рәшит Шәкүровтың юбилей кисәләре булып үтте. Рафаэлдеке – Актерҙар йортонда, Рәшиттеке – филармонияның ҙур залында. Фани донъянан киткәндәр, минең кисәне фәлән ерҙә үткәрегеҙ, тип даулашып йөрөй алмай шул. Рафаэлдең әҙәбиәттә тотҡан урыны Шәкүровтан кәм түгелдер ҙә... Уның уҡыусы күңеленә яҡын, ихласлыҡ менән һуғарылған, бер ни тиклем моңһоуыраҡ шиғриәте, сәхнәләрҙә шаулап-гөрләп барған “Йәнбикә” драмаһы. Был пьесаның исемен әйткәндә йәки “Йәнбикә” йырын тыңлағанда, йылдар төпкөлөндә ҡалған бер ваҡиға иҫкә төшә һәм Рафаэлдең моң-һағыш менән тулы тауышын ишеткәндәй булам.

“Ағиҙел” журналы редакцияһында эшләп йөрөгән мәл. Белорет – Шишмә тимер юлын төҙөүселәр тураһында журналда очерк бирергә кәрәк булды. Редакцияла был эште тиҙ генә башҡарырҙай минән башҡа кеше юҡ ине. Белоретҡа самолетта осоу өсөн аэропортҡа барһам, рейс өс сәғәткә һуңлаясаҡ, тинеләр. Ҡайҙа барып һуғылырға белмәй аэровокзал алдында йөрөһәм, машина менән Фәрит Иҫәнғолов, Рафаэль Сафин, татар яҙыусылары Ренат Харис менән Туфан Миңнуллин килеп туҡтаны. Туфан менән Ренат Сафиндың “Йәнбикә” пьесаһының премьераһына килгән булғандар икән. Әле уларҙы Ҡазанға оҙатырға килгәндәр. Күрешеп, һөйләшеп торған арала, уларҙың Ҡазанға оса торған самолетҡа байтаҡ алда килеүҙәре, етмәһә, рейстың шулай уҡ бер ни тиклем ваҡытҡа тотҡарланасағы беленде.

– Их, берәй аулаҡ ҡына урында яйлап һөйләшеп ултырырға ине, – тип ыуалана Фәрит.

Ҡайһылай итеп ваҡыт үткәрергә белмәй торғанлыҡтан, миңә уның был һүҙҙәре етә ҡалды.

– Әйҙәгеҙ, – мин әйтәм, – анау ҡунаҡханаға. Берәй бүлмә алабыҙ ҙа...

Ярты көнгә тип, мин бер бүлмә яҙҙырып алдым, Рафаэль менән Фәрит ҡунаҡхана ресторанынан тегенеһен-быныһын килтерҙе.

Шул саҡтағы бәләкәй генә бүлмәлә барған һөйләшеү, ижади атмосфера онотолмаҫлыҡ булып иҫтә ҡалған. Ҡәләм тибрәтеүселәрҙең ана шулай көтмәгәндә бер ҡорға тупланған мәлдәрендә, үҙҙәрен донъя мәшәҡәттәренән азат тойған саҡтарында ғына булалыр былдай ихлас һөйләшеү. Ултыра торғас, Туфан Миңнуллин:

– Рафаэль, йырлап ебәр әле. “Йәнбикә”ңде тағы бер тыңлағы килә, – тине.

Шул саҡта Рафаэлдең илһамланып йырлап ебәреүҙәре! Йөрәктәрҙе талпындырғыс моң уның күкрәгенән генә түгел, күҙҙәренән, ирҙәрсә матур йөҙөнән, барлыҡ булмышынан һирпелеп сығып ағыла төҫлө. Иҫ киткес шәп йырсы ла, баянсы ла ине Рафаэль. Уның шиғырҙары шуға ла йыр кеүек уҡыла, уларҙа үҙенсәлекле моң бар.

Тормошо ла әллә нисегерәк булды инде уның. Ул бик тә матур, хатта күптәрҙе көнләштерерлек башланып киткәйне. Арыҫлан Мөбәрәков һәм Рәғиҙә Янбулатова кеүек атаҡлы кешеләрҙең ҡыҙы Гөлли менән ҡауышып, гөрләтеп туйҙар үткәреп, күп тә тормай фатир алып йәшәй башлауы... Талпынып-ҡанатланып эшләп һәм ижад итеп йөрөүҙәре. Аяз улы донъяға килеү...

Ана шулай матур башланған тормоштоң емерелеүенән дә ауыр хәл бармы икән әҙәм балаһы өсөн? Рафаэль теттереп донъя көтөр мәлендә ғүмерлеккә яңғыҙ ҡалды. Ул ауыр тойғоларын тышҡа сығармаҫҡа, кешеләргә белдермәҫкә тырышты. Ул Яҙыусылар союзында рәйес урынбаҫары булып эшләгән мәлдәрҙә ағай ҙа ағай тип йөрөгән үҙенән кеселәр ҙә, “Рафаэль дуҫ” һүҙенән һалдырыусы замандаштары ла тора-бара онотто уны. Етмеш йәше тулыр алдынан уның эргәһенә барып сыҡтым. Әллә ни йыйыштырылмаған, етемһерәгән фатир. Рафаэль үҙе сырхаулап тора. Оҙаҡ йылдар буйы аптырата ине уны бөтмәҫ бер сир. Аяҡтары һыҙлап ыҙаланды. Әммә ул байтаҡ һөйләшеп ултырған арала зарланып бер ауыҙ һүҙ ҙә ысҡындырманы. Хәҙер ирекһеҙҙән бер сағыштырыу күҙ алдынан үтә. Рәми ҙә, Рафаэль дә утыҙ икенселәр, берҙәй үк тормош юлын үткәндәр: Рәми – интернат-мәктәптә, Рафаэль – сәнғәт училищеһында, аҙаҡтан икеһе лә Мәскәүҙә, Әҙәбиәт институтында, уҡыған. Рәмиҙең көндәлектәрендә тормош ауырлығынан, кемдәрҙеңдер үҙенә насар мөнәсәбәтенән зарланыу күп. Хатта совет осорондағы халыҡ өсөн иң еңел мең туғыҙ йөҙ илле етенсе йылда аслыҡтан йонсоуын, аҡсаһы юҡлыҡтан ғаиләһен тейешенсә ҡарай алмауын әсенеү менән яҙа. Рафаэль ауыҙынан мин ғаилә фажиғәһе, ауыр сире тураһында зарланып һөйләгән бер ауыҙ һүҙ ишетмәнем. Ижадында ла артыҡ тойолманы уның шәхси кисерештәре. Уның баянда йә гармунда уйнап, “Гармунсы” тигән поэмаһын һөйләп ебәреүҙәре үҙе ни тора ине!..

Эйе, ғүмер юлдары төрлөсә. Рәшит Шәкүровтың да тормош һәм ижад юлы ярайһы уҡ фәһемле. Миңә уның ирҙәрсә ныҡышмаллыҡ, сабырлыҡ менән үҙ маҡсатына ынтылыуы, ауыр саҡтарҙа ла тоҫмаллаған юлынан тайпылмауы, кәрәк урында, кәрәк мәлдә үҙ фекерен ҡыйыу рәүештә сатнатып әйтә алыуы оҡшай. Ул күпте белгән төплө ғалим. Һәм уның ғалим булараҡ яҙған китап йәки мәҡәләләре, үҙ предметын – тематикаһын, тарихи һәм фактик материалдарҙы ентекле өйрәнеп яҙылған ысын мәғәнәһендәге фәнни хеҙмәт булыуға ҡарамаҫтан, ғәжәп бер ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла. Юғиһә ҡайһы берәүҙәрҙең үтә ғилми планда, уғата ла ҡоро тел менән яҙылған яҙмаларын уҡыуы ла, хатта аңлауы ла ҡыйын. Ә бына Рәшит Шәкүрҙең топонимика тураһындағы китабы тормошҡа шул тиклем ныҡ бәйле, уның аша беҙ үҙебеҙҙең эске донъяны фәнни яҡтан ғына байытып ҡалмайбыҙ, халҡыбыҙҙың үткәне һәм бөгөнгөһө менән дә яҡындан танышабыҙ. Хатта уның был темаға яҙған хеҙмәттәре публицистикаға яҡын тора.

Рәшиттең шиғриәте лә яҡын минең күңелгә. Мин уның шиғырҙарында авторҙың ғалим булыуын тоймайым. Уларҙа яһалмалылыҡ, артыҡ күтәренке пафос, заманға яраҡлашырға тырышыу юҡ, ә шиғри фәлсәфә, күңел төбөнән ағылған тойғолар өҫтөнлөк итә.

Рәшит Шәкүр ижадын маҡтап яҙып ултырам да, бер нәмә күңелде ҡыра биреп ҡуя. Уның тырыш хеҙмәт менән яуланған фән докторы, профессор тигән юғары исемдәре бар. Әммә ошоғаса юғарылағыларҙың һәм үҙебеҙҙең Союздың уға дәүләтебеҙ кимәлендәге премия биреү тураһында ныҡлап һүҙ ҡуҙғатмауы ғәжәпләндерә. Уның урындағы әһәмиәткә эйә булған лауреат исемдәре бар барлығын, тик бит Рәшит район кимәлендәге генә шәхес түгел. Уның юғары баһаға лайыҡ булырҙай хеҙмәттәре етерлек. Башҡорттоң күренекле шәхестәренә арналған, бик ныҡ өйрәнеп һәм уйланып яҙылған сәсәндәр, ҡурайсылар, йырсылар һәм башҡа талантлы, мәшһүр оҫталар тураһында яҙылған китабын ғына алайыҡ, үҙе оло рухи байлыҡ бит был! Бындай талантлы әҫәрҙәр йыш тыумай. Бына шуға ла етмеш йәше тулғанда Рәшит Шәкүровҡа Салауат Юлаев ордены тапшырылғаны өсөн ихлас ҡыуанып йөрөнөм.

Тик бындай ҡыуаныстарҙы көтөлмәгән ҡайғылы хәлдәр тоноҡлап ҡуя. Бына кисә Зиннур Ураҡсиндың вафат булыуын ишеттем. Уның байтаҡтан бирле сирләүен белә, телефон аша булһа ла хәл-әхүәлдәр менән танышып тора инек. Сөнки ул да, минең ҡатын кеүек үк, инсульт тигән ҡәһәрле сир һуҡҡандан һуң, ныҡлап шәбәйеп китә алмай ыҙалана ине. Кем нисек дауалана – һорашабыҙ, бер беребеҙгә кәңәш бирәбеҙ.

Зиннур ғәжәп эшмәкәр, ваҡыттың ҡәҙерен белеп, бөтәһенә лә өлгөрөргә тырышып йәшәгән кеше ине. Ул яуаплы етәксе вазифалар ҙа башҡарҙы, фәнни хеҙмәттәрен дә яҙҙы, әҙәби әҫәрҙәр ижад итеү менән шөғөлләнергә лә өлгөрҙө. Ул проза өлкәһендәге эшен уймаҡ хикәйәләр яҙыуҙан башлағайны, повестар, унан “Дала моңо” тигән роман ижад итеүгә тиклем күтәрелде. Әйткәндәй, романдың ҡулъяҙмаһын, “Ағиҙел” журналының редколлегия ағзаһы булараҡ, миңә әҫәр донъя күргәнгә тиклем уҡып сығырға тура килде. Хикәйәләү стиле, һүрәтләү саралары, образлы фекер йөрөтөүе менән әҫәр бик үҙенсәлекле, тик Ураҡсинса ине. Әҫәр бай халыҡсан тел менән, һүҙ ҡәҙерен белеп яҙылған. Зиннур Ураҡсиндың әҙәби мираҫының байлығын беҙ ул вафат булғандан һуң ғына белдек. Уның саҡ ҡына ныҡлап яҙылып бөтмәгән йәнә бер романы, повесы, хикәйәләре үҙе беҙҙең аранан киткәс кенә донъя күрҙе.

Зиннур Ураҡсиндың һүҙ ҡәҙерен белеп эш итеүе тураһында әйтә биреп ҡуйғайным. Һүҙ ҡәҙере тигән төшөнсә ҡәләм оҫталары өсөн бик тә ҙур мәғәнәгә эйә. Ҡайһы бер яҙыусылар, үҙҙәренең тел байлығын күрһәтәйем типме, кәрәкле-кәрәкһеҙгә ҡайҙалыр ишеткән, уҡып белгән йәки һүҙлектәрҙән эҙләп тапҡан, фекер ағышында мәғәнәһе тура килмәгән һүҙҙәр менән үҙ әҫәрен сыбарларға тотона. Һуңғы ваҡытта бөтә жанрҙарҙағы әҫәрҙәрҙә лә ғәрәп һүҙҙәрен ҡыҫтырып яҙыу модаға инеп китте. Бәлки, быға ғәрәпсәнән һүҙлектәр күбәйеү, Ҡөрьәндең башҡортсаға тәржемәһе сығыу сәбәпселер. Бындай авторҙар ғәрәп теленең, рус йәки инглиз телдәре кеүек үк, бөтөнләй ят тел булыуын ниңәлер, уйламайҙар. Әгәр ҡәҙерен белеп, һәр һүҙҙең мәғәнәһен нескәлектәренә тиклем тойоп, белеп ҡулланһаң, башҡорт теле иҫ киткес бай бит ул, уны ынйылай матур итеп теҙергә мөмкин. Ошо тәңгәлдә ҡайһы бер яҙыусыларыбыҙ ижадынан бер нисә миҫал килтерер инем.

Ыңғай яҡтан, әлбиттә, иң тәүҙә Һәҙиә Дәүләтшина менән Зәйнәб Биишева әҫәрҙәре айырылып тора. Уларҙың теле сағыу биҙәктәргә шул тиклем бай – һәр һүҙ үҙ урынында, улар һүҙ уйнатмай, үҙ фекерен асыҡ итеп әйтеү, геройҙарының ҡылыҡ-фиғелен образлы һүрәтләү өсөн файҙалана. Хатта мин уларҙың был һәләтен, ҡатын-ҡыҙ булыуҙан килмәйме икән, тип тә уйлап ҡуям. Сөнки улар халҡы бит нескәрәк тойғоло, бер-береһе менән осрашҡанда, тормош, көнкүреш хәлдәре тураһында күберәк һөйләшәләр, тел шымарталар, бала тәрбиәләү, уларҙы һөйләшергә, әҙәпкә өйрәтеү ҙә ҡатын-ҡыҙ өҫтөндә, ошо процеста ла уларҙың теле сарланмаймы икән?

Беҙҙән йәшерәк хәҙерге быуын яҙыусыларҙан Таңсулпан Ғарипованың әҫәрҙәрен уҡығас та ошондайыраҡ фекер тыуа. Таңсулпан тәүге хикәйәләре менән үк үҙен оҫта прозаик итеп танытты. Был – һирәк була торған күренеш. Башҡортостан “Китап” нәшриәтендә эшләгәндә миңә уның тәүге хикәйәләр йыйынтығын китап итеп сығарыу өсөн әҙерләргә тура килде. Таңсулпан ул саҡта Баймаҡта йәшәй ине шикелле. Ҡулъяҙманың күренеше бер күҙ ташлауҙа бик үк һәйбәт хәлдә түгел. Хикәйәләрҙе, күрәһең, автор үҙе машинкала баҫып маташҡан. Бер бите лә нәшриәт талаптарына яуап бирмәй. Машинкаһының таҫмаһы ла бик иҫке булғандыр инде, хәрефтәр тоноҡ сыҡҡан, ҡайһы бер урындарын бик

ҙур тырышлыҡ менән уҡыйһың. Былдай ҡулъяҙмаларҙы, ғәҙәттә, авторға кире ҡайтара инек.

Шуға күрә ҡулъяҙманы теләр-теләмәҫ кенә уҡый башлағайным, тәүге хикәйәне уҡып сыҡҡас, ҡарашым бөтөнләйгә үҙгәреп китте: ул миндә бик һәйбәт тәьҫир ҡалдырҙы. Әкренләп ҡулъяҙманы уҡып сыҡтым, һәм минең күҙ алдына бик тә үҙенсәлекле ҡәләмле яҙыусы килеп баҫты. Хатта мин аптырабыраҡ та ҡалдым, ҡыуандым да, сөнки былдай көтөлмәгән хәлдәр йәш яҙыусыларҙың ҡулъяҙмаһын уҡығанда бик һирәк була. Автор һүҙ менән шундай оҫта эш итә, геройҙарҙың характерын асыуҙа өр-яңы табыштар бар, үҙе һүрәтләгән хәл-ваҡиғаларҙы йөрәге аша, ҡатын-ҡыҙҙарға ғына хас кисерештәр менән үткәргән төҫлө. Ана шул саҡта редакцияға Мостай Кәрим килеп инде. Уның менән күрешкәндә:

– Мостай ағай, бына әҙәбиәткә әп-әҙер көйө килгән бер йәш яҙыусыны таптым әле, – тинем.

Ул, ғәҙәтенсә, үҙенә генә хас итеп көлөмһөрәне.

– Бирһен Хоҙай, былдай һүҙҙе һуңғы ваҡыттарҙа ишеткән юҡ ине әле, – ти.

Ошонан аҙаҡ байтаҡ йылдар үткәс, Таңсулпан Ғарипова: "Мостай ағай миңә, һин әҙәбиәткә өлгөргән яҙыусы булып килеп индең, тип әйтте", – тип маҡтанып йөрөнө. Мостай ағай уның хикәйәләрен уҡығандырмы-юҡмы, бәлки, минең фекерҙе ҡабатлағандыр, әммә был һүҙҙәрҙе мин баҫылған мәҡәләләремдә һәм һәр төрлө йыйылыштарҙа бер нисә тапҡырҙар ҡабатланым. Күрәһең, әлеге лә баяғы "Мостай әйткән" тигән һүҙ уға ҡәҙерлерәк тойолғандыр...

Юғарыла әйткәнемсә, ҡулъяҙма шул килеш типографияға ебәрерлек түгел ине, уны машинисткаларҙан нисек тә яңынан баҫтырып алырға тура килде. Таңсулпанға ошо ҙур булмаған тәүге йыйынтыҡ танылыу килтерҙе, уның тураһында үҙ фекерҙәремде белдереп мәҡәлә яҙып баҫтырҙым, бүтәндәрҙең дә рецензиялары донъя күрҙе. Артабан мин уның һәр яңы әҫәрен уҡый барҙым һәм уның оҫталығы үҫә барыуына ҡыуана инем. Мең туғыҙ йөҙ һикһән туғыҙынсы йылда булһа кәрәк, Учалы яҙыусылар ойошмаһының йыйылышында ҡатнашҡанда (Таңсулпан ул саҡта Учалыла йәшәй ине) хатта мин уның тураһында: "Таңсулпан Ғарипованың киләсәктә әҙәбиәтебеҙҙә Һәҙиә Дәүләтшина кеүек үк оҫта яҙыусы булырына өмөт итәм",– тигән фекер ҙә әйткәйнем. Быны онотмағанмын, сөнки йыйылыштан аҙаҡ бер иптәш: "Ағай, фәстереберәк ебәрҙең түгелме?" – тигән иҫкәрмә яһағайны. Тора-бара минең был өмөт тә ниндәйҙер кимәлдә аҡланды. Ул, хикәйәләрҙән тыш, һәйбәт повестар ижад итте, "Бөйрәкәй" тигән ҙур ғына күләмле роман яҙҙы. Нисек кенә ғәжәп тойолмаһын, ошо романы баҫылып сыҡҡандан аҙаҡҡы ҡайһы бер күренештәр һағайта биреп ҡуйҙы мине.

Дөйөм алғанда, роман һәйбәт тәьҫир ҡалдыра: бай тел менән яҙылған, еңел уҡыла, иҫтә ҡалырлыҡ образдар бар. Әҫәр тураһында матбуғатта байтаҡ ыңғай мәҡәләләр баҫылып сыҡты, уға республиканың дәүләт премияһы бирелде. Бөтәһе лә дөрөҫ. Әммә ниңәлер биш өлөштән торған был романдың ҡайһы бер өлөштәре эшләнеше яғынан йомшағыраҡ булыуына иғтибар итеүсе булманы. Иғтибарлыраҡ уҡыһаң, уның өҙөлөп-өҙөлөп, төрлө ваҡытта, төрлө шарттарҙа һәм төрлө кәйефле саҡта, урыны менән бик ҡабалан яҙылыуын күрмәү мөмкин түгел. Ә автор, маҡтау һүҙҙәренең тулҡынына бирелеп, романын пенталогия тип атап йөрөтә башланы, ә китабының титул битенә "Роман-эпопея" тигән билдәләмә һүҙҙәрен яҙып ҡуйыуҙан да тартынманы. Тәү ҡарашҡа, былары формаль күренештәр һымаҡ, икенсе яҡтан, был авторҙың үҙ әҫәренә дөрөҫ баһалама

бирмәүен иҫкәртә. Әҫәрҙе һис кенә лә пенталогия тип атап булмай. Пенталогия – тулы ҡанлы биш романдан торған әҫәр ул. Ә “Бөйрәкәй”ҙең тәүге китабын ғына айырым роман тип атарға мөмкин, ә ҡалғандары ошо арыу уҡ күләмле әҫәрҙең дүрт киҫәге генә. Таңсулпан китабына “Роман-эпопея” тигән тамғаны һуҡҡанда ла “эпопея” тигән һүҙҙең мәғәнәһен уйлап еткермәгән. Беренсенән, эпопея – жанрҙы билдәләүсе төшөнсә түгел, ә әҫәрҙең йөкмәтке тәрәнлегенә, хәл-ваҡиғаларҙың эпик һүрәтләү ҡоласына ҡарата әҙәбиәт тәнҡитселәре бирә торған баһалама. Мәҫәлән, бындай баһаны Лев Толстойҙың “Һуғыш һәм солох”, Михаил Шолоховтың “Тымыҡ Дон” романдарына бик урынлы бирәләр. Беҙҙең әҙәбиәттә Кирәй Мәргәндең “Бөркөт ҡанаты”, Зәйнәб Биишеваның “Кәмһетелгәндәр”, Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә”, Яныбай Хамматовтың “Бөртөкләп йыйыла алтын” романдарын да эпопея тип атау дөрөҫтөр. Әммә бит был китаптарҙың береһенә лә “Роман-эпопея” тигән тамға һуғылмаған. Был фекерҙәрем менән мин “Бөйрәкәй”ҙең художестволы әҫәр булараҡ ҡиммәтен төшөрөргә теләмәйем, авторҙың үҙ әҫәренә үҙе дөрөҫ баһа биреүе, үҙ эшеңә үҙең тәнҡит күҙлегенән ҡарай белеү бик мөһим. Уңышыңа артыҡ осоноборaҡ китеү, кәпәренә башлау ижади оҫталыҡты камиллаштырыуға ярҙам итмәй, киреһенсә, зыян ғына килтерергә мөмкин. Шуға күрә теге йәки был авторҙың әҫәренә баһа биргәндә тәнҡитселәр ҙә уйлабыраҡ эш итһен ине. Юғиһә бит һуңғы ваҡытта эстәлеге, хикәйәләү масштабы менән повесть кимәленән дә үтмәгән әҫәрҙәрҙе лә "роман" тигән тамға һуғып сығара башланылар. Былай итеп кенә әҫәрҙең бәҫен күтәреп булмай.

Бындай күренештәрҙе тыуҙырған объектив сәбәптәр ҙә бар, минеңсә. Һуңғы илле йыл эсендә башҡорт әҙәбиәте бик күп романдар, повестар, хикәйәләр менән байыны. Улар араһында тарихи темаға яҙылғандары ла, хәҙерге көнгә арналғандары ла, фантастик, юмористик планда ижад ителгәндәре лә бар. Әммә ошо әҫәрҙәр тураһында бөгөнгө көнгәсә ентекле күҙәтеүҙәргә нигеҙләнгән фундаменталь хеҙмәт юҡ. Шиғриәтебеҙ хаҡында (Ғайса Хөсәйенов, Ким Әхмәтйәнов), драматургиябыҙ тураһында (Миҙхәт Ғәйнуллин, Тимерғәле Килмөхәмәтов) бындай ғилми китаптар баҫылып сыҡты. Ә бына прозабыҙға арналған, Әнүр Вахитовтан аҙаҡ, ентекле тикшеренеү эштәре күҙгә ташланмай.

Ошо урында бер ваҡиғаны хәтергә төшөрөп үтке килә. Әнүр Вахитовтың кандидатлыҡ диссертацияһы яҡларға әҙерләнеп йөрөгән мәле. Анализларға, фекерҙәр төйнәргә етерлек күләмлерәк проза әҫәрҙәре, бигерәк тә романдар етмәй, ти торғайны ул йыш ҡына. Шуға күрәләр, Хәким Ғиләжевтың “Погонһыҙ һалдаттар”, Яныбай Хамматовтың “Бөртөкләп йыйыла алтын” романдарын баҫылып сыҡмаҫ борон уҡ редакциянан һорап алып, ҡулъяҙма килеш уҡып сыҡты. Минән дә бер нисә тапҡыр, роман яҙам, ти инең бит, ҡасан яҙып бөтәһең, тип һорашты. Ә Жәлил Кейекбаевтың “Туғандар һәм таныштар” романын уҡып сығыу менән генә тынысланманы, уның ҡулъяҙмаһын журналда баҫыу өсөн әҙерләп тә бирҙе. Бына бит, үҙ эшенә бирелгән, яуаплы ҡараған әҙип ни рәүешлерәк эш итә.

Күберәк юбилей уңайы менән айырым яҙыусыларҙың ижады, яңы баҫылған әҫәрҙәр тураһында ваҡытлы матбуғатта сыҡҡан мәҡәлә, рецензиялар ғына прозабыҙҙа булған күренештәрҙе тулыһынса сағылдыра алмай. Әҫәрҙәрҙәге етешһеҙлектәрҙе асып һалған тәнҡит мәҡәләләре бөтөнләй юҡ дәрәжәлә. Беҙгә, прозаиктарға, һабаҡ булырлыҡ, уйландырырлыҡ фәнни хеҙмәттәр кәрәк.

Мин юғарыла һүҙ менән (яҙыусының төп ҡоралы) нисек эш итеүен ҡатынҡыҙ яҙыусылар ижадынан миҫалдар килтереп башланым. Был, әлбиттә, ир

заттары араһында һүҙ менән эш итеү оҫталары юҡ, тип әйткәндән түгел. Сәғит Агиш, Жәлил Кейекбаев, Баязит Бикбай, йәшерәк быуын яҙыусыларынан Фәрит Иҫәнғолов, Булат Рафиҡов, Динис Бүләков, Сабир Шәриповтың әҫәрҙәренән бик күп ыңғай өлгөләр килтерергә мөмкин булыр ине. Үҙемдең һүҙ менән эш итеү оҫталығы тураһындағы фекерҙәремде уҡыусыға асығыраҡ итеп еткереү өсөн, мин ике яҙыусының ижади маһирлығына туҡталырға булдым.

Тәүгеһе – нигеҙҙә шиғриәт, драматургия жанрында эшләү менән бергә байтаҡ проза әҫәрҙәре лә ижад иткән Мостай Кәрим. Ваҡытында уның “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ”, “Ярлыҡау” повестары тураһында мәҡәләләр ҙә яҙып баҫтырғаным бар. Мостай Кәримдең проза әҫәрҙәре (мин бында Һәҙиә Дәүләтшина, Жәлил Кейекбаев әҫәрҙәре кимәленән сығып фекер йөрөтәм) телгә артыҡ бай түгел. Әммә улар бик тә ҡыҙыҡһынып, еңел уҡыла, хикәйәләнгән ваҡиғалар иҫтә ҡала, геройҙарҙың портреттары асыҡ булып күҙ алдына баҫа. Бының сере ниҙә? Автор үҙендә тупланған һүҙ байлығын бик оҫта файҙалана, яҙған һәр һүҙенең мәғәнәһен нескәлектәренә тиклем төшөнөп, тап үҙ урынында ғына ҡуллана. Унда хәлваҡиғаларҙы, күренештәрҙе һүрәтләгәндә һүҙ сурытыу юҡ, кәрәк тиклемен генә яҙып ҡуя. Бына ошо оҫталыҡ тип атала ла инде.

Ошондай уҡ ыңғай күренештәрҙе мин хәҙерге көндәге прозаиктарҙың алдынғы сафында торған Әмир Әминев әҫәрҙәрендә лә күрәм. Бигерәк тә мине уның әҫәрҙән әҫәргә оҫталығы арта килеү ҡыуандыра. Был иһә, үрҙә әйтеп үткәнемсә, үҙ ижадыңа ҡарата үҫә барған талапсанлыҡ, үҙ-үҙеңә дөрөҫ баһа бирергә тырышыу, яңы табыштарға ынтылыу менән аңлатыла.

Уның тәүге әҫәрҙәрендә тел ҡорораҡ булыуы һәм рационализм эмоционаллеккә зыян килтерә ине. Ә эмоциональ рухтың етешмәүе уҡыусының күңел ҡылдарын тибрәтә алмай. Әмир Әминев ошо етешһеҙлеген тырыш, ныҡышмал, эҙләнеүсән хеҙмәт менән еңеп сыҡты. Уның һуңғы ваҡытта донъя күргән “Ҡытай-город”, “Танкист” повестарын ғына алайыҡ. “Танкист” повесын башҡорт әҙәбиәтендә ошо жанрҙағы иң һәйбәт әҫәрҙәр рәтенә ҡуям. Әҫәр йыйнаҡ, ҡыҙыҡлы сюжетҡа ҡоролған, тәрән йөкмәткеле, һәм унда авторҙың әлеге һүҙ ҡәҙерен белеп эш итеүе, ҡыҫҡа әйтеп, күпте аңлатырға тырышыуы күңелде арбай. Әмир Әминевтың оҫталығы әҫәрҙән әҫәргә арта барыуының сере уның тәржемә өлкәһендә күп эшләүе менән дә аңлатылмаймы икән? Ул рус телендә ижад иткән күренекле башҡорт яҙыусыһы Талха Ғинәтуллиндың барлыҡ әҫәрҙәрен тиерлек башҡортсаға әйләндереп сығарҙы, уның тәржемәһендә бер нисә рус яҙыусыһының да әҫәрҙәрен башҡорт телендә уҡыныҡ. Тәржемә – Әмир Әминев өсөн кәсеп түгел, ә художестволы ижад оҫталығын үҫтереү мәктәбе лә. Мин быны үҙ эш тәжрибәмдән сығып әйтәм. Ваҡытында тәржемә итеү менән байтаҡ шөғөлләндем: Руслан Мәксүтовтың “Башҡаса йәшәй алмайым” тигән романын, Дмитрий Швецов, Анатолий Ерошиндың, Александр Филипповтарҙың повесть, хикәйә һәм очерктарын башҡортсаға ауҙарып баҫтырҙым. Ана шул саҡта белдем дә инде мин тәржемә эшенең үҙ ижадың өсөн файҙалы икәнен. Мәҫәлән, үҙ әҫәреңде яҙғанда, фекер ағышыңды өҙөп юғалтмау өсөн, тулҡынланыуҙарға ла бирелеп китеп, туҡтамай яҙаһың да яҙаһың, һүҙ һайлап торорға ваҡытың да ҡалмай. Ә тәржемә иткәндә һүҙ һайламайынса хәлең юҡ, авторҙың фекерен уҡыусыға тап ул әйткәнсә, боҙмайынса еткереү өсөн нескәлектәренә тиклем дөрөҫ мәғәнәле һүҙ эҙләйһең. Ана шул саҡта хатта быға тиклем үҙең ҡулланмаған һүҙҙәрҙе, әйтемдәрҙе, афоризмдарҙы хәтерләйһең, йәғни был эш үҙеңдең һүҙ һандығыңды байытырға ныҡ ярҙам итә.

Ошо урында йәнә бер фекер яҙып ҡуйыуҙы ла кәрәкле таптым. Академик

Ғайса Хөсәйенов үҙенең Әмир Әминев ижады тураһында яҙған мәҡәләһендә яҙыусының әҫәрҙәрендәге үҙенсәлектәрҙе модернизм, авангардизм тип атай. Һуңғы ваҡытта бик күп сәйнәлгән “модернизация” һүҙе – әҙәбиәт, ғөмүмән мәҙәниәт өсөн урынһыҙ, хатта мәғәнәһеҙ төшөнсә. Ә академик беҙҙе, беҙ көнбайыш мәҙәниәтенән артта ҡалдыҡ, әҙәбиәтебеҙҙә модернизация, авангардизм кәрәк, тип әҙәбиәтебеҙҙә революция яһарға саҡыра. Мин уға, халыҡ ижадындағы, үҙ әҙәбиәтебеҙҙәге иң яҡшы традицияларға тоғро ҡалырға, уны артабан үҫтерергә кәрәк, тип яуап бирер инем.

* * *

Был дәфтәргә тағы байтаҡ ваҡыт тотона алмай йөрөлдө. Ә хәтер төбө ятһаң да, торһаң да ҡуҙғала, үткәндәге төрлө хәлдәр, төрлө кешеләр иҫкә төшөп, күңелгә тынғылыҡ бирмәй. Уларҙың ҡайһылары, ғүмер бушҡа үтмәгән икән, байтаҡ ҡына арыу эштәр башҡарылған, тигән матур тойғолар уята, икенсе берәүҙәре иҫкә төшөп, тормошта әллә ни хәтлем йәмһеҙ күренештәр, йүнһеҙ әҙәмдәр булыуына эс боша һәм шуларҙың бик күптәрен эстән генә һыҙып, йә күрмәмешкә һалышып үткәргәнем өсөн үҙ үҙемә асыуланып ҡуям. Ни хәл итәһең, һәр ҡыуанысың, һәр борсолоуың хаҡында һөрән һалып йөрөп тә, уларҙы ҡағыҙға төшөрөп бөтөп тә булмайҙыр. Ана шулай ғүмер йомғағын һүтәһең дә һүтәһең, ә уның осо-ҡырыйы юҡ...

Бына әле үҙемдең әйберҙәр баҫылған гәзиттәрҙе ҡарап, уларҙы тәртипкә килтереп ултырғанда “Башҡортостан” гәзитенең ике мең дә алтынсы йылдың икенсе декабрендә сыҡҡан һанындағы мәҡәләне күргәс, ҡапыл хәтер төйөнөм сиселеп, уйға сумдым, ошоға тиклем тормошҡа ашыра алмай йөрөгән бер эшем өсөн үкенес тойғоһо уянды.

Мәҡәлә “Ижад утарының һүнмәҫ уттары” тип атала. Авторы – Рәйес Түләк. Мин бик тә ихтирам иткән, шиғырҙарын уҡып һоҡланған, уйланған, борсолған һәм ҡыуанған ҙур талант эйәһе. Үҙемдең ошо тойғоларымды белдереп мәҡәлә яҙырға ынтылыу теләгем нисәмә тапҡырҙар ҡуҙғалып, баҙлап китә алмайынса һүнеп ҡалды бит. Талантлы шағирҙың күңел төпкөлдәрен ҡуҙғатыусы шиғырҙарына дөрөҫ баһа бирә алмаҫмын кеүек тойолдо.

Һуңғы тапҡыр бындай теләк Рәйес вафат булғандан аҙаҡ сыҡҡан ике китабын – шиғыр һәм поэмалар йыйынтығын һәм “Йырлы йәндә ҡояш байымай” тигән бик тә үҙенсәлекле һәм ҡыҙыҡлы китапты уҡығас тыуғайны.(Унда Рәйес ҡулынан сыҡҡан очерк, мәҡәләләрҙе тулыраҡ биргәндә, ул тағы ла байыраҡ булыр ине.) Үкенескә ҡаршы, был юлы ла маҡсатым теләк килеш ҡалды. Ә бына юғарыла телгә алған мәҡәләнең күҙгә салыныуы ҡулға ҡәләм алып, фекерҙәремде ҡыҫҡаса ғына булһа ла, ҡағыҙға төшөрөргә мәжбүр итте.

...Матбуғат йорто алдында осрашып, Рәйес менән байтаҡ ваҡыт һөйләшеп торғайныҡ. Ул Баймаҡ яғына – тыуған ауылы Буранбайға ҡайтып, бер-ике көн ғаиләһе эргәһендә булып килеүен һөйләне лә:

– Әллә шуға күрә инде, үҙемде етем ҡалған кеүек күрәм әле, – тип әйтеп һалды.

Уның хәлен аңлаған һымаҡмын. Шиғри күңеле ижади мөхиткә тартылып, бынан байтаҡ йылдар элек Өфөгә килеүен, ҡыйынлыҡ менән дөйөм ятаҡтан урын алып, шунда тороуын, бер килке шул ҡыҫырын бүлмәгә ғаиләһен килтереп тә йәшәп ҡарауын белә инем. Хәҙер, ана, ғаиләһе тағы ла ауылда, үҙе бында етемһерәп йөрөй. Бындай хәл күптәребеҙҙең, шул иҫәптән минең дә, башынан үткән. Йә Хоҙай, ниңә әле шундайын талант эйәһенә лә әҙәмсә йәшәү шарты тыуҙыра алмайбыҙ беҙ? Аҙым һайын, бай республикала йәшәйбеҙ, тип маҡтанған булабыҙ... Был әсенеүле һорауҙы мин әле булһа үҙ үҙемә бирәм дә Салауат Әбүзәрҙең Рәйес Түләк дуҫына арнап яҙған шиғыр юлдарын иҫкә төшөрәм:

*Оҙон ғүмер, ҡыҫҡа ғына тормош*
*Бәғзе бәндәләргә бирә Хоҙай.*
*Бар белгәне – карауат һәм өҫтәл,*
*Ҡаҙанышы уның шунан уҙмай.*
................................
*...Аттың һайрағанын ишеткән юҡ,*
*Һандуғастан ерҙе һөрҙөрмәйҙәр.*
*Ә һин һөрҙөң. Тамсы зарланманың.*
*Һынатманың хатта һабандарҙа.*
*Һайрап һөрҙөң. Сөнки беҙ йәшәйбеҙ*
*Һандуғасты егер замандарҙа...*

Күңелемдән ошо әсенеүле юлдар уҙа, һәм, Рәйестең күңелен күргем килеп:

– Улайтып төшөнкөлөккә бирелеп йөрөмә әле, – тинем. – Ял көндәренә, әйҙә, минең дачаға китәбеҙ, бер аҙ елләп йөрөп ҡайтырһың.

Алып барҙым мин Рәйесте Дим буйына. Ике көн буйы һөйләшеп йөрөнөк. Уның ауыҙынан, Салауат әйтмешләй, тамсы ла зарланыу һүҙе сыҡманы, бындағы тәбиғәт хозурлығына һоҡланды. Ҡайһылай шәп булды әле, күкрәктәр киңәйеп ҡалды, тигән булды. Уның, яҙыусылар төбәге булғас, бындағы һәр ҡайынға, хатта һәр үләнгә арнап шиғыр яҙылғандыр инде, тигән һүҙҙәре хәтерҙә.

Урам буйлап үтеп, кемдең ҡайһы өйҙә йәшәгәнлеген дә күрһәтеп сыҡтым мин уға. Ысынлап та бында әҙәбиәтебеҙҙең йөҙөн билдәләүсе яҙыусылар йәшәне һәм ижад итте шул...

Рәйес хәҙер инде яҡты донъянан киткән яҙыусы апай һәм ағайҙарҙың өйө тәңгәлендә туҡталып, хужаларҙың үҙен күрергә теләгәндәй, уйсан күҙҙәрен тағы ла ҡыҫа биреп төбәлеп ҡарап тора. Был баҡсала әллә күпме шиғыр шытып сыҡҡандыр, тип минең башҡа бер ваҡытта ла килмәгән фекер әйтә. Ә бөтәһен дә күреп әйләнгәс:

– Ҡыҙыҡ, – яҙыусылар ауылы. Бер ауыл яҙыусылар. Ҡайһылай бай беҙ, – тип үҙенсә һығымта яһап ҡуйҙы.

– Бай инек тә... теге донъяға күсеп бөтөп барабыҙ шул, – тигәйнем, ул йәнә уйсанланып китте, әҙерәк йөрөп әйләнгәс:

– Яҙыусылар бөтөнләй үлеп бөтһә, әҙәбиәт тә бөтөр микән? – Ҡыҙыҡ кеше был Рәйес, үҙенә үҙе әллә ниндәй һорауҙар бирә. Шунан ҡапыл йәнләнеп китә: – Яҙыусының исеме лә, әҫәрҙәре лә үлмәй. Был изге төйәк тураһында китап яҙырға кәрәк. – Аҙыраҡ торғас, өҫтәп ҡуйҙы: – Ысын яҙыусылар ошолай йәшәй икән...

Уның һуңғы һүҙҙәрендә әйтеп бөтөлмәгән мәғәнә һиҙелә ине. Хатта әҙәм рәтле йәшәр торлағы ла булмаған, үҙ-үҙен кәмһетеп ҡараған кеше генә шулай төшөнкө күңел менән әйтәлер был һүҙҙәрҙе.

Рәйес Түләк яҙыусыларҙың "Аҡлан" дачаһы тураһында китап яҙманы, ә бына "Башҡортостан" гәзитенең битен тултырып ҡыҙыҡлы мәҡәлә баҫтырҙы. Ул теге саҡта йөрөп ҡайтҡандан аҙаҡ, Дим буйына йәнә бер барғыһы килеүен, үҙе әйткәнсә, яҙыусылар ауылы тураһында яҙырға теләүен әйткәс, Ғайса Хөсәйенов менән Александр Филипповты ла алып, инде ҡар төшөп, ҡыш яҡынлаған мәлдә "Аҡлан"ға юл тоттоҡ.

Был мәлдә яҙыусылар дачаһы бушап ҡала тиерлек, кешеләр ҡышҡы өңдәренә – ҡалаға ҡайтып бөтә. Илаһи бер тынлыҡ хөкөм һөрә бында, бөтә ер, хатта ағастар ҙа ап-аҡ ҡар юрғанына төрөнгән.

Дүртәүләшеп урамдан атлайбыҙ. "Аҡлан"дың үткәненә бәйле ваҡиғаларҙы

иҫкә төшөрәбеҙ, һәр өй тәңгәлендә туҡталып, ҡасандыр ҡәләмдәштәребеҙҙең ошонда нисегерәк йәшәүен, ниндәй әҫәрҙәр яҙыуын хәтерләйбеҙ. Рәйесте иһә бөтәһе лә ҡыҙыҡһындыра, һорауҙар артынан һорауҙар бирә. Ул фотоаппаратын да үҙе менән алғайны, туҡтай ҙа ҡыҙыҡһындырған күренешен төшөрөп ала. Бергә йөрөй торғас, мин уның бер ғәҙәтен белдем: ул хәбәрҙе күп һөйләмәй, эргәһендәгеләргә туҡтауһыҙ һорауҙар бирә. Яҙыусылар тормошо, ижад тураһында ғына түгел, донъя йөҙөндәге, илдәге хәлдәр хаҡында ниҙелер ныҡлап белергә теләп төпсөнә, хатта ҡайһы саҡта балаларса бер ҡатлы һорау ҙа биреп ҡуя.

Был юлы ул, моғайын, тағы ла ҙурыраҡ тәьҫораттар менән ҡайтҡандыр. Күп тә тормай, юғарыла иҫкә алған мәҡәләһе баҫылып сыҡты.

Рәйес, талантлы шағир булыуҙан тыш, оҫта ҡәләмле журналист та ине. Ә журналистлыҡ айырым бер һәләт талап итә. Юғиһә бит ана беҙҙә ябай ғына мәҡәлә яҙа белмәгән яҙыусылар ҙа бар. Рәйес Түләктең һуңғы йылдарҙа “Башҡортостан” гәзитендә һәм бүтән баҫмаларҙа донъя күргән мәҡәлә һәм очерктары уның шундай һөнәре тураһында һөйләй ҙә инде. Тәү ҡарашҡа ғәҙәти гәзит материалында ла беҙ Рәйес Түләктең тормоштағы һәр күренешкә, һәр кешегә тик үҙенсә генә баһа биреүен, һәр нәмәне тик үҙенсә аңлауын тоябыҙ.

Уның ошо сифаты ҡәләмдәштәренең әҫәре, ғөмүмән әҙәби ижад тураһындағы мәҡәләләрендә бик тә асыҡ сағылыш таба. Бына, мәҫәлән, ул “Бер һүҙ хаҡында мең һүҙ” тигән мәҡәләһенә “Тимер Йосоповтың бер шиғыры тураһында” тигән билдәләмә һуғып ҡуйһа ла, бик оҫта фекер йөрөтөү аша шағирҙың үҙенсәлекле ижадын күҙ алдына килтерәбеҙ. Улай ғына ла түгел, был мәҡәләне “Шиғри оҫталыҡ тураһындағы фәнни хеҙмәт” тип атарға ла мөмкин. Рәйес Түләк проза йәки проза жанры тураһында яҙамы, һәр жанрға, һәр әҫәргә үҙенә генә хас ҡарашы бар. Йыйып әйткәндә, беҙ уның фекерҙәре аша ижад кешеһе алдына ҡуйылған, һәр әҫәрҙең билдәле бер тәғәйенләнеше булырға тейеш, тигән талабын аңлайбыҙ. Йәғни автор, ниндәйҙер абстракт хистәр тойғоһона ғына бикләнеп ҡалмайынса, нимә хаҡында һәм ни өсөн яҙғанлығын асыҡ аңлап эш итергә тейеш.

Рәйес Түләктең ижадына ныҡлабыраҡ күҙ һалһаң, уның тап ошо талаптарға һәр саҡ тоғро ҡалыуын күрмәү мөмкин түгел. Салауат Әбүзәр менән булған бер әңгәмәһендә ул былай ти: “Һәр дәүләттең дә үҙ атрибуттары була: флагы, гимны, гербы һәм башҡалар. Шуның кеүек минең дә шиғриәткә һәр ваҡыт милләтте милләт итеп ойоштороп тороусы бер атрибут күреп ҡарайым”. Бына нисегерәк билдәләй шағир үҙ кредоһын.

*Башҡорт рухы һүнһә, Һөйәнтөҫтәй,*
*Янып һүнеүе булыр илебеҙ.*
*Был донъяла пәйҙә булмаҫ, тимә,*
*“Башҡортостан” тигән буш нигеҙ.*

(“Һөйәнтөҫ” шиғырынан)

*Кейемдәрҙе кейеү генәме ни,*
*Башҡорт тиеп яҙып паспортын...*
*Аҡ йорттарҙан тороп күпме түрә*
*Башына етте аҙмы башҡорттоң.*

(“Башҡортлоҡ” шиғырынан)

*Ғәрләнһәм дә, ерәнһәм дә (ахыры,*
*Күңел күнгән, күҙҙәр өйрәнгән),*

*Киләм: бында минең азатлығым,*
*Халҡым азатлығы ерләнгән.*

(“Дуҫлыҡ монументы” шиғырынан)

Халҡыбыҙҙың үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге тураһында бына шулай сәсрәтә һуғып, борсолоп, күңелдәрҙе тетрәтерлек итеп әйткән тағы ниндәй шағир бар? Рәйес Түләк бына шундай хистәр утында янды һәм... янып донъянан китте.

Ул вафат булғандан һуң, күп кенә ҡәләмдәштәре уның яҡты, һүнмәҫ рухына арнап мәҡәләләр яҙҙы. Шағирҙың ваҡытһыҙ арабыҙҙан китеүенә ҡайғырып, уға тере сағында иғтибар һәм хәстәрлек етмәүгә үкенеп, уның талантына һәм кешелек сифаттарына һоҡланыу белдереп... Ҡәләмдәштәребеҙ арабыҙҙан киткәс кенә уларҙың ҡәҙерен белә башлайбыҙ түгелме? Уныһы ла бик ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына, тора-бара хәтер һандығыбыҙҙы биклəп үк ҡуябыҙ. Был – мәрхүмдәр ҡаршыһында иң оло гонаһыбыҙ. Сөнки әйткән һүҙҙәребеҙҙең ихласлығы ла шул тиклем генә, исем өсөн генә булғандыр. Ҡәберҙә ятҡан кешене алдауҙан да яманыраҡ эш бармы икән? Рәйес Түләк вафатынан аҙаҡ Башҡортостандың халыҡ шағиры, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе Рауил Бикбаев:

*Эй, ғәмһеҙ ил.*
*Ниңә аҫыл затын*
*Ҡәҙерләү юҡ тере көйөнә...*
*Һау сағында уға эйелер баштар*
*Ҡайғы килгәс кенә эйелә.*
*Ҡәбер өҫтәрен дә үлән ҡаплар,*
*Ҡәбер өҫтө ятмаҫ гел ҡара.*
*Күңелемдә һаман тынғы тапмаҫ*
*Рәйес Түләк тигән моң-яра, –*

тип ауыр юғалтыу кисереүҙән йөрәге әрнеүен белдергәйне. Әүәл-әүәлдән мәрхүмдәр алдындағы гонаһтарҙы кисереүҙе һорап уның ҡәбере эргәһендә доға ҡылғандар...

Рәйес Түләк ике йөҙләлөктө, нахаҡ һүҙҙе, буш хәбәр һөйләүҙе яратманы. Уның ижады хаҡында ентекле уйланған фәнни хеҙмәттәр яҙылыр, иҫтәлеген мәңгеләштереү өсөн Мостай Кәрим, Рәшит Назар, Назар Нәжми, Рәми Ғариповтар рәтенән уға ла һәйкәл ҡалҡып сығыр, тигән ышанысым бар.

...Ике мең дә унынсы йылда үткәндәргә кире ҡайтып, әллә ни хәтлем ваҡиғаларҙы иҫкә алырлыҡ көтөлмәгәнерәк эш тә булды. Башҡорт әҙәбиәте кафедраһы мөдире Рәйсә Илешева Зәйнәб Биишева исемендәге Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһында үткәреләсәк әҙәби кисәгә саҡырғас, аҙ ғына ла икеләнеп тормайынса, риза булдым да ҡуйҙым. Һуңғы йылдарҙа, былдай сараларға йөрөргә теләк булһа ла, форсат юҡ ине. Ҡасандыр үҙем уҡып сыҡҡан уҡыу йортонан хәбәр алғанғамы, мине был саҡырыу осондороп-дәртләндереп ебәрҙе.

Ул саҡта, үткән быуаттың ҡырҡынсы йылдарында, был уҡыу йорто Стәрлетамаҡ Уҡытыусылар институты тип атала ине. Комсомол урамындағы ыҡсым ғына, әммә матур итеп һалынған йортҡа урынлашҡан институтта ике йыл эсендә уҡытыусы итеп әҙерләйҙәр ҙә уларҙы йүнәлтмә буйынса бөтә ил буйынса тараталар ине.

Ә беҙҙең өсөн, һуғыштан һуңғы ауыр йылдарҙа урта мәктәпте көс-хәлгә бөткән егет һәм ҡыҙҙар өсөн, артабан юғары уҡыу йорттарына барып уҡыу тормошҡа ашмаҫ хыял һымаҡ. Ана шул хыял ҡанаттарына ултырып Стәрлетамаҡ

Уҡытыусылар институтына килеп ингәс, беҙҙең нисегерәк күккә менгәндәй ҡанатланып йөрөгәнде күрһәгеҙ ине. Ул – беҙҙең өсөн донъялағы иң юғары уҡыу йорто, Комсомол һәм Садовая урамдары мөйөшөндәге ҙур булмаған ике ҡатлы йорт ябай ятаҡ ҡына түгел, беҙгә йылы төйәк биргән, беҙҙе ҡуйынына һыйындырған изге урын.

Академияның яңы бинаһында бынан байтаҡ йылдар элек бер төркөм яҙыусылар менән кисә үткәрергә килгәндә булғаным бар ине. Тик ул, сираттағы ғәҙәти осрашыу булғанғамы, әллә ни асыҡ хәтерҙә ҡалмаған. Был юлы ап-аҡ ҙур бинаның алдына килеп баҫҡас, нисектер үҙемде тыуған йорт тупһаһына аяҡ баҫҡан һымаҡ тойҙом.

Бына филология факультетының деканы Зөһрә Сәләхова менән әҙәбиәт кафедраһы мөдире Рәйсә Илешева сәскәләр гөлләмәһе тотоп ҡаршы алырға сыға: хәс тә үҙенең улы тыуған йортона оҙаҡ килмәй торғандан һуң ҡаршы алған кеүек – үҙебеҙҙәгесә. Ишек асып инеүгә студент ҡыҙҙар көлөп-йылмайып ҡаршы ала – улары ла үҙебеҙҙекеләр. Проректор Әнүәр Хәким улының ихлас йылмайып ҡаршылап, сәй эсергә әйҙүкләүе лә беҙҙеңсә. Ғөмүмән, мин инде ысынлап та үҙемде әүәлге һабаҡташтарым, уҡытыусыларым араһына килеп юлыҡҡандай хис иттем. Ә бит минең Стәрлетамаҡ институтында уҡып йөрөгәнгә алтмыш йыл ғүмер үтеп киткән. Әммә шул саҡтағы студент тормошо бөтә барлығы менән күҙ алдына килде лә баҫты.

Сәй эскән аралағы ҡыҫҡа ғына әңгәмәлә үк һуңғы биш йыл эсендә академияла бик ҙур үҙгәрештәр булыуын белеп өлгөрҙөм. Һәм был яҡшы яҡҡа табан үҙгәрештәр нигеҙҙә академияның ректоры Хәмит Хәйервара улының эшмәкәрлегенә бәйле икән.

Бына беҙ академияның яҡты, күркәм коридорҙары буйлап йөрөйбөҙ. Күҙгә ташланған бөтә нәмә таҙа, бөхтә, ялт итеп тора. Уҡытыусылар өсөн бүлмә, башҡорт әҙәбиәте һәм башҡорт теле кафедраларының кабинеттары, әҙәбиәт кабинеты – бөтәһе лә матур итеп йыһазландырылған, йыйнаҡ, бөтәһе лә үҙ урынында.

Ирекһеҙҙән үҙебеҙ уҡып йөрөгән саҡтағы күренештәр иҫкә төшә. Ҡайҙа инде ул саҡта әҙәбиәт кабинеты, хатта уҡытыусыларыбыҙға буш ваҡыттарында инеп ултырырыр өсөн дә рәтле урын юҡ ине, аудиторияның бер ситен таҡта менән кәртәләп бүлмә йораты эшләгәндәр ҙә, бөтәһе лә шунда тула.

Хәйер, туҡта әле, бүлмәлә торамы ни эш, уҡытыусыларыбыҙ ифрат шәп кешеләр ине. Башҡорт теле уҡытыусыһы Абдулла Нәбиулла улы Баязитов – урта йәштәрҙәге ғәжәп әҙәпле, мәҙәниәтле, төплө белемле, килешле, ҡупшы кейенеп йөрөүе, күркәм ҡиәфәте менән үҙенә тартып торған ир. Әгәр ҙә мин әсәм теле байлығын ниндәйҙер кимәлдә үҙләштергәнмен һәм уның ҡәҙерен беләм икән, быны өсөн Абдулла Нәбиулла улына бурыслымын. Мин был уҡытыусым менән ул донъялыҡтан киткәнсә аралашып йәшәнем. Ә һуң Өфөлә педагогия институтын тамамланғас та беҙгә әҙәбиәт уҡытыусыһы булып килгән егерме алты йәшлек Хәким Ғиләжевтың тиҙ үк ихтирамыбыҙҙы яулап алыуын әйт әле! Ул Ватан һуғышы яландарында ҡан түккән яугир һәм хәҙер инде арыу уҡ билдәле шағир ине. Хәким Ғиләжев институт тормошона өр-яңы бер тын өрҙө, бында әҙәби мөхит хөкөм һөрөргә кереште. Был эште ул башҡорт телендә “Ашҡаҙар” тигән әҙәби стена гәзите сығарыуҙан башланы. Унда файҙаланыу өсөн материалдарҙы үҙе һайлап ала, беҙҙе яҙырға өйрәтә, буяуҙар һалынған ҡумтаһын, бумалаһын алып килеп, гәзитте лә үҙе биҙәй ине. (Оҫта рәссам дә ине ағайыбыҙ.

Уның Һаҙый Таҡташ һүрәтен күмер менән ҙур итеп эшләп, үҙе доклад һөйләйәсәк трибунаға йәбештереп ҡуйыуы әле лә күҙ алдында.) Беҙҙең был стена гәзите институттың дөйөм коридорына элеп ҡуйыла ине һәм бик тиҙ студенттарҙың иғтибарын яулап алды. Уның һәр һанында тиерлек минең шиғыр урын ала, уны, минең өсөн тәүге трибуна булды, тип әйтергә лә була.

Уҡытыусыбыҙ башҡорт яҙыусылары менән осрашыуҙы ла юлға һалды. Уларҙы Өфөнән дә саҡырып килтерә, Стәрлетамаҡҡа йомош-юл менән килгәндәрен дә тотоп алып, беҙҙең менән осрашыуға әйҙүкләй. Мәжит Ғафуриҙең – етмеш, Һаҙый Таҡташтың илле йыллығына арналған ҙур кисәләр ныҡ иҫтә ҡалған. Институттың актовый залында үткән ул кисәләрҙә Хәким Ғиләжев бик тә эстәлекле докладтар менән сығыш яһаны. Мәжит Ғафури һәм Таҡташ шиғырҙарын телмәре барышында тәьҫирләнеп һөйләп ебәреүе тамашасыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Беҙ, студенттар, Сәйфи Ҡудаштың Мәжит Ғафури тормошона арналған пьесаһын сәхнәләштерҙек. (Режиссеры – Культпросветтехникумдың уҡытыусыһы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ғәббәс Яҡупов ине. Пьесала Мәжит Ғафури ролен мин башҡарҙым.) Аҙаҡтан әйттеләр: бындай кисәләр институтта быға тиклем үткәрелмәгән икән. Һаҙый Таҡташтың тыуыуына илле йыл тулыуға арналған кисә бигерәк тә күңелле үтте. Өфөнән Сәғит Агиш менән Маҡсуд Сөндөклөнөң килеүе уның кимәлен тағы ла күтәреберәк ебәрҙе. Шуныһы ҡыҙыҡ: беҙҙең ошондай кисәләргә төрлө милләт вәкилдәре лә бик теләп йөрөй, уҡытыусыларыбыҙ иһә ғаиләләре менән килә ине.

Таҡташ кисәһендә күп кенә кеше ҡатнашлығында шағирҙың шиғырҙарын һөйләү буйынса бәйге үтте. Еңеүселәргә биреү өсөн институт профкомы матур ғына бүләктәр әҙерләгәйне. Ул ярыш бейеүселәр, йырсылар сығышы менән аралашып барҙы. Иҫемдә ҡалыуынса, беренсе бүләкте Маҡар урта мәктәбен бөтөп килгән Маһинур Рәхмәтуллина “Алсу” шиғырын бик оҫта итеп башҡарғаны өсөн алды. Мин иһә “Мөхәббәт тәүбәһе”н һөйләгәйнем, икенсе урында ҡалдым. Күрәһең, кисә һәйбәт кенә үткәндер, һуңынан үҙенең сығышында Сәғит Агиш маҡтау һүҙҙәре әйткәне хәтерҙә.

Ҡыҫҡаһы, Хәким Ғиләжев башлаған әҙәбиәт ағымы көсөйгәндән-көсәйә барҙы. “Ашҡаҙар” тигән әҙәби түңәрәк барлыҡҡа килде, “Ашҡаҙар” исемле ҡулъяҙма журнал сығарҙыҡ. Хәҙерге көндәге Стәрлетамаҡ яҙыусылар ойошмаһының инеше ана шул бынан алтмыш йыл элек институтта башланған ваҡиғаларға барып тоташа. Хәким Ғиләжев артабан “Ағиҙел” журналының баш мөхәррире, Яҙыусылар союзы идараһының рәйесе булып эшләгән мәлдәрендә лә Стәрлетамаҡтағы әҙәби берекмәне күҙ уңынан ысҡындырманы һәм уның республикала тәүге үҙ аллы ижади ойошма булып күтәрелеүенә өлгәште.

...Хәтер мине академия менән танышып йөрөгән ерҙән әллә ҡайҙарға алып китте. Академия музейына барып ингәс, бөгөнгө ысынбарлыҡҡа кире ҡайттым. Шундай матур итеп йыһазландырып, бай экспонаттар тупланған музейҙы мин бүтән юғары уҡыу йортонда күргәнем юҡ. Унда булғандан һуң был юғары уҡыу йортоноң етмеш йыл эсендә ниндәй үҙгәрештәр кисергәнен бик асыҡ күрергә мөмкин.

Бына ошо уҡыу йорто исемен йөрөткән Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишева музейы. Академияның йөҙөк ҡашы булырлыҡ был бүлмә мине айырыуса ҡыуандырҙы. Ул шул тиклем уйлап һәм хәстәрлек менән ойошторолған – яҙыусының оҙон, ҡатмарлы тормошо, бай ижады күҙ алдынан үтә. Шул уҡ ваҡытта был уҡыу йортонда әҙәбиәтебеҙгә, мәҙәни тормошобоҙға ҙур иғтибар һәм ихтирам менән ҡарауҙары ла сағылыш таба.

Китапхана, ҙур уҡыу залы, башҡа төрлө махсус кабинеттар менән танышып сыҡҡас, оҙатып йөрөүселәрҙән йәнә, былар бөтәһе лә – ректорыбыҙ Баймырҙиндың ҡулы, тигән һүҙҙәрҙе ишеттем. Коллектив ағзалары ауыҙынан үҙ етәкселәренә ҡарата ихласлыҡ менән әйтелгән маҡтау һүҙҙәрен ишетеү ҙә күңелгә рәхәтлек бирә ине.

Һәр яҡлап ныҡлы әҙерлек менән ойошторолған кисә бик күтәренке кимәлдә үтте. Мин үҙемде һәр саҡ ошо коллектив менән бергә йәшәгәндәй тойҙом, бөгөнгөнән үҙебеҙҙең студент йылдарына ҡайтып әйләндем, үҙемдең ижад юлына күҙ ташлап алырға ла мәжбүр булдым. Ижадым тураһындағы сығыштар концерт номерҙары, әҫәрҙәрем буйынса эшләнгән инсценировкалар менән аралашып барҙы.

Сәхнәлә – ҡурайсылар ансамбле. Һыҙҙыра ғына егеттәр. Быныһы инде беҙҙеңсә түгел, заманса. Беҙ уҡығанда ҡурай тартыусы бер генә егетебеҙ бар ине: Бөрйәндән – Ғәлимйән Ишкинин. Бына бейеүселәр сәхнәне дер һелкетә. Кейемдәре ниндәй бит әле, күҙ яуын алырлыҡ. Быныһы ла беҙҙеңсә түгел – заманса. Беҙ иһә сәхнәлә сығыш яһау өсөн милли кейемде Кульпросветтехникумдан инәлеп-ялбарып һорап ала инек. “Мәңгелек урман”, “Һайлап алған яҙмыш”, “Һуңғы солоҡ” романдары буйынса эшләнгән инсценировкаларҙы ҡарағанда иһә мин үҙ геройҙарым терелеп, реаль тормошта йәшәйҙәр кеүек тойҙом. Быныһы иһә Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрының баш режиссеры Азат Йыһаншиндың маһирлығы икән.

Ошо күренештәрҙе ҡарап ултырғандан аҙаҡ күңелемә тормошҡа ашмаҫ уй ҙа килеп ҡуя: бынан алтмыш йыл элек бергә уҡыған һабаҡташтарымды йыйып килтереп ултырт ине ошо ҙур залға. Беҙ һалған орлоҡтарҙың шундай матур емештәр биреүен күреп ғорурланһындар ине.

Юҡ шул, уларҙы бында ҡайтарып булмай. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте бүлеген бергә бөткән һигеҙ егеттән мин генә иҫән. Ауыр һуғыш йылдары тәндәрен дә, йәндәрен дә имгәткән тиңдәштәрем ваҡытынан элек яҡты донъянан китеп бөттө...

Кисәнән аҙаҡ автограф алырға йыйылдылар. Минең “Һайланма әҫәрҙәр”ҙең алтынсы томын күп кенә итеп килтерткәндәр икән. Китаптарға ҡул ҡуйған арала студенттарҙың ҡайһы яҡтан булыуҙарын һорайым. Республиканың төрлө районларынан, сит өлкәләрҙән дә бар. Күңелгә йәнә йылы тойғо йүгерә: тимәк, ҡасандыр мин белем алған уҡыу йорто изгелек орлоҡтарын йәлләмәй һибеүен дауам итә. Стәрлетамаҡ Уҡытыусылар институты ижад шишмәмдең башы ла ине. Ошонда уҡыған мәлдә нәфис һүҙ бөйөклөгөнә ынтылыу теләге ҡуҙғалды, тәүге шиғырҙар яҙылды. Беренсе бала ҡәҙерле, тигәндәй, мин уларҙың ҡайһы берҙәрен күңелдә һаҡлайым. Бына “Ашҡаҙар” стена гәзитендә урын алған “Комсомол урамы” тигән шиғыр йоратынан бер строфа:

*Комсомол урамы – минең урам,*
*Ялтлап тора уның уттары.*
*Шулай яҡты, саф һәм изгелекле*
*Булһын ине тормош юлдарым.*

Бына бит, теләк-маҡсаттар ҡайһылай ҙур булған. Бөгөн шуларҙың тормошҡа ашыуын күрәм түгелме һуң?!

**2001 – 2010 йылдар.**



Мәүлит
ЯМАЛЕТДИН

# БУЯН

НОВЕЛЛА

Ниһайәт, һыу-һүл тартылып, ер өҫтө ыуыҙ үлән менән ҡапланған яҙғы бер көндә Буян тәүәккәлләргә булды. Башта ул бер нисә көн рәттән тупраҡ еҫкәп, ике күҙенә ҡан һауып, алғы тояҡтары менән ерҙе сапсып, донъяға һыймай үкереп йөрөнө. Был көндәрҙә үгеҙҙең аҡты-ҡараны күрмәгән ҡып-ҡыҙыл күҙҙәренә ҡарауы ҡурҡыныс ине.

Буяндың хужаһы Иван Царинный – хуторҙағы иң тыныс һәм баҫалҡы кешеләрҙең береһе. Әлбиттә, айыҡ сағында. Ә инде ауыҙына горилка тейҙеме – күҙенә салынмауың хәйерле. Ике-өс ай һайын ҡабатланып торған бындай мәлдәрҙә иң тәүҙә уның ҡатыны менән балалары күрше-тирәгә ҡаса, башҡалар ҙа ҡапҡаларын тыға һәм мөмкин тиклем урамда һирәнләмәҫкә тырыша. Ә эсендә шайтаны ҡупҡалйыған Иван хужалығындағы бөтә нәмәне вата, емерә, үгеҙҙекенән кәм булмаған имәнес тауыш менән үкереп урам буйлап йөрөй – һуғышырға кеше эҙләй. Ике-өс көндән Иван Царинный айный, уның холҡо тәбиғи юлыңына ҡайта, һәм хутор ҡәҙимге тормош менән йәшәй башлай.

Буяндың быйылғы сәйер ҡылығы хутор халҡында төрлө фекерҙәр уятты. Берәүҙәр: “Мал эйәһенә оҡшай инде ул”, – тип мәрәкәләһә, икенселәр: “Былар хәҙер икәүләп ҡаҡшаталар икән. Хәйерлегә булһын”, – тигәнерәк хәүеф белдерҙе.

Тәүге һынамышта ниндәйҙер хаҡлыҡ та барҙыр, сөнки утһыҙ төтөн булмай. Әммә хутор кешеләренең ҡайһы берҙәре юҡҡа хафалана ине – иҫ киткес матур яҙғы бер иртәлә Буян ихатаны тышҡы донъянан айырып торған кәртәне емерә һөҙҙө лә таң шаңдағының һарылығы алһыу нурҙарға әүерелә барған тарафҡа ҡарай елде.

Уның инәһенең өләсәһен, йәғни дәү инәһен, Урал тауҙарының битләүендәге бер ауылдан Полтава өлкәһендә урынлашҡан хуторға ҡыуып килтергәндә, Иван Царинныйға бер йәш кенә ине әле. Көтөүҙәге һыйырҙарҙың күпселеген

*Мәүлит Ямалетдин (Ямалетдинов Мәүлит Байгилде улы — 1947) — шағир, прозаик, публицист һәм ҡурайсы-йырауысы. Учалы ҡалаһында йәшәй. БР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре.*

шаңдауы баҫылырға ла өлгөрмәгән һуғыштан зыян күргән хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыр өсөн колхоз фермаһына тапшырҙылар, бер нисәүһен айырыуса бөлгөнлөк кисергән ғаиләләргә таратып бирҙеләр. Буяндың дәү инәһе Царинныйҙарға шулай килеп эләкте.

Әлбиттә, быйыл дүрт йәшен тултырған дүнән үгеҙгә быларҙың күбеһе бөтөнләй таныш түгел. Буяндың был көндәрҙәге ярһыуы ла, ҡапыл ҡубарылып көнсығышҡа атылыуы ла уның булмышына молекуляр кимәлдә һалынған мәғлүмәттең уғата сағыу булып ҡабыныуына бәйле. Уны биш мөсәлдән һуң дәү инәһенең тыуған төйәге саҡыра. Ерһеүҙән дауырғып, күҙҙәрен йома биреп, моронон алға һоноп елә-саба алға уҡталған үгеҙҙең танауына иҫ киткес ғәзиз, татлы еҫтәр бәрелгәндәй, теленә бығаса татып ҡаралмаған һыуҙар тәме яғылғандай хатта. Был еҫтәр менән тәмдәр тәьҫиренән Буяндың ауыҙынан һеләгәйҙәр бүленеп сыға – улар, үрмәксе ауҙары төҫлө һуҙылып, күпереп ҡалҡып килгән үлән баштарына, һирәк-һаяҡ күренгән сәскәләр өҫтөнә эленеп ҡала.

Бер тына елгәндән һуң, үгеҙ атлауға күсте, ә бер аҙҙан ял алырға туҡтаны. Кескәй йылға ярындағы бынау болонда утлап алыу ҙа ҡамасауламаҫ – үләндең әле иң танһыҡ һәм татлы сағы. Хәтеренең иң төбөндәге бер нөктә уға юлдың бик алыҫ булыуын аңғартып хәбәр ебәрә. Тимәк, көстө һаҡларға кәрәк. Уның берҙән-бер сараһы – ризыҡ. Ә ул – аяҡ аҫтында.

Кәрәгенсә үлән ялмап, һыу эсеп алғас, Буян артабанғы юлын уртаса тиҙлектә атлап дауам итте. Беренсенән, туйған ҡорһаҡты һелкендерергә ярамай, икенсенән, йөрәген ашҡындырған тәҡәтһеҙ тартыу көсөнә буйһоноп сәфәргә сығыуы тынысландыра төшкәйне уны. Хужаның ҡыуа төшөү ихтималлығынан да хафаланаһы түгел: мал-тыуарҙың яҙлы-көҙлө аҙманланып, бер нисә тәүлек ҡураға ҡайтмауы ғәҙәти хәл. Әгәр шунда ла шик-шөбһәгә төшөп, эҙләргә сыға ҡалһа, ул саҡта инде Буяның алыҫта булыр.

Көн үҙәгендә еләҫтә ял итеп, тәүлектең һалҡынсараҡ мәлендә юлды ыратып атлай торғас, ике аҙна тигәндә үгеҙ Дон йылғаһына килеп терәлде. Был Буян йөҙөп сығырға тейешле икенсе оло һыу ине. Тәүгеһе бынан ике-өс тапҡырға ҡайтыш Донец, йәғни Кесе Дон булды. Тегеһен аша сығыуы әллә ни ҡыйынға төшмәне, әммә быныһы!.. Яҙғы буръяҡтан арынып та бөтмәгән киң даръя нисектер болғанып, урыны-урыны менән шомло өйрөлмәктәр яһап, алҡынып аға. Һыу өҫтөнән ара-тирә таҡта, бүрәнә киҫәктәре, һалам өйөмдәре йөҙөп үтә. Хәүефләндерә, ә шулай ҙа тәүәккәлләргә кәрәк! Буян бер аҙ һыуға текләп, ихтыяр көсөн туплап алды ла, моронон өҫкәрәк күтәреп, ҡолаҡтарын шымтайтып, тартылып та өлгөрмәгән һалҡын һыуға йомолдо…

* * *

Донды йөҙөп сығып, бер нисә көн барғандан һуң, уйһыулыҡ һәм Тамбов урмандары башланды. Ҡара урман араһында һалҡын, атлауы еңел. Әлбиттә, асыҡ ер менән сағыштырғанда, үлән һирәгерәк, шулай ҙа юҡ-юҡта эреле-ваҡлы аҡландар осрап тора. Ә унда үләндең ниндәйе генә юҡ!

Шулай ҙа иркендә ҡалай рәхәт! Йәнең нимә теләй, шуны эшләйһең. Асыға башлаһаң, төрлө-төрлө үләне, һыуһап китһәң – йылғалары. Бер һүҙ менән әйткәндә, хөрриәт! Кемуҙарҙан һайраған урман ҡоштарының тауышы, кәкүктәр саҡырыуы ирәүән тормошҡа, тирә-йүндәге хозурлыҡҡа дан йырлау һымаҡ тойола…

Сеү, был ниндәй ғауға? Һайыҫҡан шыҡырлаймы? Ә ул юҡҡа ғына йәүкә һалмаҫ. Аҡлан ситендә утлап торған Буян һағайып башын күтәрҙе, инстинктив рәүештә урман шымсыһы яр һалған тарафҡа алды менән боролдо. Ул арала аҡландың арғы ситендәге әрәмәлектән шарт-шорт ағас һынған тауыштар

ишетелде. Айыу!.. Унан башҡа бер кем дә түгел! Һиҫкәнгән үгеҙ, үҙе лә һиҙмәҫтән, яҡындағы йыуан ҡарағай эргәһенә барып баҫты – һөжүм итә ҡалһа, шуға ҡуша һөҙөргә мөмкин буласаҡ.

Бер аҙҙан лап-лоп баҫып әрәмәлектән урман хужаһы килеп сыҡты. Ул Буянды күреп шып туҡтаны, кеше бейеклеге булып һерәйеп торған ҡайын түңгәгенә тотоноп, аяғүрә баҫты. Уның уҫал ҡарашы, ғәйрәт бөркөп торған йөнтәҫ, дәү кәүҙәһе һис бер яҡшылыҡ вәғәҙә итмәй ине. Айыу, шуны раҫлағандай, ыңғырашыуға ла, үкереүгә лә оҡшаған имәнес тауыш сығарып, ике ҡуллап бар көсөнә түңгәкте үҙенә тартты. Төбө-тамыры менән аҡтарылған ҡайын төпһәһе сарт-сорт килеп ергә ҡоланы. Был – урман хужаһының дәһшәт һалыуы, айбар ҡороуы ине.

Үгеҙ яҡшы белә: йыртҡысҡа һырт бирергә һис ярамай. Ул – үлем тигән һүҙ. Шуға күрә Буян, моронон муйынына ҡыҫа биреп, мөгөҙҙәрен алға һоноп, ҡуҙғалмай тора бирҙе. Айыу көс-кеүәтен күрһәтеп маташамы ни? Уның түңгәкте аҡтарып сығарғанын күргән үгеҙ быға ҡаршы ҡаты итеп башын сайҡап ҡуйҙы. Буяндың был киҫәтеүле хәрәкәте ҡорал менән янауҙы белдерҙе булһа кәрәк. Быны шулай уҡ: “Мин һинән ҡурҡмайым”, – тип тә аңларға була ине.

Йыртҡыс Буяндың ишараһына дөрөҫ төшөндөмө, әллә тамағының туҡ ваҡыты булдымы – ғәжәпкә ҡаршы, һөжүм итмәне. Ул уҫал һәм һынаулы ҡарашын барыһына әҙер булған үгеҙгә төбәп бер аҙ торғандан һуң, томшоғон өҫкә күтәреп һауаны еҫкәй-еҫкәй, туйтаңлап урман эсенә инеп юғалды.

Буян тормошта бәхетле осраҡтың гел ҡабатланып тормауын яҡшы белә ине, шуға күрә был ваҡиғанан һуң артабанғы сәйәхәтендә мөмкин тиклем кеше йәшәгән тораҡтарға яҡын булырға тырышты. Хатта төнгө серемгә лә ауыл эргәләрендә туҡтар булып китте. Донъя хәлен белеп булмай. Ә кешеләр янында йәнең тыныс: моторҙар геүләй, төнө буйы тиерлек эттәр өрә. Әтәстәрҙең таңғы һөрәне иһә юлды артабан дауам итергә кәрәклекте белдергән шартлы билдә булып яңғырай.

...Дәү инәһе донъяға килгән төйәктең тартыу көсө ни тиклем ҙур булмаһын, Буянды ике көнгә тотҡарланырға мәжбүр иткән мажара асылы барыбер ҡеүәтлерәк ине. Ваҡиғаның сәбәбе эт-ҡоштан хәүефләнгән үгеҙҙең ауылдарға янғалаҡлауына бәйләнгәйне. Танаҡай уға кескәй генә бер утар янында килеп юлыҡты ла инде. Буяндың һиҙемләүе буйынса, ул көтөүҙән айырылып ҡалғанға оҡшағайны.

Үгеҙ, наҙлы ызылдап үҙенә яҡынлаған Танаҡайҙың кәрәк урындарын еҫкәп ҡарағандан һуң, уның теләк өҫтөндә икәнен самаланы. Ошо бер ни менән дә алмаштырып булмай торған илерткес еҫ Буянды бар донъяны онторға мәжбүр итте. Нәҫел ҡалдырыу инстинкты алдында бөтә нәмә кесерәйеп, әһәмиәтен юғалтты һәм артҡа сигенде. Буяндың ғишыҡ ғәмәленән тонған күҙ уңында бары тик тәүгә түл йәйгән Танаҡай ғына булды.

Шәһүәте ҡуҙғыған үгеҙгә әллә яҙ тәьҫиренән, әллә байтаҡтан бирле һыйыр күрмәүҙән тулышҡан теләген ҡәнәғәтләндерер өсөн бер көн етмәй ҡалды. Шуға күрә, Танаҡайға тағылып, төнгә ҡаршы уның хужалары йәшәгән утарға килде. Орғасы мал үҙе лә һөйкөмлө, ҡупшы кәүҙәле ине шул, шайтан! Унан былайыраҡ, иркә, нескә тауыш менән ызылдап, Буянға һырпалана, уның ҡабырғаларын, һыртын ялай, бер аҙға һүрелеп торған дәртте оторо ҡабындыра…

Ниһайәт, үгеҙҙең танһығы ҡанып, иҫенә килгәндә, икенсе көн кискә ауышҡайны. Эйе, ул бит оҙон сәфәргә сыҡҡан. Һиҙемләүенсә, әле юлдың осо алыҫ. Бынау Танаҡай осрап, ике көн әрәм булды, хәйерһеҙ. Бер уйлаһаң, уныһы ла кәрәк. Тормош шуға ҡоролғас, ҡалайтаһың?!

Улар үҙҙәрен осраштырған аҡланда хушлаштылар. Инде бер-береһен иркәләп, улар ерҙәрен ялашып бөткәндән һуң, Буян тәүәккәл рәүештә көнсығышҡа табан атланы. Сәйәхәтсене Танаҡайҙың өҙәләнеп ызылдауы оҙатып ҡалды. Уның был ауазы: “Тыуыр быҙауыңды ла күрмәй китәһеңме ни-и?” – тигәнде аңлатты булһа кәрәк. Уға ҡаршы үгеҙ, аҡлан ситендә туҡтап, өс мәртәбә йөрәк өҙгөс үкереү менән яуап бирҙе. Буяндың был өҙәләнеүе: “Ғәфү-ү!.. Ғәфү-ү!.. Ғәфү-ү!..” – тигән һымағыраҡ яңғыраны.

* * *

Иң ҡыйыны Волга аша сығыу булды. Даръя булып йәйелгән Оло Иҙелдең ағымы көслө, яры ғәләмәт алыҫ. Был мөһабәт йылға менән сағыштырғанда, Дон һыуҙары уйынсыҡ ҡына. Даръяның уртаһына етәрәк Буян үҙенең дыуамаллығына үкенә биреп тә ҡуйҙы. Әммә тәү төйәктең тартыу көсө барыбер өҫтөнөрәк – шик-шөбһәне ситкә ҡыуып, алға әйҙәй, тулҡын ярып йөҙөр өсөн быуындарға ҡеүәт өҫтәй.

Йән эйәһенең булмышына тәбиғәт тарафынан һалынған ерһерәү, тәү ватанға ынтылыу тойғоларын тыйып тотор көс бармы ни донъяла – бына, Оло Иҙелдең көнсығыш ярына ла тояҡ тейҙе. Һөҙәк ярға сығыу менән Буян, йылыныу маҡсатында, быҙау сағындағы кеүек уйнаҡлап алды ла, елә-саба юлын дауам итте. Тамам йылынып, кибенеп алғас иһә, атлауға күсте. Уның үҙе генә белгән эске һиҙемләүе юл осоноң яҡынлауын аңғарта ине, шуға күрә, был яғына үтә ҡабаланмаһаң да була.

Оло Иҙелдең көнсығыш ярындағы ерҙәр Буянға бөтөнләй икенсе донъя булып тойолдо. Ҡуйы, һутлы үләндәр менән ҡапланған уйпаттарынан, күҙ күреме ергә һуҙылған киң далаларынан, һирәк сауҡалыҡтар үҫкән ҡалҡыулыҡтарынан ниндәйҙер иркенлек бөркөлөп торғандай. Мең төрлө сәскәләре тараҡҡан хуш еҫтәре һуң? Үгеҙ бындай илерткес еҫтәрҙе тәүләп татый: үҙҙәре тәмле, үҙҙәре шундай ғәзиз һәм танһыҡ. Ә эсеп һыуһын ҡанмаҫ шишмәләре һуң? Уларҙың теште ҡамаштырырлыҡ һалҡынлыҡтары йөрәккә ял, тәнгә аңлатып булмаҫлыҡ сихәт булып тарала. Буяндың самалауы буйынса, был әле нәғеҙ дәү инәйҙең төйәге лә түгел, ә уның әйләнә-тирәһе генә. Йән эйәһенә тәү ватандың атрафы ғына ла шулай тәьҫир иткәс, һағарғының* быуындан-быуынға күсеү ҡөҙрәтенә эйә булған арбау көсөн яҡынса тойомларға ғына була.

* * *

Урал тауҙарының төньяҡтан ҡиблаға армыт-армыт булып һуҙылған ҡыраздарын артылып, бормаланып аҡҡан йылға ярында ятҡан бер ауылға килеп еткәндә, йәй уртаһы ине. Тоҫмал буйынса, дәү инәйҙең төйәге ошо булырға тейеш – генетик хәтер шуны иҫкәртә. Эйе, нәғеҙ шул ауыл! Уның көнбайышында ҡуйы урман менән ҡапланған һәм күкһел һыҙат булып күккә олғашып торған тауҙар ҙа, көнсығыш тарафындағы ярым яланғас түбәләстәр ҙә Буяндың аңындағы генетик мәғлүмәт менән тулыһынса тап килә.

Үгеҙ башта ауыл тирәһендәге ер-һыуҙы ҡыҙырҙы, туя алмаҫтай булып тупраҡты еҫкәне. Быны менән генә мөрхәтһенмәйенсә, үкерә-үкерә алғы тояҡтары менән ерҙе сапсыны, юлында осраған ағас олондарын һөҙҙө. Әйтерһең, ул тупраҡ ҡатламынан дәү инәһенең уйнаҡлап йөрөгән быҙау сағын ҡаҙып сығарырға теләй һәм, әсе ысынбарлыҡ сараһыҙлығынан йәне үртәлеп, кемдәндер үс алырға итә ине.

Бер нисә көн тирә-йүнде ҡыҙырып, ерһеүе баҫыла төшкән Буян ауылға яҡынлашты. Бына йылға ярындағы мал һарайы. Унан таралған мең төрлө еҫтәрҙең береһе уның биш мөсәл элек дәү инәй йәшәгән торлаҡ икәнен аңғарта. Туҡта, ә

*Һағарғы – төп йорт.*

нишләп ул ярым емерек хәлдә? Ниңә унда мал-тыуар күренмәй? Үгеҙҙең тойомлауы буйынса, мал һарайының ташландыҡ хәлдә тороуына байтаҡ ваҡыт үткән. Ә былары кемдәр?.. Ике ир заты һарайҙың түбәһен аҡтарып маташа түгелме? Эйе, ана, береһе шифер аҫтына түшәлгән таҡталарҙы ҡуптарып аҫҡа ташлай, икенсеһе уларҙы егеүле арбаға тейәй. “Дә-ә, бында эштәр шулайыраҡ икән… – тип уйланы көпә-көндөҙ элекке колхозмы, совхозмы милкенә айыу майы һөртөүселәрҙе күҙәтеп торған Буян. – Ҡалай булһа ла, һис килешкән эш түгел инде…”

Үгеҙҙе тәүҙә кешекәйҙәрҙең өҫтә торғаны шәйләп алды. Ул һурырға тип уҡталған таҡтаһы өҫтөнә ултырҙы ла, Буян яғына ымлап:

– Был ниндәй ят мал? – тип һораны.

Аҫтағыһы, үгеҙ тарафына боролоп ҡарап:

– Әллә. Күрше ауыл көтөүенән айырылып, бында килеп сыҡманымы икән? – тип һорауға һорау менән яуап бирҙе.

– Ай-һай! Улай булһа, фәлән кеше юғалған малын эҙләй, тигән хәбәр ишетелер ине.

– Әтеү ҡайҙан?.. Күктән төшмәгәндер бит?

– Таптың һүҙ, – тине өҫтәге ир. – Бирәм тигән ҡолона – сығарып ҡуйыр юлына. Төшөндөңмө?

– Урыҫ әйтмешләй: “Понял, не дурак”.

– Шулай булғас! Таҡта ҡайғыһы төштән кире. – Өҫтәге кешекәй ҡыйыҡ башынан һикереп төштө. – Бынан күҙ яҙҙырмайбыҙ! Тереләй ауырлығы өс центнерҙан ашыу күренә ҡәһәр төшкөрҙөң…

Ошо урында әңгәмәне ишетеп торған Буян ҡаты итеп башын сайҡап ҡуйҙы. Был дәһшәтле хәрәкәт уның хәбәр айышына төшөнөүен белдерә ине. Мал-тыуарҙа тыумыштан полиглотлыҡ һәләте бар, тип юҡҡа әйтмәйҙәр, ахырыһы. Әлбиттә, тулы мәғәнәһендә полиглот түгел – был билдәләмә уларҙың ниндәйҙер ғиллә менән донъялағы һәр бер телде аңғарыуына ҡағыла. Айырма тик шунда: хайуандар һөйләшә генә белмәй.

Ҡыҙыҡ, әгәр теле булһа, Буян теге әҙәмдәргә ни әйтер ине икән? Йәнә, уның баш сайҡауын нисек аңларға? Үгеҙҙең был ишараһы: “Ҡуйығыҙ, юҡ менән булышмағыҙ!” – тигәнде белдерҙеме? Ә, бәлки, аптырау ғәләмәтелер. Был хәрәкәттең, шулай уҡ, ғәйрәт күрһәтеү булыуы ла ихтимал.

Нисек кенә булмаһын, бынан һуң Буян теге икәүҙең үҙҙәренә лә, һүҙҙәренә лә башҡаса иғтибар итеп тормаҫтан, әкрен генә ҡуҙғалып ауыл урамына ыңғайланы. Уның бөтә килеш-килбәтенән көс-ғәйрәт, үҙ-үҙенең дәрәжәһен белеү ғәләмәттәре бөркөлөп торғандай ине.

Бына ауыл урамы. Биш мөсәлдән һуң уны тыйып тотҡоһоҙ көс менән үҙенә тартҡан тәү төйәк ошо инде! Бында Буяндың дәү инәһенең, уның ата-инәләренең тояҡ эҙҙәре ҡалған, йәнде илерткес ғәзиз еҫтәре һеңгән. Ҡайһы бер кешеләр дәү инәйҙең быҙау, тана саҡтарын хәтерләйҙәрҙер әле. Хатта, дәү инәйгә оҡшатып, уны сырамыталарҙыр.

Ана, йылғаға төшкән тыҡрыҡтағы йәшел үләндә дүрт-биш ир ултыра. Алдарында буш шешәләр, пластик һауыттарҙағы һыра. “Бында ла шул икән,– тип уйланы алдарындағы һыйыр һыҡраһына оҡшаған эсемлеккә мөкиббән китеп, үҙенә хатта ҡарап та ҡуймаған табындаштар эргәһенән үтеп барған үгеҙ. – Был әҙәмдәр мине түгел, үҙҙәренең малын танымайҙыр әле…”

Ана, бер өй алдында ике ҡатын һөйләшеп тора. Тик улар ҙа урамдан үтеп барған Буянға һис бер иғтибар бирмәне. Хәйер, уларҙың битарафлығы аңлашыла – үҙ хәстәрҙәре баштарынан ашҡанға оҡшай. Ҡана, ҡолаҡ һалайыҡ әле хәбәрҙәренә:

– Малдарыбыҙ бөгөн дә аҙып-туҙып йөрөр микән? Эй, Хоҙайым, ниндәй заман был – көтөүсе лә табып булмай бит!

– Ниңә, кемдең сираты һуң бөгөн? Ғәзим түгелме?
– Шул инде, шул! Ана, тыҡрыҡта шешәләштәре менән баш йүнәтә.
– Бәй, барып әйтергә кәрәк…
– Әйттем. Бер ҡолағынан инә, икенсеһенән сыға. “Көтөү ҡайҙа китһен, йөрөй инде өйрәнгән урынында, хәҙер барырмын”, – тип әрепләшә. Ишшу һүгенә, хәсис!
– Ҡуй инде. Һин көтөүсе һөйләйһең. Мин кисә тауыҡ салырлыҡ ир заты таба алманым.
– Шунан ҡалайттың?
– Ҡалайтайым! Тоттом да бисмиллалап үҙем башын өҙә саптым.
– Әстәғәфирулла! Заман ахырылыр был.
– Тәүбә, тәүбә!..
Ни хаҡында һүҙ барғанына төшөнһә лә, кешеләрҙең аһ-зары, ҡайғы-хәсрәте мал-тыуарға ҡағылмай – уларҙың был донъяла үҙ хәстәре, үҙ тәғәйенләнеше. Һәр ҡайһыһының ерҙә билдәләнгән юлы, Аллаһы Тәғәлә тарафынан тәҡдир ителгән мөхите. Бик теләгән хәлдә лә, бер-береһенең яҙмышын үҙгәртергә, ауыр саҡта ярҙам итешергә ҡөҙрәттәре юҡ. Әҙәми зат менән хайуандарға бары тик һыйынышып, бер-береһенә терәк булып йәшәргә яҙған.
Сираттағы тыҡрыҡтан ҡуйы әрәмәлек ҡаплаған йылға тарафына ыңғайлаған Буян да ауыл урамындағы хәбәрҙәрҙе шунда уҡ онотто. Әллә ишетте уларҙы, әллә юҡ. Бер уйлаһаң, ни кәрәге бар уларҙың? Үҙҙәре булдырған бәләнән үҙҙәре арынһын. Ауыл халҡы уға иғтибар итмәһә, Буян да уларҙы күҙенә элмәйәсәк. Бик кәрәктәре бар ине! Ана, тирә-яҡта ниндәй хозурлыҡ! Ирәүәндә рәхәтлән, тәү төйәктең һулап туйғыһыҙ һауаһын, дәү инәйҙең тояҡ эҙҙәре ҡалған тупраҡты еҫкәп ләззәтлән!
Йылға аръяғындағы туғайҙа тырым-тырағай йөрөгән ауыл көтөүе күренә. Һыйырҙарҙың ҡайһы берҙәре ысығы ла кибеп өлгөрмәгән үләнде утлай, бәғзеләре айырым төркөмдәргә бүленеп һирәк сауҡалыҡтан торған урман араһына инеп бара. Көтөүҙең бер яҡ ситендә, ҡыҙыл ала төҫө менән башҡаларҙан айырылып, бер тана йөрөй. Уны күргәс, Буян, моронон өҫкә күтәреп, бер килке һауа еҫкәп торҙо. Һуңынан ҡаты итеп башын сайҡап ҡуйҙы ла тәүәккәл төҫ менән Алаҡайға табан йүнәлде.
...Үгеҙ ауыл халҡы тураһында: “Бик кәрәктәре бар ине”, – тип уйлаһа ла, бәғзе бер кешеләр уның үҙе хаҡында башҡасараҡ фекерҙә булып сыҡты. Дәлилме? Рәхим итегеҙ: ана, бер-береһенә эҫенеп өлгөргән Буян менән Алаҡай төйәкләгән аҡлан ситенә еңел машина килеп туҡтаны. Унан төшкән өс ирекәй, ишектәрен шарт-шорт ябып, бер аҙ лабыр-лобор һөйләшеп алғандан һуң, туп-тура үгеҙ менән танаға ҡарай атланы. Береһенең ҡулында – мылтыҡ.
Шикле тауыштарҙан һиҫкәнгән Буян, башын күтәреп, үҙҙәренә табан килеүселәргә текләне. Кешекәйҙәрҙең икеһен таныны ул – бая һарай түбәһенең таҡталарын ҡуптарыусылар. Береһе, мылтыҡ тотҡаны, – ят әҙәм. Ни кәрәк уларға?
Ниндәйҙер хәүеф һиҙгән Буян, көтөлмәгән етеҙлек күрһәтеп, Алаҡай эргәһенә килде һәм, уны үҙенең кәүҙәһе менән ышыҡлап, килеүселәргә табан боролдо. Оҙон һәм мажаралы сәйәхәт уны һаҡлыҡҡа өйрәткәйне – барыһына әҙер булырға кәрәк, был әҙәмдәрҙең ниәттәрен кем белә!
Һәр бер януарҙың әйләнә-тирәһендә улар үҙҙәре генә тоҫмаллаған хәүефһеҙлек сиге була. Әгәр икенсе бер йән эйәһе әлеге сикте уҙһа, ул ҡурҡыныс тыуҙырыусыға әүерелә. Ә инде баяғы сик боҙоу януарҙарҙың парланышып, туй яһаған мәленә тура килһә, улар үҙҙәре дәһшәт сығанағы булып китә. Ундай саҡта иркәк, үҙенең һыңарын ҡыҙғанып, йән аямай һөжүмгә күсәсәк. Тик уны хәүефһеҙлек сиген күптән үткән бынау аңра бәндәләргә нисек аңлатаһың?!.

Үгеҙҙең һөжүм итерен һис көтмәгән төркөм тәүге мәлдә ҡурҡыуҙан баҫҡан урынында ҡатып ҡалды. Бер аҙҙан һуштарын йыйып өлгөргән ике әҙәм ике яҡ-ҡа ҡасты, урталағыһы, мылтығына ышанып, урынында ҡалды. Ул, албырғауҙан йүнләп тоҫҡап та өлгөрмәйенсә, тәтегә баҫты. Шартлау артынса Буян ниҙеңдер маңлайына тейеп ҡаҡлығыуын, елкә буйын көйҙөрөп үтеүен тойҙо. Мейеһе шаңҡыуҙан, ауыртыуҙан оторо ярһыған үгеҙ, елеп килгән ыңғайға теге бәндәне мөгөҙөнә элеп, мылтығы-уты менән юғарыға сойорғотто…

Ул кешекәй менән ни булды, тиһегеҙме? Ихтимал, уның еңел табыш эҙләгән гонаһлы йәне шул ерҙә күккә олғашҡандыр. Ә, бәлки, йәрәхәт һәм ҡурҡыу менән генә ҡотолғандыр. Ни булһа ла, алда әйткәнебеҙсә, кешеләрҙең аһ-зары ла, ҡайғы-хәсрәте лә мал-тыуарға ҡағылмай. Әйҙә, үҙҙәре булдырған бәлә шау-ҡымын үҙҙәре татыһын. Ә Буян, һис шикһеҙ, китә был ерҙән. Үҙ артынан Ала-ҡайҙы эйәртеп, күргән-кисергәндәренән шаңҡып, ҡанһырап, ҡото ҡалмаған тәү төйәкте мәңгелеккә ташлап китә…

* * *

Полтава ере көҙ һулышынан һарыға һабышып, моңһоу тынлыҡҡа сумған көндәрҙең береһендә Иван Царинныйҙың сираттағы өйәнәге ҡуҙғалды. Уның был үҙе теләп алған сире Буян юғалғандан һуң йышая төштө. Сүп өҫтөнә сүмәлә тигәндәй, үгеҙ ғәйеп булғандан аҙаҡ уның хужалығына бер-бер артлы ҡаза ябырылды: йәй уртаһында елене еткән танаһы юҡ булды, яңыраҡ күҙ терәп торған һыйыры ятып үлде. Ҡайҙалыр бойҙай ашап, эсе ташҡан һәүкәште ҡотҡара алманылар. Әйтерһең, Царинныйҙарҙың нигеҙендәге мал ҡото Буян менән бергә уларҙы ташлап ҡасты. Был да хужаның горилкала йыуаныс табырға йышыраҡ ынтылыу сәбәптәренең береһелер, күрәһең.

Әлеге өйәнәктәрҙең көн тәртибендә Иван Царинныйҙың мажара эҙләп хутор урамын ҡыҙырыуы төп урынды биләгәнен әйткәйнек инде. Бындай ваҡытта халыҡтың иҫерек менән бәйләнмәүҙе хуп күреп ҡапҡа тығырға ғәҙәтләнгәнен дә тасуир иткәйнек. Уны Иван Царинный үҙенсә баһалай ине: боҫалар, тимәк, ҡурҡалар.

Бына бөгөн дә ул, нәүбәттәге енләнеү сәйәхәтенә юлланырға уйлап: “Йә, кемегеҙ Царинныйға ҡаршы?” – тип ҡысҡырҙы ла һелкетә тартып ҡапҡаһын асып ебәрҙе. Һәм… өнө тығылып, баҫҡан урынында ҡатып ҡалды: өй алдында Буян менән Алаҡай тора ине. Я, Раббы, бисәһе иҫкәрткән аҡ илереккә ул да тарынымы? Буян ҡиәфәтенә ингән шайтан бит был! Етмәһә, күҙенә икәү булып күренә!.. Күҙ асып йомған арала шыбыр тиргә батыуҙан айный төшкән Иван ҡапҡаны яба һалды ла: “Свят! Свят!” – тип суҡына-суҡына өйөнә инеп бикләнде.

Дөрөҫ булһа, был ваҡиғанан һуң Царинный эсеүҙе ташлаған, тиҙәр. Әлеге шул хутор халҡы һөйләй инде. Берәүҙәре, имеш, Иван: “Үгеҙем табылһа, горилкаға яҡын да юламаҫ инем”,– тигәнерәк ант биргән, тип раҫлай. Икенселәре: “Царинный Буяндың ысын икәнлегенә һаман ышанмай, уны шайтан тип уйлай, шуға ҡурҡып эсмәй”, – тип иҫбатлай. Йәнәһе, психикаһында ниндәйҙер үҙгәреш булған. Миңә ҡалһа, Иван Царинный тураһындағы имеш-мимештәргә ҡарағанда, уның эсеүҙе ташлауы мөһимерәк. Ә халыҡмы? Ул ни ҡайҙа ла бер – ғәйбәтһеҙ йәшәй алмай.

Ғәҙеллек хаҡына хуторҙағы хәбәрҙәрҙең өсөнсөһөн дә әйтмәй булмай. Уға ышанһаң, Иван Царинныйҙың тамағы шулай ҙа юҡ-юҡта горилка көҫәп ҡылҡылдап ҡуя, ләкин ундай саҡта бисәһе ауыҙынан “Буян…” тигән бер генә һүҙҙе ишетеп, баяғы ҡымырйыуы шунда уҡ юҡҡа сыға, имеш.



Әлнисә
АЛДЫРХАНОВА

# БАТЫРЛЫҠ ТӘҢКӘҺЕ

## НОВЕЛЛА

Тынлыҡ... Өшәндергес шом өҫтәп, стенала эленеп торған сәғәт туҡылдай ҙа туҡылдай. Үлем түшәгендә ятҡан Рәхимйәндең бына-бына осоп сығырға әҙер йәнен өҙгөләп, "туҡ-туҡ, башҡа йәшәү юҡ-юҡ... юҡ-юҡ" тип үсекләп, маҙаһына тейә. "Ҡайҙа ҡабаланаһың шулай? Туҡтап торһаңсы бер аҙ... Эйе, китер ваҡытым етте. Тик Хоҙай Тәғәлә мине үҙ янына алырға ашыҡмай, күрәһең, ниндәйҙер сәбәбе бар. Яҡты донъяны ташлап китеүҙәре ауыр, етмәһә, һин һаман тыҡылдап йәнде ашайһың..." Түшәктә ятҡан ҡарт сараһыҙҙан күҙен йомдо.

Һикереп тороп ҡына алып ырғытыр ине лә, хәленән килмәй шул. Аяҡ-ҡулдары шыҡырайып ҡатҡайны, бөгөн иһә телдән яҙҙырҙы. Тәбиғәт ҡануны ҡаты – ҡартайһа, ныҡ имәндең дә тамырын ҡоротоп, ауҙара һуға. Ҡарт имәндәй һалдатты ла йыҡты. Ҡасан ғына әле мутлығы, шаянлығы менән дан тотҡан, ябайлығы менән һоҡландырып, ауылдаштарының ихтирамын яулаған ветеран ауыл урамынан ҡәнәғәт ҡиәфәттә уҙа ине. Йәшенә лә, ҡартына ла аҙмы-күпме иғтибар бүлеп, ярашлы мәрәкә һүҙен табып көлдөрөүе – үҙе бер кинәнес. Уң ҡулындағы һуғыш яралары тәҡәт бирмәгәнлектән, артыҡ көс етмәҫтәй эшкә тығылманы. Бәхетенә күрә, үҙенә төшкән эшен емереп эшләгән, донъяһын ялт иттереп көткән егәрле Хәфизәһе бар. Бер-бер артлы донъяға килгән туғыҙ баланы аяҡҡа баҫтырыу мәшәҡәте күбеһенсә уның елкәһенә төштө. Таң һарыһынан тороп һыйырын һауа, һөтөн айыртып, ҡашығаяҡтарын йыуа, йәһәт кенә ҡош-ҡортона тамаҡ һала... Аяҡ араһында уралған бесәй, этен дә буш ҡалдырмай. Шунан кешенән алда еләк-емешкә бара, кискә тиклем өс-дүрт күнәк йыйып, ҡалаға алып барып һата ла аҡсаһына аҙыҡ йөкмәп ҡайта. Көҙ мәлендә балан аҡсаһына балаларына кейем-һалым, ҡағыҙ-дәфтәр ала. Күрше-тирәләгеләр "Ен менән бер, ай-һай, хәтәр ҡатының" тиһәләр, Рәхимйән шаярыу ҡатыш "татар барҙа хәтәр бар" тип кенә ҡуя ине элгәре. Ҡай саҡ шаярыуҙарын йырға һалып, йә булмаһа таҡмаҡлап та әйтеп ебәрә. Йөрәк ярһыуҙарын баҫа тип, ҡаты сәй эсергә ярата, сәй ағара башлаһа, таҡмағы ла әҙер:

---

*Әлнисә Алдырханова — Сибай төбәк яҙыусылар ойошмаһының әүҙем ағзаһы. Ҡала интернат-гимназияһында уҡытыусы булып эшләй. Байтаҡ хикәйәләр, повестар һәм методик әсбаптарға, ҡулланмаларға ингән сценарийҙар авторы.*

*Һалаһың һин семетеп –*
*Сығайым нисек итеп.*
*Һалһаң ине бер ус –*
*Сығармын мин нибус...*

Йә иһә яйы сыҡҡан һайын балаларына һуғыш хәтирәләрен һөйләй ҙә, айтдваға баҫып, шартына килтереп йырлап та ала. Иренмәйенсә миҙалдар, ордены тағылған костюмын кейеп, батырлыҡтарын һөйләй ҙә, ордены янында ҡаҙалған ябай түңәрәк тәңкәгә күрһәтеп: "Быныһы иң ҙур ҡаһарманлыҡ өсөн бирелгән батырлыҡ тәңкәһе", – тип көрһөнә ине. "Ни өсөн тәңкә, ниңә тәңкәне орден тиһең?!" – тигән һорауға: "Изгелек эшлә лә һыуға һал, халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер, тигән боронғолар, һуғышта күрһәткән изгелек-батырлыҡты халыҡ түгел, балыҡ күрҙе, ә, бәлки, халыҡ та берәй заман күрер, белер әле", – тип һүҙҙе икенсегә бора ла ҡуя.

Маһайырға яратманы. Ауылдаштары араһында тормошо, байлығы менән дан тотмаһа ла, бөтә кешеләр менән дә уртаҡ тел табып, кәңәш-төңәшкә әүәҫлеген маҡтанылар. Һуғышта Чапайҙан беҙ ҙә ҡалышманыҡ, тип олоғая килә чапайса мыйыҡ та үҫтереп ебәргәйне. Бейә һатып алып, йылҡы малы үрсетте, ғүмер-ғүмергә ат тоғро юлдашына әйләнде. Кәртәһе мал-тыуар, өй эсе шат тауышлы бала-саға менән лыҡын тулы, кеше араһында һис кәм-хур булмай, донъяһын һәүетемсә генә алып барҙы. Һуғыш яралары йөҙәтһә лә, етенсе тиҫтәне тултырып ҡуйҙы әле бына Рәхимйән.

Бөгөн килеп мыҡты кәүҙәле, йор һүҙле, шаян өлкән сержант Алдархановты танырлыҡ та түгел. Тулҡын-тулҡын сәсте һылашып яҫҡан сал сәс алыштырған, ҡыйыу ҡараштар ҙа бөгөн үҙгәргән. Әйтерһең дә, күҙҙәр түгел, ә төпһөҙ уйҙар диңгеҙе, эсендә ниндәй сер йәшеренгәнлеген тоҫмаллауы ла ҡыйын. Башҡа көндәрҙә, һыр бирмәйсә, шаян, төртмә һүҙҙәр һөйләп ята ине, әле, һөйләшә алмағас, түбәгә төбәлгән дә өнһөҙ ҡалған. Кәйеф тә юғыраҡ, тамағына ла аҙыҡ бармай. Хәфизәһе янынан китмәй, йә тегеһен, йә быныһын ираштырып, янында өлтөрәп тора. Эсенә йылы инһен типтер инде, күбеһенсә һурпа әҙерләй. Бабайының, башҡа нәмә ашамаһа ла, борос һалып, ҡоротлап һурпа эсергә әүәҫ икәнлегенә күнегеп бөткән.

Һай, ғүмер тигәнең... Һуғыш яралары менән Өфө госпиталенә эләгеп, уңғанлығы, өлгөрлөгө менән карауатта хәрәкәтһеҙ ятҡан һәммә яугирҙарҙың һушын алғайны шул йәш шәфҡәт туташы Хәфизә. Ә йәш ҡыҙ Рәхимйәнде һайланы... Бөгөн килеп шул уҡ мәл ҡабатлана кеүек: сирле Рәхимйән карауатта, Хәфизә уның янында. Икенән үргән ҡуйы толомдарын килешле генә төйөп ҡуйған, ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, тығыҙ тәнле, тулы ап-аҡ йөҙлө һылыуҡай ҙа үҙгәргән: башына яулыҡ сөйгән ҡаҡса ғына әбекәй. Ҡаҙан янында уға ҡоротло һурпа әҙерләгән Хәфизәһенә берсә һоҡланып, берсә үртәнеп уйға тала. Йөҙөндә көндән-көн һырҙар күбәйеүенә иғтибар итте бабай. Йәш сағында нисек теремек булһа, бөгөн дә ихлас, хатта күпме хәсрәт-ҡайғы еле ҡағылһа ла, һығылмай-бөгөлмәй ныҡлығын, сыҙамлығын һаҡлай белә уның ҡатыны.

...Йөрәк түренән моңло ғына, талғын көй ағыла. Һеңлеһе Мәймүнә ағаһының баш осонда тәсбих тартып, доға ҡылды, ясин сыҡты. Әсәһе Сәхибъямал ауылда аяҡ-ҡулы сығыуҙан, имгәнеүҙән, күҙенеүҙән яфаланыусыларҙы доғалар менән өшкөрөп, төрлө имләүҙәр менән халыҡты баға ине. Шул һәләте кинйә ҡыҙына күскән, әсәһен арттырып сүрә-доғаларҙы көйләп ултыра.

Ағаһының нуры юғалып, төпкә батҡан күҙҙәренә ҡарап, Мәймүнәнең күңеле тулышты, уның һирәгәйеп ҡалған сәстәренән һыйпаны:

– И-и-и, минең һалдат ағайымды! Һалдат ағайым шәп, хәҙер еңгәм әҙерләгән һурпаны эсеп ала ла яратҡан йырын һуҙып ебәрә:

*Тауҙар һәм үҙәндәр буйлап,*
*Дивизия атланы.*
*Алыр өсөн Приморьены,*
*Еңер өсөн аҡтарҙы.*

Шулаймы әле, ағай?

Һеңлеһенең балаларса йыуатыуына иреп, Рәхимйән теләр-теләмәҫ кенә йылмайып ҡуйҙы.

Барыһын да һиҫкәндереп, ишек шаҡыныулар һәм, яуап та көтмәйенсә, хәрби кейемдә ике кеше килеп инде. Олораҡ чинлыһы хәрби комиссариаттан килеүен һәм Алдарханов Рәхимйән Мәғәфүр улын күрергә теләүен белдерҙе. Ҡыҙыҡһынған кешенең ни хәлдә ятыуын күргәс, туранан-тура йомошона күсте. 1943 йылда күрһәткән батырлыҡтары өсөн биреләсәк икенсе ордены архивта табыла, һәм шуны тапшырырға килгән икән. Награданы күкрәгенә ҡаҙай, ҡотлап ҡулын һуҙа, Рәхимйән ҡуҙғалырға теләй, тик... булдыра алмай. Быны һиҙгән хәрби кеше урыҫсалап ғәфү үтенеп, ветерандың ике сикәһенән үбә. Күңеленә алыпмылыр, әллә ашығыуҙанмы, көтөлмәгән ҡунаҡтар Хәфизә тәҡдим иткән сәйгә лә туҡтап тормайса, хушлашып сығып китә...

Рәхимйән берсә сөйҙә эленгән костюмындағы ордены янындағы тәңкәгә, берсә әле генә таҡылған орденға ҡараны. Күҙҙәренән ике бөртөк йәше сикәһе буйлап тәгәрәп китте. Үкенесме, әллә шатлыҡ йәшеме?..

Ҡарттың күҙҙәре томаланды.

...Күҙ алдында йәйрәп ятҡан йылға. Һалдаттарға күктән дошман самолеты ут яуҙыра. Ана, алда ғына бер һалдат һыу өҫтөнә ҡалҡып сыҡты ла эсендәге бөтә ағзалары тирә-йүнгә һибелде... Ҡот осҡос мәхшәр... Өҙләкһеҙ ут яуа. Һалдаттар һал аҫтына сума... Дошман уты яуа башлауға улар, бүрәнәгә йәбешеп, кәүҙәһен йәнә һыуға йәшерә. Тирә-йүнгә һибелгән снаряд ярсыҡтары бер һалдаттың ҡулына эләгә, йәнһеҙ кәүҙә үҙенән-үҙе һыу төбөнә тартыла. Ә һалдаттарҙа бер уй: яр ситенә сығып, йылға янындағы урманға тиҙерәк барырға һәм йөкмәтелгән бурысты еренә еткереп үтәргә.

Һыуҙан ҡалҡып сығыуға йәнә утлы ғәрәсәт. Рәхимйән дә ошо мәл үлем уты менән көрәшә. Хәлһеҙ ҡулдары менән бүрәнәгә йәбешә, әммә бармаҡтары йомшаҡ бүрәнәнән шыуа ла төшә, шыуа ла төшә. Көс-хәлгә яңынан өҫкә үрмәләгән Рәхимйән башы менән бүрәнәгә ҡағылды ла... уның бүрәнә түгел, кеше мәйете икәнлеген аңғарып ҡалды. Командирҙары... Бата-сума уның түш кеҫәһенән документтарын ала һалды ла, аҡтыҡ көсөн йыйып, ярға табан ынтылды. Алда – мәйеттәр, һыу – ҡып-ҡыҙыл. Яуҙаш һалдаттарының ҡанында йөҙөүен күреп, Рәхимйән һыу аҫтына сумды. Балыҡтар эркеүе етеҙ генә йөҙә, ә Рәхимйән уларҙан ҡалышмаҫҡа тырыша, әйтерһең дә, балыҡтар уға юл күрһәтә. Командир бойороғон бер нигә ҡарамаҫтан үтәргә кәрәк. Киң яурынлы, ныҡыш батыр, ҡулдары яраланһа ла, алға йөҙә...

Ҡарт яугир бер нөктәгә төбәлгән дә тынып ҡалған. Сәғәт һаман да "туҡ-туҡ, өҫтә ялҡын ут-ут, башҡа йәшәү юҡ-юҡ... Ю-юҡ..." тип мейеһен сүкей, ә хәтирәләге ҡанлы һыу уны тәрәнгә тарта. Эргәлә уйнаҡлаған балыҡтарҙың береһе йәшле күҙҙәрен мөлдөрәтеп ҡараны: "Әйҙә, минән ҡалма..." Өйрөлтмәк ҡарт һалдатты упҡынға һөйрәй ҙә һөйрәй. Тора-бара тулҡындар менән көрәшкән Рәхимйән, хәле бөтөп, балыҡтың тәңкәләренә күмелде...



Гөлдәр
ӘХМӘҘИШИНА

# ЯҢҒЫҘ ҠАЙЫН

## хикәйә

– Ғәлимде айыу туҡмап ташлаған, тисе. Әле ҡайнағаң шунда китте. – Мәлифә инәй картуф баҡсаһында ҡый утап йөрөгән күршеһенә, ҡойма аша ынтылып, хәбәр ҡушты.

– Эй, Хоҙайым! Именме икән һуң? – Күрше ҡатын эшен ташлап, турайып баҫты ла өмөтлө ҡарашын Мәлифә инәйгә төбәне. – Сәйҙәһенең дә көнө еткән ине бит, бөгөнмө-иртәнме, тип торалар ине.

– Януар туҡмаһын да, имен ерен ҡалдыра тиһеңме. Алыр ере юҡ, ти шул, бахырҙың,– инәйҙең йәш ирҙе йәлләп тауышы ҡалтырап китте. – Теге инә айыуҙың эшелер. Үткән яҙҙан алып күпме һыйырҙың башына етте, нисәмә ҡолондо имгәтте... Юҡ, һаман ҡуймай.

– Ике балаһының үсен ала инде. Анау һунарсыларҙы әйтәм, нишләп кенә шуның балаларына тейәһе булдылар икән,– күрше ҡатын уфтанып ҡуйҙы.

– Хайуандарҙы бейергә-йырларға өйрәткән ергә тапшырып, күп итеп аҡса алғандар, ти улар. – Мәлифә инәй ике баҡса араһындағы бәләкәй ҡапҡаны асып, күршеһе янына үтте.

– Кит, йүнһеҙҙәр! Шулар арҡаһында ауыл халҡы күпме ҡаза күрә!

– Ҡуй инде, ҡуй! Ғәлим генә әрәм булып ҡуймаһын инде, йәш бит. Анау һунарсыларын да әйтер инем! Көстәре еткән бала айыуҙарға. Шәп булғас, инә айыуҙы атып алһындар ине. Беҙҙең ҡарт йәшерәк сағында тиңдәштәре менән, һәндерә яһап ятып, айыуға һунар итә торғайнылар,– тип көйәләнде әбекәй…

***

Ғәлим һауыҡманы. Ҡыҙының донъяға килеүен дә белмәй, егерме йәшлек кенә Сәйҙәһен яңғыҙ ҡалдырып, теге донъяға китеп барҙы. Йәш ҡатын ер-һыу иланы. Янып барған йөрәген баҫыу өсөн, сабыйын күтәреп, көн дә тиерлек Ғәлиме менән осрашып-табышҡан яңғыҙ ҡайын янына килде.

---

*Гөлдәр Әхмәҙишина – Баймаҡ районы Сосновка ауылында йәшәй һәм башланғыс кластар уҡытыусыһы булып эшләй. 2010 йылда Сибай ҡалаһында уҙғарылған республика йәш прозаиктар семинарында ҡатнашты.*

Ғәлименең үлеменә сәбәпсе булған теге инә айыуҙы һунарсылар киләһе йыл, ҡырпаҡ ҡар яуғас, атып йыҡтылар. Мәлифә инәйҙәрҙең бабайы һәм улдары Азамат айыуҙың үле кәүҙәһен ишек алдына һөйрәп килтерҙе. Халыҡ йыйылған ергә, күңеле тантана итһендер типтер инде, Сәйҙә лә килде.

– Ғәлимде лә шул туҡманы инде ул... – Ҡартлас ҡарашын Сәйҙәгә күсерҙе. Ҡара шәльяулыҡ бөркәнгән йәш ҡатын тамағына төйөлгән әсе төйөрҙө саҡ йотоп ебәрҙе. Шунан, берәүгә лә күтәрелеп ҡарамай, ихатанан сығып йүгерҙе.

Кискеһен Сәйҙәнең өйөнә Азамат килеп инде. Түрбашта ҡатып торған ҡатындың аяғы аҫтына ҡатып та өлгөрмәгән айыу тиреһен йәйеп ебәрҙе.

– Сәйҙә, был тире һинең аяҡ аҫтыңда ятырға тейеш!

– Уф, еҫе! Тирегеҙҙе алып китә күрегеҙ! – Сәйҙә устарын йомарланы ла күҙҙәрен йомдо. Бер мәлгә юғалып ҡалған Азамат, бер ынтылыуҙа тирене ҡармап, сығыу яғына ыңғайланы. Унан, ҡапыл боролоп, Сәйҙәгә ҡайырылып ҡараны ла бер һүҙ ҙә өндәшмәй сығып китте.

***

Оҙаҡ йылдар ситтә йөрөп, тыуған яҡтарын һағынып ҡайтҡан Азаматтың йөрәгенә инеп ултырырмын, тип башына ла килтермәгәйне Сәйҙә. Хистәренең сафлығын, уйҙарының эскерһеҙлеген, ниәтенең изгелеген аңлатырға әҙ тырышманы түгел, тырышты егет. Тик Сәйҙәнең генә йөрәге ете йоҙаҡ менән бикләнеп, асҡысы төпһөҙ ҡоҙоҡҡа ташланғайны. Азаматтың һәр һыҙатын Ғәлиме менән сағыштыра һәм бер генә лә оҡшаш яҡтарын таба алмай. Ғәлиме үткен ине, был – баҫалҡы. Ире йор һүҙле, шаян тәбиғәтле булһа, Азамат артыҡ һүҙ һөйләмәҫ. Ғәлименең күҙҙәре һәр ваҡыт көлөп торор ине, ә быныҡы – моңһоу.

Бер көндө Сәйҙәнең эш урыны медпунктҡа, юҡ йомошон бар итеп, Мәлифә әбей килеп инде:

– Сәйҙә, яңғыҙыңа донъя көтөүе ҡыйын бит. Нишләп хан ҡыҙындай һайланып ни... Азаматтың килмәгән ни ере бар? Инде йәше утыҙға етеп килгән бынамын тигән өрләктәй егет. Алтынайыңды ла үҙ күрә. Күпме шулай бәйләп ҡуйылған эттәй ҡапҡа төбөңдө тапатмаҡсыһың? Сыҡмаҫтай уйың бар икән, егеттең башын ҡаңғыртма. Юҡ, тип кәнкретнәһен әйт!

– Мәлифә инәй, мин уға күптән әйткәнмен... – Сәйҙә тауышын баҫа биребере ҡәйтһә лә, тимер сыңдары ишетелеп ҡалды. – Эҙләһен үҙенә тиңен... Ир ҡайғыһы юҡ миндә!

– Һай-һа-ай, хатта әллә кем булып, уны тиңһенмәй ултыраһыңмы? – Мәлифә әбей телен шартлатып, башын сайҡап ҡуйҙы. – Духтыр булғас та әллә...

– Йөрәккә... бойороп булмай! – Сәйҙә бүлтеү ирендәрен ҡымтыны.

– Йөрәк эшегеҙҙе белмәйем дә, аңламайым да... – Әбекәй, киң йәшел яулығын төҙәткеләгән ыңғайына, ҡулын һелтәне. – Ир менән ҡатын бергә йәшәп алып китһә, мөхәббәте аҙаҡтан үҙенән-үҙе килә ул. Бына мин әйтте тиерһең. Берүк бәхетеңде аша атлама. Азаматтай аҫыл ир бүтән осрамаҫ! – Әбейҙең ялп-йолп килеп, һөйләнә-һөйләнә медпункт тупһаһынан төшөп барғанын күҙәткән Сәйҙәгә ҡыйын булып китте. "Әллә ниңә ҡыҙҙы ла киттесе Мәлифә инәй..." – Ҡатын уфтанып ҡуйҙы.

Эйе, Азаматтан да иплерәк, аҡыллыраҡ ир-егетте белмәй Сәйҙә. Шулай ҙа... Азаматты өмөтләндерҙеме, ялған вәғәҙәләр бирҙеме ни? Яратмаған кешеһенә кейәүгә сығырға теләмәгәненә ғәйепләме ни ул? Ҡатын, тәҙрә быялаһына башын терәп, шым ғына үкһеп ебәрҙе. Оҙаҡ ҡына торҙо ҡатын шул көйө. Тышта ямғыр илай, эстә – Сәйҙә. Болоҡһоу, йонсоу көн менән йөҙгә-йөҙ ҡарашып торғас, ҡатын элгестәге кейеменә үрелде. "Артабан йәшәргә кәрәк!"

...Көҙ. Өшәндереп кенә ваҡ ямғыр һибәләй. Тышҡа сыҡҡан Сәйҙә һыуыҡҡа

еңелсә генә ҡалтыранып ҡуйҙы. Ҡыҫҡа пальтоһының төймәләрен ҡаптырып, ҡулсатырын яҙып ебәрҙе лә йәһәт кенә атлап балалар баҡсаһына йүнәлде.

***

Кемдер һаҡ ҡына тәҙрә сиртте. Уяулы-йоҡоло ятҡан Сәйҙә юрғанын ҡайырып ебәрҙе лә һикереп торҙо. Азаматмы? Тағы килгәнме? Был юлы ҡатыраҡ һөйләшергә тура килмәгәйе... Ул йән асыуы менән тәҙрә уйымынан әкрен генә иҫкән елгә бәүелә биребераҡ торған ҡорғандарҙы ҡайырып ебәрҙе. "Бәй..." Тәҙрә аша Азаматты түгел, арғы оста йәшәгән Йәмилдең ағарынған йөҙөн күрҙе лә... кинәт йыйына башланы. Тимәк, ҡатыны бәпәйгә ауырып киткән. Ваҡыты еткәйне шул. Бала табыу йортона илтергә кәрәк. Ә Алтынайҙы ҡалайтырға һуң? Сәйҙә сығып барған еренән кире боролоп инде, урынында тапанды. Әллә күтәреп кенә өләсәһенә индереп ҡалдырырғамы? Улай итһәң, район үҙәгенән ҡайтҡас, ямғырҙа өшөтөп йәнә инеп алырға кәрәк. Әсәһе олоғайған хәҙер. Ул ҡыҙының юрғанын ипләне. Бер сәғәт барһалар, бер сәғәт ҡайтһалар... Сәйҙә шым ғына артына боролдо, сөйҙә элеүле торған плащын эләктерҙе. Ишеккә ауыр йөҙәк һалған ҡатын өйҙөң тәҙрәләренә бер аҙ текләп торҙо ла ҡараңғылыҡҡа инеп юғалды.

...Буласаҡ әсәне бала табыу йортона ҡалдырып, дауахана урамы буйлап оҙаҡ та барманылар, еңел машина шып туҡтаны ла ҡуйҙы. Шофер егет уныһын, быныһын борғоланы, капотын асып соҡсоноп ҡараны, ләкин машина ҡуҙғалырға уйламаны ла. Аптырауға ҡалған егет, төн ҡараңғылығын йырып, яҡындағы ауылдан ярҙам һорарға китте лә сәғәттән ашыу ваҡыт үткәс кенә оло йәштәге ағайҙы эйәртеп килде. Ағайҙың ҡулынан “ауырыу” машиналар күп үткән, күрәһең, ун-ун биш минут үтеүгә „Калина“ға йән инде. Балаһын уйлап, йөрәген усына алып ултырған Сәйҙәнең күңеленә йылы йүгерҙе. Асфальттың соҡор-саҡырына йыйылған ямғыр һыуын тирә-яҡҡа сәсрәтеп, машина алға ынтылды…

***

Ҡалғанын Сәйҙә яҙа-йоҙа ғына хәтерләй. Таңға ҡарай ғына кире ауылға ҡайтыу... Көл-күмергә ҡалған йорто алдында быуынһыҙ булып ҡатып тороу... Ә балаһы? Алтынай?! Үҙ күҙҙәренә ышанманы Сәйҙә, ҡысҡырыр ине лә, тауышы юҡ... Ҡатын өйөнә ҡарай ташланды, шунда тәгәрәшеп, быҫҡып ятҡан торомбашҡа һөрлөгөп, ергә тәкмәсләне. Иҫенә килгәндә, Сәйҙә дауаханала ине. Сикәләре буйлап аҡҡан ҡайнар күҙ йәштәрен тыя алмай, табиптың сыҡҡанын сабырһыҙлыҡ менән көтә.

– Борсолмағыҙ, ҡыҙығыҙ аңына килде. Тик ҡул суҡтары ныҡ янған. Ә йөҙөнә бер ниндәй ҙә зыян килмәгән. Ирегеҙгә килгәндә, уның хәле мөшкөлөрәк, – тине ҡыҙы янынан сыҡҡан шәфҡәт туташы.

– Ирем түгел… Азамат ул, Азамат… – тип шыбырланы Сәйҙәнең ирендәре. Ҡыҙын ҡотҡарыусы Азамат!

...Төндә әсәһен эҙләп уянған Алтынай, ҡараңғы өйҙә илай-илай, берҙән-бер яҡтылыҡ биргән мейес янына бара. Мейес ауыҙын асып ут менән булаша. Күп тә үтмәй, өй эсен ут ялмап ала. Иптәштәре менән гармун тартып, урамдан үтеп барған Азамат, янғынды күреп, ишекте ҡайырып эскә ташлана. Иҫтән яҙған баланы һәрмәнеп йөрөп саҡ табып ала. Өҫтөндәге еүеш курткаһын һалып, баланы урай ҙа артынан ингән иптәшенә тоттора. Ә үҙе, ике бүлмәне бер итеп, Сәйҙәне эҙләй. Өйҙә Алтынай ғына икәнен белгән булһа, былай уҡ ҡазаға эләкмәҫ тә ине ул.

Ҡатын, урынынан ҡалҡынып, реанимация бүлегенең быяла тәҙрәһенән үрелеп ҡараны. Унда, ап-аҡ бинттарға сырмалып, Азамат ята ине...

***

Эңер. Аҙнаға һуҙылған аҡ яуын ни туҡтамай, ни ҡойма ямғырға әйләнмәй, ялҡытҡыс итеп яуа ла яуа. Әллә күктән, әллә ер аҫтынан ниндәйҙер мөңрәгән тауыш ҡолаҡҡа салынып ҡалған кеүек, ҡапыл өҙөлөп китә, ҡабаттан ялғана...

– Яңғыҙ ҡайын! Үҙең яңғыҙ булғанға минең дә яңғыҙ булыуымды көнһәйһеңме? Ғәлимем менән һине дуҫ иттек. Ғәлимһеҙ ҡалдым. Ҡыҙым яралғандан уҡ янына килеп эс серемде систем, ҡайғы-хәсрәтемде һөйләнем. Алтынайым хәҙер ни үле, ни тере түгел!

Елгә ике шәүлә лә берҙәй бәүелә. Ҡайын да, ҡатын да. Бәүелә-сайҡала, тотлоға-тонсоға һөйләй ҙә һөйләй бисара ҡатын.

– Ә Азаматтың ни ғәйебе бар? Барлыҡ хәсрәттәремдең башында һин тораһың түгелме? Ҡайын ҡайғылы, тигәндәре хаҡ, күрәһең. Ишет, яңғыҙ ҡайын, башҡаса янына килмәйем! Яңғыҙ булыу үҙеңә килешһен!

Илауҙан шешенеп, йөҙө ҡап-ҡара булып киткән Сәйҙә, башынан яулығын һыпыра тартып алды ла яй ғына атлап ауыл яғына ыңғайланы.

***

Азаматтың да, ҡыҙының да дауахананан сыҡҡандарына байтаҡ ваҡыт уҙҙы. Уларҙың сейләнеп торған яраларын эшкәрткән һайын йөрәгенә ҡан һауа. Ниңә генә шул төндө ҡыҙын әсәһенә алып барып ҡалдырманы? Һис юғы үҙе менән алырға ине. Хәҙер үкенеп терһәген тешләрҙәй була ла һуң...

Сәйҙә үҙен битәрләй-битәрләй Азаматтарҙың ҡапҡа төбөнә килеп еткәнен дә абайламаған. Бына ул әллә ҡайҙан күренеп торған бейек, кәрниздәре семәр менән нағышланған йорт. Ҡатын тупһала оҙаҡ ҡына тапанып торҙо ла эскә уҙҙы. Егет өйҙә бер үҙе генә ине. Инеүсегә күтәрелеп ҡараны ла гәзит-журнал аҡтарыуын дауам итте. Фажиғәнән һуң икәүҙән-икәү тәүгә ҡалыуҙары.

– Азамат, йәрәхәттәреңде ҡарап сығайым. – Сәйҙә ҡыҙыл тәре төшөрөлгән кескәй тимер сумаҙанын өҫтәлгә һалды.

– Сәйҙә, башҡаса килеп ыҙалама. Әсәйемә генә өйрәт тә ҡуй. – Азамат йөҙөн ситкә борҙо.

Сәйҙә, егеттең һүҙен ишетмәмешкә һалышып, ҡулын һабынлап йыуҙы ла көндә башҡарған процедураны башланы. Үҙенең йөрәге сығырҙай булып тибә.

– Килеп ыҙалама, тиһеңме? Мөмкин. Әгәр һин беҙгә йәшәргә килһәң... Туғандар, ауыл халҡы өйөбөҙҙө ипкә килтереп бирҙе.

Азамат бер аҙға ғына өнһөҙ ҡалды. Күрәһең, Сәйҙәнең тын алышынан, үҙен тотошонан уның ни әйтерен һиҙемләп йөрөгән.

– Йәлләйһеңме? – Азамат яһалма көлөп ебәрҙе, яңаҡтары тартышып китте. – Мин йәлләүгә мохтаж түгел. Һау сағымда әҙәмгә һанамағаныңды, хәҙер мин һиңә нимәгә кәрәк? Йөҙөм... кеше ҡарағыһыҙ... – Азаматтың тауышы ирекһеҙҙән дерелдәп китте.

Сәйҙә Азаматтың ала-сола булып ҡалған битен һаҡ ҡына усына алды ла күкрәгенә ҡыҫып, шым ғына илап ебәрҙе. Уның артынса, әллә тән яраһынан, әллә йөрәк әрнеүенән түҙә алмай, ир ҙә үкһене. Асыҡ тәҙрәнән ҡатын алыҫта, тау һыртында, елберҙәп ултырған яңғыҙ ҡайынды шәйләп ҡалды.

– Яңғыҙлыҡ тере йәнгә килешмәй, Азамат. – Сәйҙә, эргәһендә бала кеүек мыш-мыш килеп илаған ирҙе һаҡ ҡына ситкә этәреп, тәҙрә янына атлап килде. Тау һыртындағы ҡайын унан ниҙер һораған, көткән, ялбарған кеүексе... Ҡатын тәҙрә ҡапҡастарын ҡаҡлыҡтырғансы шарт итеп япты ла Азаматҡа боролдо.



**Таңһылыу
ҠАРАМЫШЕВА**

# ТАШ ӨЙ

## ПОЭМА

Башланғыс синыф уҡытыусым
Мәрхәбә МИНДЕҒОЛОВАҒА арнайым.

*Әйләнеп тә бер баҡҡанда
Иң боронғо дәүергә,
Кешелектең бишеге ул
Таш ҡыуышы — мәмерйә.*

*Мәмерйәнән сыҡҡан кеше,
Сыҡҡан кеүек бишектән,
Йән янына рух өрөлөп,
Сыҡҡан кеүек кейектән.*

*Мәмерйәгә ингән саҡта,
Инәм нәҡ тәү тормошҡа.
Ҡараш һалам үҙебеҙҙең
Бишектәге булмышҡа.*

*Кешелектең сығанағы
Әллә ошо өңдәме?
Кем беҙ? Ҡайҙан? Нимәнән беҙ?
Бәлки, уға билдәле?*

---

*Таңһылыу Ҡарамышева (1948) Бөрйән районы Байназар ауылынан. БДУ-ны тамамлай. Оҙаҡ йылдар республика ваҡытлы баҫмаларында эшләне. Тиҫтәгә яҡын шиғри йыйынтыҡтар авторы. Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

*Мин килгәндә, мәмерйә лә*
*Килеп баҫа ла алға,*
*Өңөрәйгән күҙе менән*
*Мәңгелек булып баға.*

***

*Тәү ҡат сәфәр ҡылған йылғам,*
*Тәү ҡат күргән мәмерйәм —*
*Һаумы, Ҡайнөй! Һаумы, Ташөй!*
*Һеҙгә сәләмдәр бирәм.*

*Киләм һеҙгә сәләм биреп*
*Нисәмәләр мәртәбә!*
*Көтә кеүек мине бында*
*Мөғәллимәм Мәрхәбә.*

*Иҫләйем мин әле һаман*
*Мөғжизәле шул саҡты:*
*Йөрәгемә остаз яҡҡан*
*Алыҫ серле усаҡты...*

***

*Төтәй усаҡ мәмерйәлә —*
*Тәү кеше төйәгендә,*
*Тәү өләсә усағында,*
*Тәү баба ӛргәһендә.*

*Тәү кешеләр торлағына*
*Алып китә хикәйәт.*
*Уҡытыусы һөйләгән һүҙ*
*Торғаны бер әкәмәт.*

*Усаҡ яна...*
*Эргәһенә*
*Таш өйҙәштәр ултырған.*
*Таш диуарҙар шәүлә менән,*
*Күләгә менән тулған.*

*Миңә шомло вә ҡурҡыныс.*
*Хәүеф ҡыҫҡан бауырҙы.*
*Мин — йәш ҡатын. Тулғаҡ тота.*
*Мин тәүге ҡат ауырлы.*

*Тулғаҡ тотҡан болотто ла.*
*Күктәр ҙә түгел аяҙ.*
*Минең янда ир заты күп!*
*Ник ҡатын-ҡыҙ былай аҙ?*

*Бала табырға һәләтле*
*Мин берҙән-бер икән дә!*
*Ырыуымдың бар өмөтө*
*Тороп ҡалған бер йәнгә.*

*Инде мин дә тыуҙырмаһам*
*Иҫән-аман ҡыҙ бала,*
*Тоҡомобоҙ ҡороясаҡ!*
*Ҡалмаясаҡ бер сара!*

*Бөтөн өмөт мин табасаҡ*
*Сабыйҙа ғына икән:*
*Ҡатындар бала тапмаһа,*
*Ырыу йәшәмәҫ бүтән...*

***

*Дөбөр-шатыр яуып үтте.*
*Болоттар ҙа бушанды.*
*Минең иҫән аҫранғанға*
*Күк ошолай ышанды.*

*Бына ҡулы, аяҡтары!*
*Бына башы, елкәһе!*
*Тибеп тора — һығылмалы*
*Башындағы лепкәһе!*

*Шундай сибек, күм-күк тәне:*
*Йә үлә был, йә ҡала*
*Ваҡытынан алда тыуған*
*Етлекмәгән ҡыҙ бала!*

*Йәһәтләп мин сабыйымды*
*Күкрәгемә килтерәм!*
*Бар ир заты үтҡа сатыр*
*Ташый, ана, өлтөрәп.*

*Көтөп алған бала тыуҙы!*
*Бар мәмерйә ҡыуана.*
*Эргәһендә, әйтерһең дә,*
*Бөтөн донъя урала!*

*Ҡыҙым — ҡояш! Ҡап уртала!*
*Өмөт биргәс йәшәүгә,*
*Ирҙәр миңә баш эйәләр,*
*Табыналар Әсәгә!*

***

*Мәмерйәнең ауыҙында*
*Таш һыртына һөйкәлеп,*
*Нисәмә көн инде аусы*
*Тышты күҙләй текәлеп.*

*Кейек януар хәрәкәтен*
*Шәйләмәк ул урмандан.*
*Нисәмә көн мәмерйә ас*
*Аҙыҡ бөтөп торғандан.*

*Белә аусы: һунарҙан ул*
*Ҡайтмаясаҡ ризыҡһыҙ.*
*Бар диҡҡәте — күҙәтеүҙә!*
*Бүтән шөғөл ҡыҙыҡһыҙ.*

*Шөғөл генә түгел, уға*
*Һунар — донъяны аңлау.*
*Һунар — йәшәргә өйрәнеү,*
*Донъянан ғүмер яулау!*

*Күҙ ҡарашы урманлыҡҡа*
*Беҙ шикелле сәнселгән.*
*Йөҙө уның ҡатып ҡалған,*
*Итер анты әйтелгән.*

*Белә аусы: мәмерйәлә*
*Урын юҡ хаталарға.*
*Йәки — йәки! Йән һағында*
*Хоҡуҡ юҡ тайҡаларға.*

*Белә аусы: ул януарҙан*
*Аңлы булырға тейеш!*
*Кешенең көсөн иҫбатлау —*
*Ирҙәргә төшкән өлөш!*

***

*Килеп индем таш өйгә мин —*
*Килеп индем тарихҡа.*
*Килеп индем тәү үҙемә,*
*Боронғоға, алыҫҡа.*

*Мин дә дауам*
*Әҙәмлеккә*
*Ғүмер биргән ҡатындан,*
*Таш өйҙәге ҡыҙ баланан,*
*Усаҡтағы ялҡындан.*

*Осҡон сәсә, ана, усаҡ,*
*Ялҡын бәрә ҡуҙҙарҙан.*
*Ризыҡ ейә бар мәмерйә —*
*Ирҙәр ҡайтҡан һунарҙан.*

*Бар шәүләләр таш диуарҙа*
*Иңде тергән иңгә.*
*Ҡатындар бит гел һыйына*
*Хәстәрлек күргән иргә.*

***

*Нимә күрәм?*
*Төп-төп булып,*
*Ҡыяҡ үлән ҡыяҡланған.*
*Суҡ-суҡ булып башаҡланған.*
*Башаҡтары орлоҡланған.*

*Ҡайһылай ҙа туҡлыҡлылар!*
*Мин сүкәйеп башаҡ ыуам.*
*Ауыҙ итһен бүтәндәр ҙә!*
*Орлоҡтарҙы усҡа йыям.*

*Йәһәтерәк ҡайтыр кәрәк!*
*Мәмерйәлә сабый көтә.*
*Ҡай орлоҡтар усҡа төшә,*
*Ҡайһылары ергә төшә...*

***

*Нимә күрәм?*
*Теге үлән*
*Быйыл тағы башаҡланған.*
*Устарымдан ҡойолғайны,*
*Әллә шулар асаҡланған?*

*Һәр асағы емгә тулған!*
*Тәғәм өсөн яраҡланған.*
*Яҙған булһа, ас ҡалмабыҙ,*
*Йыл да шулай уңыш алһам!*

*Асаҡланыу — әсәкләнеү*
*Икән дәһә! Бына тағын,*
*Әсә кеүек, һәр бер башаҡ*
*Тыуҙырған бит орлоҡтарын,*
*Муллыҡтарын...*

***

*Нимә күрәм?*
*Япраҡтарҙы*
*Ҡыштырлатты ниндәй теҙ?*
*Үлән араһынан баға*
*Япраҡ кеҫек ниндәй күҙ?*

*Был — бер болан балаһы бит!*
*Яңы тыуған бер сабый!*
*Инәһен инде ейәлер*
*Мәмерйәләге табын.*

*Ҡолондо алып ҡулыма,*
*Таш өйгә мин атлайым.*
*Ҡыҙ баламды ашатҡандай,*
*Һөт имеҙә башлайым...*

*Эйәләште болан миңә:*
*Эйәләште кешегә.*
*Ул ҡырағай түгел хәҙер!*
*Ҡалманым мин көлкөгә.*

*Мин дә кейектән кешегә*
*Әйләнәмен һөйөүҙән,*
*Йәшәүемдең мәғәнәһен*
*Мәрхәмәттә күреүҙән.*

***

*Яңы тормош башланыҡ беҙ,*
*Яңы кеше был бала!*
*Бөтөнләйгә бүтән төрлө*
*Яңы зат ул донъяла!*

*Тыуа торҙо, үлә торҙо*
*Уға саҡлы бүтәндәр:*
*Ҡаты башлы, ҙур башлылар,*
*Ҡәүҙәгә дәү, өлкәндәр.*

*Ә был сабый йомшаҡ башлы,*
*Һығылмалы лепкәле.*
*Йәшәү һәләтенә эйә!*
*Тыуғанда интекмәне.*

*Мине үлтермәйсә тыуҙы,*
*Үлмәйенсә ул тыуҙы.*
*Тыуған өсөн, булған өсөн*
*Йәшәтер ул ырыуҙы.*

*Ҡыҙсыҡ түгел, кешелекте*
*Ҡулда тотоп торабыҙ.*
*Былай булғас, йәшәйбеҙ беҙ,*
*Былай булғас — булабыҙ!*

***

*Тыуҙы ҡыҙым...*
*Тыуҙы ла бит,*
*Үтә мохтаж ҡурсауға!*
*Үлем менән алышабыҙ*
*Кешелек өсөн яуҙа.*

*Сабыйы бар януарҙың да,*
*Балаһы бар кейектең.*
*Әммә хайуан ташлап китә,*
*Ҡурсаламай сибекте.*

*Ә беҙ кейектән кешегә*
*Шәфҡәт аша күсәбеҙ.*
*Көсһөҙҙө ташлап ҡуймайса,*
*Уны һаҡлап үҫәбеҙ.*

*Сөнки булыу-булмауыбыҙ*
*Бәйле ошо тойғоға.*
*Үҙебеҙҙе ҡотҡарабыҙ,*
*Түгел бер ҡыҙҙы ғына.*

*Етлектерәм ҡыҙымды мин,*
*Күкрәгемдән айырмай,*
*Ярҙамымдан, терәгемдән*
*Бер аҙға ла ҡалдырмай.*

*Әҙәмлектең ер йөҙөндә*
*Булыу йәки булмауы,*
*Йәшәү йәки йәшәмәүе,*
*Ҡалыу йәки ҡалмауы,*

*Усаҡ яғыу йә яҡмауы,*
*Ҡаҙан аҫыу, аҫмауы,*
*Һунар ҡылыу йә ҡылмауы,*
*Кейек атыу, атмауы*

*Беҙҙең көрәшкә бит бәйле!*
*Сабыйҙы үлтермәүгә!*
*Ҡатын-ҡыҙ затын ҡоротоп,*
*Һәләкәт килтермәүгә!*

*Таш диуарҙың эстәрендә*
*Беҙ — тормоштоң баҡсыһы.*
*Ирҙәр фиҙакәр хеҙмәттә,*
*Улар — ғүмер һаҡсыһы.*

*Үҙ нәҫелен ҡурсағанға*
*Мәмерйәлә — шул йола:*
*Барлыҡ ирҙәр үҙе теләп*
*Ҡатындарға буйһона!*

***

*Мәмерйәләге кешеләр —*
*Беҙгә алыҫ әҡрәбә.*
*Шулай аңғартты бит беҙгә*
*Уҡытыусы Мәрхәбә.*

*Бәйән итте апайыбыҙ*
*Беҙҙең ҡайҙан сығышты,*
*Үҙгәреп тыуған баланан*
*Дауам иткән тормошто.*

*Үҙгәрешкә дусар ғына*
*Йәшәүгә, тип, һәләтле,*
*Алпамышалар тыуыуҙан*
*Туҡтаған мәлде әйтте.*

*Яңы донъя башланғанын,*
*Яңы кеше тыуымын,*
*Тағатып бирҙе йомғаҡтан*
*Быуындарҙың һуҙымын.*

*Кешелектең бөгөнгәсә,*
*Һаман йәшәп ятыуын,*
*Ҡитға-ҡитға тоҡом йәйеп,*
*Үрсеүен вә артыуын*

*Бәйләне аңлы кешенең*
*Шәфҡәтле һөйөүенә!*
*Шундай кеше алмаш, тине,*
*Кешенең кейегенә.*

*Һөйә белгән кеше менән*
*Һаман йәшәп киләбеҙ.*
*Мөхәббәт — шул Алиһәбеҙ!*
*Хаҡлы мөғәллимәбеҙ.*

*Һөйә белгән кеше менән*
*Артабан да йәшәрбеҙ!*
*Шундайҙар менән уңышлы*
*Тәбиғәт тәжрибәбеҙ!*

***

*Мәмерйәләге ҡатында —*
*Сығанаҡ, беренселек.*
*Уның арҡылы бирелгән*
*Кешегә үркенселек.*

*Уның арҡылы яралған*
*Игенсе, көтөүселәр.*
*Буштан барлыҡҡа килмәгән*
*Йыһанға етеүселәр.*

*Тағы кемдәр сығыр беҙҙән?*
*Ни бирер был үркенлек?*
*Бирелер был кешелеккә*
*Тағы ниндәй мөмкинлек?*

*Ни булһа ла, таш өй аша*
*Бойоролған, әйтелгән:*
*Кешелеккә мәңгелектә*
*Ғүмер тәьмин ителгән.*

*Барһы бала таба алған*
*Ҡатын аша бирелгән.*
*Тере тыуған бала аша*
*Донъябыҙ ул һөйөлгән!*

***

*Бер әсәнән бит кешелек.*
*Тыумаған бөтәһенән.*
*Мин дә тыуғанмын әсәнән —*
*Мәмерйә әсәһенән!*

*Таралғанбыҙ бар донъяға*
*Мәмерйә балаһынан.*
*Бер телдән беҙ телләнгәнбеҙ —*
*Мәмерйә һамағынан!*

*Бәпес көйө — тәү көйөбөҙ,*
*Бишек беҙгә моң биргән.*
*Тәү моңобоҙ мәмерйәнән*
*Донъяларға һибелгән.*

*Әсәбеҙ бер, атабыҙ бер!*
*Таш ҡыуыштан беҙ өйҙәш!*
*Ҡошташ, кейектәш тә түгел,*
*Беҙ барыбыҙ кешеләш!*

*Мәмерйәләш беҙ барыбыҙ!*
*Тәү өйөбөҙ — мәмерйә.*
*Бурыслы беҙ шул торлаҡта*
*Түлләнгән ҡатын, иргә!*



Лилиә
СӘҒИҘУЛЛИНА

# ЫНТЫЛЫШ

## *Яра*

*Яраланым...*
*Төҙәлдеме яраларың?*
*Юҡмы?*
*Әллә һаман йөрөтәһеңме*
*Һыныҡ уҡты — шау тутыҡты?*

*Ялҡыйһына ваҡыт-ваҡыт?*
*Ғазаплаймы ҡайтып-ҡайтып?..*

*Яраланым — яраландым...*
*Күп эҙләнем дауаларын.*
*Асыҡланым дауа барын:*
*Һүндер утты — онот юҡты!*
*Кәрәкһә — ал:*
*Биреп торам мин ныҡлыҡты.*

*...Ә мин һиңә атҡан инем*
*Һөйөү генә.*
*Үҙ есемен ул үҙгәрткән*
*Ҡасан?.. Ниңә?..*

---

*Лилиә Сәғиҙуллина (1956) Шаран районы Иҫке Тамъян ауылында тыуып үҫкән. Башҡорт дәүләт университетында доцент, педагогия фәндәре кандидаты, Яҙыусылар союзы ағзаһы.*

* * *

*Беҙҙән тормош ниҙәр көтә?*
*(Беҙ ни көткән билдәле!)*
*Ул көткәнде аҡлайбыҙмы?*
*Алабыҙмы икеле?*

*Ниндәй бурыс үтәргә тип*
*Ебәргәндәр был ергә?*
*Миссиябыҙ үтәлмәһә,*
*Килербеҙме иртәгә?*

*Кем ҡуйған эксперимент беҙ?*
*Уңышлымы, түгелме?*
*«Үҙем баш та, түш тә!» — тиеү*
*Аҙҙырмаймы күңелде?*

*...Ташландыҡ ерҙе астым да*
*Сәстем бойҙай орлоғо.*
*Сүп үләне баҫып китте —*
*Юҡ бит тамсы ямғыры.*

*Ҡырағай үлән көслөрәк шул —*
*Нығыраҡ тамыр сәнсә.*
*Ә мин һипкән орлоҡтарға*
*Ер, — гүйә, үгәй әсә.*

*Күк тә, ер ҙә һәр көн һынай:*
*Ғүмер үтә көрәшеп.*
*Бурыс — шулмы? Башҡа икән —*
*Булыр микән өлгәшеп?*

* * *

*Күк ҡамаулы — болоттар.*
*Шуға ауыр осоштар.*

*Болоттарға бәрелеү.*
*Йәшнәп, ергә түгелеү...*

*Әллә бер аҙ ашыҡтыҡ?*
*Көтәйекме асыҡлыҡ?*

*Кәрәк, ахры, табаһы*
*Ике болот араһын...*

*Һәм — болоттан ҡотолоу,*
*Зәңгәрлеккә ынтылыу!..*

## Күбәләк һәм мин

*Күбәләктәр бәргеләнә,*
*Бәргеләнә тәҙрәгә...*
*Ошо хәлде күргән һайын*
*Йәнгенәм һыҡрай ниңә.*

*Яра һалмай ҡанатына,*
*Күбәләкте усҡа алам.*
*Ишекте асып сығам да —*
*Мин бер аҙға тынһыҙ ҡалам.*

*Уста ғына — тотолған бит! —*
*Илаһи йән — бер күбәләк...*
*Минеке булып ҡалһынмы?*
*Урынлымы башҡа теләк?*

*— Ниндәй яҙмыш бүләк булһын,*
*Күбәләгем, әйтсе миңә?*
*— Күктәр һутын эсә алмаһам,*
*Ғүмер миңә ниңә генә?!.*

*— Осошҡа бит ваҡыт бик аҙ:*
*Көҙҙәр етте, көтә ҡыш...*
*— Ассы усың, — тине тотҡон, —*
*Һәр бер йәндең үҙ яҙмышы.*

*...Ана, тағы күбәләктәр!*
*Өйгә кергән улар күпләп.*
*Тәҙрәмде асайымсы:*
*Ос ирекккә, йән-күбәләк!*

## Сағылыш

*Ай саҡырҙы күлгә —*
*Баш тартманым:*
*Үҙ күреп тә өндәшә*
*Йән тартҡаным!..*

*Ҡолас ташлап йөҙҙөм —*
*Тоталманым.*
*Төпкә ҡәҙәр сумдым —*
*Табалманым.*

*Күрҙем Айҙың күлдән*
*Юғалғанын.*
*Күл-көҙгөлә тулҡын*
*Уйнағанын.*

*Селпәрәмә килде*
*Хыялдарым:*
*Юҡ, булмаған, ахры,*
*Ай — яҙғаным!..*

*Ярға салҡан ауҙым,*
*Өмөт юйып.*
*Күктә Ай тирбәлә,*
*Моңға тулып...*

## *Минме шиғыр яҙам?..*

*Минме шиғыр яҙам? Әллә шиғыр*
*Яҙа мине? Яҙа... Төҙәтә...*
*Тәңгәллектәр эҙләй... Айырмалар...*
*Үҙе аша мине күҙәтә.*

*Йыһан тибешен тоя шиғыр йәне.*
*Шул ритмды ала үҙенә.*
*Донъя ауазына ауаздаштар —*
*Рифмалар сафҡа теҙелә.*

*Памук* менән тамуғ, Ван Гог һәм йог*
*Парлап килә шиғыр янына.*
*Эйфель башняһы кеүек йәнгә яҡын*
*Баҫыу ҡапҡаһы ла табыла...*

*Ҡоштар моңо, йыһан тыны — ҡайһы*
*Йәшәү сығанағы шиғырға?*
*Хаҡ яуапты белһә шиғыр белер.*
*Онота серҙе ҡайсаҡ шағир ҙа...*

## *Май башы...*

*Мин ҡоштарҙы күҙәтәмен —*
*Яҙғы ҡоштарҙы.*
*Күҙәтәмен мин уларҙың*
*Осоноп осҡанын,*
*Әле ерҙе, әле күкте*
*Һағынып ҡосҡанын.*
*Күҙәтәмен, аңлайым тип*
*Күсмә ҡош йәнен.*
*Әллә инде аңлау эҙләй*
*Минең үҙ йәнем...*

*...Ҡитеүҙәр ҡайтыуға сәбәп —*
*Ҡоштар һабағы.*
*Беҙҙең китеү?.. Билдәһеҙ шул*
*Әҙер яуабы.*

---

* Орхан Памук — төрөк яҙыусыһы.

# Күңел камертоны

1

Беҙ ишетмәҫ тауыштар бар:
Бик юғары йә бик түбән.
Сикләнмәйҙер төҫ сиге лә
Күҙҙәр генә күргән менән...

2

Урталыҡта беҙ торабыҙ.
Тормош асылы шулмы икән?
Торғонлоҡтан баш тартамы
Әйләнмәнең сиген кискән?..

3

Ҡайҙа инде сиктәр сиге?!.
Был тормошта күҙле һуҡыр
Ҡолағына мамыҡ тығып,
Барлы-юҡлы телен йотор
Сиккә еткән!..
Шул бик еткән...

4

Ҡолаҡ тоймаҫ өн-моңдар бар —
Кәрәк күңел камертоны.
Әләлекте еңһә еңер
Юғарылыҡ эталоны.

5

Күңел ҡылы тойған моңдо
Һүҙгә төрөп, теҙем төҙөп,
Сик бәйләүсе Харон кеүек,
Юҡ! Орфейҙың үҙе булып
Сик үтеүсе заттар ғына
Аталалыр Шағир тиеп.



Хисмәт
ЮЛДАШЕВ

## *Төпкөлдә*

*Айыу төпкөлө төпкөлдә*
*Ҡар иретеп сәй эсәм.*
*Бер нигә лә бошмай эсем —*
*Өкө — төнгө,*
*Ә һайыҫҡан*
*Көндөҙгө әңгәмәсем.*

*Өрөп ҡабыҙыла усаҡ,*
*Өрөп һүндерелә шәм.*
*Картуф тәгәрәтәм көлдә,*
*Мин төпкөлдә — бында шәп.*

*Был шәплекте белмәҫ инем*
*Ғүмер буйына йәшәп.*
*Усты өткән картуфҡа ла*
*Өрөп кенә өндәшәм.*

*Ҡором да яъылып ҡуя,*
*Күҙҙе ҡырҡа төтөнө.*
*Айырым-асыҡ бында фекер,*
*Айырым-асыҡ көнөм.*

---

*Хисмәт Юлдашев (1957) Ҡаҙағстандың Кустанай өлкәһендә тыуған. Балалыҡ һәм йәшлек йылдары Ырымбур өлкәһенең Иҫәнгилде ауылында үтә. Мәскәүҙә Әҙәбиәт институтын тамамлай, Башҡортостан радиоһында, матбуғат органдарында эшләй.*
*Яҙыусылар союзы ағзаһы, Ғ. Сәләм исемендәге республика йәштәр премияһы лауреаты.*

*Кемгәлер көлкө төпкөлдөң*
*Ҡоромонан, көлөнән.*
*Балҡып ҡына тыуып килгән*
*Рәхмәтлемен көнөмә.*

## Яҙылмаған ҡанун

*Яҙылмаған бер ҡанун бар:*
*Йәшәһәң үҙең булмай,*
*Берәү ҙә һине батырмай,*
*Берәү ҙә һине быумай.*

*Ни әйтһә лә — үҙеңдеке,*
*Ни ҡылһа ла — үҙ ҡаның...*
*Ә шулай ҙа, үҙеңә яу*
*Үҙеңдеке, ти ҡанун.*

*Яҙылмаған шул ҡанунды*
*Ҡараһаң һанға һуҡмай,*
*Ете яттар ғына хуплай,*
*Ә үҙ туғаның туҡмай...*

*Яҙылмаған шул ҡанунға*
*Ҡараһаң ҡаршы сығып —*
*Йә һынып, йә сынығып,*
*Һынарһың һин дошманлыҡтың,*
*Дуҫлыҡтың ысынлығын.*

## Себер еле

*Иҫә генә, киҫә генә,*
*Иҫкә алдым кисә генә*
*Кем ҡәберҙә, кем Себерҙә,*
*Кем һыйынған бисәһенә,*
*Кем — башҡалар иҫәбенә...*

*Себер еле иҫә генә,*
*Иҫә генә, киҫә генә.*
*Йөрө, тине, иҫән генә,*
*Йән киҫәгем бисәм генә.*

*Себер еле иҫә генә,*
*Иҫә генә — киҫә генә.*
*Йөрәкәйен киҫеп йөрөр,*
*Йөрәкәйен киҫеп бирер*
*Минең кеүек иҫәр генә.*

***

*Берәүҙәрҙе берләштерә*
*Бергәләшеп урлашыу,*
*Берәүҙең берәүен бергә*
*Гүргә хәтлем хурлашыу.*

*Берәүҙәрҙе берләштерә*
*Илде, көндө нурлашыу.*
*Минең көнөм, минең юлым*
*Булһын шуларға ашыу.*

***

*Ҡар яуҙы.*
*Йылға ҡарайҙы.*
*Баҫтым ҡара һуҡмаҡ юлға.*
*Ишетелер-ишетелмәҫ*
*Һай ерендә сылтырай йылға.*

*Ҡар яуҙы,*
*Юлдар ҡарайҙы —*
*Кешеләр йөрөгән юл ҡара,*
*Шоморт-ҡара күҙҙәреңде*
*Күҙ йәштәре йыуһа ла...*

*Ҡарайып күренә урман...*
*Намыҫым түгелме ҡара?*
*Намыҫың ҡарайһа — күр сара.*
*Күралмаһаң, ул, бисара,*
*Хоҙай хөкөмөнә ҡала...*

## *Тубыкланыу*

*Иблис көйҙәренә генә,*
*Йәнәһе лә, йырлап-бейеп,*
*Тубыҡланыр, тиеп, беҙҙе,*
*Инде башын эйер, тиеп,*
*Ҡыуандың, ахыры, иртәрәк,*
*Океан артындағы дейеү.*

*Баҙар шауы башҡа ҡабып,*
*Тубыҡланһаҡ — тубыҡландыҡ,*
*Һис кенә лә йығылманыҡ.*
*Шуныһы ла булһын аныҡ:*

*Асылына ҡайтҡан һайын,*
*Нурландырып изге айын,*

*Иҫтән юймай рухландырған*
*Салауаты һәм Юлайын,*

*Баҫҡан һайын намаҙлыҡҡа,*
*Батмаҫын белеп һаҙлыҡҡа,*
*Доға ҡыла тубыҡланып*
*Яуға ҡаршы торор халыҡ!*

## Туп

*Минең йөрәк –*
*Типкеләнгән,*
*Майҙан аша оҫҡан туп.*
*Ҡапҡасыға бәрмәгеҙсе,*
*Үҙемә бирегеҙ тотоп!*
*Ах, ҡапҡа бағанаһына*
*Бар икән ҡаҡлығаһым!*
*Кемдәрҙең генә зары мин,*
*Кемдәрҙең генә аһы?*
*Ҡайһы ожмах ҡапҡаһы һуң,*
*Ҡайһы тамуҡ ҡапҡаһы?*
*Ҡайһығыҙҙы яҡлайһы һуң,*
*Ҡайһығыҙҙы һаҡлайһы?*
*Тамашасылары кем һуң,*
*Алҡышлайҙар зыҡ ҡубып*
*Йөрөткәндә йөрәк-тупты*
*Тәгәрәтеп тә ҡыуып?..*
*Инде туп ҡайһы ҡапҡаға –*
*Донъя ниңә саң ҡаға?*
*Ах, ул йөрәк түгел дәһә,*
*Ул әйләнгән башҡаға!*
*Буш күңелле кешеләрҙең*
*Мәғәнәһеҙ шауынан*
*Нолдәй өрөлгән дә бер шар,*
*Сөйөрөлөп шашынған...*
*Тотоп та булмай ҡыуып –*
*Осто, осто бушҡыуыҡ!..*

## Нишләп, тиһең

*"Нишләп?" – тиһең...*
*Ни эшләп һуң?*
*Әллә, тиһеңме, эшләп*
*Һинән дә шәп, минән дә шәп*
*Илеңдәге килмешәк.*

*Ә беҙ? Ғүмер буйы эшләп,*
*Ғүмергә ирен тешләп?!*

*Улар — бәйгеләге саптар,*
*Ә һуң нишләп беҙ — ишәк?*

*Исем, дәрәжә, байлыкты*
*Улар һуң ҡайҙан ала?*
*Халҡымдың таҙа исемен*
*Хәсистәр файҙалана...*

## Ҡайҙа?

*Яр аҫтында ла ышыҡ.*
*Тал аҫтында ла ышыҡ.*
*Йәшәйешебеҙ хаҡында*
*Ҡайҙа фекер ярышы,*
*Ирекле уй ярышы?*

*Атҡаҙанған да булды,*
*Дәрәжәгә атланып.*
*Халыҡтың ысын, хаҡ хәлен*
*Күрә тороп юғарынан,*
*Күрә тороп алдан уҡ,*
*Маҡтамаҡ ул, астамаҡтың*
*Таҡмағына алданып.*

*Көнөн дә тулы эфир,*
*Төнөн дә тулы эфир.*
*Ҡотлашыуҙар, кәйеф-сафа —*
*Музкоктейль,*
*Әллә кефир?*

*Хаҡлыҡ хаҡында ишетһәм,*
*Мин ҡалам хайран-вайран.*
*Бына ярайһы эсемлек —*
*Әсе ҡатыҡтан айран!*

## Батҡаҡ юлда

*Сыҡтым ауылым юлына,*
*Атланым батҡағынан.*
*Юл сатында, ҡарғаныпмы,*
*Ала ҡарға ҡағына.*

*Ҡасан ғына булыр икән*
*Батҡаҡ юлың ҡаҡ тағы?*
*Тел әйләнмәй, килмәй ҙә һис*
*Юл тип уны атағы.*

*Таланып бөткән ауылым,*
*Далаң бар, юҡ даланың.*
*Батҡаҡ юлдарыңды йырып*
*Тағы ла уҡталамын.*

*Юл ғазабы — гүр ғазабы.*
*Оло юл батҡағынан*
*Былай ыҙаланмаҫ инем,*
*Атланһам атҡа ғына.*

*Ултырып та китер инем*
*Берәүҙең арбаһында...*
*Йырланһын әммә үҙ йырым*
*Мең ғәләм араһында!*

## Һандуғас

*Һандуғас тип ҡарағайным —*
*Ағастар ғына.*
*Ағастарға ҡарағайным —*
*Япраҡтар ғына.*

*Япраҡтарға ҡарағайным,*
*Аптырата ғына:*
*Ҡунғандыр ҡайһы ағастың*
*Ул ботағына?*
*Йөрәгемде япраҡтай*
*Ҡалтырата ғына.*

*Һәр япраҡҡа һандуғастың*
*Моңо ҡағылған.*
*Миңә ағас ҡына булып*
*Бында ҡалырға,*
*Һандуғас тауышы тынғас,*
*Шаулап алырға!..*

## Шәп сәп

*Сығып ҡына килһә берәү*
*Кеше рәтенә, шәпкә,*
*Нимәнән генә атмайҙар —*
*Әйләнә башы сәпкә.*

*Һин дә шул квадратта,*
*Бөтә донъя түңәрәк.*
*Ел дә үтмәҫ арабыҙҙа*
*Туптар шартлай тәгәрәп.*

*Йыраѓайыр микән ара*
*Ҡабат яҡынаймаҫлыҡ?*
*Көнсөл ѓәйбәтсе туптары*
*Шартлай икән дә һаҫыҡ.*

*Уны улар ҡайҙа шулай*
*Етештерәләр икән?*
*Шуны эшләп имен-аман,*
*Етеш торалар микән?*

## *Болот*

Шаѓир Буранбай Исҡужинѓа

*Беҙҙән үтеп, был болоттар*
*Ят тарафҡа елкенде.*
*Ямѓыр булып яуа алманы,*
*Ҡар булып яуыр инде.*

*Көнөмдән бөркөлә һаѓыш,*
*Төнөмдән килә тауыш:*
*Ҡайҙа китеп бараһыѓыҙ,*
*Ҡайҙан бөтмәҫ буталыш?*

*Эй кешеләр, донъябыҙҙы*
*Бутаѓандар ҡайһыбыҙ?*
*Илгә терәк ирҙәр китә —*
*Уртаҡ икән ҡайѓыбыҙ!*

*Ҡайнар йөрәгем бар ине,*
*Хайран инем кешеләргә.*
*Кешеләрем, кешеләрем,*
*Миңә һуң ни эшләргә?*

*Иҫегеҙҙә ҡалѓым килде*
*Күңелле һәм мут булып.*
*...Ямѓыр булып яуалмаѓан*
*Ҡар булып яуа болот.*

# Уйландырырлыҡ әҫәр

*(Әхмәр Үтәбайҙың "Тыштағы зыярат" романы хаҡында)*

Тыштағы зыярат... Исеме әҫәрҙең темаһын туранан-тура асып һала. Ул үҙ-үҙеңә ҡул һалыу – суицид тураһында. Тап шул үлем менән үлгәндәрҙе Ислам дине зыяратҡа ерләүҙе тыя. Тимәк, уларға ҡайҙалыр башҡа ерҙә, ҡайҙа тура килә шунда ҡәбер ҡаҙылырға тейеш. Йәғни, зыяраттан тышта. Фәлсәфәүи күҙлектән ҡараһаң, бында иҫ китерлек бер ни ҙә юҡ һымаҡ – үлгән кешегә ҡайҙа ятһа ла (ятмаһа ла) барыбер. Ләкин көндәлек тормош күҙлегенән был мәсьәлә етдиләнә төшә: һәйкәлдәр – тереләр өсөн, тигән һымаҡ, зыяраттың тышында ултырған ҡәбер ташы барыһына ла йыраҡтан уҡ бында кем, ни өсөн ятыуы тураһында ҡысҡырып тора икән дәһә. Тимәк, ул бәндәнең барлыҡ туғандарына, нәҫел-нәсәбенә бик оҙайлы мөһөр булып ята ул ҡәбер ташы. Уйлап ҡараһаң, нәҫелгә, йәғни туған-тыумасаны тәрбиәләүгә бәйле гонаһлыҡтар бихисап кешелек донъяһында – һатлыҡ, кешегә хаслыҡ ҡылыу, уйнаш, балаңды етем итеү һәм башҡалар. Тик улары көн һайын күҙ алдында тороп төртөп күрһәтеп тормай шул, әллә ниҙә бер генә иҫкә алынып тора, берәй яйы сығып, кешенең зат-ырыуын тикшергәндә генә. Ә бында – күптән үлгән кеше һиңә яла яғып ятһынсы...

Бына нимәлә әҫәрҙе роман кимәленә күтәрерлек конфликт төйөнө – ауылды, тотош йәмғиәтте ике лагерға бүлеүсе ябай ғәмәли проблема: эскә индерергәме табутты, тышҡа ерләргәме? Эскә индерһәң, ул ундағы йөҙәрләгән ҡәберҙәр рәтенә теҙеләсәк һәм бер аҙҙан ҡайҙа икәне лә онотоласаҡ. Ә тышта иһә ул беренсе сиратта – туғандарына, икенсе сиратта – тотош йәмғиәткә (ә бәлки, быныһы беренселер?) өнһөҙ ғәйеп ташлап, тереләр йәшәйешендә сей яраға әүерелеп ятасаҡ. "Мин ғәйепле түгел! – тип ҡысҡыра һымаҡ ул әрүахтар тереләргә. – Мине ошонда килтереп һалған сәбәптәрҙе үҙегеҙҙән эҙләгеҙ!.." Улар романдың төп геройы Аллабирҙе мулланы үҙҙәренең илсеһе итеп алған. Сөнки тап уның ҡаты ихтыяры арҡаһында барлыҡҡа килгән бит тыштағы зыярат. Әгәр шул ихтыяр булмаһа, ул әрүахтарҙы береһе лә күрмәҫ тә ине, йәмғиәттә лә "буш ерҙә" низағҡа урын булмаҫ ине...

Суицид проблемаһы – беҙҙең йәмғиәтебеҙҙә бик тәрәнгә үтеп ингән, күп тармаҡлы тамырҙар ебәргән социаль мәсьәләләр әҙемтәһенән тыуған ауыр сир. Уның, һәр сир һымаҡ уҡ, йоғошло икәнен дә беләм. Ҡан менән атанан улға ла күсә ул, "һауа аша" кешенән кешегә лә күсеп йөрөй, тығыҙ аралашыу аша дуҫтан дуҫҡа ла йоға... Көрәш саралары ла күп яҡлы булырға тейештер, күрәһең. Ә тыштағы зыярат –

шуларҙың иң һөҙөмтәлеһе һәм бер ниндәй сығым талап итмәй торғаны. Ул кешенең аҫҡы аңына тәьҫир итеп, ғибрәт миҫалында тәрбиәләй. Йәмғиәтебеҙҙә ислам ҡанундары киңерәк тарала барған һайын, был алымдың һөҙөмтәлелеге арта ғына барыр һымаҡ. Ләкин шулай ҙа, ошо әҫәрҙәгенән башҡа, мин тормошта зыяраттан тышта ерләнгән ҡәбер күргәнем булманы. Нишләйһең, зыярат муллаһыҡы түгел, ул унда табут индереүҙе тыя алмай. Әхмәрҙең романындағы Аллабирҙе мулла ғына ул, үҙенең баш бирмәҫ абруйы менән, айырым бер ауылда барлыҡҡа килтерә ошо күренеште. Хәйер, был юҫыҡта ла тәфсирләп бәхәсләшер ерлек бар: "беҙҙә дин бөтөнләй юҡ" тип тәкрарланған илдә лә бит һәр ваҡыт мосолман зыяраттары, "урыҫ зыяраттары" айырым-айырым булды!

"Суицид проблемаһы юҡ ул беҙҙең йәмғиәттә, һәр хәлдә, ул тиклем үк киҫкен тормай, – тип дәлилләргә кереште бер дуҫым, ошо хаҡта һүҙ ҡуҙғатҡас. – Йәмғиәтебеҙгә төшкән ҡырғын күләмендә ҡараһаң, ул осраҡтар бик әҙ процентты тәшкил итер ине. Тотош илебеҙҙе ялмаған эскелек проблемаһы бар – унан да, статистикаға ҡараһаң, бәлә-ҡазаға тарып үлеүселәр күберәк. Козьма Прутков әйткән "зри в корень" ана шунда күрһәтергә тейеш..." Ул дуҫым фаразынса, тамырәҙемтәләр схемаһын былай һыҙырға кәрәк: тормоштан ваз кисеү – эскелек – суицид. Йәғни тормоштан ваз кисеү бында алдараҡ ята, тимәк, кешеләрҙә тормошто (ул ниндәй булһа ла) һөйөү тәрбиәләү беренсел булырға тейеш түгелме? Ана ни өсөн ул үлгәс тә башҡаларға тынғы бирмәй – уны бит тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә һәм яратырға өйрәтмәгәндәр! Хаҡлыҡ бар был фаразда ла. Әхмәр Үтәбайҙың бер геройы – ғалим Тамъян Солтанов та, суицидтың сәбәптәрен тикшергәндә, шундай һығымта яһап ҡуя: "араҡы эсеү, киреһенсә, суицидты кәметеүсе фактор булып тора". Ябай ғына итеп әйткәндә, эскән кеше ҡазаланып үлеүселәр исемлеген арттырасаҡ, ә үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар, ғәҙәттә, айыҡ баштан эшләй быны. Ә бына уның менән бәхәскә ингән детектив Альберт Һунаршин был осраҡта "ысул маҡсатты аҡламай" тип һанай һәм үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларҙы зыяраттың тышына күмеү дини күҙлектән ыңғай күренеш тип баһаланһа ла, тап шул хәл милләттең эске тарҡалыуына килтерә, тигән фекерҙә (был осраҡта – ауыл халҡын ике лагерға бүлеп).

Уйлай китһәң, халыҡтарҙы ике лагерға бүлеп, ҡапма-ҡаршы ҡуйыр сәбәпһылтауҙар бер "тыштағы" зыярат ҡына түгел. Төймәнән дөйә яһап ыҙғышҡан ауылдар, ҡалалар, илдәр барлығын беләбеҙ. Уның, дөрөҫөн генә әйткәндә, өҫтән нисек ҡабартһаң да, тәрәндәге асылы шул бер балыҡ башына – тамырға барып төртөлә: уңға китергәме, һулғамы? Төптәнерәк ҡараһаң, суицидты аҡлаған да һымаҡ тойолған Әхмәрҙең был әҫәрҙә ана шул тамырҙы эҙләүен күрергә мөмкин: ни өсөн тормоштан ваз кисеү тойғоһо тыуа кешенең күңелендә – йәшәүҙең мәғәнәһеҙлеген бөтә булмышы менән аңлағасмы? Ә ул – йәшәүҙең мәғәнәһеҙлеген аңлау – ҡасан кереп оялай уның башына? Ана шул үҙ ваҡытында уңға китеү урынына һулға боролоп, хәҙер килеп дөрөҫ бармауын һәм теге юл сатына кире ҡайтып булмауын аңлағасмы? Әгәр был суицид тигән афәт тотош милләткә, илгә ҡырғын булып төшкән икән, заманында уның да тәҡдир һыҙған юлдан яҙлығып китеүенән түгелме был үләт? Романдағы параллель донъялар киҫелеше лә тап ана шул юҫыҡтан: бер осраҡта кешеләр ил

өсөн үлемгә үҙҙәре ташлана, ә икенсе осраҡта шуларҙың игеҙәктәре – көслө һәм рухлы шәхестәр – энергияларын ҡулланыр ерлек таба алмайынса, бау тотоп аҫылынырға үрмәләй. Сағыштырып ҡараһаң, ул ҡорбандар бер үк кешеләр, имеш! Тегендә – үҙ асылдарында улар, ә беҙҙең ысынбарлыҡта – хатта йәшәү мәғәнәһен дә таба алмай ҡаңғырып йөрөүселәр. Тегеләрҙең ҡәберҙәре лә зыярат тышында ҡала, сөнки уларҙы килтереп ерләүсе юҡ, ә быларҙыҡы иһә – ҡанундар ҡушмауы сәбәпле. Ана шулай бер юл сатынан икегә айырылып киткән яҙмыштарҙы йәнә килтереп бер ҡәберҙә – тыштағы зыяратта осраштыра Әхмәр Үтәбай үҙ романында.

Әхмәрҙең әҫәре “роман-диалог” тип исемләнеүе лә ана шунан: ул ярайһы уҡ юғары кимәлдә ошо темаға бәхәстәр ҡороп ебәрә, унда ситтән күҙәтеүсе хәлендә детектив агентлығы етәксеһе, был мәсьәлә менән оҙайлы йылдар махсус шөғөлләнеүсе белгес ғалим, был афәт менән ҡулынан килерлек кенә көрәшеү сараһы таба алған ауыл муллаһы, тағы ла был мәсьәлә үҙҙәренә ана шул тыштағы зыярат аша килтереп һуҡҡан бик күп кешеләр ҡатнаша. Ә был проблеманың барлығына, ҙурлығына, һаман киҫкенләшә барыуына ана шул тыштағы ҡәбер таштары төртөп күрһәтеп тора – ҡотола ла алмайһың уларҙан! Берҙән-бер юл – кәртәне күсереп, әлеге ҡәберҙәрҙе лә зыяраттың эсендә ҡалдырыу: ҡәберҙәр юҡ икән, мәсьәлә лә юҡ. Һәр нәмәне шул юл менән хәл итеп өйрәнгән беҙҙең илебеҙҙә әлеге роман геройҙары ла тап шулай эшләй ҙә. Әлбиттә, Әхмәр Үтәбай үҙенең геройы Аллабирҙе мулланы был ҡарарға килтертеү өсөн ярайһы уҡ ҡатмарлы юлдарҙан йөрөтә, хатта фантастик алымдар ҙа ҡуллана. Әммә был юл беҙҙең тормош ысынбарлығына тап килеүе менән ышандыра: әллә ниндәй юғары сифаттарға эйә йән эйәһе булһаң да, ҡылыҡтарыңды ниҙәр менән аңлатырға маташһаң да, алдыңда бары бер генә һуҡмаҡ ята – мәсьәләне “күҙ йомдороу” аша хәл итеү барыһына ла ҡулай.

Шуға был әҫәрҙә тыштағы зыярат күренешен конфликт тыуҙырыусы образ тип кенә ҡарап, автор мәсьәләгә бөтөнләй икенсе юҫыҡтан баға. Уның геройҙары үткән менән киләсәкте берҙәй айҡап йөрөй, хатта параллель донъяларҙа ла киҫешеү нөктәһен таба. Ул – халыҡты, ҡәүемде милләт итеп берләштереүсе рух, ябайлаштырып әйткәндә, башҡортлоҡ тойғоһо сығанаҡтарын һәм уны бәпләүсе, һуғарыусы тамырҙарҙы эҙләү. Килер быуын вәкиле ил президентын һаҡлау өсөн йәнтәслим алышҡа ташлана ла, уның именлеге хаҡына үҙен ҡорбан итәме? Сөнки уларҙа инде рух төшөнсәһе абсолют булып нығынған, ниңә шулай, тигән һорау ҙа тыумай. Ә бына параллель донъя: уның игеҙәге – беҙҙең тормош вәкиле Вилнар әле саҡ ошо төшөнсәләр тураһында уйланыу өҫтөндә, үҙенең рухы өсөн көрәштә йылға башын бороп ебәреп кенә тотош йылға ағымын борорға ниәтләгән хыялый... Әлбиттә, йылға меңәрләгән инештәрҙән хасил һәм уның башы тип иҫәпләнгән берәүһенең генә ағышын бороп ебәреү һыу ағышына бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаясаҡ. Халыҡ күңеле тигән икһеҙ-сикһеҙ даръя ла шундай уҡ тамсыларҙан ғибәрәт, унда яңылыштан аҙашҡандар ҙа, махсус рәүештә бороп юлдан яҙҙырылғандар ҙа бихисап осрай. Әммә ул даръяның төп йырҙаһы бар – ул ышаныслы ла, ныҡлы ла.

Композицион яҡтан ҡарағанда, романдың схематик, ябайлаштырылған төҙөлөшө абайлана. Унда геройҙарҙың

характеры бер ваҡиғаға – тыштағы зыяратҡа мөнәсәбәткә бәйләнә, уға тиклемге тормоштары ҡыҫҡаса һөйләп кенә бирелә. Тағы шуныһы ла бар: төп геройҙарҙың барыһының да ул зыяратҡа мөнәсәбәте баштан уҡ асыҡланған һымаҡ, йәғни, барыһына ла мәғлүм күренеш өҫтөндә баш ватһалар ҙа, улар һис уйламағанса бер төптән тотоноп, тыштағы зыяратты эскә индереү менән мәшғүлдәр. Үҙе үк шул зыяратты бар иткән Аллабирҙе мулланан алып, былдай ауыл донъяла барлығын тәүләп ишеткән детектив Һунаршинға тиклем тыштағы зыяратҡа беҙҙең тормоштоң үтә сәйер бер күренеше тип ҡарап, уны юҡ итергә, унан ҡотолорға ынтылалар. Әммә уларҙың барыһы ла быға бая әйткән "кеше юҡ – мәсьәлә лә юҡ" тигән принциптан сығып ҡарай. Суицид проблемаһын хәл итеү, төйөндө сисеү юлдарын хатта шуның менән етди шөғөлләнгән, был мәсьәлә буйынса халыҡ-ара форумдарҙа сығыш яһаған ғалим Тамъян Солтанов та белмәй. Дөрөҫ, автор уның был мәсьәләнең төбөнә төшөп етеүенә, ниндәйҙер серҙәрҙе күптәнән йәшереп һаҡлауына ишаралап ҡуя ҡуйыуын. Тик роман ахырында был асылмаған серҙең асылмай ҡалыуын, ул сер тигәне автор ҡорған сираттағы интрига ғына икәнлеген күрәбеҙ.

Шундай уҡ интриганы автор төп герой Аллабирҙе мулла тирәләй ҙә ҡорған. Әҫәрҙе тотош уҡып сыҡҡас, ул мулланың характерында асылмаған серҙәр күбәйә генә барған һымаҡ. Ул, ғөмүмән, беҙҙең тормош һәм ер кешеһе түгел, ҡасан тыуғаны ла, нисек йәшәгәне лә тик ишаралар менән генә бирелә. Автор һынландырыуында Аллабирҙе мулла – һүнмәҫ һәм һынмаҫ рухтың сағылышы, тотош илдәр һәм халыҡтар тормошо тәрән үҙгәрештәр кисергәндә, уның йәшәү рәүеше һаман бер юҫыҡта барыуы ла шуны асыҡ күрһәтә. Асылда ул – Вилнар башына тиклем барып етеп, икенсе яҡҡа бороп ебәреп тә ағышын үҙгәртә алмаған Ташлы йылғаһы һымаҡ, йәшәйеш тотороҡлолоғо образы. Беҙҙең халҡыбыҙҙа, әйтәгүр, ауыҙ-тел ижады аша тапшырыла килеп, ундай образдар булып ойошҡан шәхестәр исемдәре байтаҡ. Әхмәрҙең Аллабирҙе муллаһын ана шундай шәхестәрҙең йыйылмалы образы тип ҡарарға кәрәктер.

Тураһын әйтергә кәрәк: романды геройҙар исемдәре буйынса өләштәргә бүлеп, һәр ҡайһыһын айырым-айырым һүрәтләү уны дөйөм тулылыҡта ҡабул итеү мөмкинлеген ҡатмарлаштыра. Ул, асылда, әҙерлекле уҡыусыға иҫәпләнгән. Ябай күҙ менән генә аңлап булмаған, шунда уҡ әллә күпме яуапһыҙ һорау тыуҙырған урындар күп. Шуларҙың береһе – ни өсөн Мөслим ауылы кешеләре шәхси детектив агентлығына мөрәжәғәт итә, бында бит ул тикшерерлек материал юҡ таһа? Зыярат бар, уны барлыҡҡа килтергән мулла бар, барыһы ла күҙ алдында, ғәм халыҡ алдында башҡарыла. Тик детектив тикшерерлек материал юҡ. Быны ла автор махсус рәүештә эшләгән бер шартлылыҡ тип ҡабул итергә кәрәкме: ҡапма-ҡаршылыҡтың сәбәп-эҙемтәләрен, әйҙә, ябай герой түгел, ә профессиональ детектив тикшерһен, шулай ышандырырлыҡ булыр, йәнәһе.

Әммә романда һүрәтләнгән геройҙарҙың һәр ҡайһыһы сағыу һәм ҡабатланмаҫ шәхес булыуында шик ҡалмай. Холоҡтары менән дә, эшләгән эштәре, ҡылған ҡылыҡтары менән дә үҙенсәлекле улар. Ата коммунист Динмөхәмәттең мөхәббәт хаҡына мәсеткә барырға йөрьәт итеүе, үҙенең улына үҙенең исемен ҡуштырыуы кеүек ғәҙәти тормошта һис ҡабул итеп булмаҫтай принциптары уны көслө һәм сағыу

кеше булараҡ ҡылыҡһырлай. Әҫәрҙең икенсе, төпкө ҡатламдарына төшөп, үҙенең аҡылы менән генә уҡыусы шуны аңлай: баҡтиһәң, Динмөхәмәт – Аллабирҙе мулла кеүек үк көслө шәхес, хатта яҙмыш һыҙған юлдары ла берҙәм булырға тейеш булған уларҙың. Әммә ил һәм халыҡ бүленгән ваҡытта был ике көслө шәхес лагерҙың ике яғына баҫа. Еңәләрме улар бер-береһен? Юҡ, был тороштан бер кемгә лә файҙа юҡ. Динмөхәмәт, һуғыштан бер ере лә сыйылмай йөрөп ҡайтып, бүрегә һунарҙа атылып үлеп ҡуя. Аллабирҙе мулланың да, тормошта ниндәй һынауҙар кисермәгән кешенең, ахыр сиктә үҙ ҡулдары менән тыштағы зыяратты эскә индереп ҡуйыуын күрәбеҙ беҙ. Ләкин автор романдың башында уҡ ныҡлап сейләндереп ҡуйған төйөн сиселергә уйламай әле: уларҙың үҙҙәренән дә былайыраҡ холоҡло балалары уртаҡ ғаилә ҡороп йәшәп ята, детектив та үтә ныҡ йәшерелгән серҙең осон тағатыр өсөн ғалим янына йүнәлә... Былар уҡыусыны тағы ла нығыраҡ, тәрәнерәк уйҙарға тарыта һымаҡ: әкиәттәгесә, ярашыу менән тамамландымы әҫәр, барыһы ла үҙ ярҙарына ҡайттымы, әллә ҡуласа яңы әйләнешкә күсеп кенә киттеме?

Суицид күренеше беҙҙең бөгөнгө тормошобоҙҙо сағылдырған прозабыҙҙа һәр әҫәрҙә тиерлек урын ала килә. Аңлашылған да һымаҡ: тормошто һүрәтләйһең икән, унан да ҡаса алмайһың. Ләкин был теманы тотош роман кимәленә сығарып, уны әҫәрҙәге һәм тормоштағы ғәҙәти күренеш тип ҡарамай, сәбәптәрен эҙләргә керешеү – бөтөнләй икенсе нәмә. "Үләләр бит, шайтан алғырҙары!" – тип журналистарҙың йә әҙәби әҫәр персонаждарының әсенеп яр һалыуы түгел был, ә геройҙарындың барыһының да зиһенен, уй-ғәмәлдәрен шул юҫыҡҡа бороп ебәреү, мәсьәләне төрлө яҡлап тикшереп, уның тәрән тамырҙарын юлларға тырышыу.

Ошо ерҙә, бәлки, әҫәрҙең "көн ҡаҙағына һуғыуы", "заманса яңғырашы", "көнүҙәк мәсьәлә күтәреүе" кеүек таралған стандарт һүҙбәйләнештәр теҙмәһенә күсеп китергә мөмкин булыр ине. Уныһын башҡалар эшләр. Мин бары шуны ғына әйтеп үтмәксемен был ҡыҫҡа мәҡәләмдә: Әхмәр Үтәбайҙың был романы – ябай уҡыусы өсөн түгел, ул унда бер ни аңламаясаҡ (быңдай фекерҙе миңә бер нисә кеше әйтте лә инде). Был әҫәр уйлана белгән, үҙе лә эҙләнә белгән кеше өсөн эшкәртәһе материал ғына. Ни өсөн беҙ быуаттар дауамында классик әҙәбиәт геройҙары ҡылыҡтары, характерҙары тураһында бихисап бәхәстәр алып барабыҙ, мәктәптә иншалар яҙабыҙ, табындарҙа һәм ике-ара әңгәмәләрҙә төрлө бәхәстәр ойошторабыҙ? Сөнки улар беҙҙе битараф ҡалдырмай. "Тыштағы зыярат" ана шундайҙар рәтенән, ул үҙе үк тыштағы зыяраттың ҡәбер ташы һымаҡ – беҙгә беҙҙең хаталарыбыҙға төртөп күрһәтеп тора.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**

## ЯҘМЫШЫ – ШИҒЫРҘАРЫНДА

*(Рәмил Ҡол-Дәүләт ижады)*

Шағир Рәмил Ҡол-Дәүләт 1958 йылда Әбйәлил районының Әлмөхәмәт ауылында донъяға килә. Был ауылдан бербер артлы өс күренекле әҙип сыҡты: яҙыусы, публицист, дәүләт эшмәкәре, ғалим Рамаҙан Өмөтбаев, әҙәбиәт ғилеме белгесе, тәнҡитсе Ким Әхмәтйәнов, шағир, драматург Рәмил Дәүләтҡолов.

Рәмил Урал урта мәктәбен тамамлағандан һуң, Стәрлетамаҡ мәҙәни-ағартыу училищеһында уҡый. Артабан шағирҙы яҙмыш елдәре Баймаҡ, Бөрйән яҡтарына алып килә, унда ул мәҙәниәт йорттарында методист булып эшләй. Ошо ваҡыттарҙа ҡулына ҡәләм алһа ла, шиғырҙары гәзиттәрҙә донъя күрмәй, йәнәһе, килмешәк тип ҡарайҙар. Ләкин йәш шағир бирешеп ҡалмай, Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә, талантын үҫтерә, ижад итә. Тәүге шиғырҙары "Совет Башҡортостаны"нда, "Ленинсы" ла, "Йәш көстәр" альманахында донъя күрҙе. Шағирҙың университетта уҡып йөрөгәндә "Ямғыр алдынан", "Һигеҙенсе мөғжизә" исемле китаптары баҫылып сыҡты. Ошо ике китап араһында – өс йыл ваҡыт, ә шул ваҡыт эсендә шағирҙың уй-кисерештәре ни тиклем үҙгәргән. "Рәмилдең һоҡланыу ҡатыш һыҙланыу, шатланыу ҡатыш әрнеү менән яҙылған шиғырҙарын уҡып тетрәнгәндә, йән яныуҙарының тағы ла шаһиты булғанда, шағир кисерештәренең әлеге замандыҡы, кешелектеке, үҙендеке, халҡындыҡы менән уртаҡ икәнен бермә-бер тояһың".[1]

"Һигеҙенсе мөғжизә" шиғырында был үҙгәрештәр айырыуса асыҡ күренә, сөнки ул – күптәр өсөн уртаҡ көйрәлеү-төңөлөүҙәрҙең сағылышы.

*Яһалмалыҡ баҫа был тормошто,*
*Ялған матурлыҡтан йән биҙгән.*

Ошо юлдарҙа уҡ шағирҙың әрнеүҙәре, уй-кисерештәре яңғыраш ала, ил яҙмышы хаҡында уйланыуҙары биләй.

*Кәрәк түгел затлы дәү һарайҙар,*
*Ҡурай ғына бары уйнаһын.*
*Ул уйнаһа, онотола кеүек*
*Ете мөғжизәһе донъяның.*
*Ғүмеремдең бер асылы һиндә,*
*Ҡыҙыҡтырмаҫ бүтән бер ни ҙә.*
*Күңелемде матурлыҡҡа әйҙәп,*
*Йәшә әйҙә, йәшә,*
*Һигеҙенсе мөғжизә!*

Ә шулай ҙа ҡайҙа һуң ул һигеҙенсе мөғжизә? Был шиғыры менән шағир күп нәмәне инҡар итә, ләкин шәхестең ерҙәге бөйөк вазифаһын, кешенең кешелеклеген раҫлау өсөн кире ҡаға. Тимәк, һигеҙенсе мөғжизә – халыҡ аҡылы, халыҡ рухы, милләтте милләт иткән һәм

[1]Үтәбай Ә. "Тоҡандырыусылар"ҙың береһе. — // Башҡортостан, 2008, №74.

итәсәк йәшәү көсө, унының ижад дәрте. Ошоларҙың барыһын моңға әйләндереп, киләсәккә еткереүсе ҡурай – бына ул һигеҙенсе мөғжизә.

"Килен" шиғыры илебеҙ – Башҡортостан яҙмышына ҡағыла, әрнеү-һағыш менән һуғарыла. Тәүге юлдарҙа уҡ уй кисерештәренең төп яңғырашы ишетелә.

*Башҡортостаным, илем,*
*Яҙалмай бер ҙә билен.*
*Гүйә, мыжыҡ ҡәйнәһенә*
*Хеҙмәт итеүсе килен.*

Уҫал ҡәйнәһенә ғүмер буйы бил бөгөп хеҙмәт итеүсе килен хәлендәге Башҡортостан илен һүрәтләй. Ысынлап та, шундай оҫта сағыштырыу алымын ҡулланып шағир күңелендәге тынғыһыҙ уй-кисерештәрен асып һала.

*Ауыҙ асып һүҙ әйтә алмай*
*Аҙмы йәшәнең, илем.*
*Шып-шым ғына йөрөй торғас,*
*Юғала яҙҙы телең.*

Күреүебеҙсә, шағирҙы ил, тел, халыҡ яҙмышы борсой. Үҙ ерендә йәшәп тә хужа була алмаған халҡына әсенеүе, үҙ телендә иркен аралашмай, телен яҡлай белмәгәндәргә шағирҙың йөрәк һыҙланыуы түгелме? "Килен" шиғыры заман проблемаһын туранан-тура асып һала. Илен, телен яҡламаған халыҡ кем ул? Башҡортостан ниңә кемгәлер буйһоноп йәшәргә тейеш? Илебеҙҙең йөҙән һәр шағир үҙенсә күҙ алдына килтерә, унының тауҙарына, далаларына, һауаларына үҙенсә һоҡлана. Ә Рәмил Ҡол-Дәүләттең шиғыры илебеҙҙең үткәнен, бөгөнгөһөн, киләсәген күҙаллай. Шағир ил, тел, милләт мәсьәләләрен алға ҡуя. Был шиғырҙың нескәлеге тормоштағы, кеше күңелендәге йәмһеҙ үҙгәрештәрҙе күреп, йәмғиәттең бәғерҙәренә үткән һыҙланыуҙарға төйөнләнә.

Шағирҙың ижадында Башҡортостандың, башҡорт милләтенең ғорур һәм ғазаплы һыны төрлө образдарҙа асыла бара. Шиғырҙарҙа тыуған ергә, халыҡҡа оло ихтирам бар, ләкин бер генә образ деталдә лә уларҙы идеаллаштырыу, һуҡыр табыныу юҡ. Ул ысынын әйтеп һөйләшә, күнегелгән ҡалыптарҙы вата торған шағир. "Тыуған ерем" шиғырын ғына алып ҡарайыҡ.

*Ябырылған дау-яуҙарҙың*
*Бында булған аҙағы.*
*Яман эшкә нөктә ҡуйған*
*Башҡорттоң уҡ-һаҙағы.*
*Баҫҡаҡтарҙың бөткән ере,*
*Башҡорттоҡо – башланған.*
*Башҡынама таш яуһа ла,*
*Был ерҙәрҙе ташламам.*

Ил яҙмышы, халыҡ яҙмышы тураһында уйланыу, замандың ил тормошоноң иң үткер мәсьәләләрен күтәреү унының шиғырында үҙәктә торҙо. Шулай уҡ шағир тыуған ерҙе яратырға, ниндәй генә ауыр минуттар булһа ла илеңдән, тыуып үҫкән ереңдән айырылмаҫҡа өндәй.

Шағирҙың был юҫыҡтағы уйланыуҙары, борсолоуҙары "Иҫерек Рәсәй", "Ниндәй ер был ғазаптары бөтмәҫ", "Юҡ, бәхетле булып булмаҫ" исемле шиғырҙарында ла дауам итә. Рәмил Ҡол-Дәүләтте заманынан, ижади ҡараштарына нигеҙ булған тормош шарттарынан айырып аңлау ҙа, аңлатыу ҙа мөмкин түгел. "Заман башҡа – заң башҡа" тигәндәй илебеҙ ҡырҡа үҙгәрҙе, тормош бәҫен юғалта башланы түгелме? Эскелек, наркомания, фәхишәлек кеүек заман афәттәре илебеҙҙе түбәнгә этәрә, халҡыбыҙҙың аңын, рухын һүндерә. Шуға ла шағир "үҙ мөлкәтен үҙе һатып эскән, бер эскесе кеүек дәү илем" тип әсенә:

*Тартынмай ул бер кемдән дә, хатта*
*Аманатын һатып ул эсә.*
*Беләм: иртән ҡоро ҡулдар ҡалыр,*
*Һәм ҡапшарьа ҡалыр буш кеҫә.*

Рәмилдең борсолоуының сәбәптәре тәрәнерәк: бындай көнкүреш милләттең психологияһын да үҙгәртә – күркәм сифаттар, рухи байлыҡ юғала. Донъялағы ғәҙелһеҙлектәр өсөн шағир үҙен дә ғәйепле тоя, хатта үҙ-үҙенә ҡарата ошондай ҡаты хөкөм сығара:

*Аҡланырлыҡ, илем, һүҙем дә юҡ,*
*Көсөм дә юҡ тура ҡарарлыҡ.*
*Кисә хата тиеп уйлаған ым*
*Енәйәткә бөгөн торорлоҡ.*

Рәмил Дәүләтҡолов шиғриәте һыҙланыуҙар менән тулы. Уның матбуғатта иғтибарҙы тартҡан иң тәүге шиғырҙарының береһе "Яралы торна монологы" тип аталғайны. "Яҙҙан-көҙгә, көҙҙән-яҙға, түҙәйексе йәнем аҙға" – бында торна һүҙҙәре менән кеше кисерештәре ҡушыла, ике һыҙланыу бергә ҡушыла, сөнки бөгөн тәбиғәт тә, кеше лә яралы. Уртаҡ яҙмыш, уртаҡ әрнеүҙәр. "Саңдау" шиғырында "шау тойғоло күңелемде тапап, әйләндереп киттең саңдауға" тигән күренештә лә матурлығы тапалған тәбиғәт менән күңел йәнәшә һүрәтләнә. Бындай йәнәшәлектәр шиғриәттә ғүмер буйы булған, ләкин ошо боронғо шиғри алым да хәҙер яңы мәғәнә ала, замандың экологик һ.б. борсоулы хәлдәре менән ауаздашлыҡ таба.

Ысынлап та, кешенең ғүмер йылғаһы, яҙмыш дарьяһы ла шулайыраҡ бит: әҙәмдең дә тыштан бик белгертмәй, эстән янып ярһыуы ихтимал. Әрнеүҙәр, үкенеүҙәр төптәрәк ята. Шатлыҡ ҡына ул, ҡояш сағыуындай, йөҙгә, күҙгә бәреп сыға. Тәбиғәт менән кеше күңеленең әрнеүҙәре, ғазаптары Рәмил Ҡол-Дәүләт поэзияһындағы бик характерлы поэтик сара – образлы параллелизмды – йәнәшәлекте үҙенсә бер шиғри система итеп нығыта.

Белеүебеҙсә, хәҙерге шиғриәт – ирониялы шиғриәт. Быны Рәмилдең ижади үҫешендә лә күҙәтеп була, уның лирикаһы йыш ҡына шаян була, мәрәкәгә ҡорола. Иң мөһиме, уның ирониялы, тапҡыр телле шиғырҙары уҡыусыларҙы кисәге һәм бөгөнгө ҡатмарлы тормош тураһында нығыраҡ уйландыра.

"Ҡорама" шиғырының үҙенсәлегенә туҡталып китәйек.

*Эстәремә, зинһар, эскәрәк ин,*
*Еңел-елпе генә ҡарама.*
*Минең күңелем төрлө тойғоларҙан*
*Ҡоршалған бер төҫлө ҡорама, –*

тип башланып китә шиғыр. Шағирҙың тиҫтерҙәре, ҡәләмдәштәре Рәйес Түләк, Ғәбиҙулла һәм Әхмәр Үтәбай менән берлектә "Егет һүҙе" (Өфө, "Китап", 1997) тигән ятаҡ-тупланмаға ингән китабының да исеме "Корама" тип атала. Был шиғыры менән автор бөгөнгөбеҙҙө күҙаллай. Ҡорама – ул символик образ. Әхмәр Үтәбай яҙып үтеүенсә: "Корама"ның хәҙерге заманға бәйле кинәйәһе бик тәрән. Айырым кешеләрҙе генә түгел, тотош халыҡтарҙы "ҡорама"ға әйләндерергә тырышыусы ил сәйәсәтенә ҡарата бик тәрән ризаһыҙлыҡ та ята төҫлө ошо шиғырҙа. Ҡорама – төрлө тойғоларҙан ҡоршалған шағир күңеле генә түгел, кешеләрҙе "аҡтар"ға, "ҡаралар"ға, "байҙарға – ярлыларға" бүлеүсе илдең емерткес сәйәсәте лә.

*Булды – бер әү*
*Аунап иркәләнде,*
*Һөртөп китте аҙаҡ аяғын, –*

ти автор, шул уҡ "ҡорама"һын күҙ алдына килтереп.

"Арҡайым" шиғыры кешелектең күңел донъяһын яҡтыртыуға ҡайтып ҡала.

*Шаҡ ҡатырғыс алдаҡ хәбәрҙәрҙән*
*Лыҡа тулы бахыр башҡайым.*
*Шуға ла микән аптыратмай мине*
*Сер йомғағы – бөйөк Арҡайым.*

Шағир Арҡайым образы менән кеше күңелен йәнәшә ҡуйып серле хазина булыуын бәйән итә. Арҡайымды сер йомғағы күргәндәй өйрәнәләр, ә кеше яҙмышын, үткәнен, киләсәген байҡау тураһында уйламауҙарына әсенә, кеше күңеле лә – сихри донъя.

Рәмилдең тыуған төйәгенә арнап яҙған шиғырҙары ла бихисап: "Ҡыҙыл буйы", "Талдар", "Ҡыҙыл ғына буйы ҡыҙыл балан". Шағирҙың тыуған ерҙең матурлығына һоҡланыуы, ҡайнар мөхәббәт кисерештәре лә шиғри һәм тәбиғи әйтеп бирелгән. Ысынлап та, шағирҙарҙың рухи донъяһы мөхәббәттә нығыраҡ асыла. Уның "Һиңә", "Һинең һүрәт", "Таң ата", "Бөрйән ҡыҙына" исемле шиғырҙары һөйөү хистәре менән һуғарылған.

*Был мөхәббәт ябай кешене лә*
*Рафаэлдәй итә, күрәһең...*

Һөйөүһеҙ ысын мәғәнәһендә кешенең тормошо юҡ төҫлө, сөнки мөхәббәт йәшәргә көс, дәрт, ижадҡа илһам ҡуҙы өҫтәй.

Күпте юғалтҡанда ла, шағир өмөт менән ышанысын, мөхәббәтен юғалтмай. Мөхәббәтле юл – тоғро, хаҡ юл. Рәмил Дәүләтколовтың мөхәббәт лирикаһы – үҙе бер серле сихри донъя.

Шағир яҙмышы халыҡ менән, донъя менән, заман менән мәңгелеккә бәйләнештә йәшәй, улар менән бергә ярһый-тулҡынлана. Уның иғтибар үҙәгендә – замандың борсоулы уй-кисерештәре, донъя алдына баҫҡан ҡатмарлы һорауҙар. Ул һәр кеше яҙмышы өсөн үҙен яуаплы тоя, гражданин булараҡ тормоштоң үҙәгенә, көрәштең алғы һыҙығына ашыға.

Рәмил Ҡол-Дәүләттең әйтер һүҙҙәре шиғриәт ҡосағына ғына һыйып бөтмәне. Шуға ла ғүмеренең һуңғы осоронда драма жанрына тотондо. "Бермуд өсмөйөшө", "Тышаулы өйөр", "Шартлап китһен донъяһы", "Һарысәс", "Алло, самолетта шартлатҡыс", "Ҡарауыл" пьесаларын ижад итте. Улар күп кенә театрҙарҙа ҡуйылды, телевидение аша күрһәтелде. Рәмил Ҡол-Дәүләт башҡорт әҙәбиәте күгендә сағыу йондоҙ булып балҡыны. Ҡыйыу, тура һүҙле булғаны, һәр кемдең күңелен әрнеткән нәмәләрҙе ярып әйтә белгәне, таланты өсөн яратты уны халыҡ.

**Сәриә РАМАЗАНОВА,**
**БДУ-ның Сибай институты**
**филология факультеты студенты.**

# КЛИМАТ НИҢӘ КӨЙҺӨҘЛӘНӘ?

## Инеш

Әҙәм балаһының эшмәкәрлеге ғүмер баҡый һауа торошона, йәғни климатҡа бәйле булған. Шуға ҡарап ул үҙенә йәшәү өсөн уңайлы урын һайлаған. Мәҫәлән, Чукоткала балыҡ тотҡан, Урта Рәсәйҙә иген иккән, мал үрсеткән, Урта Азияла йәшелсә-емешкә өҫтөнлөк биргән. Климат ҡырҡа үҙгәреү кешене йәшәү өсөн уңайлы башҡа урын эҙләргә мәжбүр иткән, йәғни миграция башланған. Әле лә цивилизация ошоға оҡшаш процесс кисерә. Һауа торошона бәйлеме ул? Ғөмүмән, хәҙерге климат хаҡында беҙгә нимәләр билдәле? Түбәндәге яҙма етди уйланырға мәжбүр итә.

Бөтә донъя метеорология ойошмаһының һығымтаһы буйынса, 2010 йылдың йәйендә һауа шарттары ҡырҡа боҙолоу – климат үҙгәреү эҙемтәһе, һәм ул кеше эшмәкәрлегенә бәйләнгән. 1880 йылдан һуң тәү тапҡыр былтыр ғинуар – апрелдә үк һауа температураһы иң юғарыһы ине. Ҡыш Цельсий буйынса 1,89, яҙ 1,37 градусҡа йылыраҡ теркәлде. Июнь-июлдә иһә Көнсығыш Европала атмосфера урыны менән 40 градусҡаса йылынды. Майҙа ғәҙәти булмаған эҫелек Рәсәйҙең көнсығыш һәм үҙәк райондарына ла үтеп инде. Көньяҡ Американа һалҡын һауа көслө ел һәм ҡар алып килде, йәйәүле буран сыҡты. Июлдә Аргентинала һәм Чилиҙа температура – 18, – 22 градусҡаса төштө. Көньяҡ Африкала ла 25 сантиметр ҡалынлығында ҡар яуҙы.

Һиндостан, Пакистан һәм Бангладешты көслө муссон ямғырҙары йыуып, 500-ҙән ашыу кеше һәләк булды, 10 миллионлабы тыуған ерҙәрен ташлап китте. Бик күп сәсеүлектәр зыян күрҙе, мал-тыуар, башҡа мөлкәтте һыу йыуып алып китте. Көньяҡ Ҡытайҙа һыу баҫыуҙан 120 кеше үлде, 13 миллионы төрлө ҡаза күрҙе. Хатта Ғәрәп диңгеҙендә лә бер ҡасан да булмаған тропик циклон күҙәтелеп, Англия менән Уэльста көслө ямғырҙар яуҙы, Кувейтта дүрт көн рәттән 50 градустан юғары эҫелек күҙәтелде. Францияға ябырылған «Ксинтия» өйөрмәһе 45 кешенең ғүмерен өҙҙө һ.б. Бөтә донъя гуманитар форум мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2010 йылда тәбиғәт стихияларының – 91, ә кеше ҡорбандарының 79 проценты климат ҡырҡа үҙгәреү менән бәйле. 250-нән ашыу стихиялы ҡазанан 60 миллиондан күберәк кеше зыян күргән.

Быйыл апрель баштарында уҡ Алтай һәм Красноярск крайҙарында, Омск өлкәһендә һауа 26 – 28 градусҡа саҡлы йылынып, тағы урмандар яна башланы. 16 апрелдә АҠШ-тың алты штатында 200-гә яҡын торнадо сығып, йөҙләгән кеше һәләк булды. Ә 28 апрелдә Иркутск өлкәһендә көслө ҡар яуып, ҡышҡы температура урынлашты. Шул уҡ көндө АҠШ-та ҡоторонған торнадола 300-ләп кеше үлде. 30 апрелдә Португалияла ҡар яуҙы һ.б.

Интернет селтәренең Mail.ru агентлығы былтыр, Бөйөк Британия ғалимдары Рәсәйҙә ике ай торған эҫелектең нимәгә бәйле икәнлеген асыҡланы, тигән мәғлүмәт таратты. Тик уның ни сәбәптән икәнлеген генә әйтә алмайҙар. Рединг университеты метеорологы М. Блекберн фекеренсә, Рәсәйҙәге эҫелек менән

Пакистанды һыу баҫыуҙың сәбәбе атмосфераның юғары ҡатламында ағымдарҙың үҙгәреүендә. Ерҙән 7–16 километр юғары атмосфера ағымы шундай көслө, уның тиҙлеге ер өҫтөндәгенән ун тапҡыр шәберәк. Көнбайыштан көнсығышҡа иҫкән был ағым көньяҡ йәки төньяҡҡа тайпылып, тулҡындар барлыҡҡа килтерә. «Һуңғы осорҙа был тулҡындарҙың хәрәкәте үҙгәрҙе, – ти Блекберн. – Улар тоткарланған кеүек булды. Шул арҡала аномаль күренештәр барлыҡҡа килде». Сәбәп нимәлә? Ҡыҙғаныска ҡаршы, климат торошо менән һауа ағымдары араһындағы бәйләнеште ғалимдар әле лә асыҡлай алмай.

Быйыл 10 мартта Интернет селтәрендә, АҠШ ғалимдарына һылтанып, аномаль йәй глобаль йылыныу менән бәйле түгел, тигән ҡапма-ҡаршы йөкмәткеле хәбәр ҙә күренеп ҡалды. Йәнәһе, экстремаль һауа шарттарын тәбиғи атмосфера күренештәре барлыҡҡа килтергән. Ләкин, «Росгидромет» етәксеһе А. Фролов фекеренсә, был ысынбарлыҡҡа тап килмәй, сөнки һуңғы ун йылда Рәсәйҙә уртаса температура башҡа илдәргә ҡарағанда ике тапҡырға тиҙерәк күтәрелгән.

Уҙған йәй беҙҙең илгә лә бихисап ҡаза килтерҙе. Августың тәүге ун көнөндә Рәсәйҙә 500 мең гектар урман яна ине. Тиҫтәнән ашыу төбәктә, айырыуса Түбәнге Новгород, Воронеж, Рязань, Мәскәү өлкәләрендә хатта ауылдар янып юҡҡа сыҡты, 52 кеше һәләк булды, 3,5 меңе торлаҡһыҙ ҡалды. Рәсәй 200-ләп авиация техникаһы, 20 миллиард һумлыҡ мөлкәт юғалтты. Урмандар кинофильмдарҙағы һуғыш булып үткән урындарҙы хәтерләтә ине. Матди ярҙам йөҙөнән РФ хөкүмәте ҡаза күреүселәргә 5 миллиард һум аҡса биреү тураһында ҡарар сығарҙы.

Янғындар 3 миллион (!) гектар самаһы урманды юҡ итте, ти белгестәр. Был экологик ҡаза климатҡа йоғонтоһон әле алда күрһәтәсәк. Янған урман урынында яңыһын үҫтереү өсөн тиҫтәләрсә йыл кәрәк. Башҡортостанда ла 8,6 мең гектар урман янып, 41 миллион һумлыҡ зыян килтерҙе. Тәүге мәғлүмәттәр буйынса уҡ аномаль йәйҙең ауыл хужалығына килтергән зыяны 30 миллиард һум тип баһаланһа ла, ул һуңғы мәғлүмәт түгел ине. Сит илдәргә иген һатыуҙы тыйыу менән бәйле генә лә ил, белгестәр фекеренсә, 3 – 6 миллиард долларҙан ҡолаҡ ҡағып, донъя баҙарында биләгән дүртенсе урындан төшөп ҡалды. Аномаль йәйҙең дөйөм зыянын белгестәр 15 миллиард доллар менән баһалай.

## Ер шарын нимә көтә: глобаль йылыныумы?..

Климаттың ҡырҡа үҙгәреүе менән бәйле мәғлүмәттәр бик күп. АҠШ-тың Океанды һәм атмосфераны өйрәнеү институты 48 илдең 300-ҙән ашыу ғалимы ҡатнашлығында «Климаттың торошо» тигән доклад әҙерләгән, тип хәбәр итте былтыр «Российская газета». Документ өсөн мәғлүмәттәр спутниктар, метеорологик аэростаттар, метеостанциялар һәм кораблдәрҙән алынған. Уларҙы өйрәнеп, ғалимдар, Ер шары йылына, тигән һығымтаға килгән.

Климаттың торошон билдәләү өсөн 10 төрлө үлсәм ҡулланылған: ер һәм океан өҫтө, барлыҡ тропосфералағы температура, һауаның дымлылығы, донъя океанының өҫкө температураһы, донъя океанының дөйөм йылылығы, диңгеҙҙәр кимәле һәм боҙлоҡтар майҙаны, ҡар һәм диңгеҙ боҙо ҡалынлығы. Һуңғы өс үлсәмдән башҡалары үҫеш кисерә. Тропосфераның түбәнге ҡатламында температура 1960 йылдар менән сағыштырғанда – 0,6, ә 90-сы йылдарға ҡарағанда 0,2 градусҡа юғары, – ти белгестәр. – Атмосферала углекислый газ арта. Антарктидала озон ҡатламы 90-сы йылдар менән сағыштырғанда кәмей.

Интернет һәм ваҡытлы матбуғат материалдары менән танышыу, ғөмүмән, Көнбайыш илдәрендә климат, һауа торошо мәсьәләләре менән етди шөғөлләнеүҙәренә ышандыра. «Российская газета» хәбәрсеһенең Англиялағы Эксетер ҡалаһында урынлашҡан Хадли-үҙәк – донъялағы иң ҡеүәтле метеостанция

белгестәре менән осрашып һөйләшеүе айырыуса фәһемле. 2010 йылдың йәйе кеүек күренештәр алдағы йылдарҙа тағы ла күберәк буласаҡ, – ти улар. – Европаны, мәҫәлән, һуңғы 5000 йылдан һуң бик етди климатик үҙгәрештәр көтә. Эҫе көндәрҙең тәбиғәтен үҙәк белгестәре күмер, нефть һәм газ яндырыу менән бәйләй. XXI быуатта, ғөмүмән, һалҡын көндәр аҙыраҡ буласаҡ».

«Глобаль йылыныуға ниңә күптәр шикләнеп ҡарай?» тигән һорауға климат күренештәрен күҙәтеүсе Питер Скотт былай яуаплай: «Хөкүмәт-ара төркөм был бәхәскә 2007 йылда уҡ нөктә ҡуйҙы. Климат йылына, һәм был атмосферала парник газдарының артыуына бәйле. Кемдәрҙер шикләнә икән, бының үҙ сәбәптәре бар. Мәҫәлән, быйыл Бөйөк Британияла һалҡын көндәр йыш булды, шуға күрә ғалимдарға һауа менән климат торошо араһында айырма барлығын даими аңлатып тороу зарур». Скотт фекеренсә, һауа торошон, яуым-төшөмдө 4-5 көн алдан фаразларға мөмкин. Океандарҙағы хәл торошо һ.б. күрһәткестәрҙе сағыштырыу нигеҙендә ете-ун көнгә алданыраҡ та әйтергә була. Рәсәйҙә һауа торошоноң ҡырҡа боролоштарын белгес уның Төньяҡ ярымшарҙа урынлашыуы, ҡар һәм боҙ ҡатламдарының тиҙ йылыныуы менән аңлата. «Шул арҡала, – ти ул, – ер өҫтө йылыны кире ҡаҡмай, ә үҙенә һеңдерә».

Парник эффекты, йәғни Ер шарында климаттың йылына башлауына беренсе тапҡыр 1824 йылда француз физигы Жозеф Фурье иғтибар итә. Ләкин кешелеккә уның асылын аңлау өсөн быуат ярымдан ашыу ваҡыт кәрәк була. Синоптиктар атмосфераның йылыныуына заводтар һәм автомобилдәр сығарған углекислый газ булышлыҡ иткәнен күптән әйтә килә. Мәҫәлән, 1 литр бензин янғанда 2,5 килограмм кислород юҡҡа сыға. Глобаль йылыныу менән иң ныҡ ҡыҙыҡһынғандарҙың Бөйөк Британиянан булыуы ғәжәп түгел, сөнки донъя океаны күтәрелә ҡалһа, был утрау һыу аҫтында ҡаласаҡ. 2006 йылда Бөтә донъя банкының баш экономисы, хәҙер Лондондың иҡтисад мәктәбе профессоры Николас Стерн әҙерләгән доклад буйынса бер ниндәй ҙә сара күрмәгәндә, XXI быуатта ахрызаман етеүе ихтимал. «Температура 100 – 200 йылда 5 градусҡа артһа, – ти Стерн, – донъя океаны күтәрелеп, 1 миллиард кеше эсәр һыуһыҙ ҡаласаҡ, йоғошло ауырыуҙар миллиондарса кешене юҡ итәсәк». Миграцияның ниндәй дәрәжәгә етәсәген күҙаллау ҙа мөмкин түгел.

Быйыл Копенгагенда үткән саммит алдынан Англияның «Гаридан» гәзитенең баш мөхәррире, баҫтырып сығарыуҙы һорап, Рәсәйҙәге «Новая газета» редакцияһына мәҡәлә-мөрәжәғәт ебәрә. «Әгәр ҙә беҙ глобаль йылыныуға ҡаршы күмәкләп көрәшмәһәк, – тиелә унда, – Ер шарына төҙәтә алмаҫлыҡ зыян килтерәсәк. Беҙ Копенгагенда йыйылған 192 дәүләт вәкилдәрен шикләнеүҙәрҙән арынырға, бәхәс-ғәйепләшеүҙе туҡтатырға саҡырабыҙ. Глобаль йылыныу бөтәбеҙгә лә ҡағыла, проблеманы хәл итеүҙә барыбыҙ ҙа ҡатнашырға бурыслы».

Һауа шарттары ҡырҡа боҙолоуҙа кеше ғәйебе ни дәрәжәлә? «Известия-наука» ҡушымтаһы ошо хаҡта Интернетта ҙур мәҡәлә баҫтырып сығарҙы. «Глобаль йылыныу арҡаһында БМО белгестәре яҡын киләсәктә төрлө һәләкәттәр фараз итә, – тип яҙа гәзит. – Кешенең техноген эшмәкәрлеге – хәүефтең иң ҙур сығанағы. Һуңғы 40 йылда Мәскәүҙә уртаса температура 5 градусҡа күтәрелде. Ҡайһы бер теориялар буйынса, был күренеш Ерҙең йылы бүлеп сығарыу һәләтен тотҡарлай һәм парник эффекты тыуҙыра. Сәнәғәттең 200 йыллыҡ эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә атмосфераға углекислый газ сығарыу өстән бер өлөшкә күбәйгән. 90-сы йылдар уҙған быуаттың иң эҫе дәүере һанала. Сәнәғәт етештереүе әлеге күләмдә һаҡланһа, XXI быуат аҙағына климаттың 2 – 6 градусҡа йылынып, донъя океанының 1,4 метрға күтәрелеүе ихтимал.

Әлбиттә, климат йылыныу үҙенән-үҙе хәүеф килтермәй, – тип дауам итә гәзит. – Уның ҡапыл булыуы хәүефле, сөнки тереклек уға яраҡлашып өлгөрмәй».

БМО белгестәренең береһе Р. Уотсон былай тип иҫкәртә: глобаль йылыныуҙан ауыл хужалығы ҙур зыян күрәсәк, эсәр һыу кәмейәсәк, ҡоролоҡтар йышаясаҡ, көслө эпидемиялар таралыуы ихтимал. Һуңғы йылдарҙа йышая төшкән тайфун, циклондар ғәҙәти күренешкә әүереләсәк. Быйыл февралдә Японияның Хоккайдо утрауы халҡы зыяны буйынса 1945 йылдың авгусында Хиросима һәм Нагасаки ҡалаларына ташланған атом бомбаһынан бер ҙә кәм булмаған цунамиға дусар булды. Тотош ҡала-ҡасабаларҙы көслө тулҡын йыуып алды, өйҙәр һәм машиналар диңгеҙгә ағып китте. Ә Фукусима атом станцияһындағы авария меңдәрсә тонна радиоактив матдәнең атмосфераны, диңгеҙ фаунаһының ағыуланыуына килтерҙе. Авария эҙемтәләрен бөтөрөү йылдарға һуҙылмаҡсы, сөнки радиоактив матдәләр тиҙ генә тарҡалмай.

Ерҙә ыңғай температураның күтәрелеүе хатта иң ҙур һыу һаҡлағыстарҙағы ҡар һәм боҙҙоң ҡырҡа кәмейәсәген НАСА агентлығы тағы бер ҡат раҫлай. Ысынлап та, 1992 – 2002 йылдарҙа ике полюста ла боҙҙар әүҙем иреп, донъя океанында һыу күтәрелде, Көнбайыш Антарктидала, Көньяҡ-Көнсығыш Гренландияла боҙ ҡатламы ярайһы йоҡарҙы. Гренландияла йылына 11 миллиард тонна һыу боҙға әйләнһә, Антарктидала 31 миллиард тонна боҙ иреп, һыуға әүерелеүе билдәле. Тимәк, донъя океанына йыл һайын 20 миллиард тонна һыу өҫтәлә. АҠШтың Нью-Йорк, Нью-Джерси, Вирджиния штаттары халҡы һәм ауыл хужалығы йылына шул тиклем һыу тотона. Шул уҡ ваҡытта НАСА тикшеренеүселәре донъя океаны күтәрелеүгә боҙҙар иреү йоғонтоһоноң 2 процент ҡына булыуын асыҡлаған. Ҡалған факторҙарҙың тәбиғәте нимәлә? Быны тик спутниктар ярҙамында ғына асыҡларға мөмкин икән.

## ...әллә глобаль һыуыныуымы?

Ҡайһы бер ғалимдар фекеренсә, климат һалҡыная. Ер шарының һыуыныу циклына инеүе тураһындағы фараз меңдәрсә йылдар буйы алынған геологик мәғлүмәттәргә таяна. Глобаль һыуыныуҙың туранан-тура дәлилдәре юҡ. Улар шартлы. Мәҫәлән, 10 мең йыл элек сираттағы боҙланыу тамамланып, Ер йылына башлаған. 5,5 мең йыл әүәл ул да үҙенең юғары нөктәһенә етеп, кире процесс күҙәтелгән. Был дәлил ғалимдарҙың «Хәҙер глобаль һыуыныу башлана» тигән фаразына нигеҙ булып тора. Рәсәй Фәндәр академияһының Баш (Пулково) обсерваторияһы хеҙмәткәре Х. Абдусаматов та ошо фекерҙе яҡлай. «Температураның глобаль төшөүе 1645–1705 йылдарҙа бөтә Европала, Төньяҡ Америкала һәм Гренландияла күҙәтелгән, – ти ул. – Был күренеш фәндә Ҡояш әүҙемлегенең «Маундер минимумы» тип йөрөтөлә. Голландияла бөтә каналдарҙа ла һыу туңа, кешеләр Гренландияның бер өлөшөн ташлап китергә мәжбүр була. Иван Грозный батшалыҡ иткән дәүерҙә Ҡырымға сана юлы булыуы билдәле.

Ҡояш нурҙарының ун бер йыллыҡ һәм бер быуатлыҡ вариацияларының бер юлы һәм оҙайлы үҙгәреүе арҡаһында климат шарттары ла үҙгәрә, – ти Абдусаматов. – Анализдарҙан күренеүенсә, әле Ер глобаль йылыныуҙың иң юғары нөктәһендә. Артабан Ҡояш нурҙарының һүрәнәйеүе арҡаһында температура аҡрынлап төшәсәк. XX быуатта Ҡояштың активлығы көсәйеүе Ерҙә климаттың ҡырҡа үҙгәреүенә ғәжәпләнергә түгел, сөнки ундай хәлдәр элек тә күҙәтелгән. 2012 – 2013 йылдарҙа уҡ һалҡынайта башлаясаҡ, ә 2035 – 2045 йылдарҙа иһә беҙҙе глобаль һыуыныу көтә».

Рәсәйҙең Глобаль климат һәм экология институты директоры Ю. Израэль фекеренсә, парник газдарының тупланыуы Ер шары атмосфераһының миллион молекулаһына ҡарата 180 – 200-гә еткәндә боҙланыу күренештәре башлана. 1900 йылда парник молекулалары 280-гә етеүе билдәле. Хәҙер иһә – 380! Ә планетала температура хәҙергенән 10 – 12 градусҡа юғары булғанда молекулалар

һаны хатта 3 – 6 меңгә лә еткән. Ошо күҙлектән ҡарағанда, беҙ хәҙер һыуыныуға яҡын торабыҙ кеүек.

Израэль фекеренсә, фәндә климаттың ни өсөн үҙгәреүенә яуап юҡ, шуға күрә ниндәйҙер һығымталар яһарға иртә. АҠШ-тың Милли фәндәр академияһының элекке президенты Ф. Зейтц та, углеводородтар яндырыу климатҡа кире йоғонто яһай, тигән фекергә ҡаршы сыға. «Киреһенсә, – ти ул, – углекислый газ күбәйеү файҙалы, сөнки үҫемлектәрҙең үҫеүенә, хайуандарға ыңғай йоғонто яһай». Парник эффекты теорияһы ғәмәлдә раҫланмай, тип «Известия-наука» ла үҙенең ҡарашын белдерә. Күптән түгел Антарктидала уҙғарылған тәжрибәнән күренеүенсә, углекислый газ атмосфераның йылыныуы арҡаһында арта, ләкин киреһенсә түгел. Температура күтәрелгәндә парға әйләнеү көсәйә. Болоттар ҡуйыра һәм ер йылыны аҙыраҡ һеңдереп, һалҡыная.

2009 йылдың август аҙағында «Независимая газета»ла Мәскәү дәүләт университетының зоологик музейы хеҙмәткәре Георгий Любарский сығыш яһаны. «Циклик боҙланыуҙар теорияһы бар, – ти ул. – Был процесс йөҙҙәрсә миллион йылдарҙы үҙ эсенә ала. 30 миллион йыл элек һуңғы боҙланыу тамам булған, ул саҡта Америка утрауы ҡушылып, Панама муйыны барлыҡҡа килгән. Боҙлоҡтар үҙҙәре лә ҡыҫҡараҡ үлсәмдәргә бүленә». Любарский фекеренсә, кеше климат үҙгәреүгә етди булышлыҡ итә. Мәҫәлән, тәбиғәт яралған саҡтағы урмандар ҡалмаған. Европа урмандары – икенсе, ә Ҡытайҙа иһә кеше ҡулы теймәгән урын бөтөнләй юҡ. Үҫемлектәр, хайуандар донъяһы ла тамырҙан үҙгәрҙе. Ябай тел менән әйткәндә, Ер шарын дегәнәк, кесерткән, ҡомаҡ һәм күгәрсен баҫып бара. Шул уҡ ваҡытта Любарский озон ярыҡтарының ҙурайыуы менән килешмәй, «...киреһенсә, – ти ул, – элеккеләре бөтәшә бара».

Германияның Катленбург-Линдау ҡалаһындағы Макс Платон исемендәге Ҡояш системаһын тикшереү институтынан бер төркөм ғалимдар ҙа глобаль йылыныу теорияһын уртаҡлашмай. Улар планетаның активлығы кәмеү менән Европала ғәҙәти булмаған һалҡын ҡыштар араһында бәйләнеш тапҡан. «Вольф һаны, – ти улар, – бөгөн нулгә яҡын, тимәк, Ҡояшта таптар бөтөнләй юҡ. Планетаның магнит яланының да көсөргәнешлеге түбән. Активлыҡ кәмеүҙе циклик тирбәлеүҙәр менән генә аңлатып булмай».

Күҙәтеүҙәрҙән шуны күрһәтә: 1985 йылдан Ҡояштың активлығы кәмей, хатта иң көслө мәлдәрендә лә элекке ҡеүәтенә етмәй. 50-се йылдарҙан бирле әүҙемлек 22 процентҡа кәмегән. Атмосфераның төрлө туҙандар менән тулыуы ла ошоға булышлыҡ итә. Ғалимдар фекеренсә, Ҡояштың активлығы кәмеп, Европала 1645 – 1715 йылдарҙа күҙәтелгән Маундер минимумы ҡабатланыуға килтереүе ихтимал. Әммә был ихтималлыҡ 8 процент самаһы ғына.

Австралия, Канада һәм АҠШ тикшеренеүселәренең «Nature» журналында сыҡҡан мәҡәләһенә ярашлы, Ер орбитаһында емерелгән ваҡ астероидтарҙан ҡалған туҙан да климатҡа ярайһы ҙур йоғонто яһай. Элек ни өсөндөр был хәл ғалимдар тарафынан баһаланып етмәгән һәм өйрәнелмәгән. Белгестәрҙе астероидтарҙың Ергә килеп бәрелгәндән һуң булған күренеш ныҡыраҡ ҡыҙыҡһындырған. Сандио милли лабораторияһы таратҡан мәғлүмәттәргә ярашлы, 2004 йылдың 3 сентябрендә Антарктида яры буйында күҙәтелгән хәл былдай ҡарашты үҙгәртергә мәжбүр иткән. Әйләнәһе 10 метр самаһындағы астероидты АҠШ-тың Оборона министрлығы спутниктары Ерҙән 75 километр бейеклектә күреп ҡала. Ә Энергетика министрлығының ядро хәүефһеҙлеге милли идаралығы датчиктары астероид тыуҙырған акустик тулҡындарҙы ла эләктерә. НАСА-ның мультиспектрометры иһә астероид тарҡалғандан һуң барлыҡҡа килгән болоттарҙы күҙәтә. Артабан ғалимдар был болоттоң нисек итеп Ҡояш нурҙарын кире ҡағыуына шаһит була. Бер нисә секундта астероидтың бер

тоннаға яҡын туҙан барлыҡҡа килтереүе – сағыштырмаса һирәк күренеш. Ә бит Ер орбитаһына йыл һайын шундай 50 – 60 астероид үтеп инә. Был, моғайын, вулкан урғылыуынан бер ҙә кәм түгелдер. Тик һүҙ туҙандың ер өҫтөнән түгел, ә һауанан (стратосферанан) килеүе хаҡында бара.

Европала йылы климат тәьмин иткән, Ер шарында һауа торошон тотороҡландырған Гольфстрим ағымы тураһында ла төрлө фекерҙәр ишетелә. Италияның Фраскати институты докторы Д. Зангари, спутниктарҙан алынған мәғлүмәттәргә таянып, Гольфстрим юҡҡа сыҡты, тип белдерә. Быға, уның фекеренсә, АҠШ-тың Мексика ҡултығындағы ҡоролманан бәреп сыҡҡан нефть (ул 600 – 700 мең тонна!) ғәйепле. Гольфстрим туҡтауы арҡаһында Европаны һәм Ҡытайҙы һыу баҫты, Рәсәй һәм Азияға ҡоролоҡ ябырылды. Был һәләкәттең эҙемтәләрен нисек бөтөрөргә – бер кем дә белмәй. Артабан миҙгелдәрҙең дә буталыуы ихтимал. Был ауыл хужалығы уңышының кәмеүенә, миграцияның артыуына килтерәсәк. Иң хәүефлеһе шунда: боҙлоҡ дәүеренең теләһә ҡайһы ваҡытта башланыуы ихтимал.

Ләкин АҠШ-тың НАСА агентлығынан океан белгесе Джон Уиллис иһә ҡапма-ҡаршы фекерҙә. Унынса, һуңғы 18 йылда Гольфстрим көсәйеп кенә ҡалманы, хатта йылына төштө. Ғалимдың был һығымтаһы 20 йыл төрлө спутниктарҙан, тикшеренеү менән шөғөлләнгән караптарҙан алынған мәғлүмәттәргә таяна. Уиллис фекеренсә, Гольфстрим Амазонка тамағындағы ағымдан 75 – 80 тапҡыр ҡеүәтлерәк.

## «Ҙур сәйәсәт эш итә»ме?..

2009 йылдың майында «Российская газета» климат үҙгәреү менән бәйле проблемалар айҡанлы «Климатические войны» тигән мәҡәлә баҫтырҙы. Рәсәй ведомстволары был мәсьәләгә ҙур вайымһыҙлыҡ күрһәтә, тиелә унда. Халыҡ-ара форумдарға абруйлы белгестәр түгел, ә «Росгидромет» вәкилдәре генә йөрөй. Ә төрлө проекттарҙы Иҡтисади үҫеш һәм Энергетика министрлыҡтары кеүек нефть продукттары баҙарын киңәйтеүҙе хәстәрләгән ведомстволар раҫлай. Шул уҡ ваҡытта Рәсәй донъяла парник газдары сығарыу буйынса өсөнсө урынды биләй. Киото протоколы көсөнә ингәндән һуң эшләнгән йөҙләп экологик проекттың береһе лә теркәлмәгән. Ә Ҡытай был осорҙа 500-ләп проектты ғәмәлгә индереп, 120 миллион тонна ҡалдыҡты аҙыраҡ сығарыуға өлгәшкән. Һиндостан – 411, Бразилия 156 проект теркәгән.

Копенгагендағы һөйләшеүҙәрҙә Рәсәй делегацияһы Д.Медведевтың 2020 йылға атмосфераға углекислый газ сығарыуҙы 25 процентҡа кәметеү тураһындағы белдереүен сәйәсигә һанап, ил башлығын хурлыҡҡа ҡалдырыу ҙа ғәжәпләндерә.

Дания баш ҡалаһына сәфәр алдынан Рәсәй Президенты ғалимдарҙы йыйып әңгәмәләште. Өс сәғәт барған фекер алышыуҙың һөҙөмтәһе: климат үҙгәреү менән бәйле яр һалырға, углеводородтар баҙарында Ватан мәнфәғәттәрен ҡыҫыуға бирешергә ярамай. Рәсәй ғалимдары атмосфераға йыл һайын 15 миллиард тонна шартлы яғыулыҡ сығарылыуын, уның климатҡа кире йоғонтоһон инҡар итмәй. Фәндәр академияһының вице-президенты Н. Лаверов фекеренсә, һуңғы 20 йылда кешелек атмосфераға үҙ тарихында күҙәтелмәгәнсә ҡалдыҡтар сығарҙы. «Беҙ климатҡа кеше йоғонтоһон таныйбыҙ, – ти ул, – ләкин паникаға бирелергә ярамай».

Глобаль йылыныу мәсьәләләре, күренеүенсә, Рәсәй ғалимдарын да ҡыҙыҡһындыра, ләкин улар араһында фекер уртаҡлығы күҙәтелмәй. Үрҙә телгә алынған Ю.Израэль фекеренсә, һауа торошоноң ҡырҡа үҙгәреүе климат

үҙгәреүен иҫбатлай алмай. Һауа торошо көн һайын үҙгәреп торорға мөмкин, ә климат – юҡ. Шул уҡ ваҡытта ғалим, әгәр ҙә тейешле сараһын күрмәгәндә, Арктика, Гренландиялағы боҙҙар иреүҙең һәләкәткә килтерәсәген таный, тик ниндәй саралар күрергә кәрәклеген генә атап әйтмәй.

«Киото протоколына мин тәүәккәл ҡаршы сыҡтым, – ти ул. – Һүҙ парник газдарын кәметеү тураһында бара, ә уның күләмен нисек билдәләргә – яуап юҡ. Шул уҡ ваҡытта Ер шарында кеше йәшәмәгән осорҙарҙа ла һауаның хәҙергенән 10 – 12 градусҡа йылы булыуы билдәле. Парник газдары ла 10 – 15 тапҡыр күберәк булған». Ғалим фекеренсә, быуаттар буйы температура берсә күтәрелеп, берсә түбәнәйеп торған, уның сәбәптәре әле лә асыҡланмаған. Мәҫәлән, 1900 – 1910 йылдарҙа температура төшөп, 40-сы йылдарҙа, киреһенсә, күтәрелгән. Ә бит ул осорҙа һуғыш барған, сәнәғәт тә һүлпәнерәк эшләгән, тимәк, парник газдары ла аҙыраҡ бүленеп сыҡҡан. «Быны йылыныуы яҡлылар аңлата алмай, – ти Израэль. – Артабан сәнәғәт бөтә ҡеүәтенә эшләй башлай, ләкин температура 70-се йылдарға тиклем түбәнәйә. Унан тағы күтәрелә.

Киото протоколының хаҡы 1 триллион доллар, – тип дауам итә ғалим. – Парник газдарының артыуын туҡтатыу өсөн шундай хаҡ түләргә кәрәк. Рәсәй Фәндәр академияһында климат мәсьәләләрен өйрәнеүсе ғилми семинар эшләй, уларҙың фекеренсә, протоколдың ғилми нигеҙе юҡ. Беҙ 2004 йылда ошо турала төрлө илдәргә үҙ ҡарашыбыҙҙы белдереп, хаттар ебәрҙек. Әммә протоколды раҫланылар. Бында ҙур сәйәсәт эш итә». Хәйер, был тәңгәлдә Израэлдең фекерен уртаҡлашыусылар сит илдәрҙә лә бар. 2009 йылдың октябрендә «Независимая газета»ла Чехия президенты В.Клаустың мәҡәләһе донъя күрҙе. «Глобаль йылыныуҙың Ер шарына бер ниндәй ҙә хәүеф менән янамауына ышанам, – тип яҙа автор. – Был фекерҙе климат менән «шаярырға» теләүселәр әйтә. Үҙ ҡарашымды мин бынан ике йыл элек донъя күргән «Нимә хәүеф аҫтында: климатмы, әллә азатлыҡмы?» тигән китабымда белдерҙем. Глобаль йылыныуға ҡаршы көрәшеүселәр сит илдәрҙең эшмәкәрлегенә ҡыҫылыу кеүек законһыҙ күренеште яҡлай. Улар беҙҙе нисек йәшәргә өйрәтә. Йыш ҡына кешеләр ике нәмәне: тирә-яҡ мөхитте бысраныуҙан һаҡлау менән бер ниндәй һөҙөмтә килтермәгән «климат яҡлау, хатта һаҡлау» кеүек  эшмәкәрлекте бутай.

Беренсенән,– тип дауам итә автор,– һуңғы йөҙ йыллыҡта температураның 0,7 градусҡа күтәрелеүе иғтибарға алырлыҡ дәрәжәлә түгел. Икенсенән, һуңғы 10 –14 йылда бер ниндәй ҙә глобаль йылыныу күҙәтелмәй. Был, әлбиттә, һис ниндәй процесстар бармай тигән һүҙ түгел, ә ниндәйҙер дәрәжәлә уйланырлыҡ факт ҡына. Өсөнсөнән, климаттың үҙгәреүе хаҡында бәхәстәр дауам итә һәм бер ниндәй ҙә фекер уртаҡлығы юҡ. Дүртенсенән, Ер шарында климаттың тотороҡлолоғо тураһында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел, сөнки ул үҙгәреп тора. Шуға күрә халыҡтар араһында ҡурҡыу сәсеү, климат үҙгәреүен туҡтатыу буйынса ниндәйҙер амбициоз пландар ҡороу урынһыҙ».

Глобаль йылыныуға ҡаршы хөкүмәттәр күрергә тейешле саралар араһында Клаус тулайым эске продукттың 2100 йылда 2,9 процентҡа кәмеүгә килтерәсәген дә иҫкә ала. «Тимәк, – ти ул, – беҙ әлеге йәшәү рәүешенән баш тартырға мәжбүр буласаҡбыҙ. Иҡтисади үҫеште ошондай юл менән тотҡарларға маташыу – ғәҙел түгел, сөнки ҡайһы бер илдәрҙә ( моғайын, АҠШ, Көнбайыш Европа – **М.Х.**) йән башына иҫәпләгәндә тулайым эске продукт һигеҙ тапҡыр юғары. Ни өсөн беҙҙе киләсәк быуын өсөн ҡарар сығарырға мәжбүр итәләр? Климат үҙгәреүен туҡтатырға теләгән сәйәсмән, бюрократтар үҙҙәренең «кешелек тураһында хәстәрләү»ен күрһәтергә ынтылыуын йәшермәй. Әммә улар артында ниндәйҙер пландар ҡорған, парник газдары менән һатыу итеүҙе ойоштороп, файҙа алырға ынтылғандарҙы ла күрмәү мөмкин түгел».

«Киото протоколынан Европа күпте көтә, – тип яҙҙы «Новая газета». – Мәҫәлән, 2020 йылда энергияның һөҙөмтәлелеген 20 процентҡа арттырырға, парник газдары сығарыуҙы шул тиклем үк кәметергә, яңынан тергеҙелеүсе энергия сығанаҡтарын файҙаланыуҙы ла шунсаға арттырырға һ.б. Ләкин был күптәрҙә шикләнеү тойғоһо уята: нисек?»

Копенгагендағы осрашыуҙан алда «климатгейт» тип аталған ғауға килеп сыҡты. «Йәнәһе, Көнсығыш Англияның климатты өйрәнеү институты ғалимдарының хатлашыуы һөҙөмтәһендә глобаль йылыныу тураһында хәбәрҙең хәҡиҡәт түгеллеге, ә уйлап сығарылыуы асыҡланды, – тип яҙҙы был хаҡта «Известия». – Хатлашыусылар үҙ-ара быны нисек йәмәғәтселектән йәшереү тураһында кәңәшләшә. Һөҙөмтәлә үҙәк етәксеһе Фил Джонс отставкаға китергә мәжбүр була. Бөйөк Британия матбуғаты фекеренсә, был хатлашыуҙы Рәсәй махсус хеҙмәттәре ҡушыуы буйынса Томск хакерҙары эшләгән».

Рәсәй Дәүләт Думаһы Киото протоколын ратификациялауҙы ете йылға һуҙҙы. Быны белгестәр «алюминий лобби»ҙарының баҫымы үтә көслө булыу менән аңлата. Фәндәр академияһы ла, протокол Рәсәй мәнфәғәттәрен ҡыҫа, глобаль йылыныуҙа кешенең ҡатнашлығы иҫбат ителмәгән, тигән һығымта яһаны. Ошо йәһәттән, ҡасандыр В. Путиндың кәңәшсеһе булып эшләгән А. Илларионов Киото протоколын хатта «Яңы Цусима», «Гулаг» тип тә атағайны. Тик Рәсәйҙең Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына инеүе тураһында һөйләшеүҙәр башланғас, документты танырға мәжбүр булдылар. Ул Рәсәй өсөн файҙалы, тигән һығымта яһаусылар ҙа күренде. Ғөмүмән, был мәсьәлә буйынса фекерҙәр байтаҡ. Сөнки Рәсәйҙең Киотоға бәйле булыуы уның милли мәнфәғәттәре менән генә сикләнмәй. Беҙҙең дәүләт, мәҫәлән, Сәғүт Ғәрәбстанынан ҡала, нефть продукттары менән һатыу итеүҙә икенсе урынды биләй. Ә нефть продукттары ҡулланыу иһә парник газдарын арттырыуға туранан-тура булышлыҡ итә. Әйткәндәй, Ижтимағи палата рәйесе Е. Велихов та, Копенгагендағы осрашыу сәйәси маҡсаттарҙы алға һөрә, тип белдерҙе, һәм ул был эшмәкәрлекте яҡламай.

Йыһанға спутниктар осорған цивилизацияның ҡоролоҡҡа ҡаршы етди саралар күрергә һәләтһеҙлеге, әлбиттә, ышандырмай. Хикмәт ҡаҙаныштарҙың юҡлығында түгел, ә булғандарын да файҙалана белмәүҙә икән. «Росгидромет»тың Үҙәк аэрологик обсерваторияһының элекке директоры А. Черников «Комсомольская правда»ға еткергән хәбәренә ҡарағанда, яһалма ямғыр яуҙырыу ҡоролмалары элекке СССР-ҙа уҡ уйлап табылып, 2000 йылдарғаса Кубанда тәжрибәләр ҙә алып барылған. Хатта 40-сы йылдарҙа профессор В. Оболенский етәкселегендәге Яһалма ямғыр яуҙырыу институты ойошторолоп, ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшелгән. Ләкин аҙаҡ был киләсәге оло тармаҡҡа ҡул һелтәгәндәр. 90-сы йылдарға тиклем болоттарға йоғонто яһау буйынса ла ниндәйҙер тәжрибәләр үткәрелгән, әммә уныһы ла ташлап ҡуйылған. Ошо уҡ баҫмалағы икенсе мәҡәләлә «Урания-2М» яһалма ямғыр яуҙырыу ҡоролмаһы тураһында ла һүҙ барҙы. Был быуат мөғжизәһе Новосибирск, Ульяновск, Ырымбур өлкәләрендә, Ҡалмыҡстанда һәм Ҡаҙағстанда һынау үтеп өлгөргән. Проекттың башҡарма директоры И. Яковлев әйтеүенсә, хатта Мароккола ла ямғыр яуҙырып ҡарағандар. Шуныһы ғәжәп: 20 йыл элек авиакосмик белгес А. Смирнов уйлап тапҡан был ҡоролма Рәсәйгә кәрәкмәй булып сыҡҡан.

Ҡоролоҡто иҫкәртеү, бәлки, мөмкин дә түгелдер. Тик урмандарҙы янғындарҙан һаҡлауҙың ҡулдан килмәүенә ышанып булмай. Хатта быйыл да яҙҙың аҙағында уҡ Себерҙә урмандар яна башланы. Май аҙаҡтарында илдә 700-ләп урында урман янды. Яҡутстанда уның майҙаны хатта 50 мең гектарға еткән. Ни өсөн беҙҙә бер үк бәлә йыл һайын ҡабатлана? «Независимая газета»ла былтыр донъя күргән «Күрәҙәләнгән һәләкәт» тигән мәҡәләлә был һорауға яуап бар

кеүек. Рәсәй Фәндәр академияһының Келдыш исемендәге Тармаҡ математикаһы институты белгестәре ҡаза ихтималлығы хаҡында өс йыл элек үк иҫкәрткән. Был хәүеф яңы Урман кодексы менән бәйле үҙгәрештәр арҡаһында килеп сыҡты, тип аңлата белгестәр. Яңы закон буйынса элекке урман һаҡлаусы ойошмалар, шул иҫәптән «Авиалесохрана», башҡарған эштәр: янғынға ҡаршы әҙмә-әҙлекле эшмәкәрлек, юлдарҙы ҡарап тотоу, янғынға ҡаршы көрәш техникаһын хәстәрләү, вертолеттар ултыртыу урындары әҙерләү һ.б. кеүек саралар урындағы хакимиәттәр, урманды ҡортомға алыусылар ҡарамағында. Һуңғылары, шул иҫәптән Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығы (МЧС) ла, билдәле сәбәптәр арҡаһында был ҡатмарлы бурысты үтәргә әҙер түгел. Сөнки уларҙың урман янғынын туҡтатыу өсөн махсус техникаһы, мониторинг системаһы юҡ, белем-тәжрибәһе лә етерлек түгел. Әгәр ҙә яңы Урман кодексын эшләүгә урмансылар ҙа йәлеп ителһә, бындай ҡазаларға урын ҡалмаҫ ине.

## ...әллә Аляскала климат ҡоралы һынайҙармы?

Ҡушма Штаттар өлөшөнә парник газдарының 36,1 проценты тура килеүгә ҡарамаҫтан, ил хөкүмәтенең Киото протоколына мөнәсәбәте Аҡ йортта хакимиәт алмашыныуға ҡарап формалаша. Билл Клинтон, мәҫәлән, уға бер һүҙһеҙ ҡул ҡуйған, хатта конгресҡа ла ебәреп тормаған, сөнки кире ҡағасаҡтарын яҡшы белгән, тиҙәр. Д. Буш хакимиәте иһә протоколдан ҡырҡа баш тартты. Сәнәғәт лоббиҙарының баҫымы аҫтында АҠШ Киото протоколын күп йылдар инҡар итеп килде. Аҡ йортҡа Барак Обама хакимиәте килгәс кенә, был сәйәсәт үҙгәрҙе. 2050 йылға АҠШ парник газдары сығарыуҙы 80 (?) процентҡа кәметергә ниәтләнә. Былтыр апрель аҙаҡтарында американдар Вашингтонда донъяның 17 эре дәүләте вәкилдәре ҡатнашлығында климат һәм энергетика буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Дәүләт секретары Х. Клинтон фекеренсә, климат үҙгәреү проблемаһы илдең тышҡы сәйәсәтендә өҫтөнлөклө йүнәлешкә әүерелмәксе. Обама хакимиәте документты танырға мәжбүр, сөнки былтырғы Катрина дауылы страховкалаусыларға 80 миллиард долларға төштө.

Ҡайһы бер сығанаҡтарҙан билдәле булыуынса, климат шарттарының ҡырҡа үҙгәреүендә рәсми Вашингтондың да ҡыҫылышы бар. Мәҫәлән, уҙған йәй «Комсомольская правда» гәзите тиңдәшһеҙ антициклондың тәбиғәтен «Ҡушма Штаттар беҙгә ҡарата шундай ҡорал ҡуллана», тигән мәҡәләлә аңлатып маташҡайны. А. Волковтың Интернет селтәрендә донъя күргән «Һауа торошо үлемесле ҡоралға әүерелеүе ихтимал» тигән яҙмаһы ла ошо хаҡта. «Ысынлап та, ун йыл элек, АҠШ тикшеренеүселәренең фаразы буйынса, 2025 йылға Америка хәрбиҙәре һауа торошона йоғонто яһау мөмкинлегенә эйә буласағы әйтелгәйне», – ти Волков. Имеш, тотош төбәктәр милитаристар ҡарамағында ҡаласаҡ. Миҫалға автор АҠШ-тың Вьетнамда алып барған һуғышта төрлө химик реагенттар ҡулланып, партизандар базаларына муссон ямғыры яуҙырыуын да килтергән.

Һүҙ Пентагон тарафынан финансланған HAARP программаһы тураһында бара. Алясканың Анкоридж ҡалаһынан 250 километр төньяҡ-көнсығышта урынлашҡан был объекттағы 180 антеннаның һәр береһе 22 метр бейеклектә, 360 радиотапшырғыс та бар. Ғалимдар раҫлауынса, «антенналар урманы» ысынлап та ионосферала дауыл ҡуптарырға һәләтле, сөнки уның ҡеүәте 1,7 миллиард ваттҡа етә. Программаны төҙөүҙә ҡатнашҡан Б. Истлундтың фекеренсә, был ҡеүәт Ер шарының байтаҡ өлөшөндә элемтәне боҙорға, һауа торошон ҡырҡа үҙгәртергә мөмкинлек бирә. Канада иҡтисадсыһы һәм антиглобалисы М. Чоссудовскийҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, HAARP программаһы өсөн миллиардтарса доллар бүленә. АҠШ конгресы хатта уларҙың ни өсөн

бирелгәнен, нисек тотонолғанын да тикшереп тормай. Ысынлап та был проекттың Йыһанға йоғонтоһо билдәһеҙ. «Ә бит ионосфераның бындай тикшеренеүҙәр арҡаһында боҙолоуы ла ихтимал. Ул саҡта беҙ ун километр юғарыла ишек һәм тәҙрәләренән ел өрөп торған самолетта ултырыусы пассажирҙар хәлендә ҡалабыҙ, – ти Чоссудовски. – Шул уҡ ваҡытта интернет-форумдарҙа стихия ҡазаларының тап HAARP программаһы арҡаһында сығыуы хаҡында фекерҙәрҙе күп ишетергә тура килә. Төньяҡ Кореяла 90-сы йылдарҙа ҡоторонған ҡоролоҡтар, артабан һыу баҫыу, Иран, Ираҡ, Сирия һәм Афғанстандағы көслө ҡоролоҡтар был фекерҙе дөрөҫләй».

«1997 йылда HAARP станцияһы эш башлау менән фәрәсәт ҡупты, – ти Мәскәү дәүләт университетының физика факультеты ғилми хеҙмәткәре Г. Васильев. – 1997 – 1998 йылдарҙа Эль-Ниньо дауылының ҡотороноуынан 20 миллиард долларлыҡ зыян күрелеүе, 1999 йылда Төркиәлә ер тетрәп, 20 мең, 2003 йылда «Изабелла» дауылынан меңдәрсә, 2004 йылда Суматра утрауының көнсығыш ярында ер тетрәүҙән 300 меңләп, 2005 йылда Пакистанда ошондай уҡ ҡазанан 100 мең кешенең һәләк булыуы, былтыр Исландиялағы Эйяфьятлайокудль вулканы урғылып, тотош Европаны ҡуйы төтөн ҡаплауы – шуның касафаты». Элекке хәрби синоптик Н. Караваевтың «Комсомольская правда»ла баҫылған аңлатмаһынан күренеүенсә, АҠШ хәрбиҙәре ысынлап та һауа торошона йоғонто яһау, хатта уға идара итеү буйынса 2025 йылға тиклем башҡарыласаҡ программа эшләнгән. «Мәскәүҙә температура 35 – 36 градусҡа еткәндә, Берлинда – 18, Варшавала – 25, Парижда ни бары 20 градус ине, – ти Караваев. – Урта Азиянан «Төньяҡ Африканан» тигән фекер ҙә булды – **М.Х.**) эҫе һауа «һурған» бындай антициклондың Рәсәйҙә бер ҡасан да күҙәтелгәне юҡ. Эҫелек башланыр алдынан американдар Йыһанға кеше идара итмәгән лазер ҡоралы Х-37В карабын осорҙо. Һөҙөмтәлә 90 – 600 километр бейеклектә атмосфера ҡапыл үҙгәреп, эҫелек хасил булды. Ә карап 270 тәүлектән һуң ғына әйләнеп ҡайтасаҡ ине».

«Росгидромет»тың Геофизика институты директоры, профессор В. Лапшин иһә был фекерҙе уртаҡлашмай. «Американдарҙың климатты үҙгәртә алыуы – буш һүҙ, – ти ул. – Эҫелектән Ҡушма Штаттар үҙе яфа сигә. Тәүҙә улар үҙҙәрен һәләк итә, артабан – беҙҙеме? Бөгөн Рәсәйҙең Европа өлөшөндә ҙур циклон тора – бары шул ғына!»

## Иң отошлоһо – иҫкәртеү

Рәсәй Фәндәр академияһының География институты директоры урынбаҫары, география фәндәре докторы А. Тишков фекеренсә, урман-йылғалар тәбиғәттә һыу әйләнешен көсәйтеп, атмосферала дымды арттыра. Был хаҡта совет йәмғәтселегенә 40-сы йылдарҙа уҡ яҡшы билдәле булып, яһалма урмандар күп ултыртылған, һәм ҡоролоҡ сигенгән. Ә элек төҙөлөш сеймалы алынған ҙур соҡорҙарҙа күлдәр хасил булған. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ағас күпләп ҡырҡылыу арҡаһында урман климатты тотороҡландырырға һәләтһеҙ. «Кисекмәҫтән урман, уны янғындан һаҡлау хеҙмәтен тергеҙергә, тармаҡты дәүләт ҡурсалауына алырға кәрәк, – ти Тишков. – Янғындар беҙгә иҡтисадты экологиянан айырып ҡарамаҫҡа ҙур һабаҡ бирә, беҙ унан етди һығымта яһарға бурыслы».

Былтыр октябрҙә Хабаровск ҡалаһында урман янғындары менән бәйле халыҡ-ара конференция эшләне. Унда сығыш яһаған Системалы анализ халыҡ-ара институты белгесе А. Швыденко, Рәсәй тайгаһы климат үҙгәреүҙең емергес эҙемтәләрен кисерә, тип белдерҙе. Һуңғы 30 йылда барған процестар дауам итһә, хәҙерге тайга урынында быуат аҙағына урманлы дала һәм дала ғына тороп ҡаласаҡ. Янғындарҙың күпләп булыуы ихтимал.

Йыш ҡына стихиялы күренештәрҙе алдан иҫкәртә алмаған метеорологтар ғәйепләнә. 2007 йылда, мәҫәлән, Мәскәү яны урмандарында торф янып киткәс, тап шулай булды. А. Черников фекеренсә, һауа торошон биш тәүлеккә генә дөрөҫ итеп әйтергә мөмкин. Оҙайлы ваҡытҡа прогноз биреү өсөн атмосфералағы ҡайһы бер процестарҙы өйрәнеү мотлаҡ, ләкин был ҡулдан килмәй. Артабан экология етди боҙола. Архивтан күренеүенсә, элек циклондар төньяҡтан килгән. Урмандарҙың күпләп ҡырҡылыуы эре ҡалаларҙа йылылыҡ алмашыныуға кире йоғонто яһай. Рыбинск һыуһаҡлағысы төҙөү циклондар йүнәлешен ҡырҡа үҙгәрткән.

Рәсәй метеохеҙмәтенең ярҙамға мохтажлығы, моғайын, күптәргә билдәһеҙ. «80-се йылдарҙа Арктикала һауа торошон күҙәтеүсе ике кәмә-метеостанция йөрөһә, хәҙер берәү ҙә юҡ, – тип яҙҙы «Известия». – Поляр станциялар 100-гә етһә, хәҙер яртылаш кәм. Метеостанциялар селтәре, хеҙмәткәрҙәр иҫәбе, метеокараптар, метеоспутниктар буйынса ла шундай уҡ хәл. Директор урынбаҫары В. Дядюченконың һүҙҙәренә ҡарағанда, 1979 йылда АҠШ-тан һатып алынған секундына 4 миллиард операция үткәрергә һәләтле суперкомпьютер иҫкергән. Америка компанияһына секундына 1 триллион операция үткәрергә һәләтле 18 миллион долларлыҡ яңы машинаға заказ бирелгән, тиҙәр. Ләкин ул да һауа торошон бер аҙнанан алда әйтә алмай, имеш.

Әлбиттә, Рәсәй кеүек ҙур илдә метеоспутниктар СССР заманында өс, хәҙер берәү генә булыуы ла ғәжәп. Евросоюздың, мәҫәлән, – ике, Һиндостандың хатта – өс, Ҡытайҙың – дүрт, кескәй генә Япония менән АҠШ-тың бишәр спутнигы бар. Ә бит донъяла беренсе метеоспутник 1967 йылда уҡ СССР тарафынан орбитаға сығарылған. Ысынлап та оят. Бер метеоспутник Европала 100 – 120 миллион доллар тора. Рәсәйгә кәмендә – өс поляр-орбиталь спутник, Экваторҙа кәмендә – ике геостанционар спутник һәм, 2006 йылда ҡабул ителгән федераль программаға ярашлы, 13 метеоспутник осорорға кәрәк, ти белгестәр. Һуңғыһы әлегә берәү генә эшләй. 80-се йылдарҙа төрлө тарафтарҙа 40-лап карап мәғлүмәттәр йыйһа, бөгөн берәү ҙә юҡ. Металл һынығына тапшырылмай ҡалған 13 судно Владивостокта, Санкт-Петербургта һәм Архангельскиҙа йөк ташып йөрөй.

Аномаль ҡоролоҡ айҡанлы былтыр августа Мәскәү хөкүмәтендә ауыл хужалығы ерҙәрен мелиорациялауҙы тергеҙеүгә бәйле фекер алыштылар. «Ерҙәрҙе мелиорацияламай тороп, аҙыҡ-түлек менән тәьмин ителештә суверенитетҡа өлгәшеп булмаясаҡ» – кәңәшмә һығымтаһы шундай. Мелиорация боронғо дәүерҙәрҙән үк билдәле. Египетта, мәҫәлән, Рим империяһы тарафынан буйһондоролғанға тиклем үк мелиорация ярҙамында юғары уңыш алыуға өлгәшкәндәр. Көнбайыш Европа менән АҠШ-та мелиорацияланған майҙандар ауыл хужалығы ерҙәренең – 40, Ҡытайҙа – 55, Бөйөк Британияла 80 процентын биләй. Беҙҙә иһә – 8 процент. Элекке СССР-ҙа алдынғы ысул ярайһы кимәлдә ойошторолоп, Көньяҡ Урал махсуслашҡан ауыл хужалығы зонаһына әүерелгәйне.

– Мелиорация буйынса мөмкинлектәр элек тә етерлек файҙаланылманы. Үҙгәртеп ҡороуға тиклем был эш менән шөғөлләнгән хужалыҡтар уны ташлап ҡуйҙы, – ти Федерация Советы рәйесенең ауыл хужалығы буйынса кәңәшсеһе Л. Холод. – Бөгөн ерҙәрҙе һуғарыу буйынса бер ниндәй ҙә эш башҡарылмай, тип әйтергә мөмкин. 2009 йылда мелиоратив ҡеүәттәрҙең булғанын ғына файҙаланғанда ла ҡоролоҡ эҙемтәләре улай уҡ көслө булмаҫ ине.

Агросәнәғәттең киләсәге тураһында һүҙ йөрөткәндә, белгестәр ҡоролоҡ мәсьәләһе менән бәйле хужалыҡ итеүҙәге үҙгәрештәр зарурлығына баҫым яһай.

Ҡайһы бер төбәктәрҙә, мәҫәлән, иген культуралары сәсеүҙән баш тартып, ҡоролоҡҡа сыҙамлы культуралар игеүгә тотонорға тәҡдим ителә.

– Күп нәмә аҡса етмәүгә бәйле, – тип дауам итә Холод, – был хәлдең киләсәктә лә дауам итеү ихтималлығы көслө. Сит ил инвесторҙары иһә, төрлө сәбәптәр арҡаһында, Рәсәй ауыл хужалығына капитал йүнәлтергә ашыҡмай.

Кәңәшсе фекеренсә, мелиорация менән етди шөғөлләнмәй тороп, ауыл хужалығына кредит биреү хәүефле. Шул уҡ ваҡытта мелиорацияһыҙ ҙа ерҙәрҙең уңдырышлылығын арттырып булмаясаҡ. Бында шундай түңәрәк хасил була.

Былтырғы ҡоролоҡ һыу ятҡылыҡтарының ҡырҡа һайығыуына, ҡайһы берҙәренең юҡҡа сығыуына алып килде. Екатеринбург ҡалаһын тәьмин иткән 3 метр тәрәнлегендәге һыу ятҡылығы бөтөнләй ҡороп, йәй уртаһында Уралдың баш ҡалаһына һыуҙы 160 километр йыраҡлыҡтағы Ҡариҙел йылғаһынан ҡыуҙыра башланылар. Татарстан, Ҡурған, Ырымбур өлкәләре халҡы ла һыуға ҡытлыҡ кисерҙе. Европалағы иң ҙур Куйбышев һыу һаҡлағысы тәүлек һайын 3 – 5 сантиметрға түбәнәйҙе. Ятҡылыҡтарҙы тейешле хәлгә килтереү өсөн 650 миллиард һум сығымдар кәрәк.

Һыу етешмәүгә бәйле хәүефтәр мәсьәләһенең Именлек Советында тикшерелеүе проблеманың үткерлеге тураһында һөйләй. Яҡын йылдарҙа һыуҙың стратегик ресурсҡа әүерелеүе ихтимал. Һыу етмәү арҡаһында кешеләр тыуған ерҙәрен ташлап китергә мәжбүр була, 2008 йылда ундайҙар 20 миллионға еткән. Рәсәйҙең көньяғындағы илдәрҙә һыуға ҡытлыҡ күптән килә. Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ер шарында 700 миллион кеше (был 43 дәүләт тигән һүҙ – **М.Х.**) һыу етмәүҙән даими тетрәнеүҙәр кисерә. Ерҙең алтынан бер өлөшө халҡы таҙа һыуһыҙ интегә, өстән бере хатта көнкүреш ихтыяждарына ла һыу еткерә алмай. 2009 йылда, БМО мәғлүмәттәре буйынса, ҡоролоҡло төбәктәрҙән һуғыш барған ерҙәрҙе ташлап ҡасыусыларға ҡарағанда бер нисә тапҡыр күберәк кеше киткән.

Донъя океаны күтәрелеү ер аҫты һыуҙарының кәмеүенә бәйле. Кешеләр һыуҙы күп тотона, артабан да шулай барһа, тиҙҙән ер аҫты һыуҙары етмәйәсәк. Ә бит былтыр Башҡортостанда ла йылғалар бик ныҡ һайығып, һыу мәсьәләһе хөкүмәт ултырышына ҡуйылды.

Тәүге планда торған энергетик именлекте киләсәктә һыу именлеге алмаштырыуы ихтимал. Именлек советы секретары Н. Патрушевтың һүҙҙәренә ҡарағанда, һуңғы ун йылда һыу менән бәйле конфликт һәм кризис 2,7 миллиард кеше йәшәгән 46 илдә көсәйә. Яҡын Көнсығышта, Үҙәк Азияла һәм Төньяҡ Африкала хәл айырыуса ауыр. 2035 – 2045 йылдарҙа, ғалимдар фекеренсә, донъяла сөсө һыу запасы уны тотоноу күләменә тиңләшеүе ихтимал. Глобаль кризистың иртәрәк башланыуы ла мөмкин. Был һыуҙың төп запасы бер нисә генә дәүләттә тупланыуына бәйле. Уларға Бразилия, Канада һәм Рәсәй инә. Беҙҙә һыуҙың үҙе менән түгел, ә тотоноу менән бәйле проблема бар. Хәүефһеҙлек талаптарына яуап биргән һыу менән халыҡтың 38 проценты ғына файҙалана, ә 9 проценты иһә эсергә яраҡһыҙ һыу тотона.Ҡала һәм ауылдарҙың яртыһының ниндәй һыу тотоноуы ла билдәһеҙ, сөнки тикшереү үткәрелмәгән.

Шулай уҡ һыу ресурстарын файҙаланыуҙа ла Рәсәй алдынғы илдәрҙән ике-өс тапҡыр ҡалыша. Тимәк, беҙгә һыу тотоноу буйынса дәүләт сәйәсәтен үҙгәртергә кәрәк. «Рәсәйҙең киләсәктә донъя илдәренә эсәр һыу һата алыуы (шундай фекер белдереүселәр ҙә күренә – **М.Х.**)шик аҫтында, – ти Рәсәй Фәндәр академияһының Һыу проблемалары институты директоры В. Данилов-Данильян, – сөнки һыуҙы самаһыҙ тотоноу йылғаларҙың экологик хәлен ҡатмарлаштырасаҡ».

# Кемдәр нимә фараз итә?

АҠШ-тың атмосфераны күҙәтеү милли үҙәге белгесе А. Дай, 22 компьютер климатик өлгөһөн өйрәнгәндән һуң, XXI быуатта күп төбәктәргә ҡоролоҡ янай, тигән фекергә килгән. Ҡоролоҡ хәҙер үк Көнбайыш ярымшарға, бигерәк тә Бразилия, Мексика, Көньяҡ Европа, Урта диңгеҙ буйы дәүләттәре, Африка, Көньяҡ-Көнбайыш һәм Төньяҡ-Көнсығыш Азияға тарала башланы. Был ерҙәрҙә XXI быуат аҙағына бер ҡасан да күҙәтелмәгәнсә климат урынлашыуы көтөлә. Ямғырҙар Аляска, Скандинавия, Рәсәйҙең төньяғында һәм Канадала ғына ваҡытында яуасаҡ. Ҡалған төбәктәр иһә ҡоролоҡтан интегәсәк.

Диңгеҙ ресурстарын яҡлау халыҡ-ара программаһы етәксеһе Г. Лундин фекеренсә, тәбиғәттә балансты тергеҙеү өсөн кәмендә 10 мең йыл кәрәк. «Кешелек, моғайын, хәүефһеҙ саҡтарға ҡайта алырлыҡ сикте үткәндер, – ти ул. – Әммә мин ерҙе һаҡлаусы күҙгә күренмәгән ниндәйҙер билдәһеҙ механизм барлығын һиҙемләйем. Ул, күрәһең, углекислый газды «йәшерә». Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был хәл сикһеҙ дауам итә алмай. Мәҫәлән, Вашингтон штатындағы Изге Елена вулканы урғыла ҡалһа, уның төбөндәге ҡайнап торған утлы тоҡомдар бер нисә километрлыҡ тишек барлыҡҡа килтерергә һәләтле. Әҙемтәләре һис кенә лә Венераныҡынан кәм булмаҫ. Рәсәйҙең Арктика өлөшөндәге азот закисы ла етди хәүеф менән янай. Уның күләме миллиондарса тонна иҫәпләнә. Ә бит ул сыға башлаһа, атмосферала 110 йыл һаҡланасаҡ.

«Кешелеккә ни бары 100 йыл йәшәргә ҡалды» – был Австралияның микробиология профессоры Ф. Феннер фекере. – Ер шарында кешенең бик күп йәшәүе, саманан тыш ҡулланыуы экологик һәләкәттәргә килтереп, яҡын арала климат ҡырҡа үҙгәрәсәк,– ти ул. Хәҙерге цивилизацияның экологик системаға йоғонтоһон Феннер Ергә оло кометаның аҡрынлап бәрелеүе менән сағыштыра. – Хәлде төҙәтеп булмаясаҡ, – ти микробиолог, – кешегә үҙ яҙмышына буйһонорға ғына ҡала».

«Известия-наука»ның күҙаллауы буйынса хәҙерге цивилизацияны алда түбәндәгеләр көтә: 1) Глобаль йылыныу арҡаһында боҙлоҡтар иреүҙең туфан ҡалҡыуына килтереүе ихтимал. Ғалимдар фекеренсә, Ерҙең өстән бер өлөшө һыу аҫтында ҡалыу кешелеккә етди хәүеф тыуҙырасаҡ; 2) Озон ҡатламы йоҡарыу ҙа Ерҙең көслө радиацияға дусар ителеү ихтималлығын көсәйтә. Ундай шарттарҙа кешенең үҙен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге юҡҡа сыға; 3) Ергә бынан 65 миллион йыл элекке кеүек метеорит килеп бәрелеү ихтималлығы. Тәүге вариант буйынса, кешеләргә тәүтормош община ҡоролошонан башларға тура килһә, икенсеһе буйынса, Ерҙең тарҡалып, Йыһан туҙанына әүерелеү хәүефе бар; 4) Ҡояштың йылытыуҙан туҡтауы. Тик был күренеште 10 миллиард йыл көтөргә кәрәк; 5) Ер шарының сит планета вәкилдәре тарафынан баҫып алыныуы. Әлегә был фаразды бер кем дә дөрөҫләй йәки кире ҡаға алмай; 6) Кешелектең үҙен-үҙе юҡ итеүе. Был фараз бер аҙ ышандыра. Әйтәйек, Өсөнсө донъя һуғышы йәки Чернобылгә тиңдәшле фажиғә һ.б. Глобаль йылыныуҙың бөтә донъяға йоғонтоһо сүллектәр киңәйеү, дауыл һәм һыу баҫыуҙар йышыраҡ күҙәтелеү, малярия һәм биҙгәк ауырыуҙары көсәйеүҙә сағылыш табасаҡ, тип фаразлай белгестәр. Африка менән Азияның күпселек өлөшөндә ерҙән уңыш алыу кәмеп, Көньяҡ-Көнсығыш Азияла, киреһенсә, артыуы ихтимал. Европа һыу баҫыуҙан интегәсәк, Венеция менән Голландия иһә һыу аҫтында ҡаласаҡ. Австралия менән Яңы Зеландия – ҡоролоҡтан, ә АҠШ-тың көнсығыш яры емергес дауылдарҙан яфа сигеүе ихтимал.

Оксфорд университеты ғалимдары фаразлауынса, 2055 йылға температураның 4 градусҡа күтәрелеүе ихтимал. Әгәр ҙә углекислый газ бүленеү ошо уҡ кимәлдә ҡалһа, мәңгелек туңлыҡ ireп, океандар ҙа һауаға парник газдары сығара башлаясаҡ. Төньяҡ полюста иһә йылылыҡ 15 градусҡа етеп, донъя океанының 1,4 метрға күтәрелеүе Шанхай, Токио, Лондон, Амстредам, Яңы

Орлеан кеүек эре ҡалаларҙың һыу аҫтында ҡалыуы ихтимал. Тимәк, 200 миллион кеше йәшәү урыны эҙләргә мәжбүр буласаҡ. Был Амазонка урмандарының – ә улар Ер шарының үпкәһе һанала – һыу аҫтында ҡалып, юҡҡа сығасағын аңлата. Дымлылыҡ кәмеү менән, урмандарҙа янғын сығыу хәүефе лә көсәйә. Ерҙә климат үҙгәрәсәк, ҡоролоҡ ямғырлы йылдар менән аралашып, ауыл хужалығы менән шөғөлләнеү ауырлашасаҡ.

Төньяҡ ярымшарҙа боҙ ике аҙнаға элегерәк әрселәсәк. Арктиканың боҙ ҡатламы 15 процентҡа йоҡарыуы, Антарктидала боҙлоҡтоң 7 – 9 процентҡа эскәрәк шылыуы ихтимал. Көньяҡ Америка, Тибет һәм Африка тауҙарында боҙ ҡатламы иреп бөтәсәк. Глобаль йылыныу арҡаһында XXI быуат аҙағына Гренландияла боҙлоҡтар иреп бөтөүе фаразлана. Был турала АҠШ-тың НАСА (Милли аэрокосмик тикшеренеүҙәр агентлығы) хәбәр итә.

Воейков исемендәге Баш геофизик обсерватория тарафынан әҙерләнгән докладтан күренеүенсә, XXI быуатта илебеҙҙә климат тотороҡһоҙ буласаҡ. Елдауылдар, һыу баҫыу, ҡар ишелеү, ҡоролоҡ кеүек күренештәр йышыраҡ фаразлана. Төньяҡта, төньяҡ-көнбайышта, Волга буйында, Урал һәм Себерҙә һыу етерлек булһа, Белгород, Курск өлкәләре, Ставрополь, Краснодар крайҙары, Ҡалмыҡстан һыуһыҙлыҡтан интегәсәк. Ғөмүмән, һыу ҡытлығы күпселек төбәктәргә хас күренеш булмаҡсы. Ҡара тупраҡлы зонала уңыштың 10 – 20, Себерҙең көньяғында 25 процентҡа кәмеүе көтөлә. Ҡара тупраҡлы булмаған зоналарҙа, киреһенсә, уңыштың артыуы ихтимал. Йылы яратҡан культуралар майҙаны киңәйәсәк, мәңгелек туңлыҡтың төньяҡҡараҡ күсенеүе ихтимал. Коми, Архангельск тирәләй – 60, Ханты-Мансийск, Яҡутстан тарафында хатта 150 – 250 километрға саҡлы. Рәсәйҙең үҙәк өлөшөндә, көньяҡта йәйҙәр эҫерәк киләсәк. Был, төрлө инфекциялар, паразит ауырыуҙар артасаҡ, тигән һүҙ.

2000 йыл менән сағыштырғанда, 2050 йылда яуым-төшөм 10 процентҡа күберәк булыуы ихтимал. Ҡыштар ҙа ҡарлыраҡ киләсәк, көнсығыш һәм төньяҡ-көнсығыш төбәктәрҙә яуым-төшөм күберәк, ә Европаның көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығышында, тимәк, Башҡортостанда ла, улар аҙыраҡ фаразлана.

Былтыр «Независимая газета» уҙған йәй кеүек хәлдәр ҡабатланмаһын өсөн ниҙәр эшләп ҡарарға мөмкин икән, тигән һорауға яуап кеүегерәк мәҡәлә баҫтырҙы. Бына ул саралар: экстремаль хәлдәрҙе иҫкәртеү йәки эҙемтәләрен йомшартыу буйынса саралар, үҙгәреүсе климат шарттарында йәшәргә өйрәнеү. Баҫма фекеренсә, аномаль күренештәрҙең сәбәбен, эҙемтәләрен күҙ алдына килтереү өсөн сәйәси ихтыяр, аҡса һәм инструменттар кәрәк. Экологияны тамырҙан яҡшыртыу өсөн таҙа технологиялар талап ителә. Бөгөн уға Австралия һәм Яңы Зеландия ғына һәләтле. Ә бына киләсәккә техник үҫеш перспективаһын асыҡ күҙ алдына килтереүсе Ҡытай ғына. Алдағы ун йылда был ил 14 метеоспутник осорорға ниәтләнә.

Уҙған йәй килтергән финанс-иҡтисади һ.б. зыянды, моғайын, асыҡлап бөтөрөп тә булмайҙыр. Юҡҡа сыҡҡан урмандар, торлаҡ йорттар, ҡороған йылғакүлдәр, янып көйгән иген баҫыуҙары, баҡсалар, ирекһеҙҙән бысаҡланған малтыуар… Кешелектең тәбиғәткә килтергән тиңдәшһеҙ зыяны өсөн түләү түгелме икән ул? Әлбиттә, уларға күҙ йомоп, бер ни булмағандай атмосфераға углекислый газды элеккенән дә күберәк сығарып, әүәлгесә меңдәрсә километр майҙанды асфальтҡа күмеп, урамдарға миллиондарса машина сығарып, йылғакүлдәрҙе ҡоротоп һ.б. йәшәүҙе артабан да дауам итергә мөмкин. Сөнки бер кем дә тыймай, тәртипкә саҡырмай. Әммә аҡылһыҙлыҡтан иң элек кеше үҙе зыян күрәсәк, уҙған йәй ише. Бәлки, тәбиғәткә ҡарата енәйәт ҡылыуҙан арынып, уйланырға һуң түгелдер? Климаттың артабан ниндәй буласағын өйрәнеү өсөн фәнгә иғтибарҙы арттырырға, ағастарҙы күберәк ултыртыу, һыу ятҡылыҡтарын таҙартыу, ҡалаларҙа экологик хәлде яҡшыртыуҙың башҡа сараларын хәстәрләргә.

Нисек уйлайһың, Кеше?

# Тарихи белешмә

Һауа шарттары цивилизация үҫешенә хәл иткес йоғонто яһай. Бынан 60 мең йыл элек Ергә килеп бәрелгән астероид йылы климатты юҡҡа сығарып, динозаврҙарҙы һәләк иткән. Сахарала сәскә атҡан Урта батшалыҡ йәшәүҙән туҡтаған, Ганнибалға Римды буйһондорорға ярҙам иткән филдәр үлеп бөткән. IX – XII быуаттарҙа климат йылыныу европалыларға Исландия менән Ирландияны үҙләштерергә булышлыҡ итә. Викингтар Америкаға аяҡ баҫа, Новгородта йәшәүселәр биләмәләрен төньяҡҡараҡ күсерә. Европа иҡтисады үҫеш кисерһә, Урта Азия ла сәскә ата.

Е. Борисенков менән В. Пасецкий, урыҫ халҡы йылъяҙмаларына, төрлө илдәр хроникаларына, Гренландия боҙҙарын өйрәнеү мәғлүмәттәренә, ағас төптәрендәге дүңгәләктәрҙең киңлегенә ҡарап, климаттың меңдәрсә йыл эсендә нисек үҙгәреүе тураһында «Тысячелетняя летопись необычайных явлений природы» тигән китап яҙған. 1150 – 1300 йылдарҙа Европала климат хатта хәҙергенән дә йылыраҡ булған. Гренландияла июль-августа йылылыҡ 9 градусҡа етеп, ҙур ағастар, ҡуйы үлән үҫкән, балыҡ, төрлө хайуандар үрсегән.

Рәсәйҙә 900 – 1300 йылдарҙа климат ыңғай булып, быуат эсендә бер-ике йыл ғына ҡоролоҡ күҙәтелгән. XIV, XV быуаттарҙа ҡоролоҡтар 11-12-гә еткән, 8 – 13 тапҡыр һыу баҫыу осраҡтары булған. XIV быуаттағы ҡоролоҡ мәлдәрендә күп ҡалалар янып, төрлө ауырыуҙар көсәйгән. Күптәр Ахрызаман етте, тип уйлаған. Рустә ҡоролоҡ хронологияһы тураһында былтыр «Комсомольская правда» ла ентекле яҙып сыҡты. 1124 йылда Киев ике көн яна, тиелә унда, 600 сиркәү юҡҡа сыға. Шул уҡ йылда төньяҡ өлкәләрҙә аслыҡ була. Ҡаты һалҡындан ужым туңа, 30 апрелгә тиклем ҡалын ҡар ята. 1185 йылда Владимир ҡалаһы ике тапҡыр ут эсендә ҡала. Новгородта кешеләр ҡырға ҡасып ҡотола. 1187 йылда йоғошло ауырыу күп кешене ҡыра. 1196 йылда Киевта ер тетрәй, кешеләр, ҡурҡышып, ергә ауа. 1230 йылда ер тетрәү тағы ҡабатлана. Ҡояш тотолоп, һауала төҫлө болоттар хасил була. 14 сентябрҙәге көслө һалҡын ужымдарҙы ҡыйрата. 1301 йылдағы көслө ҡоролоҡта кешеләр астан үлә. 1346 йылда ҡоролоҡ Каспий, Ҡара диңгеҙ буйын солғап ала. Европала таралған сирҙән күп кеше һәләк була. Франция, Германия, Англияла ҡалалар бушап ҡала. 1364 йылда өс ай буйы ҡыҙҙырған, хатта йылғаларҙа балыҡтар үлгән. Өс йылдан һуң эҫелек ҡабатланып, йәй буйы ямғыр яумаған, янғындар башланған. 1370 йылда ҡыш иртә килә, ашлыҡты йыйып өлгөрмәйҙәр. Декабрь, ғинуарҙа көн йылына, февралдә крәҫтиәндәр иген һуғырға сыға. Ҡояшта ҡара таптар барлыҡҡа килә, ерҙән томан күтәрелә, ҡоштар осмай, ерҙән атлап йөрөй.

1434 йылғы ҡоролоҡтан һыуҙар ҡорой, урмандар яна. 1500 йылдар аҙағында һалҡынайтып, уны «Бәләкәй боҙлоҡ осоро» тип атайҙар. 1518 йылда биш аҙна көслө ямғыр яуа, йылғалар таша. 1529 йылдың йәйендә ҡуйы төтөн араһында ҡояш менән ай дүрт аҙна күренмәй тора. 1533 йылда йәй буйы ямғыр яумай, хатта һаҙлыҡтар ҙа кибеп бөтә. 1601 йылда ямғыр ун аҙнаға һуҙыла, крәҫтиәндәр иген ура, бесән әҙерләй алмай. 15 августа ҡаты һалҡын төшөп, бар уңышты юҡҡа сығара. Аслыҡ ҡотора, кешеләр бер-береһен ашай. Мәскәүҙә генә аслыҡтан 500 меңләп кеше вафат була. 1645 – 1675 йылдарҙа һалҡынлыҡ үҙенең иң юғары нөктәһенә етә.

**Мәхмүт ХУЖИН.**

МИЛЛӘТ-АРА ТАТЫУЛЫКТЫ НЫҒЫТЫУ ЙЫЛЫ
ГОД УКРЕПЛЕНИЯ МЕЖНАЦИОНАЛЬНОГО СОГЛАСИЯ

# ДИНИ ӘҘӘПЛЕЛЕК – ТОТОРОҠЛОЛОҠ НИГЕҘЕ

Хәҙерге Рәсәйҙәге экстремизм һәм уның иң хәүефле сағылышы – терроризм – йәмғиәттең тотороҡлолоғона янаусы иң төп ҡазаларҙың береһе. Шуны иҫкә төшөрөү урынлы: Ватан тарихында экстремизм өр-яңы күренеш түгел. Дмитрий Каракозовтың 1866 йылдың 4 апрелендә яңғыраған атыу тауышы экстремизмдың башланыуы тураһында хәбәр итте. Шул замандан был ҡанлы сәйәсәт йәмғиәттә, дәүләттә барлыҡҡа килгән бик күп конфликт-проблемаларҙы хәл итеүҙең йоғонтоло алымына әйләнде. Шулай итеп, Рәсәйҙә экстремизм аҡыл көсө, иҡтисади сығымдар, дипломатик сәнғәт талап итмәгән эгоистик маҡсаттарҙы ғәмәлгә ашырыуҙың үтә ябай механизмы булып китте. Аяуһыҙ террор рәүешенә ингән экстремизм күпселек осраҡта кешенең йәшәүгә хоҡуғын тулыһынса инҡар итеү, цивилизациялы йәмғиәттәрҙә ныҡлы урын алған кешелек ҡиммәттәре менән иҫәпләшергә теләмәү булып күҙ алдына баҫа.

Рәсәй экстремизмының, әйтелгәнсә, оло тарихы бар. XIX быуатта барлыҡҡа килгән «Народная воля» ойошмаһы, социаль-революционерҙар, большевиктар, меньшевиктар һ.б. күрә алмаусанлыҡ, фанатиклыҡ тойғоһо менән һуғарылған социаль төркөмдәр, ғәҙәттә, экстремизмға бирелеүсән булған. Киң мәғлүмәт сараларында бөгөн дини экстремизм тураһында материалдар күп донъя күрә. Мәҡәләләрҙең авторҙары йыш ҡына, дин йәмғиәттең социаль тормошондағы йоғонтоло өлкәләрҙә үҙ мәнфәғәтен алға һөрөүҙә көслө инструмент булып тора, тигән күҙгә бәрелеп торған фактты сығып эш итә. Г. Мирский, Д. Малышева, А. Игнатенко, М. Лиипман, Дж. Экспозито кеүек авторҙар, мәҫәлән, бер ниндәй дәлилһеҙ: «Ислам терроризмы исламды бөтә донъяла хакимлыҡ итеүсе дингә әүерелдереүҙе маҡсат итеп ҡуя»,– тигән һығымта яһай. Ышандырырлыҡ булһын өсөн улар ғәҙәттә Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә билдәле сәйәси көстәр тарафынан алып барылған эшмәкәрлекте «дини буяуҙар менән байытып» бирә. Ысынлап та, Төньяҡ Кавказда мосолман диненә ышыкланып эш иткән сәйәси экстремизм бар, ләкин бер ниндәй дәлилһеҙ «экстремизмдың төп сәбәбе – диндә» тип раҫларға маташыу – оло хата. Билдәле политолог Мөхтәр Яхъяевтың «Төньяҡ Кавказдағы дини-сәйәси экстремизмдың тамырҙары иҡтисади, сәйәси, социаль, идеологик һәм дини әхлаҡи-психологик сәбәптәргә бәйле» тигән фекере менән ризалашмай булмай. «Урмандарға тормош яҡшы булғандан китмәйҙәр,– ти Яхъяев. – Әлбиттә, һәр кемдең быға үҙ сәбәбе бар».

«Шәхси сәбәп»кә килгәндә, террористик эшмәкәрлек менән шөғөлләнгән Төньяҡ Кавказ кешеләре араһында белемле, матди яҡтан етеш йәшәгәндәрҙе лә осратырға мөмкин. Улар, ғәҙәттә, ниндәйҙер төркөм башында тора, терроризмды етәкләп бара. Мәҫәлән, мәрхүм генерал Д. Дудаев, бөгөн Бөйөк Британияла ҡасып йәшәгән Ә. Закаев – шундайҙарҙан. Ләкин экстремизм кеүек хәүефле социаль ауырыуҙың сәбәптәрен диндә түгел, ә кешеләрҙе туплларлыҡ эшмәкәрлек

булмауҙан килә. Рәсәйҙә социаль тормоштоң иҡтисади нигеҙҙәре булған эре һәм ваҡ кәсептәрҙең үҫешмәгәнлегенән эҙләргә кәрәк. Әлбиттә, экстремизмдың иң мөһим «туҡландырыусы»һы – йәмғиәттең бай һәм ярлыларға бүленеүе. Ун йылдан ашыу дәүләттең милли үҫеш идеяһы кәрәклеге тураһында бәхәс барыуға ҡарамаҫтан, Рәсәй парламентының уны эшләп, раҫлауға тотоноуы ишетелмәй. Милли идея юғарынан үҙенән-үҙе төшөрөлөр, тип өмөтләнергә ярамай. Совет кешеләренең 70 йыл буйы «коммунизм төҙөүе» һәм улар ултырған караптың көтмәгәндә ярым иҫерек капитандарҙың ихтыярһыҙлығы арҡаһында ҡырағай капитализм хөкөм һөргән ярҙарға килеп туҡтауы ла етерлек дәрәжәлә ышандыра. Милли идеяның кешеләрҙе берләштерерлек, етеш тормошҡа алып килерлек һәм дөйөм кешелек ҡиммәттәренә таяныуы мөһим. Ошондай бурыстарҙы хәл итмәй тороп, экстремизм менән терроризмдан арынып булмаясаҡ.

Енәйәтселектең ҡотороноуы, экстремизм, эскелек, наркомания, үҙ-үҙеңде үлтереү кеүек кире күренештәрҙең сәбәбен йәмғиәттең ҡатламдарға бүленеүенән башҡа аңлатып та булмай. Ә бит халыҡтың көнкүрешен яҡшыртыу буйынса анығ ҡараш ил етәкселәрендә һәм дини конфессиялар башлыҡтарында ла күҙәтелмәй. Рәсәй православныйҙары сиркәүе башлығы патриарх Кирилл (Гундяев) фекеренсә, иҡтисади файҙа күреүгә ынтылырға ярамай. Ә бит был кешелек ҡанундарына ҡаршы килә. Мәҫәлән, кәсепселәрҙең иң бәләкәйе лә иҡтисади файҙа алыу өсөн эшләй. Шул уҡ ваҡытта ҡырағай капитализм шарттарында төрлө ҡатламдарҙың мәнфәғәтен бер-береһенә яҡынайтыу ауыр. Бының өсөн дәүләт властарының социаль, һалым сәйәсәтен үҙгәртеүе зарур.

Енәйәтселектең артыуында ниндәйҙер дәрәжәлә Рәсәйгә сит илдәрҙән килеүселәрҙең дә йоғонтоһо бар, әммә был ғына, беҙгә енәйәтселәр генә килә, тип уйларға нигеҙ бирмәй. Енәйәтселек статистикаһында мигранттар тарафынан ҡылынған законһыҙлыҡтар 5 проценттан артмай. Шул уҡ ваҡытта беҙгә сит илдәрҙән еңел тормоштан ҡасып килмәйҙәр. Уларҙың күпселеге үҙебеҙҙең граждандар башҡарырға теләмәгән бысраҡ һәм квалификация талап итмәгән эштәр менән мәшғүл. Сит илдәрҙә мигранттар өлөшөнә ҡараған енәйәтселек Рәсәйгә ҡарағанда күпкә юғары, мәҫәлән, Германияла 20 процент тәшкил итә. Ил етәкселәренең Рәсәйҙә енәйәтселек кәмеү тураһындағы хәбәрҙәре ысынбарлыҡҡа тап килмәй. 2007 йылдан башлап Төньяҡ Кавказда террористик күренештәр арта бара. 2008 йылда ул, мәҫәлән, 12 тапҡырға күберәк булған. 2009 йылғы үҫеш тә 50 процент. Рәсәй Президенты булып В. Путин эшләгән тәүге йылдарҙа был төбәктә 135 террор акты эшләнһә, 2009-2010 йылдарҙа 786-ға еткән. Тимәк, алты тапҡырға күбәйгән. Был, Төньяҡ Кавказда терроризм мәңгелеккә бөтөрөлдө, тип әйтергә нигеҙ бирмәй.

Экстремизм һәм терроризм күренештәренең артыуына миҫалдарҙы Рәсәйҙең башҡа төбәктәренән, шул иҫәптән Мәскәү ҡалаһынан да, килтерергә мөмкин. Хәҙерге тарих шуны күрһәтә: йәмғиәттәге экстремистик күренештәр, төрлө этник берләшмәләргә, дини конфессияларға ҡараған кешеләрҙең бергә йәшәүенән бигерәк, уларҙың йәшәү рәүеше һәм матди хәленә бәйле. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, был турала яҙған, һөйләгән журналистар уны иҫәпкә лә алмай. Ә бына Советтар Союзында бындай күренештәрҙе миңә, мәҫәлән, күҙәтергә тура килмәне. Экстремизмды юҡ итеүҙә, минеңсә, төп алымдарҙың береһе – хеҙмәткә лайыҡлы түләү. Был хаҡта Бөйөк Британия тәжрибәһе лә һөйләй. Төньяҡ Ирландия халҡын кәсепселеккә йәлеп итеү иҫәбенә Ольстерҙа хәл тынысланды. Тәжрибәне беҙҙең Төньяҡ Кавказда ла ҡулланып ҡарарға мөмкин бит.

Был төбәктә йылдан-йыл киңерәк тарала барған экстремизмды ислам дине менән генә бәйләргә маташыу хата һәм хәүефле. Ҡөрьәндең байтаҡ сүрәләре менән танышҡандан һуң шундай ҡарарға киленә: ислам мосолмандарҙы тыйнаҡлыҡҡа, эшмәкәрлектә игелеккә саҡыра. Ошо йәһәттән суфыйсылыҡ идеялары яҡлы башҡорт мәғрифәтсеһе Зәйнулла Рәсүлевтың түбәндәге фекере менән бәхәсләшеү мөмкин түгел: «Әгәр ҙә һин башҡаларға ла үҙеңә теләгәнде генә теләйһең икән, шул саҡта ғына дингә ышаныусы була алаһың». Әлбиттә, фекер эйәһе был осраҡта кешенең ниндәй дингә  ышаныуына ҡарамаҫтан, игелек ҡылырға теләүен күҙ уңында тотҡан. Дәүләт аппаратында, Рәсәй Федераль йыйылышында башланғыс мәктәп уҡытыусыһынан 20 – 30 тапҡыр күберәк эш хаҡы алып эшләгән чиновниктар ошолай фекер йөртһә, бик мәслихәт булыр ине лә. Ислам башҡа дин кешеләренә ҡарата ла  тыныслыҡ һаҡларға, игелек ҡылырға өйрәтә. Әт-тәүбә сүрәһендә, мәҫәлән, тап ошо турала әйтелеп, хатта бүтән  дин кешеһен хәүефтән яҡлау кәрәклеге лә әйтелә. Рәсәйҙәге бөтә дини конфессиялар башлыҡтары, социаль һәм сәйәси институттары халыҡтарҙы, иң элек йәштәрҙе, туғандарса тормошҡа өйрәтергә бурыслы. Был – һәр дин хеҙмәткәренең бурысы. Егерме  йылдан ашыу  инде илебеҙҙә төрлө дини форум, йыйындар уҙғарылып килә. Уларҙа кешеләрҙе бер-береһенә ҡарата итәғәтле, яғымлы мөғәмәлә итергә, йәштәргә лә ошо тәрбиәне һеңдерергә саҡыралар. Ләкин был саҡырыуҙар йыш ҡына  ҡоро  һүҙ булып  ҡала. Дин әһелдәре төрлө дини йолалар атҡарыу  менән мәшғүл булып, яҡыным тураһында хәстәрлек күреү кәрәклеген онота. Күрәһең, ваҡыт  етмәне, тип уйлай. Христиандарҙың Библияһында Исайя ла кешеләргә Аллаһы Тәғәлә аша мөрәжәғәт итеп, былай ти: «Миңә һеҙҙең ҡорбандарығыҙ ниңә кәрәк? Ғибәҙәтхананы тапамағыҙ! Мин һеҙҙең ҡорбандарығыҙҙы ек күрәм, доғаларығыҙҙы ла ишетергә теләмәйем. Һеҙ игелек  ҡылығыҙ, ҡыйырһытылғанды, етемдәрҙе, тол ҡатындарҙы  ҡотҡарығыҙ! Ас менән икмәгеңде бүлеш, яланғасты кейендер, нужа күргәндән ҡасма!» Ҡыҫҡаһы, дин тотҡандарҙың һәр ҡайһыһы йәштәрҙе игелек, намыҫ рухында тәрбиәләү менән аныҡ шөғөлләнергә бурыслы.

М. Яхъяевтың, экстремизм һәм терроррризмдың  барлыҡҡа килеүе һәм әүҙемләшеүендә исламдың бер ниндәй ҡатнашлығы юҡ, тигән фекере менән тулыһынса килешәм. Проблемаларҙың  киҫкенләшеү сәбәптәрен  социаль-иҡтисади өлкәнән, мәҫәлән, күп кенә предприятиеларҙың ябылыуы арҡаһында эшһеҙлектең көсәйеүенән эҙләргә кәрәк. Рәсәйгә ҡаршы көстәр, ваһһабиттарҙың башлыҡтары, тап ошонан файҙаланып, Дағстан менән Чечняла үҙаллы ислам  дәүләте ҡороу өсөн көрәш алып бара. Реформа йылдарында барлыҡҡа килгән ауырлыҡтарҙан файҙаланып, Рәсәйҙең дошмандары шулай уҡ Совет власы йылдарында онотолоп торған геноцидты  тергеҙергә тотондо. Дөрөҫ, был процесс әле рәсми хакимиәт тарафынан танылмай. Мәҫәлән, 90-сы йылдарҙа Чечняла күпләп этник таҙартыу үткәрелде. Ошоноң  менән бәйле, Грозный ҡалаһының рус халҡы Чечняла этник таҙартыуҙы рәсми рәүештә таныуҙы һорап В. Путинға мөрәжәғәт итте. Улар Дудаев режимын  «фашистик»  тип атаны һәм Рәсәй властарын геноцид күренешен инҡар итеүҙә ғәйепләп, хәрби операциялар арҡаһында юғалған мөлкәтенә  хоҡуҡ  алыуҙа үҙҙәрен чечендар менән тиңләүҙе талап итте. Мөрәжәғәт авторҙары шулай  чечендарҙың ғаризаларын теләп ҡабул иткән, Чечняла йәшәгән башҡа халыҡтарҙың хоҡуғын  танырға  ашығып бармаған Кеше хоҡуҡтары буйынса Европа мәхкәмәһен дә тәнҡитләй.

Төньяҡ Кавказда һәм Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендә, әйтәйек, 2010  йылдың

мартындағы Мәскәү метроһындағы шартлауҙы иҫкәртә алмауҙа Рәсәйҙең махсус хеҙмәттәре, ысынлап та, насар эшләй. Улар хатта Федераль именлек хеҙмәте урынлашҡан Лубянкаға яҡын урындағы террористик актты ла иҫкәртә алманы. Ни өсөн? Минеңсә, бөгөн Рәсәйҙең махсус хеҙмәттәре башлыса сәйәси элитаның урын-хәлен нығытыу менән шөғөлләнә. Экстремизмға ҡаршы хеҙмәт «Э», мәҫәлән, төрлө террористик акттарҙы иҫкәртеү урынына рәсми властарға ҡаршы көстәрҙең башлыҡтарын эҙәрлекләү, демонстрация һәм митингыларҙы ҡыуып таратыу менән мәшғүл. Махсус хеҙмәттәр ныҡлап шөғөлләнгән тағы бер йүнәлеш – эшҡыуарҙарға ышыҡ урын биреү, төшөмлө предприятиеларҙы баҫып алыу, коммерция эшмәкәрлеге. Билдәле булыуынса, ОМОН – махсус тәғәйенләнештәге милиция отряды – ҡала шарттарында енәйәтселек һәм терроризм менән көрәшеү, айырыуса хәүефле енәйәтсел төркөмдәрҙе юҡ итеү өсөн ойошторолдо. Әммә 90-сы йылдар менән бергә енәйәтселәргә ҡаршы көрәш тә тарихҡа китте. Хәҙер ОМОН һуғышсылары «йәмәғәт тәртибен һаҡлау» ышығында – енәйәтселәргә, коррупцияға ҡаршы көрәш алып барыу урынына – аҡса эшләү менән мәшғүл. Милиция полковнигы С.Евтиков етәкселегендә ОМОН-дың 2-се батальоны һуғышсыларының законһыҙ юлдар менән аҡса эшләүе бөтә Рәсәйгә билдәле. Ошо айҡанлы һуғышсыларҙың ил башлығы Д. Медведевҡа мөрәжәғәтендә түбәндәге юлдар бар: «Беҙ төшкө ашһыҙ ҙа көнөнә 17 – 20 сәғәт буйы 10 – 15 көн эшләй алабыҙ. Ун башы С. Евтиков беҙҙән смена аҙағына тиклем өс кешене тотоп алып килергә ҡуша. Шулай итмәһәк, беҙҙе премиянан һәм ҡала мәрының өҫтәмә түләүенән мәхрүм итәләр. Полковник С. Евтиков закон боҙа. Йыш ҡына ул былай ти: «Һеҙ – ҡолдар һәм мин нимә теләйем, шуны эшләргә бурыслыһығыҙ». Милиция полковнигының ошоға оҡшаш эшмәкәрлеге буйынса миҫалдарҙы тағы ла килтерергә мөмкин. Хатҡа бер тиҫтәгә яҡын прапорщик, өлкән сержант ҡул ҡуйып, хаттың күсермәләре Рәсәй Эске эштәр министрлығының именлек хеҙмәтенә, Генераль прокуратураға, РФ Президенты хакимиәтенә, Мәскәү ҡалаһы эске эштәр идаралығы начальнигы В. Колокольцевҡа һ.б. ебәрелгән. Ләкин бер тарафтан да яуап килмәгән. ОМОН отрядтары тарафынан ҡылынған ошондай енәйәттәр айырыуса Төньяҡ Кавказда бик күп, һәм улар экстремизм менән терроризмдың артыуына килтерә.

Мәктәп реформаһын һәр яҡлап, етди уйламай алып барыу ҙа экстремистик кәйефтәрҙең көсәйеүенә булышлыҡ итмәй ҡалмай. Рәсәй православие сиркәүенең тәҡдиме һәм Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығының тырышлығы менән урта мәктәптәрҙә яңы предмет – дин нигеҙҙәрен өйрәнеү программаға индерелә. Ғәмәлдә был уҡыусыларға дини белем биреү, уларҙы мәктәптән үк дингә мөнәсәбәт буйынса айырымланыуына, бер-береһенә ниндәй Аллаһы Тәғәләгә инаныуына ҡарап ихтирамлы әллә дошманлыҡ тойғоһомо барлыҡҡа килеүенә генә булышлыҡ итәсәк. Уҡыу системаһында конфликттар тыуҙырыу ихтималлығы булған сәбәптәр былай ҙа етерлек, ә уйланмаған аҙымдар реформаларҙың дини төҫ алыуына килтереүе хәүефләндерә. Әгәр ҙә мәктәп дирекцияһы теге йәки был дингә өҫтөнлөк бирә икән, бындай конфликттың ҡаршы тороуға әүерелеп китеүе лә ихтимал. Тимәк, яҡын арала мәктәптең үҫеп килеүсе быуында әҙәплелек һәм мәҙәниәт тәрбиәләй аласағына ышаныс самалы.

Төньяҡ Кавказдағы террор күренештәренең төп социаль базаһы – йәштәр. Террористик ойошмаларҙың етәкселәре теге йәки был енәйәтсел актты башҡарғанда тап йәштәргә таяна. Ни өсөн? Минеңсә, был эшһеҙлек менән бәйле.

Төньяҡ Кавказда эшһеҙлек проблемаһы Советтар Союзы мәлендә лә булды. Бөгөн ул айырыуса көсөргәнешле. Дәүләттең артабанғы үҫеш буйынса ғилми яҡтан эшләнгән идеологияһы булмағас, күп милләтле илдә бер-берең менән һыйышып тыныс, татыу йәшәү өлгөләре пропагандаланмағас, халыҡтар араһында ышанмаусанлыҡ көсәйә.

Террор ойоштороусыларҙың эшмәкәрлегенә етди кәртә ҡуйыу өсөн, әлбиттә, иң элек эшһеҙлек мәсьәләһен хәл итеү зарур. Төньяҡ Кавказ өсөн – иң элек ауыл хужалығында. Игенселек һәм малсылыҡ продукцияһы етештереү был яҡтарҙа элек-электән мәшәҡәтле булған. Тармаҡты яйға һалыу өсөн, әлбиттә, башланғыс капитал кәрәк. Террорҙан ҡото алынған эшҡыуарҙарҙың бында килеүе шик тыуҙыра. Берҙән-бер сығанаҡ – дәүләт капиталы. Шуның менән террор көрәштәре юҡҡа сыға икән, тимәк, дәүләт сәйәсәте үҙен аҡланы, тигән һүҙ. Ә этностар араһында үҙ-ара аңлашыуҙың булыуы, тыныслыҡ һәм хеҙмәт – бөгөн иң ҙур ҡиммәттәрҙең береһе. Шул уҡ ваҡытта ваҡ кәсептәрҙе йәнләндереү, уға баҫым яһаған коррупцияға ҡаршы эшмәкәрлекте көсәйтеү ҙә мөһим. Ҡайҙа ғына йәшәмәһен, кеше барыбер үҙ ихтыяждарын хеҙмәт аша ҡәнәғәтләндерергә ынтыла, ләкин ауыл хужалығы продукцияһы етештереүселәр менән сауҙа араһында енәйәтсел аралашсылыҡтың сәскә атыуы быға етди ҡамасаулыҡ тыуҙыра. Ҡатмарлы хәлдән сығыу өсөн дәүләт ауыл хужалығы продукцияһы һатып алыу менән шөғөлләнгән компаниялар ойоштороу аша ғына тармаҡтың хәлен яҡшыртыуға, ауыл хужалығы продукттары етештереүҙе отошло, күңел биреп башҡара торған эшмәкәрлеккә әйләндереүгә өлгәшә ала. Был бөтә Рәсәйгә ҡағыла. Ошо хаҡта һөйләп, БР Президенты вазифаһын 100 көн атҡарыу менән бәйле уҙғарылған осрашыуҙа Рөстәм Хәмитов Башҡортостан ауылдарындағы хәлгә лә ҡағылып: «Беҙгә продукция етештереүҙе һәм эшкәртеүҙе арттырырға кәрәк, – тип белдерҙе. – Урал аръяғы районлары, – тине ул, – башҡа төбәктәр эшҡыуарҙары тарафынан үҙләштерелә, Ырымбур, Силәбе, Свердловск өлкәләренән килгән эшем эйәләре халыҡтан ит һәм һөт йыйыуҙы конвейерға һалған. Тимәк, продукцияны эшкәртеп һатҡандан һуң саф килем улар ҡулына эләгә. Ошо эште ойоштора белмәгән урындағы етәкселәр ресурстарҙың тарҡатылыуына юл ҡуя, эшһеҙлек проблемаһын көсәйтеүгә булышлыҡ итә».

Әлбиттә, терроризмға ҡаршы тороу өсөн беҙгә милли традицияларға, ғөрөф-ғәҙәттәргә таяныу мөһим. Шул уҡ ваҡытта, экстремизм, терроризм менән көрәшкә һылтанып, мосолмандар йәшәгән илдәргә АҠШ, Англия һәм башҡа Көнбайыш Европа илдәренән ғәскәрҙәр индереү был проблеманы ҡатмарлаштыра ғына. Беҙгә радикаль экстремизмды үҙебеҙҙең ислам ҡанундары аша еңергә кәрәк. Йәмғиәттең хәҙерге торошонда диндең йоғонтоһо айырым өйрәнеүҙе талап итә. Иң элек христиан һәм ислам өлкәһендә, сөнки бөтә донъяла хакимлыҡ иткән был диндәрҙең социаль тормошта ҡатнашыуы кешелектең киләсәген хәл итергә һәләтле. Уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға маташыу – аҡылһыҙлыҡ һәм әҙәпһеҙлек.

**Миҙхәт САҘРЫЕВ,**
**М. Аҡмулла исемендәге**
**БДПУ профессоры.**

## ҠАЛАЛА БАШҠОРТ БУЛЫУ ЕҢЕЛМЕ?

Ил буйынса халыҡ иҫәбен алыу үткәрелгән һайын, республикабыҙ ҡалаларында башҡорттарҙың арта барыуы күҙәтелә. Цивилизация үҫеше өсөн был – ыңғай күренеш, сөнки XX быуат башына тиклем халҡыбыҙҙың төп йәшәү урыны ауылға, дөрөҫөрәге, ҡәбилә-ырыу ерлегендәге аҫабалыҡҡа бәйле булды. Ҡала башҡорттарының формалашыуы башлыса Совет власы осоронда ныҡлы башланды. Әгәр 1897 йылда халҡыбыҙҙың ни бары 0,8 проценты ҡалаларҙа йәшәһә, хәҙер был һан 50 проценттан ашыу тәшкил итә, йәғни башҡорттарҙың яртыһынан күбеһе Рәсәй Федерацияһы, сит илдәр ҡалаларында көн күрә. Шулай итеп, һуңғы йөҙ йылда, башҡа милләттәр менән бер рәттән, башҡорттар ҙа урбанизация шарттарында йәшәүгә өйрәнә, күнегә бара. Был процесс, әлбиттә, шыма ғына барманы, әле лә еңелдән түгел. Төньяҡ-Көнбайыш, Үҙәк Башҡортостанда йәшәгән башҡорттар үткән быуат башында уҡ ҡалаларға күсә башлаһа ла, уларға рус мәҙәниәтенән дә бигерәк татар теле һәм мәҙәниәте көслө йоғонто яһап, милләттәштәребеҙҙең ассимиляцияланыуына юл асты. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттар үткән быуаттың 20-се йылдарында ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡала социаль-мәҙәни мөхитен үҙләштерә башланы. Шуға ҡарамаҫтан, хәҙерге көндә титуллы милләт вәкилдәре Баймаҡ, Сибай, Учалы ҡалаларында күпселекте тәшкил итә. Был иһә башҡорт этносының тиҙ арала урбанизацияланған үҙенсәлекле этномәҙәниәт, этномөхит тыуҙырыуына булышлыҡ итте. Башҡортостандың көньяғындағы Күмертау, Мәләүез, Салауат, Стәрлетамаҡ ҡалаларында көн күргән милләттәштәребеҙ тураһында быны әйтеп булмай. Процент яғынан аҙ булыу сәбәпле, улар һаман да тотороҡло этномәҙәни мөхит тыуҙыра, ныҡлы ойоша алмай.

Нисек кенә булмаһын, бер быуат эсендә Башҡортостанға исем биргән милләттең үҙ эшселәр синыфы, интеллигенцияһы, хеҙмәткәрҙәре барлыҡҡа килде, мәҙәниәте, фәне формалашып үҫеште. Хәҙер башҡорт милләтенең үҫешендә ҡаланың да тотҡан урыны ифрат ҙур. Ләкин республикабыҙҙың күпселек ҡалалары — күп милләтле. Шунлыҡтан унда төп аралашыу теле булып урыҫ теле иҫәпләнә. XX быуаттың 90-сы йылдарына тиклем ҡалаларыбыҙҙа милли балалар баҡсалары, мәктәптәр юҡҡа тиң ине, шуға күрә, башҡа милләт вәкилдәре менән бер рәттән, башҡорт балалары ла урыҫ телле уҡыу йорттарында белем һәм тәрбиә алыуға мәжбүр ителде. Ә ҡала шарттарында һәр милләт һаҡланһын өсөн беренсе нәүбәттә тел мөхите кәрәклеге барыбыҙға ла яҡшы аңлашыла. Совет дәүләте, был изге эштән баш тартып, 70 йыл буйына бары тик урыҫ телле совет халҡын формалаштырыу өҫтөндә генә эшләне. Ә ауыл ерлегендә туған телдә белем һәм тәрбиә биреү ваҡытлыса күренеш, йәғни бер (урыҫ) телле совет халҡын формалаштырыуҙағы күсеш осоро тип кенә ҡаралды. Шуға бәйле халҡыбыҙҙа туған телгә ҡарата кире

мөнәсәбәт тыуҙы: башҡорт теле ауылдың осона сыҡҡансы ғына кәрәк, йәнәһе. Шул арҡала яйлап ауыл мәктәптәрендә лә урыҫ телендә уҡытыуға күсеү башланды. Был хәл айырыуса үткән быуаттың 70 – 80-се йылдарында, әлбиттә, үҙәктең йәшерен баҫымы арҡаһында киң ҡолас алды.

Ҡала башҡорттары балаларының урыҫ телендә белем алыуын төп бурыс итеп һанай башланы. Шунлыҡтан башҡорттарҙың ҡалала тыуып үҫкән бер нисә быуыны аҡрынлап туған теленән ситләште, милли яҡҡа ҡарағанда интернационалистик, космополитик ҡараштары өҫтөнлөк алды, был иһә уларҙың ассимиляцияға бирелеүенә туранан-тура юл асты. Башҡорттарҙың ҡала шарттарында туған телен һаҡлай, үҫтерә алмауынан тыш, ҡатнаш никахтарҙың (бигерәк тә татарҙар менән) ишәйеүе лә ассимиляция күренешен тиҙләтте. Ҡатнаш никахтар, дөрөҫөн әйткәндә, бер ҡасан да башҡорт халҡы файҙаһына булманы. Быны хатта аксиома тип ҡарарға кәрәк.

Шулай итеп, үткән быуаттың 90-сы йылдарында ҡала башҡорттарының һуңғы быуыны күбеһенсә урыҫса һөйләшә-аралаша ине. Үҙгәртеп ҡороу башланыу ғына ҡалалар ҙағы милләттәштәребеҙҙең аңлы өлөшөнөң, туған теленә, үҙ асылына тоғроларының быҫҡып ятҡан милли аңын уятып ебәрҙе. Тап бына уларҙың фиҙакәрлеге, власть органдарына ныҡышмалы мөрәжәғәте, ойоштороу эше менән әүҙем шөғөлләнеүе арҡаһында тәүге башҡорт балалар баҡсалары, уҡыу йорттары асылды. Был иһә ассимиляция процестарын кәметеүгә, ҡала башҡорттарының тупланыуына аҙмы-күпме ыңғай йоғонто яһамай ҡалманы. Башҡорт теленең урыҫ теле менән тиң рәүештә Башҡортостан Республикаһында дәүләт теле итеп законлаштырылыуы ла тел мөхитенә аҙмы-күпме ыңғай үҙгәрештәр индерҙе.

Ҡала башҡорттары өсөн тел мөхитенән ҡала иң ҡырҡыу социаль проблемаларҙан торлаҡ, эш табыу көнүҙәк булды һәм әле лә шулай. Сөнки ҡала башҡорттары тиҫтәләрсә йылдар буйы ғәмәлдә ауылдан килгән йәштәр иҫәбенә тулыланды, был күренеш әле лә дауам итә. Ауылдыҡыларға иһә ҡалала ерегеп, йәшәп алып китеүе бер ҡасан да еңел булманы. Быуаттан ашыу ваҡыт эсендә ул ауырлыҡ-михнәттәрҙе нисәмә-нисә быуын башҡорт йәштәре үҙ башынан үткәрҙе. Айырыуса Өфө тигән баш ҡала был йәһәттән милләттәштәребеҙгә аяуһыҙ мөнәсәбәте менән айырыла. Күпме талантлы башҡорт егеттәре менән ҡыҙҙары, үҙ һәләттәрен халҡына хеҙмәт иттерә алмайынса, стенаға кәклеккән борсаҡ кеүек, әлеге таш ҡаланы ташлап, тыуған яҡтарына әйләнеп ҡайтырға мәжбүр!? Ә мәктәптәрҙә татар әҙәби телендә белем һәм тәрбиә алған төньяҡ-көнбайыш башҡорттары, беткә үсегеп тунын утҡа яҡҡан тигән шикелле, Ҡазан яғына һыпыртыуҙы, башҡа милләт этномәҙәни мөхитен тулыландырыуҙы хуп күрҙе һәм күрә.

Үткән быуатта эшселәр синыфын тулыландырған башҡорт йәштәренә килгәндә, уларҙың хәле бер аҙ яҡшыраҡ булды: ятаҡҡа урынлашып һәм сиратҡа баҫып, эшләгән урынындағы профсоюз юллауы буйынса фатирлы булалар ине. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ул замандар ҙа үтеп китте, предприятиелар ауыл йәштәрен элекке һымаҡ ҡолас йәйеп ҡаршыламай, эш һәм торлаҡ бирергә ашҡынып тормай. Өҫтәүенә ауыл ерендә күмәк хужалыҡтарҙың тарҡалыуы эшһеҙлекте ныҒыраҡ ҡырҡыулаштырҙы. Шулай итеп, башҡорт йәштәре һуңғы йылдарҙа ут менән һыу араһында тороп ҡалды: эшләү, йәшәү өсөн тыуған ауылдарында ла, ҡалаларҙа ла уңайлы шарттар юҡ. Шуға күрә уларҙың байтағы, бәхет, «оҙон аҡса» эҙләп, сит төбәктәргә, бигерәк тә Себер тарафтарына, хатта сит илдәргә сығып китеү яғын ҡарарға мәжбүр. Мәҫәлән,

Күмертауҙың 3-сө Башҡорт республика гимназия-интернатында ҡасандыр үҙем уҡытҡан ҡыҙҙарҙың береһе, Мәскәү дәүләт университетын «иң яҡшы» билдәләренә тамамлап, Канада гражданинына кейәүгә сығып, шул илдә йәшәргә тороп ҡалды. Икенсе ҡыҙыбыҙ инглиз телен туған теле кеүек үҙләштерҙе лә АҠШ-ҡа юлланды. Өсөнсөһө, Күмертауҙың эшһеҙҙәр ҡалаһы икәнен бала сағынан уҡ күреп үҫкәнгә, Италияға китеп йәшәү-эшләүҙе хәйерлерәк күрҙе. Тағы бер ҡыҙыбыҙ Төркиәлә эшләп йөрөй. Шул хәтле лә Тыуған илен, тыуған ҡалаһын һағына ул! Һағыныу-һағыштарын аҙ ғына булһа ла баҫыу өсөн Интернет селтәрендә үҙенең сайтын асҡан, унда башҡорт ашһыуын әҙерләү рецепттарын урынлаштырған. Был ҡыҙҙар менән Интернет аша хәбәрләшеп торабыҙ. Улар ҙа тыуған яҡтарын һағыныуҙарын йәшермәй. Эшһеҙлек, яратып һайлаған һөнәр буйынса эш таба алмау арҡаһында гүзәл заттарыбыҙ – башҡорт ҡыҙҙары, тыуған яҡтарын ташлап, сит илдәргә сығып китә. Улар, власть органдарының йәштәрҙең киләсәген хәстәрләмәүен аңлап, шул рәүешле үҙ яҙмыштарын үҙҙәренсә ҡорорға мәжбүр була. Ғүмер бер генә бит. Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән шул ғүмерҙе үкенмәҫлек итеп йәшәү уй-ниәте уҡыусыларымды тыуған тупраҡтарынан айыра ла инде.

Ауылдарҙа йәшәгән күпселек башҡорттар бөгөн дә ғәзиз балаларын, мәктәп тамамлағандан һуң, ҡалаға ебәреү яғын ҡарай. Йәнәһе, ҡалала уҡып, эшкә урынлашып китһә, кеше була ла ҡуя. Ҡалай еңел! Шулай итеп, бөтә яуаплылыҡты үҙенән төшөрөп, дәүләт елкәһенә һала. Миненсә, был алама ғәҙәткә ҡайһы бер милләттәштәребеҙ XX быуаттың 60-сы йылдарынан өйрәнде. Ҡасандыр балаларын элекке мәғариф министрыбыҙ Фатима Мостафинаның изге ниәте менән асылған башҡорт интернат-мәктәбенә урынлаштырыуҙы бәғзе атай-әсәйҙәр уларҙы тәрбиәләүҙән генә түгел, хатта ашатып, кейендереүҙән ҡотолоу сараһы ла итеп күрә башланы. Бындай аҙымды күберәген ысын атай, әсәй булыу бәхетенән мәхрүм, ялҡау, эскеселәр яһай. Үҙем Юрий Гагарин исемендәге 2-се интернатта (хәҙер 3-сө БРГИ) белем алып, ике тиҫтә йылдан һуң шул уҡ уҡыу йортонда эшләгәс, был хаҡта тулы ышаныс менән әйтә алам.

…Бер көн директор бүлмәһенә эскеселеге йөҙөнә сыҡҡан ҡатын килеп инде. Ул балалары тукланғанға бер йылдан ашыу аҡса түләмәгән өсөн һөйләшеүгә саҡырылғайны. Бүлмәгә килеп инеү менән:

– Һеҙ балаларҙы ашатырға, кейендерергә, уҡытырға обязаны! Эшегеҙ шул! Шуның өсөн аҡса алаһығыҙ! – тип йоҙроғо менән өҫтәлгә һуҡты. Өҫтәл өҫтөндәге быяла ярылып китте. Элек натураль хужалыҡ алып барған, Совет власы осоронда әҙергә хәҙер, йәғни патернализм кәйефе менән йәшәргә өйрәнеп алған башҡорт ғаиләһе балаларын шәхес итеп тәрбиәләүҙән бына шулай яйлап ситләште. Шул уҡ мәктәп-интернаттың 7 ”в” класында 42 бала уҡыныҡ. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Хәҙисә Ғимран ҡыҙы Кинйәбаева – яҙыусы Рәшит Солтангәрәевтың апаһы – класс етәксебеҙ булды. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетына һыйып булмай торғайны, бер партала өсәр уҡыусы ултырып уҡырға мәжбүрбеҙ. Хәҙер, 35 йылдан һуң, класс етәксем, яратҡан уҡытыусым менән юҡ-юҡта, шул сығарылыш уҡыусыларынан ҡайһылары юғары белем алып, халҡына лайыҡлы хеҙмәт күрһәтә, тип һөйләшеп ултырабыҙ ҙа күңелһеҙ һығымтаға киләбеҙ: ундайҙарҙы иҫәпләгәндә бер ҡулдың бармаҡтары ла тулмай. Милләтебеҙҙе яңы баҫҡысҡа күтәрерлек балалар үҫтерә алманымы икән ни класташтарым? Уларҙың ысын рухлы балалары ҡайҙа ла үҙҙәре ҡайҙа? Үткән быуаттың 70–90-сы йылдарында ҡайһы бер мәктәп-

интернаттарҙа бына шулай әҙергә хәҙер булып үҫкән бер нисә быуын барлыҡҡа килде. Хәҙер уларҙың балалары, ейән-ейәнсәрҙәре шул юлды ҡыуа. Быуаттар буйына натураль хужалыҡ менән шөғөлләнеп, йыйман тәбиғәтлегә әйләнгән милләттәштәребеҙҙе Совет власы тағы ла ныҡыраҡ һәлкәүлеккә, ғәмәлдә ялҡаулыҡҡа өйрәтте. Ҡайһы бер атай-әсәйҙәр балаларына:

– Беҙҙең кеүек доярка, тракторист булып, һаулығығыҙҙы бөтөрмәгеҙ! Китегеҙ городҡа, кеше булырһығыҙ,– тип һөнәр йүнәлеше «бирҙе» балаларына. Был йәһәттән улар заманы өсөн хаҡлы ла булғандыр, бәлки. Тик башҡорт йәштәренең бөгөн дә өҙлөкһөҙ ҡалаға ағылыуын ыңғай баһалап булмай. Быны сәбәбен юғарыла яҙып үттем.

Ә хәҙер Совет власы осоронда Башҡортостан ҡалаларында ныҡлы тамыр йәйергә өлгөргән милләттәштәребеҙҙең хәленә киләйек. Һүҙемде саҡ ҡына алыҫтаныраҡ башларға теләйем.

Йәш саҡта һәр кем ниндәйҙер кимәлдә максималистыр ул, йәғни алдына ғәмәлгә ашыра алмаҫлыҡ ҙур маҡсаттар ҡуйып йәшәйҙер. Ундай кәмселектән мин дә азат булмағанмын икән. Үҙ хатамды тиҫтә йылдар үтеп, олоғая төшкәс кенә аңланым. 1993 йылда «Башҡортостан» гәзитендә донъя күргән «Беҙҙә милли мәктәп бармы?» тигән мәҡәләне яңынан уҡып сыҡтым. Унда түбәндәге юлдар бар: «Ғалим Фәрүәз Сәйфуллин башҡорт этносының ни сәбәпле юҡҡа сыға барыуына күп кенә дәлилдәр килтергәндән һуң: «Был фажиғәгә кем ғәйепле?» – тигән һорау ҡуя һәм: «Мәктәп», – тип яуап бирә. Быны менән беҙ ҙә тулыһынса килешәбеҙ». Республикабыҙҙың башҡорт әҙәби телендәге төп матбуғат баҫмаһында шул темаға үткән фекер алышыуҙарҙан һуң байтаҡ һыуҙар аҡты. Хөкүмәтебеҙ, мәғариф министрлығы был ваҡыт эсендә башҡорт балаларына туған телен уҡытыу, туған телдә белем һәм тәрбиә биреү буйынса иҫ киткес ҙур эштәр башҡарҙы. Был йәһәттән уларҙың хеҙмәте бары тик хупланыуға ғына лайыҡ.

Шул мәҡәләне яҙғандан һуң, журналистиканы ваҡытлыса ҡалдырып, миңә, ғаилә хәленә бәйле, яңынан мәғариф системаһында эшләп алырға тура килде. Күмертауға күсеп ҡайтҡан 1994 йылда ҡалабыҙҙа 13-сө башҡорт урта мәктәбе асылды. Ҡала мәғариф бүлегендә туған телдәр буйынса методист булып эшләү менән бер рәттән, шул милли уҡыу йортонда ҡала балаларына башҡорт теленән белем бирергә лә тура килде. Был уҡыу йорто уҡытыусылар коллективы иҫ китмәле энтузиазм менән эшләне. Туған телендә иркен аралаша: һөйләшә, яҙа белгән милли рухлы илһөйәр һәм интернационалист егеттәр, ҡыҙҙар тәрбиәләргә ынтылдыҡ. Мәктәп директоры Нурия Нурғәли ҡыҙы Хәлилова, мәғариф министрлығы менән килешеп, уҡыу планына башҡорт теле сәғәттәрен күберәк индереүгә ирешә.

Үткән быуаттың 90-сы йылдарында, яңы быуат башында республикабыҙҙа ошондай йүнәлештәге башҡорт балалар баҡсалары, милли мәктәптәр, инновацион милли уҡыу йорттары күпләп асылыуға ҡарамаҫтан, туған телендә аралашыусы балалар ныҡлы артманы. Киреһенсә, милли мәктәптә уҡып сыҡҡандары ла, башлы-күҙле булып, хәҙер балалары менән урыҫ телендә аралашыуҙы хуп күрә. Эш ниҙә? Әллә беҙ, туған тел уҡытыусылары, ошо ике тиҫтә йыл эсендә эшебеҙҙе еренә еткереп атҡарманыҡмы? Әллә мәғариф министрлығы, урындарҙағы етәкселәр тейешле шарттар тыуҙырманымы? Шулай тип әйтмәҫ инем.

Оҙаҡ уйланып йөрөй, күп йылдар башҡорт ғаиләләренең тормошон ентекле күҙәтә торғас, мин үҙемдең хаталанғанымды аңланым: башҡорт балаларын

туған теленән мәхрүм итеүселәр уларҙың ата-әсәләре, олатай-оләсәйҙәре икән. Быға дәлилдәрҙе аҙым һайын осратырға мөмкин. Хатта ауыл балаларына тиклем туған телендә һөйләшеүҙән ғәрләнә бит хәҙер. Мәктәпте тамамлап, тыуған ауылдарынан ситкә сығыу менән сит телгә күсә һалалар. Мода, замандан артта ҡалмайҙар, йәнәһе. Ата-әсәләре балаларына туған телен өйрәтеп, шул телдә белем һәм тәрбиә бирергә теләмәгәс, хөкүмәт ниңә бушҡа аҡса түгеп хитлана икән?

Еңелдән булмаған заманда йәшәйбеҙ, әлбиттә. Киң мәғлүмәт саралары: телевидение, Интернет, шулай уҡ кеҫә телефондары кескәйҙәребеҙҙе туған теленән ситләштереүҙә төп ҡоралға әйләнде. Ата-әсәләр балаларының шәхесен, рухи донъяһын, милли рухын емертеүсе ошо ҡоралдарҙы балаларына үҙҙәре үк ҙур ҡәнәғәтлек менән, юҡ аҡсаһын бар итеп, һатып алып бирә. Ә бит шул уҡ мәғлүмәт сараларында ла башҡортса аралашырға мөмкин. Тик әлегә быға иғтибар итеүсе ата-әсәләр бик аҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, башҡорт ғаиләләренең байтағында китап культы, гәзит-журналдар яҙҙырып, балалары менән бергә уҡыу ҡырҡа кәмене. Матди донъя артынан ҡыуған атай менән әсәйҙең ваҡыты ла, аҡсаһы ла «юҡ». Ундай саҡта бала ниндәй телде өйрәнеү, ниндәй телдә аралашыуҙы үҙе йә уның өсөн иптәштәре хәл итә. Ә мәктәптә аҙнаһына бер-ике сәғәт туған тел дәрестәренә йөрөү унда үҙ теленә ҡарата күпселек осраҡта екһенеү-кәмһенеү тойғоһо ғына уята. Бөгөнгө ысынбарлыҡтың әсе хәҡиҡәте был. Бөтә башҡорт ғаиләләрен дә был йәһәттән мин бер сыбыҡҡа теҙмәҫ инем. Халҡыбыҙҙың матур ғөрөф-ғәҙәттәре, традициялары, йәғни этнопедагогика нигеҙендә балаларын туған теленә, уның матурлығына, нескәлектәренә өйрәтеүсе башҡорт ғаиләләре лә бар. Үкенескә ҡаршы, ундайҙар йылдан-йыл кәмей.

Милли мәктәптәр, балалар баҡсалары асып, башҡорт балаларын туған телдәрендә уҡытып та, уларҙың теленән баш тартыуы – бер хәл. Ә күпмеһе ҡатнаш никах ҡорҙо! Асыуың килерме, килмәҫме! Ҡала урамдары буйлап атлағанда сит милләт кешеһен кейәү итеп, коляска этеп килгән бына тигән ҡыҙҙарыбыҙҙың русса һаулыҡ һорашыуынан кемдер ҡапыл башҡа күҫәк менән һуҡҡан һымаҡ була. Бындай осраҡта йыш ҡына үҙемде насар тоям.

«Доярка», «тракторист» булыуҙан ҡасып, ҡалаға бәхет эҙләп килгәндәрҙең дә күбеһе мандый алманы: ҡайҙа ҡарама урам йыйыштырыусылар, ҡара эштә йөрөүселәр, байҙарға ялланып эшләүселәрҙең байтағы – беҙҙең милләттәштәр. Ҡалаҡҡа һалып йоторлоҡ гүзәл заттарыбыҙҙың йә үҙ телендә сөкөрләшеп урам һепереүе, йә ике телдәге һүҙҙәрҙе бергә ҡушып мат-перемат менән һөйләшеүенән шулай уҡ күңелгә еңеллек килмәй, улар янынан оялып үтеп китәһең. Ҡалала йәшәгән ир-егеттәребеҙҙең күбеһе матур итеп мыйыҡ үҫтерергә белә, ә бына эшкә тигәндә уларҙы башҡа милләт ир-аттары менән бер рәттән маҡтап телгә алырлыҡ түгел. Әлеге-баяғы шул яйман, һәлкәүлектәре өҫтөнә тура һүҙлелектәре, көнсөллөктәре, хәйләләй, алдаша белмәүҙәре бәкәлдәренә һуға. Минеңсә, яҙыусы Ғәлим Хисамов бының сәбәбен «Башҡортостан» гәзитендә донъя күргән «Башҡорттар – ғәскәри кешеләр» (*2009 й., 29 гинуар, №16.*) исемле мәҡәләһендә нигеҙле итеп асып биргән. Йөҙәр йылдар дауамында башҡорттарҙың менталитетында уларҙың хәрбилегенә бәйле батырлыҡ, тоғролоҡ, тура һүҙлелек, алдай белмәү, ялғанлай алмау, бер ҡатлылыҡ, ныҡышмаллыҡ кеүек сифаттар барлыҡҡа килеп, ҡанына һеңгән. Улар шул осорҙа ыңғай роль уйнаһа, бөгөн килеп милләтебеҙҙең үҫешен тотҡарлаусы кире сифаттарға әйләнде. Көнсөллөк, тупаҫлыҡ, ялҡаулыҡ, эскелек,

маргиналлек, маңҡортлоҡ, тарҡаулыҡ кеүек кире күренештәргә ҡаршы көрәшмәй тороп ҡала башҡорттары күп милләтле республикабыҙ халыҡтары араһында үҙҙәренең лайыҡлы урынын таба алмаясаҡ. Мин был турала 3-сө Башҡорт гимназия-интернатында «Тормош һабаҡтары» предметын уҡытҡанда балаларға асыҡтан-асыҡ һөйләй, аңлата торғайным. Шуның өсөн бәғзе ата-әсәләр ҙә, уҡытыусылар ҙа мине өнәп бөтөрмәне. Ләкин ун-ун биш йылдан һуң йыш ҡына уҡыусыларым: «Ағай, һеҙ ҡайһылай хаҡлы булғанһығыҙ икән. Беҙ һеҙҙең был фекерҙәрегеҙгә көлөбөрәк ҡарай торғайныҡ. Тормошҡа аяҡ баҫҡас, һүҙҙәрегеҙҙең хаҡ икәнлегенә төшөндөк»,– тип әйтәләр йә кеҫә телефонынан шылтыраталар. Улар менән һөйләшеүҙәрҙән әлеге милли сифаттарҙың йәш быуынға ҡалай ҙа ныҡ аяҡ салыуын тағы бер тапҡыр аңлайһың, улар үҙҙәре лә быны бик ауыр кисерә. Ә инде формалашып бөткән холҡ-фиғелде үҙгәртеү, ай-һай ауыр, бәлки, мөмкин дә түгелдер. Шулай ҙа мин уҡыусыларыма: «Халҡыбыҙ менталитетындағы ана шул кире сифаттарҙы балаларығыҙҙа булдырмау өсөн көрәшегеҙ, хәҙерге ҡала шарттарында йәшәтә алырлыҡ, үҙҙәрен иркен тоторлоҡ итеү өсөн уларҙы башҡа милләттәрҙәге ыңғай сифаттар өлгөһөндә тәрбиәләгеҙ»,– тип кәңәштәремде бирергә тырышам.

Беҙҙе тарҡаулыҡҡа килтергән ошондай сифаттарҙы сит милләттән булған, республиканың автохтон халҡын үҙһенмәгән ҡайһы бер етәкселәр бик оҫта һәм хәйләкәр, хатта мәкерле файҙалана: яйын тура килтереп, бер-береһенә ҡаршы ҡуя, һөскөртә, ялҡаулыҡта, тупаҫлыҡта ғәйепләй. Шуларҙы төп сәбәп итеп, етәксе урындарға үрләтмәү өсөн ҡулынан килгәндең барыһын да эшләй. Йыш ҡына үҙ маҡсаттарына ирешәләр: шул арҡала ҡалаларҙағы милләттәштәребеҙ араһында тарҡаулыҡ өҫтөнлөк ала, милләтебеҙҙе тергеҙеү, үҫтереү буйынса башҡарған быға тиклемге изге эштәр юҡҡа сыға.

Бына шул сәбәптәр арҡаһында милләттәштәребеҙҙең байтағы, әлбиттә, ихтыяр көсө самалылары, төшөнкөлөккә бирелә, эскегә һалыша. Был кире сифаттар уларға эшҡыуарлыҡ өлкәһендә, дәүләт һәм власть органдарында вазифалы урындар биләүгә уғата ла ҡамасаулыҡ итә. Халыҡ шағиры әйтмешләй, быңдай башҡорттарға Тыуған иләндә тыуған илен һағынырға ғына ҡала. Ә ундайҙар күпселекте тәшкил итә. Әгәр рус яҙыусыһы, гуманист Глеб Успенский, мөғжизә менән яңынан терелеп, әйләнеп ҡайта алһа, башын тотоп: «Харап була башҡорт, харап була!»,– тип элекке һүҙҙәрен ҡабатлар ине.

Үрҙә әйтелгәндәрҙән сығып, төп һүҙем шуға ҡайтып ҡала: башҡорттар ҡала шарттарында телен, мәҙәниәтен юғалтмайынса йәшәй алһын өсөн, кире сифаттарҙан, етешһеҙлектәренән азат булыуҙы һәр кем үҙенән башларға бурыслы. Беренсе нәүбәттә йәш быуынды шул йүнәлештә тәрбиәләүҙән. Башҡа сара юҡ. Дәүләт һәм власть органдарына был йәһәттән өмөт итеүе ҡыйын. Илһөйәр уҡытыусыларыбыҙ, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәребеҙ, башҡорт ижтимағи ойошмалары ағзалары өҫтөнә тағы ла ҙур яуаплылыҡ төшәсәк. Сараһыҙҙың көнөнән.

Эште ҡалаларҙа ла, ауылдарҙа ла башҡорт ғаилә институтын тергеҙеүҙән башлау хәйерле буласаҡ. Эйе, тап бына башҡорт ғаиләһе институтын тергеҙеүҙән. Ә уның нигеҙендә арҙаҡлы әҙибәбеҙ Мәрйәм Бураҡаеваның «Тормош һабаҡтары», «Арғымаҡ» китаптарындағы идеялар ята, тип уйлайым. Ысынлап та, һәр башҡорт ғаиләһенең өҫтәл китабы булырға тейеш ул. Яҙыусыларыбыҙ, гуманитар өлкәлә хеҙмәт итеүсе ғалимдарыбыҙ тарафынан ошондай йүнәлештәге фәнни-популяр, публицистик китаптар күберәк ижад

ителеүе мөһим. Ана шул ғаилә институты тәрбиәһендә балаларға, аң, рух, ғәм, ырыҫ, моң, аҡыл һәм ҡот кеүек халҡыбыҙҙың изге сифаттары менән бер рәттән, киреләре тураһында ла асыҡтан-асыҡ һүҙ алып барырға, былдай алама сифаттарҙан азат булыу зарурлығын аңлатырға ла аңлатырға...

Ҡала шарттарында башҡорт этномәҙәни мөхитен формалаштырыу һәм үҫтереү мәсьәләләрендә, әлбиттә, иң беренсе сиратта Башҡортостан Хөкүмәте, муниципаль органдарҙың башлап барыуы мотлаҡ. Ысынбарлыҡта иһә йыш ҡына беҙгә былың киреһенең шаһиты булырға тура килә. Ундай йүнәлештәге эштәр йә башлап ташланыла, йә күҙ буяу, исем өсөн генә әпен-төпөн ителә, йә Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының ҡалаларҙағы ижтимағи ойошмалары елкәһенә һалына. Һеҙгә кәрәк бит, эшләгеҙ, йәнәһе. Шулай еңел генә ҡотола чиновниктар. Уңайы тура килгәндә аяҡ салыу, тәгәрмәскә таяҡ тығыуҙан да тартынмай ҡайһы бер түрә-ғараларыбыҙ. Шундайҙарҙың бәғзеләре башҡорт етәкселәренән булыуы – айырыуса ҡыҙғаныс күренеш. Күмертау ҡалаһы миҫалында былдай хәл даими күҙәтелә. «Үҙеңдеке – үҙеңә яу», тигәндәре шул булалыр инде. Былдай башҡорт етәкселәрен үҙ милләттәштәренә ҡаршы ҡуялар ҙа артабан үҙҙәрен дә төрлө сәбәп менән эшенән сығарып ташлайҙар. Тегеһе иһә ҡойроғон ҡыҫып, тауыш-тын сығармай ғына түбәнерәк вазифала йә ябай интеллигенция вәкиле, йә хеҙмәткәр булып эшләп йөрөргә мәжбүр була. Ундайҙарҙы милләттәштәре лә ихтирам итмәй, элек бергә эшләгән коллегалары ла, башҡорттарҙың етәксе урындарҙа эшләргә ҡулдарынан килмәй, ана күрәһегеҙме, тип уға бармаҡ төртөп, мыҫҡыллап көлә.

Полиэтник ҡалаларҙа башҡорттарҙың етәксе вазифаларҙа бик аҙ булыу сәбәптәренең береһе – ошонда. Ә инде берәй башҡорт етәксеһе үҙ милләтенең этномәҙәни проблемаларын күтәреп, хәл итеү эшенә тотонһа, ысын күңелдән янып йөрөһә, уны милләтселектә ғәйепләп, юғарыға ялыуҙар яҙып, биләгән вазифаһынан тиҙерәк осороу, башын күтәреп ҡарай алмаҫлыҡ итеп әҙәм мәсхәрәһенә ҡалдырыу, яндырыу, аяҡ аҫтына һалып тапау яғын ғына ҡарайҙар. Был тәңгәлдә, йәғни муниципаль органдарҙа титуллы милләт кадрҙарын үҫтереү, уларға ҡалаларҙағы үҙ халҡының этномәҙәни мәсьәләләрен уңышлы хәл итеүҙә ең һыҙғанып ҡатнашыу мөмкинлектәрен өйрәнеүҙе БР Президенты аппараты ла, хөкүмәт тә үҙенең конституцион бурысы тип иҫәпләмәй. Дөрөҫөн әйткәндә, власть органдары тарафынан ҡала башҡорттарының этномәҙәни проблемалары, күбеһенсә хәл ителмәйенсә, тауыҡ көлкөһөнә әйләндерелә. Шуға күрә ҡала башҡорттарына үҙ республикаһында, үҙ тыуған ерендә йәшәүе, бер ҙә генә лә еңелдән түгел. Республикаға исем биргән халыҡты ауылда ла, ҡалала ла һәр йәһәттән үҫтереү өсөн дәүләт кимәлендә маҡсатҡа ярашлы эш алып барылғанын мин, мәҫәлән, һуңғы егерме-утыҙ йыл эсендә асыҡтан-асыҡ күрмәйем. Берәй мәсьәләне уңышлы хәл итәм тиһәң, мотлаҡ ҡала етәкселеге өҫтөнән юғарыға ғариза, хат, хатта ялыу яҙырға кәрәк. Шунда ғына боҙ урынынан ҡуҙғалһа ҡуҙғала, ҡуҙғалмаһа – юҡ. Ә бына ундай характерҙағы мәсьәләләр күтәргән кешегә ҡала етәкселәре тарафынан шик төшмәй ҡалмай, бынан һуң һин ғүмер буйы үҙ ҡалаңда милләтсе исемен күтәреп йөрөргә мәжбүр булаһың. Күпме генә тырышһаң да, һине бер ҡайҙа күтәрмәйәсәктәр ҙә, үҫтермәйәсәктәр ҙә. Һин, йәнәһе,– күп милләтле республикабыҙҙағы милләт-ара тотороҡлолоҡто, халыҡтар дуҫлығын ҡаҡшатыусы, донъя бутаусы. Үҙ халҡы өсөн янып йөрөгән күп егет, ҡыҙҙарыбыҙға шунан һуң былар ҙың барыһына ла ҡул һелтәп, үҙ ҡабығына инеп

бикләнеүҙән башҡа сара ҡалмай. Ә юғарылағылар уларҙың түгел, ҡала хакимиәте башлыҡтарының һүҙен хәҡиҡәт тип ҡабул итә. Етмәһә, ҡайһы бер башҡорт ижтимағи ойошмалары етәкселәре, мәсьәләнең асылына күҙ йомоп, быларҙы күрмәмешкә һалыша, хатта үҙ милләттәштәренә урынһыҙ битәрләүгә күсә. Урындағы түрәләргә ҡойроҡ болғай, йәнәһе. Дөрөҫөн әйткәндә, һуңғы йылдарҙа Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының ҡалаларҙағы ижтимағи ойошмалары муниципаль власть органдарының кеҫә ҡоралына әйләнде. Улар башҡорттарға ҡаршы аҫтыртын эш итеүсе ҡала хакимиәттәре башлыҡтарының һүҙенән сыға алмай. Ә ябай халыҡ быларҙың барыһын да күрә, аңлай һәм ижтимағи эштәрҙә ҡатнашыуҙың фәтүәһен тапмай. «Бәләһенән баш аяҡ», – ти улар. Ижтимағи ойошмаларҙың шундай тешһеҙлеге, эшлекһеҙлеге, әлбиттә, урындарҙағы властарға ҡулай: проблемалар кәмерәк булған һайын, баш та һирәгерәк ауыртасаҡ. Ә инде айырым патриоттарҙың үҙ алдына бер эш тә ҡыра алмаҫын бот буйы бала ла яҡшы аңлай. «Яңғыҙ ҡарға яҙ килтермәй»,– тип халыҡ белмәй әйтмәгән. Ошо үрҙә килтергән сәбәптәр арҡаһында ҡала башҡорттарының күбеһендә психологик тетрәнеү барлыҡҡа килә лә инде. Шуға күрә муниципаль органдар, ҡала башҡорттары тел, мәғариф, мәҙәниәт һәм социаль-иҡтисади өлкәләрҙәге үҙ проблемаларын уңышлы хәл итә алһын өсөн, уларҙы, бында бер һеҙ генә түгел, башҡа милләт вәкилдәре лә йәшәй, тигән һылтау менән «ярҙан этергә» түгел, ә ярҙам итергә бурыслы. Мәҫәлән, ҡала башҡорттары балалары милли балалар баҡсаларында, милли мәктәптәрҙә белем һәм тәрбиә алһын өсөн, бөтә эш бер уларҙың ата-әсәләренең теләгенә генә ҡайтарып ҡалдырылырға тейешме ни? «По желанию родителей» тигән нәмә – милли мәғариф өлкәһендә ҡала башҡорттарын ассимиляцияға, маңҡортлоҡҡа дусар итеүсе иң уңайлы ҡорал. Ижтимағи ойошмалар, милли балалар баҡсаһы тәрбиәселәре, милли мәктәп уҡытыусылары менән бер рәттән муниципаль органдар чиновниктары ла был яҡлап арымай-талмай эшләйһе урынға, улар, киреһенсә, ҡыл да ҡыбырҙатмайынса, мөмкинлек сыҡҡан һайын ҡулдарынан килгәнсә аяҡ салып ҡалырға тырыша. Аҙаҡ башҡорттарҙы милли аңының түбән булыуында, туған телен, мәҙәниәтен өйрәнергә теләмәүҙә ғәйепләй. Кемдәр был мәсьәләне тәрән төшөнөп, уны власть органдары алдында ҡырҡыу итеп ҡуя – ундай башҡорттарға ҡарата ҡурҡытыу, янау алымдарын ҡулланыу башлана.

Быларҙың береһе лә беҙҙең тарафтан уйлап сығарылманы, ә тормош ысынбарлығы. Әгәр дәүләт кимәлендә ҡала башҡорттарын һаҡлау, үҫтереү буйынса программа ҡабул ителеп, Башҡортостан Хөкүмәте башҡорт халҡының фекеренә ҡолаҡ һалып эшләмәй икән, милләтебеҙҙең яйлап юҡҡа сығыуына дәүләтебеҙ үҙе үк юл ҡуя тигән һүҙ.

**Тәлғәт ШАҺМАНОВ.**
**Күмертау ҡалаһы.**

# Дин эшмәкәре һәм мәғрифәтсе

*(Муллаҡай шәйехе Ғабдуллаһ Сәиди ишан әл-Болғари
әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари Нур-Мөхәммәтовтың тыуыуына
175 йыл тулыуға бағышлайым)*



*Шәйех Ғабдуллаһ Сәиди ишан.*

Бик күп мөәллифтәр, улар араһында ғалиммын тигәндәр ҙә бар, башҡорттар Ислам динен Болғар ханлығы дәүерендә ҡабул иткән, тип дәлилһеҙ генә яҙып сыға. Был хәҡиҡәткә тап килмәй. Ҡамуссы ғалимыбыҙ Мөхәммәтсәлим Өмөтбаевтың хеҙмәттәренә, тарихи һәм археологик мәғлүмәттәргә таянғанда, башҡорттарҙың Исламды ҡабул итеүе 748 йылға ҡайтып ҡала. Мәсеттәр, диндә өйрәтеү һәм ғилем үҙәге булған мәҙрәсәләр барлыҡҡа килә башлай. Рәсәй дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылған башҡорттар араһында Иван Грозный менән булған Беренсе килешеү батша үлгәс тупаҫ боҙола һәм Башҡортостан ҡоллоҡ иленә әйләндерелә.

Аҡ батшаларҙың был сәйәсәтенә башҡорт халҡы битараф булмай, баш күтәреп ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәрҙең тәүгеһе 1645 йылға ҡарай. Быға, башҡорттарға ҡаршы тороу өсөн Минзәлә ҡәлғәһен төҙөп, хәрби нығытмаға әйләндереү тураһындағы батша фарманы сәбәпсе була. Шулай итеп, байтаҡ башҡорт ерҙәре Мәскәү ҡулындағы Ҡазан ерлегендә ҡала, һәм был бөгөн дә шул рәүештә картаға инә.

Һуңынан, 1662–1664 йылдарҙа Иш-Мөхәммәд, Һары Мәргән батырҙар, Ҡонҡас һәм Дәүәнәй старшиналар етәкселегендәге күтәрелеш, 1681–1684 йылдарҙағы Сәйет яуы, 1704 –1711 йылдарҙағы Алдар һәм Күсем батырҙар етәкселегендәге ихтилалдар, 1735–1740 йылдарҙағы Ҡараһаҡал (теүәл исеме Миңдеғол бин Юлай), Килмәк, Бәпәнәй, Юлдаш мулла етәкселегендәге яуҙар, 1755 йылғы Батыршаһ (Ғабдуллаһ Ғәлиев) күтәрелеше һәм 1773–1775 йылдарҙағы Бүгәс (Пугачев) – Салауат яуҙары тарихҡа инеп ҡала.

Был хәл, халыҡтың Рәсәйгә үҙ ирке менән ҡушылыуына ҡарамаҫтан, урыҫтарҙың көслө баҫҡынсылыҡ сәйәсәтенә, хатта эскән һыуына, кәртәһенә һ.б. һанап бөткөһөҙ һалымдар менән йөҙәтеү, көсләп суҡындырыу, башҡорттарҙы үҙ ерҙәренән ҡыуып, заводтар төҙөп, ул ерҙәргә урыҫ һәм башҡа халыҡтарҙы килтереп ауылдар, нығытмалар һалдырыу халыҡты ғәҙел күтәрелешкә әйҙәй.

Хәлдең бер аҙ үҙгәреүе казак Емельян Пугачев күтәргән яу менән ныҡлы


Стәрлебаш мәсете.

бәйле. Баш күтәреүселәр батшаның үҙ халҡына ҡарата сәйәсәтенә ҡаршы сығып, был хәл бөтә Рәсәй халҡын күтәрә. Ике яҡтан да бик күп ҡан ҡойола. Быны аңлаған Әбей батша (Екатерина II) һалымдарҙы кәметеү, дин тоторға ирек биреү хаҡындағы фармандары менән халыҡ нәфрәтен баҫа. Ислам динендәге башҡорттарға һәм дин әһелдәренә ҡарата мөғәмәлә бер аҙ йылылынғандай тойола. Сөнки баш күтәреүҙәрҙең етәкселәре, сәйәсәтте төплө аңлап фекер йөрөткән заманының уҡымышлы зыялылары һәм халыҡ ихтирам иткән муллалар булған.

Яйлап булһа ла, яндырылған, емерелгән мәсеттәр, мәҙрәсәләр тергеҙелә башлай.

Мәҙрәсәләрҙә “Ысуле ҡадим” тип аталған иҫкесә ысул тәртибендәге дин дәрестәре алып барыла. Дәрестәрҙе төплө Бохара мәҙрәсәләрендә ғилем тәхсилдә булып ҡайтҡан хәлфәләр, мөғәллимдәр һәм мөдәрристәр тарафынан алып бара. Алдынғы ҡарашлы ғөләмәләр, был ысулды Бохараға бармай ғына үҙебеҙҙә булдырыу мөмкинлектәре барлығы тураһында әленән-әле сығыш яһай. Ҡайһы берҙәре “ Ысуле джәдид” тип аталған яңы уҡытыу алымын ҡулланып, хатта һөнәр биреп, үҙебеҙҙең милли зыялыларҙы ошонда үҫтереүҙе лә күҙ алдында тота.

Был юҫыҡта ошондай мәҙрәсәләрҙең тәүгеләренән булып Стәрлебаш һәм Стәрлетамаҡ мәҙрәсәләре мәшһүр. Тәүгеһе 1720 йылда уҡ бинаһы йәмиғ мәсет булараҡ төҙөлгәс тә эшләй башлай. Уның даны 1812 йылда Бохарала уҡып ҡайтып, 1813 йылдың 22 авгусында мәншур (указ) алған, мәшһүр дин хеҙмәткәре һәм мәғрифәтсе, башҡорт Ниғмәтуллаһ бин Биктимер бин Туҡай бин Урманай әс-Стәрле (1773–1844), улдары Мөхәммәд-Харис (1810–1870), Мөхәммәд-Харрас (1814–1871) эшләгән ваҡыттарҙа киң тарала. Шәйех Мөхәммәд-Харис тархан үҙенең һүҙенә һәр саҡ тоғро ҡалған, шәкерттәренә:

“Фәндәр өйрәнеү һәм телдәр белеү зарур һәм кәрәк”, – тип әйтә торған булған.

Башҡортостандың көнсығыш Урал яғына ҡараған Муллаҡай ауылы һәм Троицк ҡалаһындағы “Рәсүлиә” мәҙрәсәләре, бик боронғо һәм яңыса ысул менән беренселәрҙән ғилем биргән уҡыу йорттары булараҡ иҫәпләнә. Архив мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Ҡуғанаҡбаш ауылындағы данлыҡлы Тимербәк бин Уйылдандың мәҙрәсәһен тамамлап, ғаиләһе менән Муллаҡай ауылындағы Йәмиғ мәсеткә тәғәйенләнгән мәншурлы мулла Нур-Мөхәммәд бин Ғәбидуллаһ әл-Минзәләүи мәсеттә 1818 йылдан уҡыта башлай. Ошонда, атаһынан ғилем эстәгән Сәйетбаттал бин Нур-Мөхәммәд, оҙаҡламай Стәрлебаш ауылындағы шәйех Ниғмәтуллаһ бин Биктимер бин Туҡай мәҙрәсәһенә уҡырға китә. Сәйетбатталға хәлфә дәрәжәһендә мәҙрәсәлә эшкә ҡалырға



*Бохара.*

тәҡдим итәләр. Ул шунда Тойғон исемле башҡорттоң ҡыҙы Шәмсийыһанға никахлана. 1836 йылдың 3 майында өлкән хәлфә Сәйетбаттал менән Шәмсийыһандың ир балалары донъяға килә. Уға Ғабдуллаһ тип "Аҙан" һәм "Ҡамат"лап исем ҡушалар. Күптән вафат булған ата-әсә йортона ғаиләһе менән ҡайтып, Сәйетбаттал, мәсет эргәһендә бәләкәй генә мәҙрәсә һалдыра ла шунда шәкерттәргә ғилем бирә башлай. 1837–1847 йылдарҙа мәрхүм атаһының эшен дауам итеп, шунда вафат була.

Башҡорттоң бөйөк ғалимы Ризаитдин бин Фәхретдин уның тураһында былай ти:

"Сәйед бин Нур-Мөхәммәд. Ур (Орск) төбәгендә Муллаҡай ауылында имам һәм мөҙәррис булып, 47 йәшендә вафат булды. Ғабдулла исемле улы ҡалды. Ғилем һәм суфыйсылыҡта остазы һәм шәйехе Ниғмәтуллаһ бин Биктимер әл - Эстәрле ине. Тәҡүәи, динле бер зат булып, бөтөн ғүмерен дәрес уҡытып уҙғарҙы, тиҙәр".

(Фәхретдин Р. *Аҫар, гәрәп әлифбалы төрки телдә.* Ырымбур, "Ваҡыт". 1905. Жилд 2. Бүлек 10. Рәҡым 263).

Әммә Муллаҡай мәҙрәсәһенең даны Сәйетбатталдың улы, шәйех Ғабдулла Сәиди ишан етәкселегендә үҫә һәм тирә-яҡҡа тарала. Ул тәүҙә атаһында, Муллаҡай мәҙрәсәһендә уҡый. Атаһы вафатынан һуң 1847 йылдан алып 1859 йылғаса Стәрлебаштағы ағалы-ҡустылы Туҡаевтар етәкселегендәге "Харис үә Харрас" мәҙрәсәһендә ғилем эстәй.

1859 йылда, башҡорт тарханы, Стәрлебаш мәҙрәсәһенең мөҙәррисе, шәйех Мөхәммәд-Харис Туҡаевтың тәҡдиме менән Бохаралағы Чор-Минор мәҙрәсәһенә уҡырға китә. Унда Мозаффар-хан хакимиәте ваҡытындағы бөйөк ғалим, Бохаралағы наҡшбандия-мүджәддидиә тәриҡатындағы суфыйҙар остазы Дамулла Ғисаметдин әл-Бохари әл-Мөфти әл-Ғәскәр мәхдүмдән дәрестәр ала. Бохара шәйехе Мудджәмә (Мөхәммәд Джумға) әт-Төркмәниҙән мөридтәр тәрбиәләү өсөн махсус рөхсәт-иджазатнамәгә лайыҡ була.

11 йыл уҡыу осоронда Ғабдулла Күкәлдәш мәҙрәсәһендә төҙөлөш һөнәрҙәрен; Мири-Ғәрәп мәҙрәсәһендә, файҙалы ҡаҙылма байлыҡтар, мәғдән сығарыу, тыйб (медицина—**И.Ғ.**) буйынса, халыҡ тыйбын һәм бөйөк сығатай ҡамуссы ғалимы Әбү Ғәли Синаның ғилми әҫәрҙәрен өйрәнгән. Йәшәрлек аҡса табыу өсөн ул уҡыуҙан һуң йөксө булып, каруан ҡаршы алып, оҙатып, ебәк күбәләге үрсетеп туҡланған, кейенгән. 23 йыл сит яҡтарҙа ғилем алған шәйех Ғабдуллаһ Сәиди ишан, 1870 йылда, үҙе, йәшәгән яҡтарындағы



*Шәйех Ғабдуллаһ Сәиди ишан яҙыуы.*

зыялыларҙың, руханиҙарҙың үтенесе буйынса һәм улар йыйып ебәргән аҡсаға ватаны Муллаҡайға ҡайтып төшә.

Эске эштәр вәзирлегенең Ырымбур виләйәте идараһының 1872 йылдың 5 августындағы 2492-се мәншуры менән шәйех Ғабдуллаһ Сәиди Муллаҡай ауылы Йәмиғ мәсетенең муллаһы итеп тәғәйенләнә, уға мәсеттең имам-хатибы һәм мәҙрәсәнең мөҙәррисе вазифалары ла йөкмәтелә. 1871 йылдан шәйех Ғабдуллаһ Сәидиҙең эшмәкәрлеге 42 йыл буйына Муллаҡай мәҙрәсәһенә бәйле. 1910 йылда эшен улы Сәйед-Әхмәдкә тапшырғандан һуң да ул 1913 йылғаса мәсет һәм мәҙрәсә эштәрен ойоштороуҙа улына һәр яҡлап ярҙам итә. 1872 йылдан Ғабдуллаһ Сәиди тарафынан дәрестәрҙә йәдид ысулы индерелә, һәм бында донъяуи фәндәрҙән дәрес биреү өҫтөнлөк ала башлай. Иҫәп, урыҫ теле, дөйөм тарих, физика, химия, тәбиғәт, ҡанундар фәне, тәрбиә һәм белем фәне, мантыйҡ, физик ныҒыныу һәм тәнәфестәрҙә ишетеү һәм күҙ хәтерҙәрен үҫтереүгә бәйле күнекмәләр буйынса дәрестәр бирелә.

Тарихи башҡорт ерҙәрендә шәкерттәрҙе төрлө һөнәрҙәргә өйрәтеү менән шөғөлләнгән берҙән-бер уҡыу йорто булараҡ дан тотҡан ул Муллаҡай мәҙрәсәһе. 1872 йылдан унда геология нигеҙҙәре, ҡаҙылма байлыҡтарҙы сығарыу эше, таш һәм ағас әйберҙәр эшләү һөнәрҙәре, лак-буяу матдәләрен әҙерләү, халыҡ ысулдары, ислам ғалимдарының хеҙмәттәренә таянып һәм Ҡөрьән менән дауалау ысулдарын өйрәткән дәреслектәрҙән һөнәр алғандар.

1876 йылдан был мәҙрәсәлә ҡатын-ҡыҙҙарға ла уҡыу мөмкинлеге тыуа. Улар бында "Дин нигеҙҙәре"н, Ҡөрьән тәфсирен, Аллаһ Рәсүленең,— уға Аллаһ рәхмәте һәм сәләме булһын, — хәҙистәрен, ислам ҡанундарын, әхлаҡ ҡағиҙәләрен, сигеү, бәйләү, тегеү кеүек һөнәрҙәргә өйрәнәләр. Шәйех Ғабдуллаһ Сәидиҙең хәләл ефете ахун Мәхмүт ҡыҙы Райхан Дәүләткирәева ҡатын-ҡыҙҙар төркөмөнөң етәксеһе һәм мөғәллимәһе була.Ҡайһы бер йылдарҙа мәҙрәсәлә уҡыған шәкерттәр һаны 400-гә еткән.

Шәйех Ғабдуллаһ Сәидигә Аллаһ Тәғәлә ике мәртәбә хаж ғәмәлен үтәргә насип итә. Беренсе мәртәбә хажға ул 1881 йылда, икенсеһендә 1899 йылда бара. Тәүге сәфәрендә ул Изге Мәҙинә шәйехе Мөхәммәд Мазһар бин Әхмәд-Сәйед әл-Һинди әл-Хәнәфи менән таныша. Суфыйлыҡҡа имтихан тотҡандан һуң, шәйех уға махсус рөхсәт - ижазатнамә тапшыра. Был рөхсәт Ғабдуллаһ Сәидигә шәйехлек дәрәжәле булып, мөридтәр тәрбиәләү хоҡуғын бирә. Икеләтә шәйех Ғабдуллаһ Сәидиҙе оҙатҡанда, шәйех Мөхәммәд Мазһар әл-Хәнәфи үҙе яҙған суфыйсылыҡ тураһындағы "Мәҡамат әс-Сәғдийә" китабын бүләк итә.

Ул мәҙрәсәләр өсөн егерменән ашыу махсус дәреслектәр яҙа, уларҙың күбеһе йөкмәткеһе яғынан ғилми хеҙмәткә торошлоҡ итә. Заманының

алдынғы ҡарашлы башҡорт, татар, ҡаҙаҡ зыялылары, руханиҙары ошонда белем алып сыҡҡан.

Мәҙрәсә шәкерттәренән:

Алтын сәнәғәтендә мәшһүрлек ҡаҙанған ағалы-ҡустылы Мөхәммәд-Шакир һәм Мөхәммәд-Закир (Дәрдмәнд) Рәмиевтар;

Алағуянбашы (хәҙер Бөрйән моҙафатына ҡарай – **И.Ғ.**) ауылы Йәмиғ мәсете имамы, ғәрәп, фарсы, төрки, урыҫ шиғриәттәрен яҡшы белгән "Рәсәй империяһы География йәмғиәтенең" Ырымбур бүлеге ағзаһы Шәмсетдин Ҡасҡынбаев;

"СССР урман сәнәғәте отличнигы" нишаны менән баһаланған, Ғариф Ғүмәрҙең "Тулҡын өҫтөндәге ҡала" китабында фирҡә ойоштороусы Барый Аҡсулпанов булараҡ тасуирланған Усман (Ғуҫман – ҡарый) (Ғ)Абдрахман улы Йәғәфәров;

Темәс ауылының 1-се мәхәлләһе йәмиғ мәсете имам-хатибы һәм мөҙәррисе, "Дамулла Ғабдулла хәҙрәт Сәйетбаттал улы "Муллаҡай" рисаләһе мөәллифе Рәхмәтуллаһ Наушируан улы Мәһәҙиев;

Ырымбур ҡалаһының ихтирамлы шәхесе, I саҡырылыш Дәүләт Думаһы наибы (депутаты – **И.Ғ.**), ахун Шаһишәриф Мәҙәтғәли улы Мәтинов;

шағир - сәсән, шәйехтең вафатынан һуң "Ғабдуллаһ Сәидигә мәрҫиә"һен яҙып уҡыған Шафиҡ Әминев-Тамъяни һәм уның яҡташы, шағир Фауарис әт - Тамъяни;

имам һәм мөҙәррис, тәүге Башҡортостан йөмһүриәтен төҙөүҙә әүҙем ҡатнашҡан Ә. -З. Вәлидиҙең көрәштәше Әбүбәкер Дәүләтҡол улы Хөсәйенов;

халыҡты дауалаусылар һәм Аллаһ биргән кираматлыҡ эйәләре Мөхәммәд-Әнүәр Ғабдулла улы Сәйетов һәм Мөжәүир Уйылдан улы Сиражетдинов һ.б.

1913 йылда данлыҡлы шәйехтың һаулығы ҡапыл мөшкөлләнә, фалиж һуғып, бер йыл тирәһе ғүмергә ята. Бөйөк дин хеҙмәткәре, Наҡшбәнди суфыйсылыҡ тәриҡәте шәйехе һәм ишан, ғалим-уҡытыусы, яңы ысул менән уҡытыу өсөн ҡулайлы булған, ғилми хеҙмәттәргә торошло дәреслектәр мөәллифе, шиғриәткә ғашиҡ шағир, мәҙрәсәһендә шиғриәт кисәләре ойоштороп, шәкерттәрендә мөхәббәт тойғолары уятҡан шәйех һәм ишандың ғүмере 1914 йылдың 1 сентябрендә ахшам намаҙынан һуң өҙөлә.

*"Беҙ барыбыҙ ҙа Аллаһ Тәғәләнеке һәм беҙҙең ҡайтыуыбыҙ ҙа Уга"*.

Уны шул көндө үк Муллаҡай ауылы ҡәберлегенә ерләйҙәр. Һуңғараҡ Ғабдуллаһ Сәидиҙең яҡын дуҫы Зәйнулла ишан Рәсүлев Троицкиҙан килеп,



*Шәйех Ғабдуллаһ Сәиди ишан ҡәберлеге.*

мәрхүмдең ҡолпа ташына ҡыҫҡаса тәржемәи хәлен яҙып, баш осо тапҡырына урынлаштырып китә.

— Уның ҡәбере изге булһын!

“Был шәйехтарҙың иң ғалимы Троицкиҙан Зәйнулла менән Муллаҡайҙан Ғабдулла ине, — тип яҙа Ә.-З. Вәлиди Туған “Хәтирәләр”ендә. — Бохарала уҡыған Ғабдулла дин ғилемендә бик абруйлы, ғәрәпсә һәм фарсыса шиғырҙар яҙған бер остаз булды. Наҡшбәндтың Һиндостандағы “Муджәддид-и Хәлиди” тәриҡәте даирәһенән ине”.

(*Ә.З. Вәлиди. Хәтирәләр*. Өфө. – “Китап”. 1996. Б.15-се).

Муллаҡай мәсет-мәҙрәсәһенә уның олатаһы Нур-Мөхәммәд Ғәбиҙулла улы нигеҙ һалып, 15 йыл ғүмерен Йәмиғ мәсет имамы булараҡ һәм шәкерттәр уҡытыуға бағышлай.

Атаһы Сәйетбаттал Нур-Мөхәммәд улы, мәҙрәсә төҙөп, Йәмиғ мәсеттең имам-хатибы һәм мәҙрәсә мөҙәррисе булараҡ, 10 йыл ғүмерен шәкерттәр уҡытыуға бағышлап, мәҙрәсәне тирә-яҡҡа танытып өлгөрә. Шәйех Ғабдуллаһ Сәиди ишан, атаһы Сәйетбаттал мәҙрәсәһендә белем алып, 23 йыл сит яҡтарҙа ғилем тәхсилдә булып, ғүмеренең 42 йылын шәкерттәр тәрбиәләүгә бағышлай, Муллаҡай мәҙрәсәһенең данын тарихи Башҡортостан, Ҡазан, ҡаҙаҡ ерҙәренәсә таратып вафат була.

Быйыл 3 майҙа уның тыуыуына 175 йәш тулды. Ошо айҡанлы Өфө, Баймаҡ, Сибай ҡалаларында, Стәрлебаш моҙафатының үҙәгендәге урамдарға, Сибайҙа төҙөләсәк мәсеткә һәм Сибай ҡалаһы “Тәҡүә” мәсете комплексына ингән, төҙөлөп ятҡан мәҙрәсәгә уның исемен ҡушырға тигән тәҡдимгә мосолманмын тигән кеше ҡушылыр, хатта ярҙам ҡулын һуҙыр, тигән фекерҙә ҡалам.

“*Тамам. Фәҡир, хурланылган кеше Ғабдуллаһ бин Сәйид әл-Болгари әл-Бөрйәни әл-Һаҡмари…*”, – тип Бохарала уҡыған ваҡытында яҙа ул. Ғалим ғүмере буйы китаптар йыйған, үҙе лә яҙған. Шул китаптарҙан шәкерттәргә дәрес биргән. Муллаҡай мәҙрәсәһенең китапхана фондынан булған китаптарҙың бик әҙе генә табылды. Башҡортостан Фәндәр академияһы китапханаһында, Ишембай ҡалаһы мәсете имам-хатибы Р. Рафиҡовта һәм Сибай ҡалаһы “Тәҡүә” мәсете имам-хатибы Ә. Ғәзизовта шәйехтең китаптары һаҡлана.

Һуңғы осорҙа, динде, дин тарихын, тәүхидте, яҙасаҡ шәхестәрҙең тәржемәи хәлен белмәгән яҙыусылар китап яҙырға тотондо. Дан ҡаҙанабыҙ, тип китап туйҙары уҙғарып, динебеҙҙә һис ҡаралмаған йә мәжүсилек ғәмәлдәрен Исламға бәйләйҙәр. Быға сик ҡуймаһаҡ, ундай “яҙыусы”лар арҡаһында оҙаҡламай муллаларҙан көлә башлаясаҡтар. Динебеҙҙе тергеҙгән осорҙа бындай китаптар халыҡты шайтан ҡоло итәсәге күренеп тора. Аллаһ һаҡлаһын! Ундай китаптарҙы баҫтырырҙан алда, динде яҡшы белгән кешенән ҡаратып сығыу хәйерлерәк.

Барса уҡыусыларыма Аллаһ Тәғәлә ярҙамын насип итһен ине. Амин.

**Имам Ғариф хажи ҒАБДРАХМАНОВ.**

## ҺАҒЫНАМ «КУЛАКТАР» ТӨЙӘГЕН...

Юрматау (Йырматау ҙа тибеҙ) ауылы Белорет биләмәһендәге Туҡан рудник ҡасабаһынан 4 саҡрым алыҫлыҡта урынлашҡан. Ултырышы йәмле. Амбарка (топографик һүҙлектә «ам бар», йәғни «арыҫлан, юлбарыҫ» бар, тигәнде аңлата. Бәлки, элек улар булғандыр) йылғасығы, Мәйгәшле һыуы аға. Юрматауҙар элек Ҡарағай ауылы (Кирәй – ҡыпсаҡтар йәшәгән бик боронғо Өмөтбайға – Тау Мүскәһенә яҡын ауыл. Таралғайны, хәҙер утар булып ҡабат тергеҙелә) башҡорттарының йәйләүе булған. Беҙҙең ялан баҡсаһында көрәк менән ҡаҙып картуф сәскәндә, ҡортбаштар табыла ине. (Биҙәүес итеп ҡулланылған ваҡ ҡына аҡ диңгеҙ ҡабырсағы.)

1931-1932 йылдарҙа ошо һаҙлыҡлы ҡара урманға һөрөп килтерелгән кулактарға ағас бараҡтар төҙөргә әмер бирелә. 1934 йылда 64 барақта (10-һы 2-шәр бүлмәле, 2-һе – 18-әр, ҡалғандары 4-әр бүлмәле ине) 800 ғаилә йәшәй. Әйткәндәй, ул осор Көҙйылғаға – 1055, Нураға – 1753, Төлмәйгә 646 ғаилә раскулачивать итеп ебәрелә. Ошо һандарҙы 5-6 тапҡырға ҡабатларға кәрәк, сөнки һәр ғаиләлә кәмендә 5-6 бала иҫәпләнгән.

Эйе, беҙҙә меңләп кеше бараҡтар төҙөй, барак баштарын ағас ҡайыры менән ҡаплайҙар. Был эшкә Имай Нафиҡов уҙаман оҫта һаналған. Саҡырым самаһы алыҫлыҡта Әүжән, Ҡағы, Үҙән урыҫтары йәшәгән. Уныһы Вольный поселок тип аталды.

Ауылда өс урам булды, ул дүрт өлөшкә бүленде. Өҫкө урам уртаһынан поездар уҙҙы, сөнки атай-ағайҙар карьерҙа руда ҡаҙый ҙа, вагондарға тейәп, Белоретҡа оҙата ине.

Беҙ урта урамда йәшәнек, бысраҡ, батҡаҡ күпсей торғайны. 18-әр бүлмәле йорттар Аҫҡы, Өҫкө урамдарҙа булды, унда йәштәр йәшәне.

Ауылыбыҙҙа ике ҡатлы комендатура эшләне. Бөтә ауыл халҡын дер һелкеткән комендант Мастеров Павел Архиповичтан рөхсәтһеҙ бер ҡайҙа китеп булмай, хатта йыйылып һөйләшергә лә ярамай.

...Атайым бер ялда күршеләрен сәйгә саҡыра. Саҡырылмаған күршебеҙ комендантҡа барып ошаҡлай – атайымды каталажкаға ябып та ҡуялар. Апайым һөт, икмәк алып барып, туалетҡа элеп китә. Ғәйеплеләрҙе комендатурала «аҡылға» ултырта торғайнылар.

Ауыл осондағы ҙур клубта пианино, костюм бүлмәләре, иҫ китмәле бай китапхана бар ине, сөнки һәр кем үҙенең хеҙмәт хаҡынан китапхана фондына аҡса күсерҙе.

Ҡабаҡ башындағы ике ҡатлы детдомға 1937 йыл Гитлер һуғыш асҡан Испаниянан да бала-саға килтерелде. Улар баҡсала йәшелсә, картуф үҫтерҙе, ауылдағы кешеләргә ярҙам итте, Исмаҡайға походҡа барҙы, дәү һарайҙа мал көттө. Был турала прозаик Әнисә Хәмәтдинова «Илһөйәрҙең дуҫтары» тигән

китабында яҙған. Ватан һуғышы башланғас, кулактарға ышаныс юҡ тип, детдомды Сермәнгә күсерҙеләр. Фарманды Ғәлимов Сәләмдең – шағирҙың ике туған ағаһы бирә, Белоретта райком секретары булып эшләгән сағында.

Ике мәктәп булды. Кластар ҙур, яҡты, бигерәк тә биология кабинеты йыһазға бай. Унда Исмаҡайҙан, Ботай, Өмөтбай, Һаралы ауылдарынан килеп, ятаҡта ятып уҡынылар. Уҡыу рус, татар телендә алып барылды. Һәр класта ҡырҡлап бала, сөнки детдом тәрбиәләнеүселәре лә күп. Һуңынан мәктәп Комарово тауына күсте. Беҙ шунда уҡыныҡ. Тәнәфестәрҙә йырлайбыҙ, бейейбеҙ, уйнайбыҙ.

Тау башындағы ҡарағайҙар араһында медпункт, «пожарка» ла бар ине, землянканы ла күрә инек. Унда уҡытыусы Ғәлиә апай йәшәне. Әлеге көндә ул тауҙарҙа тәрән күләүектәр барлыҡҡа килгән, унда Камарау ҡыҙҙары батып та үлгеләне.

Йылға буйында гелән ҙур мунса төтәне. Магазинда таң һарыһынан сираҡҡа баҫабыҙ, карточка менән икмәк алабыҙ. Ололар ҡыҫһа, сираттан сығарып та ташлана инек.

Хәҙер был биналарҙың береһе лә юҡ, бөтәһен дә Туҡанға ташып бөттөләр. Күптәр барактар урынына үҙ йорттарын һалып сыҡты. «Спецпереселенец» бараҡтары әле Көҙйылғала ғына һаҡланған, уларҙа байтаҡ кеше йәшәй.

Атайҙарыбыҙ кәйлә менән «тау йөрәген йырталар», тимер рудаһын тәүлек буйы домнаға оҙатып торалар. Ололар ҡараңғы төндәрҙә сыра яндырып, сменаға китә лә, 10 – 12 сәғәт буйы эшләйҙәр. Аяҡтарында – сабата. Тырышҡандар стахановсы исемен алды: Әхмәтшин Әхмәҙей, Саматов Заһит, Бикмөхәмәтов Зәйнетдин, беҙҙең атай... Зәйнетдин ағайға ҡайтырға рөхсәт тә бирҙеләр, ләкин ул ҡайтманы. Һуңынан стахановсыларҙың һаны 42-гә етә. Әлбиттә, асығалар. Онға бысҡы онтағы, йүкә ҡабығы ҡушып бешерәләр, ә балалар үләнгә, һарынаға, еләккә йөрөй. Халыҡ картуф, йәшелсә сәсә, мал ҡарай.

1937 йыл яҡынлаша. Ауылдан икенсегә ҡулға алыныуҙар башлана. Гнедин, Максимов, Василюк, Половинкиндар ҡайҙалыр оҙатыла. ГУЛАГ лагерҙарына, әлбиттә. Сөнки ауылда шымсылар ҙа була, улар һәр шикле хәлде органдарға ошаҡлап тора.

1941 йыл... Юрматауҙар ышаныслыҙ тип, уларҙы тәүҙәрәк фронтҡа алмайҙар, 1942 йылда ғына яуға оҙата башланылар. Ҡайһы бер ғаиләләрҙән 3-4-әр кеше китте. Мәҫәлән, Ноғомановтар ғаиләһенән өс яугир һәләк булды: Әхмәтлатип, Камил, Сәлим. Һуғышҡа тиклем улар Сермәндә уҡып йөрөгән. Мәхәм тигән улдары ғына әйләнеп ҡайтты, уныһы беҙҙе географиянан уҡытты.

Верниковский тигән поляк ғаиләһенән дә өсәү һуғышта ҡатнаша. Каземир исемлеһе Смоленск эргәһендә ерләнгән, Ян тигәне 1945 йылдың майында хәбәрһеҙ юғала. Өсөнсөһө – Зигмунд Антонович тураһында «Ватандаш»та (2004 й., № 12, 104-се бит) ошондай юлдар бар: «При активном содействии военкоматов республики среди жителей Башкортостана выявлены участники II мировой войны, воевавшие в польских военных формированиях. Одному из них, Верниковскому Зигмунду Антоновичу, правительством Республики Польша присвоен статус ветерана войны с выплатой ежемесячного пособия».

Заманында беҙҙең ауылдан Карам Сәмиғуллин менән Заһит Моталлапов (Татлынан) Сермәндә бергә уҡыған икән. Заһит ағай менән Карам һуғыштан һуң Өфөлә осрашалар.

Карам артиллерист булып хеҙмәт иткән. Бер ваҡыт батареяларын тылға күсерә башлайҙар. Улар Украинаға килеп еткәндә, немецтар тарафынан ҡамалғанлығын аңлайҙар – уларға һуғыш башланғанын ниңәлер әйтмәйҙәр. Нисек тә йәшәргә, көрәшеү юлдарын эҙләргә кәрәк. Бәхетенә юлына Мәсетле районы

егете Вафа Әхмәҙуллин осрай, һәм улар партизандар менән бәйләнеш булдыра. Вафа украин отрядына китә, ә Карам элемтәсе булып ҡала. Тирә-яҡта фашистар мыжғып торғанда, Сәмиғуллин Шмелькова фамилиялы ҡатын фатирында урынлаша. Шунан үҙе лә Шмельков фамилияһында йәшәргә мәжбүр була, ә Вафа Әхмәҙуллин Словакия тылына оҙатыла. Артабан ул «Высокие Татры» партизандар отрядының командиры булып китә, үҙен Василий тип йөрөтәләр. Был ҡаһарман хаҡында Ризван Хажиев һ.б. күп яҙҙы, ҡабатлап тормайым.

Ошо геройҙың исән ҡайтыуы Сәмиғуллин-Шмельков бәхетенә булған: ауылдашыбыҙға ҡамауҙа ҡалыуын, ни өсөн Шмельков фамилияһына күсеүен Әхмәҙуллинға аңлатырға тура килә. Бәлки, шул аңлатыу арҡаһында Сәмиғуллин ағай (Шмельков) Себергә оҙатылмағандыр. Ай һайын органдарға саҡыртылыу, бер үк хәлде ҡат-ҡат аңлатыу арҡаһында Башҡортостандың көньяғында бер аҙ эшләргә мөмкинлек бирелә, ләкин рухи хәлен, уйланыуҙарын ағай кеше ҡатыны менән генә уртаҡлаша.

Беҙҙән йөҙләп кеше яуға эләгә, ләкин береһе лә «Хәтер» китабына инмәгән. «Белорецкий рабочий» гәзитендә Муллаяров Хәләс ағайҙың ниндәйҙер орден менән бүләкләнеүе тураһында яҙылғайны. Наградаһының туғандарына барып етеүе икеле, сөнки уның адресын белеүселәр табылманы. Күптәр 1957 йылда репрессиянан аҡланыу рөхсәте – «освободить от спецпоселения» тигән документ алып, илдәренә таралышты.

Ауылыбыҙҙа ниндәй генә милләт кешеһе юҡ ине! Сыуаштар Пиксаев Федор, Макеев Александр, мариҙар Григорьев Иван, Файрушин Алексей, мордва Дементьев Владимир, рустар Киселев Василий, Никитин Василий, татарҙар Ғимазетдинов Фазыл, Кәлимуллин Карам, украиндар Василий һәм Петр Андрейчуктар, Григорий Слацто, башҡорттар Ғабдрахманов Нафиҡ, Фәхретдинов Сәйфетдин һ.б.

Һуғыштан һыңар аяҡ менән ҡайтҡан ветеран Малафеев Николай Сәйфитдин ағайҙың үлеүен былай тип хәтерләй: «Беҙҙекеләр атакаға әҙерләнергә приказ алды. Йүгереп барған Сәйфетдин ағайҙың башына снаряд ярсығы тейгәс, ул ике аҙым ғына атлай... Мин эргәһенә барғанда, ҡара ҡанға мансылған ҡарҙа баһадир ағайҙың йәнһеҙ кәүҙәһе генә шәйләнде. Ә командир һаман алға әйҙәй. Был ауыр хәлгә Сталинград эргәһендә тарыным...»

Ауылыбыҙҙа һәләк булғандарға обелиск ҡуйылған, тик сәскә һалыр кеше юҡ – Юрматау юҡҡа сыҡты тиерлек. Беҙҙең атай, стахановсы булараҡ, һуғышҡа алынмай. Рудком начальнигы ударниктарҙы:

– Канауҙарға ятығыҙ, йәшеренегеҙ, һеҙҙе фронтҡа ебәреп, руданы кем ҡаҙһын? Һеҙҙең өсөн начальство алдында үҙем яуап бирермен,– тип үҙе өгөтләй. – Руда ҡорал эшләү өсөн кәрәк бит!

Ир-ат яуға киткәс, улар урынына ҡыҙҙар эшләй: Усманова Фәриҙә, Шакирова Жиһан, Ғабдуллина Кәндиә, Ғәзизова Хөснурый... Егеттәрҙе трудармияға ебәрәләр: Ғабдуллин Хафиз, Минәзев Ғүмәр һ.б.Ҡатын-ҡыҙҙар карьерҙан руда онтағына буялып, һап-һары кейем менән ҡайтырҙар ине.

Туҡанда ФЗО кадрҙары әҙерләр өсөн төрлө райондарҙан йәш егеттәрҙе уҡыттылар. Күбеһе беҙҙең ауыл ҡыҙҙарына өйләнеп, Юрматауҙа йәшәне.

Тирә-яҡтан, икмәк бирелә тип, кешеләр күсеп килгеләне. Эшселәргә – 1 кг, өйҙәгеләргә – 300 г. Һуғыш осоронда ла, унан һуң да аслыҡ йонсота. Әсәйҙәребеҙ, балаларҙы туйындырабыҙ тип, Ишембай, Ғафури райондарына сығып, он, көнбағыш, тоҙ, шырпы, сәй алып ҡайта ине. Уларға боҙло һыуҙарҙы кисергә, ҡырҡмаһа ҡырҡ тау үтергә, бурандарҙа юл ярырға тура килә. Ботай, Хоҙайбирҙе ҡатындары: «Һеҙ норма ашайһығыҙ, алдан төшөп, юл һалығыҙ», – тигән юрматауҙарға.

Ни тиклем ҡыйынлыҡ күрһә лә, халыҡ татыу йәшәне. Кистәрен йыйылып, ойоҡбаш, бейәләй, шарфтар бәйләп, фронтҡа посылка ебәрҙеләр. Уны ойоштороусы Исхакова Мөҙөйәнә булды. 21726 һумлыҡ әйбер ҙә йыйыла. Дүртенселә генә уҡыусы Смаҡов Йәүит үҙе генә айырым посылка һалғас, фронттан уға, рәхмәттәр уҡып, ҙур командирҙың яуап яҙғаны хәтерҙә.

Үҙебеҙ фәҡир булһаҡ та, ситтән килгән хәйерселәрҙе буш сығармай, кәртүк булһа ла бирә инек.

Өй һайын йөрөп, заемға ла яҙҙырҙылар. 23 һум ғына пенсияға 6 кеше йәшәнек (атайыбыҙ 42 йәшендә генә ауыр эштән үлгәйне), шулай ҙа бирешмәнек.

Һуғыш бөткәс, яугирҙар ҡайта башланы. Максимов Игорь ғүмер буйы Туҡанда уҡытты, «Письма из Ермотании» тигән йыйынтыҡ («Китап», 2010) сығарҙы, Янықбай Хамматов исемендәге район-ҡала әҙәби премияһын алды, ә Лаврентьев Иван тормошон хәрби хеҙмәткә арнаны. Логинов Петр иһә Стәрлелә автотранспорт техникумында һабаҡ бирҙе. «Кулактар»ға үҙ илдәренә ҡайтырға рөхсәт ителгәс, Смаковтар, Сәлиховтар, Сәмиғуллиндар, Макеевтар ҡайтып китте. Смаковтар ҡайтыр алдынан беҙгә бер тоҡсай сохари бирҙе, йәтимдәр тип йәлләгәндәрҙер инде, беҙ уларға мең рәхмәтле булдыҡ.

Һуғыштан һуң илде аяҡҡа баҫтырыу, төҙөкләндереү башланды. Беҙ, уҡыусылар, контораға һарыҡ бәрәстәре алып барып тапшырҙыҡ. Тора-бара ауылға геологтар килде. Уларға он, фуфайка бирелә тип, тирә-яҡтан ярҙамсы эшселәр ағылды. Бер нисә йылдан һуң партия икенсе яҡҡа күсте.

Юрматау уҡыусылары ла, ата-әсәләре һымаҡ, ныҡыш, егәрле ине, ҡайҙа ла тырышып уҡынылар. Вагон-вагон тейәлешеп Белоретҡа, Магнитҡа, Өфөгә юллана торғайнылар. Мәктәп директорҙарынан Б. Ҡаҙаҡколов, С. Ирғәлин, В. Никитин иҫтә. Уҡытыусылар ҙа әҙәпле, белемле ине. Бәғзеләре Туҡан ҡасабаһынан йөрөп тә уҡытты.

Элекке уҡыусыларҙан Михаил Жарков Англияла СССР илселегенең советнигы ине, аҙаҡ Киевта йәшәй. Кәлимуллин Нәзиф Һиндостанда завод төҙөшә, эшселәрҙе төрлө һөнәргә өйрәтә. Нур Шакиров – Магнитогорскиҙа завод директоры, Лаврентьев Николай иһә Муромда завод директоры булған. Әминә Ғабдрахманова, Рифҡәт Ғәҙелшин, Сәһилә Минәзева Мәскәүҙә университет тамамланы. Рифҡәт ҡорҙаш Силәбе өлкәһендәге яманатлы «Маяҡ» атом станцияһында эшләгән. Валерий Никитин – артист, Владивостокта дан ала. Шакировтар Днепропетровскиҙа инженер булһа, Ҡаҙағстанда – Әминә, Зәйтүнә, Үзбәкстанда Бәйнә, Әминә лә уҡытыусы булды. Ҡырғыҙстанда Сәмсиә менән Ғәйшә лә мәктәптә эшләй. Медиктарҙы ла һанап бөтөргөһөҙ, ә Белорет районында юрматауҙар эшләмәгән мәктәп юҡтыр.

Әлеге көндә ауылда өс кенә ҡапҡа асыла. Ветеран, әҙәбиәтсе Максимов Игорь йәйҙәрен генә ҡайта. Ҡасандыр гөрләп торған Юрматауыбыҙ – алтын төйәгебеҙ – һүнеп бара.

* * *

2009 йылдың июнь аҙағында осрашыу ойошторҙоҡ. СССР-ҙың төрлө мөйөштәренән 500-ҙән ашыу кеше йыйылды. Өфө, Краснодар, Красноярск, Кубань, Санкт-Петербург, Яр Саллы, Ағиҙел, Мәскәү, Магнитогорск, Межгорье, Белорет һ.б. тарафтарҙан арҡадаштар илашып күрештек. Өй ҡапҡаларына гәзиттәр, карточкалар, карталар элдек. Бараҡтарҙа кемдәр йәшәгәне хаҡында схемалар төҙөлдө. Килгән халыҡҡа ултырырға эскәмйәләр, һыйланырға өҫтәлдәр, концерт өсөн сәхнәләр алдан әҙерләнгәйне.

Насировтар өйө алдындағы «музей»ҙа балсыҡтан, ағастан яһалған һауыт-

һаба, йүкәнән ишелгән кәрәк-яраҡ  ҡараныҡ. Элекке яҡташтар ҡосаҡлаша, үбешә, илаша...

Бикмөхәмәтовтарҙың ҡыҙҙары бына нимә һөйләне:

– Атайыбыҙға 1932 йылдың ҡышында ҡайтып, Ишембайҙан ғаиләһен килтерергә  ҡушалар. Аслыҡтан, ауыр юлдар үтеүҙән әсәйебеҙҙең һөтө бөтә. Сабыйы илай ҙа илай, шунан үлә. Мәйетен ҡарға күмәләр ҙә юлдарын дауам итәләр...

Фәрит Фәтихович Ғәлиев Өфөнән килгәйне, вуз уҡытыусыһы ул. Юрий Дмитриевич Кузнецов – техник фәндәр кандидаты, Южно-Уральск институтында доцент. Уның әсәһен элек ун өс  балаһы менән Юрматауға ебәргәндәр.

Беҙҙең мәктәпте бөткән элекке класташтар осраштыҡ: Мәрйәм Хафизова – Тольятти  ҡалаһынан, Алексей Баранов – Силәбе  өлкәһе Южный  ҡалаһынан, Рауза Ишмөхәмәтова – Рудный ҡалаһынан, Сергей Сюльдин – Белореттан, Раuил Сөләймәнов, Флүзә Имаметдинова, Мөхәмәтйән Шәйәхмәтовтар – Туҡандан, Ниғмәт Насиров – Аҙнағолдан... Магнитогорскиҙан Сания менән Венера, Мәскәүҙән Тәнзилә Ғәзизовалар килгәйне. Днепропетровскийҙан 74 йәшлек Нина Жижина ла бар ине арала. Кубандан Зоя Слауто әсәһенең иҫтәлектәрен һөйләне, был турала Игорь Максимов айырым хикәйә ижад иткән.

– Күршеләргә инһәм, берәүҙәр иҙәндә, икенселәр өҫтәлдә ята. Өҫтәлдә ятҡаны: «Әсәй, бирсе ашарға...» – тип башын күтәрҙе. Әсәһе, бахыр, саҡ-саҡ башын ҡалҡытып ҡарай ҙа тағы ята. Ике  көндән балалары, һуңынан  ата-әсәһе күҙҙәрен йома...

Өфөнән килгән Фәхриев Әхмәт ағай – рәссам. Бөтә туғандары, үҙе һымаҡ, уҡытыусы. Әсәләре 103 йәшкә етеп гүргә ингән. Аталары Шакир бабай бик ипле ине, аҡыллы кәңәштәрен бер кемдән йәлләмәне.

Ғәзизов Әмир, Стәрлетамаҡта заводта эшләп, орден алған икән. Йыйынға уның ҡустылары килгәйне.

Концерттан һуң бөтәбеҙ яртылаш ергә һеңгән «кулак» йорттары йә нигеҙҙәре янына – атай-олатай , әсәй-өләсәйҙәрҙе иҫкә алыу маҡсатында юлландыҡ. Аҙаҡ зыяратта туғандарыбыҙ күмелгән ҡәберҙәргә  сәскәләр  һалдыҡ.

Эйе, һағышлы, әрнешле  юбилей онотолмаҫ... Юрматауҙарҙың күбеһе был болотһоҙ төндө оло яланда ҙур усаҡ яғып уҙғарҙы.

Ни хәл итмәк кәрәк, беҙҙең яҡта бөткән йә һүнә барған ауылдар, утарҙар байтаҡ. Сәбәбе – эш булмауы. Көйөк, Һуйыр-Айыс, Ҡарағай, Хоҙайбирҙе, Норош, Сырышҡы, Ҡуртиҙе, Еҙембаш ауылдары  хәҙер хәтерҙә генә. Комарово, Мәйгәшле, Юрматау, Тарыла ике йә өс кенә өй... Баҡый, Һаралы, Ботай, Өмөтбайҙа күпселек  ҡарттар ғына көн күрә.

Президент Р. З. Хәмитов, Туҡанда  металлургия заводы  төҙөләр, тип вәғәҙәләй. Бәлки, мәғрур Елмерҙәк тарафтары яңынан тын алыр, юлдар һалыныр, тибеҙ.  Быйыл Юрматауҙа “кулактар” иҫтәлегенә һәйкәл асырға йыйынабыҙ.

Өмөттәр һүнмәй әлегә... Үҙемме? Ҡырҡ алты йыл йәш быуынға рус теленән һабаҡ бирҙем.

**Зәкиә ФӘТҠОЛИСЛАМОВА,**
**педагогик хеҙмәт ветераны,**
**РСФСР-ҙың халыҡ мәғарифы отличнигы.**



**Сергөл ВУРАЛ**

*Төрөк шағирәһе Сергөл Вурал 1964 йылда Кайсери ҡалаһында тыуа. Билежиктә — башланғыс мәктәпте, Эрзинжанда — лицейҙы, Анадолу университетының иктисад факультетын тамамлай. Шәхси фирмала эшләй. Төркиә Яҙыусылар союзы һәм Төркиә Фәнни һәм Әҙәби Әҫәр авторҙары берләгенең ағзаһы. Кейәүҙә, ике балаһы бар.*

*"Наҙ гөлөм" (2002), "Бер көндә дүрт миҙгел" (2006), "Сөвәйҙә" ( 2009 ) исемле өс шиғыр китабы, "Инжәсуҙан өндәшәм" (2006) исемле антологияһы донъя күргән. Төрлө кимәлдә уҙыусы шиғри бәйгеләрҙә ҡатнашып, еңеү яулаған.*

*"Шиғыр атҡан йөрәк" исемле әҫәрендәге һүҙҙәр уның булмышына тура килгән кеүек:*

*Һүҙем ҡәләмдә туңһа ла, йөрәгем шиғыр яҙа.*
*Ҡәләм ҡағыҙға ҡунһа ла, йөрәгем шиғыр яҙа.*
*Мин шиғырҙың үҙе менән Алланың ҡоло булам,*
*Был ғәләм утта янһа ла, йөрәгем шиғыр яҙа.*

## Китәһең?

*Йылы һүҙеңде лә әйтмәйенсә,*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*
*Йәшле күҙҙәремде һөртмәйенсә,*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*

*Атыр таңдарымдың ал ҡояшы!*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*
*Төндәремде нурлап торған айым!*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*

*Ҡояшымды, айымды һүндереп,*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*
*Бер бөтөндө ике яңғыҙ итеп,*
*Тауыш-тынһыҙ ҡайҙа китәһең?*

## *Сөвәйҙә*[1]

*Күңелем иләҫ-миләҫ –*
*бәлиғ булыу билдәһе.*
*Һағыш һуҡмағынан барам –*
*бор юлымдан, Сөвәйҙә,*
*Һин күҙемдең ҡараһы –*
*йөрәгемдең яраһы,*
*Упҡынга осмаҫ борон*
*тот ҡулымдан, Сөвәйҙә.*

*Ҡандар һауған йөрәгемде*
*һөйөүең менән ағарт.*
*Төндөң ҡараһы сигенер –*
*һин мине миндәй ярат.*
*Кил һин миңә, ысыҡ ярып,*
*ҡара сәсеңде тарап,*
*Атым алып ҡасмаҫ борон*
*тот ялымдан, Сөвәйҙә.*

*Ҡар һыуҙары илап аға,*
*ярҙарға тулҡын ҡаға.*
*Талдар билдән һыу аҫтында, –*
*ниҙән улар йәл миңә?*
*Һыуҙар ҡайтыр, тал йәшәрер,*
*алтын һырғаһын тағыр...*
*Яҙ миҙгеле уҙып бара –*
*тот талымдан, Сөвәйҙә.*

*Бит алмаңдағы миңең –*
*йөҙ аҡлығын күрһәтә.*
*Ни булһа ла – шул булыр:*
*бер үбәйем, Сөвәйҙә.*

---

*[1]Сөвәйҙә — ҡатын-ҡыҙ исеме. Риүәйәт буйынса, һәр кешенең йөрәгендә "сөвәйҙә" тип аталған нәфсе миҡдарын белдергән ҡара нөктә була. Кешенең нәфсеһе күп булһа, ҡара нөктәһе лә ҙур була, ти. Был шиғырҙа сөвәйҙә яҡшылыҡ нөктәһе кеүек күрһәтелә.*

*Һөйөүең ихлас булһа,*
*йондоҙ-маяғым яныр.*
*Юлда аҙашмаҫ өсөн*
*йондоҙҙо тот, Сөвәйҙә,*

*Бөгәсә ай тотолдо,*
*һүҙҙәрем онотолдо.*
*Асыҡ булыр ҡапҡалар*
*күҙ алдымда ҡыҫылды.*
*Асҡыстары һиндә бит –*
*һин минең берҙән-берем!*
*Ҡәҙер төн ҡапҡаларын*
*асыҡ тот һин, Сөвәйҙә.*

*Һиңә арнап йыр сығарҙым –*
*йыр ғашиҡтарҙың теле.*
*Һүҙҙәренән дә бигерәк*
*көйөн үҙ ит, Сөвәйҙә.*
*Йыр йырлаған кешеләрҙең*
*күңелендә кер булмаҫ, –*
*Йөрәгемде асып тыңла,*
*моңомдо от, Сөвәйҙә!*

*Өн менән төш араһында*
*көнөм-төнөм бутала.*
*Ҡараларҙы ағартам тип,*
*һиңә киләм, Сөвәйҙә.*
*Аҡлыҡ – сафлыҡ илсеһе, тим –*
*ҡарҙар ярам иртә-кис.*
*Барса уйҙарың ағарыр –*
*һөйөүҙе тот, Сөвәйҙә!*

**Төрөксәнән Әхәт СӘЛИХОВ менән**
**Фәнил КҮЗБӘКОВ тәржемәһе.**

## Олуғ шәхестәребеҙҙең ҡәҙерен беләйек

Туймазы районы – күренекле шәхестәргә бай төбәк. Ни ғәжәп, улар тыуып-үҫкән ауылдар, Хоҙай рәхмәтелер инде, Нөгөш һәм Өсән йылғалары буйҙарын төйәк иткән. Яңы Арыҫланбәк ауылында патриот-шағир, «Моабит дәфтәрҙәре»нең авторы, Советтар Союзы Геройы, Ленин премияһы лауреаты, Муса Йәлилдең йән дуҫы Һаҙый Кашшаф (Мирһаҙый Кашшафетдинов) тыуып үҫкән. Ул СССР Фәндәр академияһының Ҡазан филиалы Тел, әҙәбиәт һәм тарих институтында ғилми хеҙмәткәр, артабан «Совет әҙәбиәте» («Ҡазан утлары») журналының баш мөхәррире булып эшләй, һуңынан Ҡазан дәүләт университетында уҡыта.

Төпкилде ауылында Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, күренекле шағир һәм публицист Муса Сиражи донъяға килгән. Ул әле лә иҫән-һау, Илеш районының Үрге Йәркәй ауылында йәшәй һәм ижад итә.

Йәрмөхәмәт ауылы халҡыбыҙға ике шәхесте – халыҡ композиторы, сәсән-шағир, 700-ҙән ашыу популяр, шул иҫәптән үлемһеҙ «Әсәйемә хат» йыры авторы, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Әкрәм Дауытовты (Бөйөк Ватан һуғышында ул майор дәрәжәһендә ҡатнашҡан) һәм яҙыусы-ғалим, ауыл хужалығы фәндәре докторы, Башҡортостан аграр университеты профессоры, атҡаҙанған фән эшмәкәре Наил Ҡотдосовты бүләк иткән. Наил ағай үҙ ауылы зыяратында ерләнгән булһа, Әкрәм ағайҙың ҡәбере – Ҡандра ҡасабаһында. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Йәрмөхәмәттә лә, улар белем алған Ҡандрала ла улар исемендәге урамдар ҙа юҡ. Әкрәм Дауытов хөрмәтенә ул уҡыған һәм уҡытҡан 2-се Ҡандра урта мәктәбендә иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылған, әммә халыҡ композиторы оҙаҡ йылдар йәшәгән һәм ижад иткән Туймазылағы йортҡа мәрмәр таҡтаташтың ҡуйылғаны юҡ әле.

Ҡандраның 2-се урта мәктәбендә заманында күренекле әҙиптәр Әсғәт Мирзаһитов, Әкрәм Дауытов, Наил Ҡотдосов, Муса Сиражи, социология фәндәре докторы, Өфө авиация университеты профессоры Рауил Нәсибуллин уҡыған булһа, шулай уҡ ошо ҡасаба зыяратында күренекле драматург, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Әсғәт Мирзаһитов һәм Әкрәм Дауытов ерләнгән. Оҙаҡ йылдар ошонда атаҡлы быраулау оҫтаһы, Социалистик Хеҙмәт Геройы, хәрби Дан ордендарының тулы кавалеры, СССР Юғары Советы депутаты Хәтмулла Солтанов та йәшәне. Ләкин геройҙың исеме ни Ҡандра быраулау эштәре идаралығына, ни ҡасаба урамына бирелмәгән. Дөрөҫ, уның бюсы ҡалалағы «Геройҙар паркы»нда тора, ләкин туғыҙ ҡаһармандың йөҙҙәрен бер-береһенән айырырлыҡ түгел, сөнки балсыҡ-иҙмәнән әүәләнгәндәр.

Бәләкәй генә Бикмәт ауылы башҡорт әҙәбиәтенә һәм әҙәбиәт ғилеменә ике ҙур шәхес биргән – күренекле драматург, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре Әсғәт Мирзаһитов һәм әҙәбиәт ғилеме белгесе, тәнҡитсе, яҙыусы, филология фәндәре

кандидаты, профессор Суфиян Сафуанов. Ә. Мирзаһитов – егерменән ашыу етди драма әҫәрҙәре авторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты. Ул оҙаҡ йылдар «Ағиҙел» журналының баш мөхәррире, Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, шул уҡ ваҡытта БАССР Юғары Советы рәйесе һәм депутаты булды. Әсғәт Мәсғүт улы ике тапҡыр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ һәм Халыҡтар Дуҫлығы ордендары менән бүләкләнде. Иң аянысы, Ҡандра 2-се урта мәктәбенә уның исемен биреүҙе иҫкә алмағанда, уның исемен мәңгеләштереү буйынса бер нәмә лә эшләнмәне. Бала саҡ, үҫмер йылдарында йәшәгән һәм белем алған Ҡандрала ла, Туймазыла ла бер урамға ла уның иseме бирелмәгән. Хатта зыяраттағы ҡәбер ташы, эйәһе билдәһеҙ кешеләй, 20 йылға яҡын фотоһүрәтһеҙ торҙо. Шулай уҡ 20 йыл элек эшләй башлаған Туймазы татар дәүләт драма театрына күптән Әсғәт Мирзаһитов исемен бирергә кәрәк ине. Ә бит драматургтың күренекле «Әсәләр көтәләр улдарын» драмаһы буйынса тамашаны Башҡорт академия драма театры беренсе тапҡыр Туймазы ҡалаһында күрһәтте, унда автор үҙе лә ҡатнашты.

Башҡортостандың атҡаҙанған фән эшмәкәре Суфиян Сафуанов – башҡорт һәм татар әҙәбиәттәренең үҙ-ара бәйләнешен, ике республика әҙиптәре араһындағы ижади аралашыуҙы, әҙәби процесты һәр яҡлап өйрәнгән ғалим-әҙәбиәтсе. Ул да тыуған ауылы зыяратында ерләнде һәм... онотолдо. Бикмәттә был ике күренекле әҙиптең уртаҡ йорт-музейы ҡасан асылыр икән?

Өсән йылғаһы Ыҡҡа ҡушылған урынды төйәк иткән Кәкребаш ауылында башҡорт әҙәбиәтенең күренекле сатиригы, Бөйөк Ватан һуғышында офицер булып ҡатнашҡан Тимер Арыҫлан тыуып үҫкән. Кәкребашта өр-яңы урам уның исемен йөрөтә.

Туймазы төбәгендә төрлө йылдарҙа Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Ниғмәтиҙең (ҡатыны Сания ханым – Райман ауылынан, – улдары Нур, ҡыҙҙары Флорида менән Лариса ошонда донъяға килгән), башҡорт әҙәбиәте аҡһаҡалы Баязит Бикбайҙың, халыҡ яҙыусыһы Нәжиб Асанбаевтың, күренекле драматург һәм әҙип Ибраһим Абдуллиндың, яҙыусы Әхнәф Байрамовтың йәшәүен һәм ижад итеүен дә өҫтәһәк…

Улар барыһы ла халыҡ өсөн ижад иткән, яҙғандарын уҡып шатланһындар һәм уйланһындар, төплө-аҡыллы йомғаҡ яһаһындар, өлгө һәм ғибрәт алһындар тип, ал-ял белмәй эшләгән. Ә беҙ, яҡташтары, уларҙың ҡәҙерен беләбеҙме, ҙурлап иҫкә алабыҙмы?

Тимер Арыҫландан башҡа Туймазы ҡалаһы һәм ауылдарындағы бер урамға ла олуғ әҙиптәрҙең иseме бирелмәгән, береһе хөрмәтенә лә (Әсғәт Мирзаһитовты иҫкә алмағанда) иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылмаған һәм береһенең дә йорт-музейы юҡ. Хатта ошо шәхестәр тураһындағы төплө яҙмаларҙы туплап, китап-белешмә сығарылмаған. Ә район хакимиәте яҡташтарыбыҙ хөрмәтенә Әсғәт Мирзаһитов исемендәге (драматургия өлкәһендә), Тимер Арыҫлан (сатира һәм юмор), Һаҙый Кашшаф (халыҡтар һәм әҙәбиәттәр дуҫлығы), Әкрәм Дауытов (йыр сәнғәте), Наил Ҡотдосов исемендәге (ауыл тормошо хаҡында уңышлы әҫәр) премиялар булдыра алмай инеме ни? Башҡа районлар һәм ҡалалар (мәҫәлән, Октябрьский ҡалаһында Хәйретдин Мөжәй исемендәге) булдырған бит. Әлбиттә, быларҙың һәммәһен дә, теләк булғанда, эшләргә мөмкин. Күрәһең, Өфөнән күрһәтмә төшөрөлөүе кәрәк.

Бындай вайымһыҙлыҡ һәм яуапһыҙлыҡтың сәбәбе нәмәлә? Беренсенән, һуңғы йылдарҙа районыбыҙҙа һәм ҡалабыҙҙа етәкселәр шаҡтай йыш алмашына.

Ғәҙәттә етәкселәрҙе ситтән килтерәләр, һәм улар беҙҙең төбәкте, уның тарихын йүнләп белмәй. Ә инде бер нисә йылдан уларҙың ҡайһыһы «янып», ҡайһыһы байып китеп тә бара. Етди мәсьәләләр иһә хәл ителмәй ҡала бирә. Иң аянысы шунда: был эшһеҙлек һәм булдыҡһыҙлыҡ өсөн бер кем яуап тотмай, яуапҡа ла тарттырылмай. «Үлеләрҙең – ҡәберен, терeләрҙең ҡәҙерен бел!» – тиҙәр. Туймазы төбәгендә ҡасан етәкселәр вайымһыҙлыҡтан арыныр һәм әлеге мәсьәләләр ҡасан хәл ителер икән?

**Замир НИЗАМЕТДИНОВ.**
**Туймазы ҡалаһы.**

## Нурлы тормош юлы

Тормоштан көс, дәрт, нур алып һәм шул нурҙы икеләтә, бишләтә яҡындарына, уҡыусыларына, хеҙмәттәштәренә таратып йәшәй башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Асия Мөхәмәтулла ҡыҙы Латипова.

Бала саҡтан хыялланып, яратып һайлаған ул уҡытыусы һөнәрен. 42 йыл ғүмерен мәғарифҡа, киләсәк быуынды тәрбиәләүгә арнаған. Үҙ фәнен яҡшы белеүе, камиллыҡҡа ынтылыусанлығы, талапсанлығы, уҡыусыларына, ата-әсәләргә кешелекле, иғтибарлы булыуы, һөйкөмлөлөгө менән хөрмәт, һөйөү яулаған һәм абруй ҡаҙанған педагог ул.

Һәр ваҡыт алға ынтылыусан, тырыш, изге күңелле, йәмғиәткә кәрәкле шәхес булып үҫеүендә ҡартатаһы менән ҡәрсәһенең роле бик ҙур була. Асияға йәш ярым, ағаһына өс йәш булғанда, әсәләре үлеп китә. Уларҙы ҡартатаһы менән ҡәрсәһе үҙ тәрбиәһенә ала. Ҡартаталары бик егәрле, заманының алдынғы ҡарашлы кешеһе була. Ейәне менән ейәнсәренә ауылда беренселәрҙән булып юғары белем биреүгә ирешә.

Дәртле, тынғыһыҙ ҡыҙ студент йылдарында уҡ йәмәғәт эштәрендә әүҙем ҡатнаша, яҡшы уҡый. Ошонда уҡ үҙ яртыһын, физика һәм математика факультеты студенты, ҡурайсы егет Ринат Латиповты осратып, матур ғаилә ҡоралар.

Йәштәр хеҙмәт юлын Мәләүез районы Иштуған ауылы мәктәбендә башлай. Белемле, дәртле тырыш йәштәрҙе унда ҡыуанып ҡаршы алалар. Оло йөрәкле, изге күңелле уҡытыусы бында 10 йыл йәш быуынға белем һәм тәрбиә бирә. Ошо йылдарҙа партком секретары булып эшләгән С. Байрамғолов: «Асия Мөхәмәтулла ҡыҙы менән Ринат Ғиниәт улы Латиповтар мәктәп өсөн дә, ауыл өсөн дә яңылыҡ һәм яҡшылыҡ алып ҡайтыусы белемле, талантлы, һәр эште башлап йөрөүсе йәштәр булдылар. Юғары кимәлдә дәрестәр генә үткәреп ҡалманылар, матур, фәһемле саралар менән мәктәп, ауыл шаулап торҙо ул саҡта», – тип хәтерләй.

1985 йылдан бөгөнгәсә Асия Мөхәмәтулла ҡыҙы Мәләүез районы Первомай урта мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып эшләй. Бай милли рухлы, тәрән белемле, кешелек донъяһына файҙалы, инициативалы, туған телен, илен һөйгән шәхес тәрбиәләү – уҡытыусының төп маҡсаттарына әүерелә. Үҙ-үҙенә талапсан, һәр балаға иғтибарлы уҡытыусы һәр дәресте ҡыҙыҡлы, файҙалы һәм фәһемле итеп үткәрергә тырыша. Эшендә заман талаптарына ярашлы яңы педагогик алымдар, мәғлүмәт технологиялары ҡуллана, төрлө мауыҡтырғыс алымдарҙы оҫта файҙалана. Дәрес-уйын, дәрес-йыйын, дәрес-

сәйәхәт, дәрес-эҙләнеү, дәрес-конференция – башҡа стандарт булмаған дәрестәр уҡыусыларҙа ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Был дәрестәрҙә уҡыусылар үҙ-аллы фекерләргә, анализларға, проблемалы ситуацияларҙы хәл итергә өйрәнә. «Бигерәк тә дәрес-йыйын формаһында үткән дәрестәр баланың ижади һәләтен үҫтереүҙә ҙур роль уйнай. Былдай дәрестә уҡыусыларҙың танып-белеү активлығы, аналитик һәм ижади фекерләү кимәле үҫешә», – ти Асия Латипова.

Уҡытыусы балаларҙың ижади һәләтен үҫтереүгә айырым иғтибар бүлеп эшләй. Йәш күңелдәргә ижад орлоҡтары һала белә ул. Уның уҡыусыларының шиғырҙары «Йәншишмә», «Йәшлек», «Көнгәк» гәзиттәрендә, «Аманат» журналында йыш ҡына сығып килә. Үҙе лә матур шиғырҙар яҙа.

Уҡытыусы эшенең һөҙөмтәһе булып, уҡыусыларының уңышы тора. Эшенә мөкиббән бирелгән, тырыш, талапсан уҡытыусының хеҙмәт емештәре ҙур: уҡыусылары төбәк-ара, район олимпиадаларында, төрлө конкурстарҙа призлы урын яулай. Күп уҡыусыларының бөгөн башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һөнәрен һайлауы ла быға асыҡ дәлил һәм туған теленә һөйөү тәрбиәләгән уҡытыусыһына булған ихтирам көсөләр, моғайын.

Асия Латипова – оҫта ойоштороусы ла. Оҙаҡ йылдар район-ҡаланың башҡорт мәктәптәре башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары методик берекмәһе етәксеһе, аттестация комиссия ағзаһы, муниципаль кимәлдә үткән төбәк-ара олимпиадалар, конкурстарҙа жюри ағзаһы, Первомай урта дөйөм белем биреү мәктәбе директоры урынбаҫары кеүек вазифаларҙы уңышлы башҡара. Уҡытыусылар менән тәжрибә уртаҡлашып, төплө кәңәш биреп, туған телдең, тыуған ерҙең яҡты киләсәге өсөн янып эшләй ул.

Тынғыһыҙ, тырыш уҡытыусы төбәк-ара, республика кимәлендә үткән сараларҙан да ситтә ҡалмай. 1995 – 2005 йылдарҙа «Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы» конкурсында ҡатнашып призлы урындар яулай, фәнни-ғәмәли конференцияларҙа тәжрибә уртаҡлашып сығыш яһай. «Иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы» муниципаль конкурсында, «Иң яҡшы Рәсәй Федерацияһы уҡытыусыһы» конкурсында еңеүсе була.

Һөнәренә тоғролоғо, педагогик эшмәкәрлегенә етди, талапсан ижади ҡарауы һөҙөмтәһендә районда ғына түгел, ә республикала билдәле уҡытыусының хеҙмәте юғары баһаланған. Рәсәй Федерацияһы һәм Башҡортостан Республикаһы мәғариф министрлыҡтарының, Башҡортостан Ҡоролтай башҡарма комитетының маҡтау ҡағыҙҙары менән бүләкләнгән, «Башҡортостандың мәғариф алдынғыһы» тигән юғары исемгә лайыҡ булған.

Ғаилә тормошонда ла бәхетле әсә, ҡатын, өләсәй ул. Хәләл ефете Ринат Латипов менән ҡыҙҙарына лайыҡлы тәрбиә биргәндәр. Ул да уҡытыусы һөнәрен һайлаған. Төрлө яҡтан үҫешкән, белемле, әхлаҡи һәм физик сәләмәт быуын, илһөйәр, милли рухлы, йәмғиәт алдына ҡуйылған мәсьәләләрҙе үҙаллы хәл итә алырлыҡ киләсәк быуын тәрбиәләү кеүек маҡсаттар ҡуйып эшләй был ғаилә.

**Вилиә ФӘХРЕТДИНОВА,**
**Мәләүез район-ҡала мәғариф бүлеге методисы.**

***

Халҡыбыҙҙың көтөп алынған иң ҙур байрамдарының береһе – “Салауат йыйыны” республикабыҙҙа 2004 йылдан башлап йыл да уҙғарылып килә. Ул Салауат, Балтас, Саҡмағош, Ишембай райондарында, Өфө, Салауат ҡалаларында ҙур күтәренкелек менән байрам ителде. Быйыл “Салауат йыйыны” яңынан милли батырыбыҙҙың тыуған ере – Салауат районына әйләнеп килде. Был сара республикала иғлан ителгән Милләт-ара татыулыҡты нығытыу йылына арналды.

Йүрүҙән буйындағы тәбиғәттең хозур ерендә ойошторолған йыйынды район хакимиәте башлығы Ғәли Хәйретдинов асып ебәрҙе. Артабан йыйындағы халыҡты республика Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина ҡотланы.

Баҫыу батырҙарын, хеҙмәт алдынғыларын ҡотлау һәм бүләкләү, концерт күрһәтеү, ат сабышы, милли көрәш һәм башҡа һоҡландырғыс сығыштары менән һабантуй барлыҡ ҡунаҡтарҙың һәм байрамда ҡатнашыусыларҙың күңеленә хуш килде.

Байрамға шулай уҡ байтаҡ әҙиптәр, журналистар, республика гәзит-журналдар редакциялары вәкилдәре лә килгәйне.

“Салауат йыйыны”ның тәрән һәм бай йөкмәткеле сценарийын Ш. Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты, шағирә Гөлназ Ҡотоева яҙҙы, режиссеры – Зиннур Сөләймәнов.

***

Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 70 йыл тулыу айҡанлы, Мәжит Ғафуриҙың мемориаль йорт-музейында “Өс быуын осрашыуы” тип аталған сара уҙғарылды. Фронтовик яҙыусылар Нәжиб Асанбаев, Суфиян Поварисов, Азат Мағазов, Әхәт Ниғмәтуллин, һуғыш йылдары балалары – шағирҙар Ирек Кинйәбулатов, Ҡәҙим Аралбай, яҙыусы Тимерғәле Килмөхәмәтов, йәшерәк быуындан Хисмәт Юлдашев, Тамара Искәндәриә, Лариса Абдуллина, студенттар Урания Вахитова, Фәйез Харрасов, Зарина Бағышаева, Зөһрә Сафина һәм башҡалар ҡатнашлығында уҙған был осрашыу барышында оло быуын яҙыусылары яу йылдары хәтирәләре менән бүлеште.

***

Әҙиптәр Фәнил Күзбәков менән Сабир Шәрипов Баймаҡ (мәғариф бүлеге етәксеһе И. Ә. Зәйнуллин), Балтас (район хакимиәте башлығы урынбаҫары Ф. Ғ. Рәхимов, мәғариф бүлеге методисы Р. Р. Камаева), Борай (мәғариф бүлеге етәксеһе Н. М.Хәмәтдинов), Бөрө (уҡыу-уҡытыу методик үҙәге етәксеһе В.Х.Әфтәхова), Благовещен (мәғариф бүлеге методисы Л. Д. Ғәббәсова), Ейәнсура (мәғариф бүлеге методисы И. Ф. Бирҙеғолов), Илеш (мәғариф бүлеге етәксеһе Р. Х. Ямалов) райондарының, Ағиҙел (башҡорт гимназияһы директоры Г. Ә. Динисламова), Белорет (мәғариф бүлеге етәксеһе М. В. Саранцева), Нефтекама, Сибай, Учалы (мәғариф бүлеге етәксеһе Л. Н. Фәхретдинова) ҡалаларының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары, китапхана хеҙмәткәрҙәре, Бөрө социаль-педагогия академияһы студенттары (проректоры Н. С. Белобородова; профессор, билдәле әҙәби тәнҡитсе Әнғәм Хәбиров) менән осрашыуҙарҙа булды. Унда бөгөнгө әҙәбиәт торошо, матбуғат таратыу мәсьәләре ҡаралды. Сараларҙа ҡатнашыусылар, тап ошондай ҡараштарҙан сығып, матбуғатты таратыу, уны һөҙөмтәле файҙаланыу буйынса фекер алышты, эшлекле тәҡдимдәр индерҙе, үҙҙәре “Ағиҙел”гә дәррәү яҙылды.

Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышында: Балаҡатай, Дыуан, Ҡыйғы, Мәсетле, Салауат райондарында ла "Ағиҙел" уҡыусылары, әҙәбиәт һөйөүселәр менән осрашыуҙар булды. Ғәмәлдә уҡытыусылар, китапхана хеҙмәткәрҙәре, йәш һәм башлап яҙыусылар ҡатнашҡан был сараларҙың мөһимлеген район мәғариф бүлектәренең күпселеге бик яҡшы аңлай. Был айырыуса Ҡыйғыла (мәғариф бүлеге етәксеһе И.С. Һаҙыев) асыҡ сағылды. Әңгәмәлә 70-тән ашыу уҡытыусы ҡатнашты. Ҡыйғылар Хәниф Кәримдең 100 йыллығын киң билдәләгән, Рафаэль Сафинға арнап ғилми конференция ойошторған.

Сарала ҡатнашыусылар берҙәм рәүештә әҙәбиәткә, мәҙәниәткә һөйөү тәрбиәләүҙә "Ағиҙел"дең мөһим роль уйнауын билдәләне, уға яҙылыу ғына аҙ булыуын, ә уҡыу, эштә файҙаланыу кәрәклегенә баҫым яһаны.

***

Башпотребсоюз системаһында оҙаҡ йылдар эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан яҙыусы Хәбир Кәрим улы Дауытовҡа 75 йәш тулды. Ошо уңай менән Башпотребсоюз идараһы залында юбилярҙы элекке хеҙмәттәштәре, Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһы етәкселеге, "Ағиҙел" журналы редакцияһы һәм Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәте вәкилдәре, йырсылар, бейеүселәр, ҡурайсылар тәбрикләне. Юбилей саралары шулай уҡ әҙиптең тыуған ауылы Аралбайҙа, Күгәрсен районы үҙәге Мораҡта ла уҙҙы.

***

Татарстан китап нәшриәтендә Башҡортостандың халыҡ шағиры, С. Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Назар Нәжмиҙең "Милли йәнем" тип аталған китабы сыҡты.

Китапҡа мәшһүр шағирҙың шиғырҙары, халыҡ яҙмышын ҡайғыртып яҙылған публицистик, әҙәби тәнҡит мәҡәләләре, ҡәләмдәштәренә хаттары тупланған. Йыйынтыҡта шулай уҡ әҙип ижадына бағышланған мәҡәләләр, иҫтәлектәр, шиғырҙар, уға яҙылған хаттар, хаттарҙан өҙөктәр, фотоһүрәттәр урын алған.

Китаптың идея авторы һәм төҙөүсеһе – Татарстандың халыҡ шағиры, яҡташыбыҙ Роберт Миңнуллин.

***

Башҡортостанда "Берҙәмлек" милли мәҙәниәттәр фестивале үтте. Уны РФ-ның Мәғариф министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Белорет, Әбйәлил, Учалы райондары һәм Сибай ҡалаһы хакимиәттәре ойошторҙо.

"Берҙәмлек" фестивалендә Италия, Төркиә, Һиндостан, Сербия, Әзербайжан, Нигерия, Мадагаскар, Гватемала, Ҡаҙағстан, Әрмәнстандың бейеү һәм фольклор ансамблдәре, йырсы-музыканттары сығыш яһаны. Башҡортостандан "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, Ырымбур өлкәһенән "Яйыҡ" казак ансамбле ҡатнашты.

**Ҡотлайбыҙ!**

Республика йортонда 2010 йылдың Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы тапшырылды. Башҡорт композиторҙарының ижадын сит илдәрҙә пропагандалағаны һәм фортепиано өлкәһендәге ҡаҙаныштары өсөн З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенты **Искәндәр Ғафаровҡа**, "Әхмәтзәки Вәлиди Туған" спектаклендә халҡыбыҙҙың билдәле улы, ғалим һәм сәйәсмән Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың образын тыуҙырған өсөн М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры **Артур Ҡунаҡбаевҡа,** "Тәмле Яңы йыл" тип аталған балалар өсөн әкиәт һәм хикәйәләр йыйынтығы өсөн БР Мәҙәниәт министрлығы хеҙмәткәре **Зөлфиә Күскилдинаға** тапшырылды.

Лауреаттарҙы тәбрикләү тантанаһында БР Хөкүмәте Премьер-министры Азамат Илембәтов, Премьер-министр урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина, төрлө министрлыҡ, ведомстволар етәкселәре, комиссия ағзалары, лауреаттарҙың туғандары, коллегалары ҡатнашты.